# Ағиҙел

**Өфө,**
**апрель**
**2010**

**4(1044)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ, *(бүлек мөхәррире)*,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.04. 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 455 экз. Һатыуҙа хаҡы иреклe. Заказ № 2.0041.10.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2010 (4, 1044)**

# БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Суфиян Поварисов.** Беҙ фронттан ҡайтҡанда. Роман–хәтирә. Башы. ....5

ШИҒРИӘТ

**Тимер Йосопов.** «Шатлығым да, һағышым да һыймай эсемә…» Шиғырҙар. ....81

**Таңһылыу Ҡарамышева.** «Яҙҙар килде тағы – наҙҙар килде!» Шиғырҙар. ....89

**Әхмәҙин Әфтәх.** «Һеҙ уларҙы, тауҙар, күтөгөҙ…» Шиғырҙар. ....95

*Республика йәш прозаиктар семинарынан*

**Ҡәҙим Аралбай.** Йәштәр ҡанат нығыта. ....100

**Рәмилә Торомтаева.** Диван. Хикәйә. ....103

**Рәсүл Сәғитов.** Ҡылыҡ. Хикәйә. ....120

**Гөлдәр Әхмәҙишина.** Һағыш. Моңһоу хәтирә. ....125

**Нияз Алсынбаев.** Һабаҡташтар ҡабаттан таныша. Юмористик хикәйә. ....129

*Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

**Фәрит Вахитов.** Талпынды бөркөт күктәргә. *(Башҡортостандың тәүге осоусыһы Ғәли Ишмырҙин иҫтәлегенә.)* ....131

ШИШМӘЛӘР

**Мәүлит Кәримов.** Ҡыйын икән. Шиғырҙар. ....139

**Земфира Аҡбутина**. Еләк йыйғанда. Шиғырҙар. ....142

**Динә Ниғмәтуллина.** Был донъялар… Шиғырҙар. ....144

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ләйсән Кәшфи.** Мөхәббәт – ул үҙе иҫке нәмә… ....146

**Зәки Әлибаев.** Дәүер һулышын тойоп. *(Йәштәр прозаһының торошо һәм үҫеш перспективалары.)* ....155

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Ирена Ҡолһарина.** Фәнгә арнала ғүмер. *(Морат Рәхимҡоловҡа 85 йәш.)* ....164

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Фәнил Күзбәков.** Тарихсы ла, әҙәбиәтсе *лә.* *(Әбүбәкер Усмановтың тыуыуына 100 йыл.)* ....167

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Фәтхелкадир Сөләймәнов.** Берлектә генә терелек бар. *(Абдулҡадир Инандың тыуыуына 120 йыл.)* ....169

*Бөйөк Еңеүгә – 65 йыл!*

Еңеү көнөн ҡайҙа, нисек ҡаршыланығыҙ? *(Һорау – яуап.)* ....176

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Марат Әминев.** Кәңәшмә. Журналист аҙнаһы. Синыфташтар. Ғәләү. Боҙоҡ донъя. Шәжәрә. Юмористик хикәйәләр. ....185

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**С. Поварисов.** Когда возвращались с фронта *(роман)*. Начало.

ПОЭЗИЯ

**Т. Юсупов, Т. Карамышева, Ахмадин Афтах** *(стихи)*.

*С республиканского семинара молодых прозаиков*

**Кадим Аралбай.** Молодые набирают высоту.
**Р. Турумтаева.** Диван *(рассказ)*.
**Р. Сагитов.** Поступок *(рассказ)*.
**Г. Ахмадишина.** Тоска *(печальное воспоминание)*.
**Н. Алсынбаев.** Одноклассники знакомятся вновь *(юмористический рассказ)*.

*65 лет – Великой Победе!*

**Ф. Вахитов.** Орлиный взлет *(о первом летчике Башкортостана Гали Ишмурзине)*.

РОДНИКИ

**М. Каримов, З. Акбутина, Д. Нигматуллина** *(стихи)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Лейсан Кашфи.** О любви песен сложено немало…
**З. Алибаев.** Дыхание времени *(о современном состоянии и перспективах развития прозы молодых)*.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**И. Кульсарина.** Жизнь посвящена науке *(85 лет Мурату Рахимкулову)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Ф. Кузбеков.** И историк, и литератор *(100 лет со дня рождения А. Усманова)*.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Ф. Сулейманов.** Сплоченность нации – основа основ *(120 лет со дня рождения Абдулкадира Инана)*.

*65 лет – Великой Победе!*

Где и как встретили День Победы? *(Вопрос – ответ.)*

САТИРА И ЮМОР

**М. Аминев**. Совещание (юмористические рассказы).

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәскә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Суфиян**
**ПОВАРИСОВ**

# БЕҘ ФРОНТТАН ҠАЙТҠАНДА

**РОМАН-ХӘТИРӘ**

**Беренсе бүлек**

*Иҫә елдәр, иҫә елдәр,*
*Ул минең елем түгел;*
*Сит илдәрҙә бик яманһыу,*
*Үҙ елен эҙләй күңел.*

I

1947 йыл. Март. Австрия.

Бөйөк Ватан һуғышы дауылы тынғас, ут эсендә янмайынса иҫән-аман ҡалған иң ҡарт яугирҙар ҙур тантана менән тыуған илдәренә оҙатылды. Оҙатыу, йәштәренә ҡарап, һаман дауам итә. Бына 1924 йылғыларға ла ҡайтыу бәхете йылмайҙы.

...Аурупа уртаһы. Атаҡлы Вена ҡалаһы биҫтәһе. Теҙелеп-теҙелеп киткән барактар. Уларҙың тышҡы күренеше бөйөк төҙөлөш осоронда эшселәр өсөн ваҡытлыса һалынған Өфө барактары шәкелендәрәк. Эске яғы һуғыш йылдарында һалдаттар өсөн төҙөлгән Башҡортостандағы Алкин лагеры землянкаһын хәтерләтә. Оҡшаш яҡтары шул: тегеһендә лә, быныһында ла һикеләр (нарҙар) – ике ҡатлы йәки аҫлы-өҫлө. Ике ҡатлылыҡ – һалдаттар күберәк яйлашһын өсөн. Айырмаһы ла бар: тәҙрәһе булмағанлыҡтан, Алкиндағыларҙыҡының эсе көпәкөндөҙ ҙә ҡараңғы, ер иҙәне батҡаҡ, бысраҡ. Веналарҙыҡына бесәй күҙе ҙурлығындай ғына булһа ла тәҙрәләр уйылып ҡуйылған. Иҙәненә таҡта йәйелгән. Йәнә бер айырма һиҙелә: Алкиндағы мал өсөн (хәҙер сусҡа аҙбары ла унан яҡшыраҡ), Веналағы кеше мәнфәғәтен аҙ ғына булһа ла иҫкә алыбыраҡ төҙөлгән

---

*Суфиян Шәмсетдин улы Поварисов (1924) — күренекле филолог, Башҡорт дәүләт университеты профессоры. Өлкән ҡәләмдәшебеҙ Бөйөк Ватан һуғышына арналған бишенсе китабын тәҡдим итә. Әҫәр биографик юҫыҡта: данлы башҡорт полкының мәргән минометсыһы Пирмөхәмәтов — ул авторҙың үҙе. Романда яугирҙың фронттағы һәм тыныс хеҙмәттәге патриотик яҙмышы сағыу буяуҙарҙа һүрәтләнә.*

һымаҡ. Бына ошо кешенең эстетик зауығын зәррә бөртөгөләй генә булһа ла самалап эшләнгән бараktарға килтереп тултырҙылар Рәсәйгә оҙатыласаҡ һуғыш яугирҙарын. Улар араһында гвардия старшинаһы Сәлим Пирмөхәмәтов та бар.

Сәлим армияға 1942 йылдың 20 августында алынды. Иң әүәл Алкинда кесе командирҙар әҙерләй торған полк мәктәбендә уҡыны. Унан һуң уларҙы Иглин районының Таутөмән, Покровка ауылдарында яңы ғына ойоша башлаған 469-сы миномет полкына ебәрҙеләр. Полк 1943 йылдың 23 февралендә – Ҡыҙыл Армияның төҙөлгән көнөндә – үҙенең тамам ойошоп етеүен тантана итте. Дөрөҫ, бик ауырға тура килде был. Сөнки айбарлы ир-егеттәр фронтҡа күптән оҙатылып бөттө. Хәҙер сират бер күҙе һикегә, икенсе күҙе мейес башына ҡараған ҡарттарға ла килеп етте. Уларҙы ла килтереп тултырҙылар полкка. Иш янына ҡуш булһын, тип. Уларҙа ғаилә ҡайғыһы бик көслө. Берәүһенең ҡатыны сирләшкә. Икенсеһенең биш сабыйы илап ҡалған. Өсөнсөһө түшәктә ятҡан ҡарт әсәһе өсөн өҙгөләнә. Дүртенсеһенең сәләмәтлеге шәптән түгел. Ҡыҫҡаһы, һәр ҡарт һалдат йөрәгендә ҡайғы уты дөрләй. Шулай ҙа улар, ут бөтә эске ағзамөсәһен көйҙөрөп барһа ла, уны тышҡа сығармаҫҡа тырыша: ил яҙмышы – ир иңендә икәнлекте аңлайҙар.

Танау аҫтына әле бер мәртәбә лә бәке теймәгән, йөҙөнән сабый сырайы китмәгән, аҙау теше һаман нығынмаған егет-еләнде лә килтереп һыланылар полкка. Етмәй. Ырымбур өлкәһендәге Тоцк лагерынан сержанттарҙы ла полк сафына баҫтырҙылар. Етмәй. Котлубан лагерынан аҡһаҡ-туҡһаҡ һалдаттар килеп төштө. Былар – кадровиктар. Һуғышта яраланып сыҡҡас, уларҙы Котлубанда дауалағандар. Ныҡ имгәнгәне, аяҡҡа баҫып бер аҙ йөрөй башлағас, инвалидҡа сығарып, өйөнә ҡайтарылып ебәрелә; һау-сәләмәтҡә әйләнгәне, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелеп, ҡабат фронтҡа оҙатыла; хәле шулар уртаһындараҡ булғаны, яҙмыш еленең хәҙергә ҡайһы тарафтарға алып китәсәген белмәйенсә, резервта ята әле. Шәбәйеберәк киткәне, боҙолоп барған картуф араһынан яҡшыраҡтарын сүпләгән шикелле, ошо полк өсөн һайлап алынды. Мәгәр шаҡтай «эре картуф» булып сыҡты былар. Ни тиһәң дә, кадровиктар бит. Һынатҡылары килмәй. Аҡһағанда ла һиҙҙермәҫкә тырыша. Кәүҙә – төҙ. Баш – юғары. Күкрәген генералдыҡылай киреп йөрөй. Уның өсөн бөтә ауырлыҡ чепуха, йәнәһе. Тик һаман кеше етмәй әле полкта. Етмәй. Шунан Өфө төрмәләре тотҡондарын йыя-йыя бер сафҡа теҙгәс, уларҙы ла ошо полкка килтереп елемләнеләр.

Апрель айының ҡар ҡатыш һалҡын ямғыр яуған бер көнөндә полк фронтҡа оҙатылды. Ул Юғары Башкомандующий Ставкаһы ҡарамағында ине. Йәки, икенсе төрлө әйтһәк, туранан-тура Сталин ғали йәнәптәренең үҙенә буйһона. Полкты Курск дәһшәтенең утлы ауыҙына килтереп тыҡтылар. Егерме ете милләт вәкиле унда. Шулай ҙа, Башҡортостан ерендә формалашҡанлыҡтан, башҡорт, татар ир-егеттәре һан яғынан өҫтөнлөктө ала ине. Шул ике үҙенсәлек буйынса ул «Башҡорт полкы» тип аталды. Салауаттар, Ҡаһым түрәләр тоҡомо!

Был «Башҡорт полкы», ифрат ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәтеп, Курск дуғаһындағы тамуҡ утынан янмай сыҡты. Унан һуң Украина, Польша, Румыния, Венгрия, Германия, Чехословакия ерҙәрен фашизм ҡоллоғонан азат итеүҙә ҡатнашып, Дрезден ҡалаһында данлыҡлы Еңеү байрамын тантана итте. Башҡорт халҡының күп тарихи, ҡанлы көрәштәрҙә еңгән айбарлы заттар икәнлеген йәнә бер мәртәбә иҫбатланы.

Сәлим башта төҙөүсе (наводчик) ине. Унан расчет командирына үрләтелде. Һуғыштан һуң полк Германия, Чехословакия, Венгрия ерҙәрендә хеҙмәт итте. Тора-бара Пирмөхәмәтовты старшина дәрәжәһенә күтәрҙеләр.

Демобилизация иғлан ителгәндә полк Венгрияның Сомбатель тигән ҡалаһында ине. Егерме дүртенсе йылғыларҙы айырып алып (әйткәндәй, тантаналы оҙатып), Австрия еренә сыҡҡас, бына ошо Вена ҡалаһы ситендәге тышы ла, эсе лә аҙ ғына Европа рухын сағылдырып торған барактарға тултырҙылар.

Күңелдәрендә – һағыш. Йөрәктәрендә – ҡайтыу дәрте.

***

Һалдат өсөн, гүйә, ирәүән тормош. Сәлим яңы дуҫтар тапты. Уныһы былай булды. Машинанан төшкәс, һалдаттар сумаҙан-фәлән, тоҡсай-моҡсай күтәреп, әлеге барактарға йүнәлде. Ике ҡулына ике ауыр сумаҙан тотҡан Сәлим дә улар араһында ине. Бәй... Ишек янындағы бер кемдең дә күҙе ҡыҙыҡмаған аҫҡы бер нар ғына ҡалған. Бер аҙ тын алғас, күршеһенә әйберҙәренә күҙ-колаҡ булырға ҡушып, барак буйлап китте. Бер урында, өҫкө нарҙа, бер төркөм ярһый-ярһый кәрт һуға. Баҡһаң, ҡәрҙәш телдә һөйләшә былар. Сәлим һорарға мәжбүр булды:

– Егеттәр! Һеҙ ҡайһы яҡтан?

Теҙҙәрен сәнсеп ултырған өлкән сержант яуап урынына үҙе һорау бирҙе:

– Ә һин үҙең ҡайҙан?

– Башҡортостандан.

– Районың?

– Илеш.

– Ауылың?

– Күккүҙ.

– Мин дә Илештән.

– Ҡайһы ауыл?

– Мансар Бүләге...

Өлкән сержант ҡулындағы кәрттәрен ырғытып бәрҙе лә, һеләүһендәй һикереп аҫҡа төшкәс, Сәлимде ҡосаҡлап алды. Был әллә ниндәй ярһыу, әкиәти ҡосаҡлау ине! Өлкән сержант Сәлимгә ҡарағанда оҙонораҡ та, олпатыраҡ та, шашҡынъыраҡ та. Ҡосаҡлап, әллә нисә мәртәбә әйләндергеләп тә алды Сәлимде. Әйтерһең дә, һөйгән ҡыҙын ашарҙай булып шашына. Уның былай енләнеүен аңлай Сәлим. Сит илдә үҙ ауылындыҡы ғына түгел, бөтә Башҡортостан кешеһе лә ут күршең кеүек ҡәҙерле, яҡын була. Ә бит былар – бер район кешеләре. Ауылдарының араһы – 15 саҡрым ғына.

Сәлим һүҙгә һаранъыраҡ. Ә өлкән сержант артыҡ йомарт, таҡылдаҡ. Мин Рәйес Байымов булам, тип исем-фамилияһын да шундуҡ сатнатып әйтте, ашығаашыға, өҫтән-мөҫтән генә булһа ла, тәржемәи хәлен тиҙ-тиҙ генә һөйләп бирҙе.

Нисек кенә булмаһын, Рәйес булдыҡлы, үткер, ҡыйыу егет күренә. Сибәрлекте лә Хоҙай унан ҡыҙғанмаған. Дуғалай бөгөлөп торған ҡуйы ҡара ҡаштар. Оҙон керпектәр. Сая ҡарай торған ҡоңғорт күҙҙәр. Килешле танау. Ике бит осо ҡыҙарыбыраҡ тора. Сәлимгә иң оҡшағаны шул: Рәйес – асыҡ йөҙлө. Был уның көр күңелле булыуынан киләләр, бәлки. Көр күңелдең – күҙе төҙ.

Ғәҙәттә, холоҡ-фиғеле ҡапма-ҡаршы кешеләр тиҙ дуҫлашып китеүсән. Өҫтән ҡарағанда, Сәлим бошмаҫ, ауыҙына бармаҡ тыҡһаң да тешләмәй торған кешегә оҡшабыраҡ тора, һүҙ әйтергә һис тә ҡабаланып бармай, уның телен һаман шул сабыр төбөндәге һары алтыны тотҡарлай. Исем, фамилияһын да яҡташы һорағас ҡына әйтте:

– Мин – Сәлим Пирмөхәмәтов...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡоласын башҡорт йәйәһеләй киң йәйеп, Рәйес йәнә ҡыҫып ҡосаҡланы:

– Советтар Союзы Геройы Пирмөхәмәтовмы?

Сәлим уңайһыҙланып китте:

– Һин мине кем менәндер бутай башланың, яҡташ, минең герой булғаным юҡ...

– Ә хәрби гәзиткә кемде яҙып?..

Ат кешнәшеп, күгәрсен гөрләшеп, һандуғас һайрашып, кеше һөйләшеп таныша, тигәндәй, былар тиҙ дуҫлашып китте. Икеһе лә сержант-старшина хәрби дәрәжәһендә булһалар ҙа, офицер кейемендә инеләр. Һуғыш ваҡытында Англия төрлө төҫтәге шинелдәр ебәреп торҙо. Шинелдәр бик затлы буҫтауҙан (сукнонан) тегелгән. Һуғыштан һуң уларҙы һүтеп, хәрби китель һәм галифе салбар тектерҙе бәғзе бер һалдат. Әлбиттә, ул теләһә кемдең ҡулынан килмәй. Сөнки ябай һалдатҡа уны биштәрле тоҡсайында йөрөтөргә лә рөхсәт итмәйҙәр. Ә инде старшинаның махсус бүлмәһе (уны каптерка тип тә йөрөтәләр) була, бөтә кәрәк-ярағын шунда тота. Сәлим өҫтөндәге хәрби форма бурҙат төҫөндәрәк. Инде Рәйестеке – ҡара йәшел кеүегерәк. Аяҡтарында – күҙгәләй ялтырап торған итек.

Рәйескә Сәлимдең үҙен тыныс тотоуы оҡшаны. Сәлимдең дә тышҡы «корпусы» нисауа ғына күренә. Бөгөлөп-һығылып торған һөлөктәй кәүҙә. Ул – аҡһыл сибәр. Моңһоу зәңгәр күҙҙәре кешеләрҙе яратып, һөйөп ҡарай кеүек. Быларҙы һиҙмәйенсә ҡалманы үткер күңелле Рәйес:

– Беләһеңме, Сәлим…

Оҙаҡ һөйләшеп торғас, еңел һөйәктәрен уйнатып, йүгерә-атлай китеп барҙы ла Рәйес, күп тә үтмәй, бер һалдат менән әйләнеп килде. Һалдат ҡулында сумаҙан ине. Уны тартып алып, Сәлим нарына ҡуйғас, яҡташының ике ауыр сумаҙанын да елтерәтеп алып:

– Әйҙә, яҡташ, киттек, – тине.

Сәлим һүҙһеҙ генә эйәрҙе.

– Бир әле сумаҙаныңдың береһен… – тип ҡараһа ла, тыңламаны Рәйес.

– Һин юлдан арып килгәнһең. Ә беҙ бында аҙна буйына кәрт һуғабыҙ, йоҡо һимертәбеҙ. Эшһеҙ ҡыйын икән, эй, ваҡыт үткәреп булмай, минуты – сәғәт, сәғәте – йылдай тойола; ярай әле һине осраттым, икебеҙгә күңеллерәк буласаҡ, – һөйләнә-һөйләнә атланы ла был, ике ауыр сумаҙанды үҙенең аҫтағы нарыһы янына ҡуйҙы, өҫтәгеһен Сәлимгә күрһәтте.

Сәлим бер һүҙ ҙә әйтмәне. Теге һалдатты ни өсөн бынан күсереүҙе аңлатты ул: тимәк, яҡташы менән бергә була. Һалдаттан күсергә ризалығын һорап та торманы.

Йәнә бер осрашыу. Бынығы ҡыҙыҡ та. Ҡыҙғаныс та, шатлыҡлы ла…

Бында көнөнә өс мәртәбә ашаталар. Ашау ярайһы ғына, берәүҙәр кино ҡарай, икенселәре кәрт һуға, өсөнсөләр урамда трай тибә, дүртенселәр Вена ҡалаһындағы иҫтәлекле урындарҙы ҡарап йөрөй.

Һуғыш бөткәс, ял бирерҙәр тип уйлағайны лаһа һалдаттар? Ҡайҙа инде ул. Икенсе көндө үк «рас-два»лар башланды. Сәйәси уҡыу, компартия тарихын өйрәнеү, төрлө устав-китаптарҙың һарғайып бөткән сәхифәләрен яңынан кимереү, хәрби ҡоралдарҙы бер һүтеп, бер йыйыу… – әллә ниндәй мәшәҡәт, мең мәртәбә ҡабатланыу. Ялҡытҡыс шором-шором теңкәгә тейә.

Кәрәктер ҙә, сөнки тик торған һалдат ултырған таштай тиҙ мүкләнә. Уның башындағы патриот хис-тойғоларын әллә ниндәй уйҙар семеткеләргә тотона. Ялҡаулыҡ касафаты – һалдат өсөн үҙе бер ҙур фажиғә.

II

Бер көндө, кинонан ҡайтып килешләй, ауылдашы Мәхмүтте осратты Сәлим. Маңлайға маңлай бәрелешә яҙҙы былар. Төшмө был? Өнмө? Шайтаным белһен. Бер шишмә һыуын эсеп, бер ауыл тупрағын тапап үҫтеләр. Күккүҙ ауылында егерме дүртенсе йылғылар – һөлөктәй утыҙлап егет ине. Күптәре Курскиҙың утлы дуғаһында янып харап булды. Утыҙ өстән ни бары дүртәү генә ҡалды… үҙен дә шунда керетә Сәлим. Ә Мәхмүтте иҫәпләмәй: үлеме, тереме, ерҙәме, күктәме – быны бер Хоҙай үҙе генә белә. Хикмәт шунда: Мәхмүт башта пехотала ине, һуңыраҡ ул Сәлимдәргә – миномётсыларға килеп ҡушылды.

…Курск дуғаһында барған бер ҡаты һуғышта командирһыҙ ҡалған бер төркөм пехотасылар сигенә башлай. Уларҙы 469-сы полктың беренсе батарея командиры капитан Абдулла Исхаҡов туҡтата ла үҙенең батареяһына әйҙәй. Сәлим менән Мәхмүт ана шунда осраша. Әлбиттә, улар араһында аңлашылмауанлыҡтар ҙа күп. Берҙән, ауылда саҡта улар Мәрйәм исемле ҡыҙға ғашиҡ була. Икенсенән, Мәхмүт ауылда саҡта үҙен егеттәр солтаны тип йөрөһә лә, миномётсылар араһында ул булдыҡһыҙ, ныйҡылдыҡ бер һалдат булып сыға. Күпме генә ыҙа сикмәһен, был ҡалай әтәстән гвардия һалдаты яһай алмай Сәлим. Етмәһә, Сәлим расчеты солғанышта ҡалғас, уны атып, немецтар яғына шыла Мәхмүт. Ә нишләп бында килеп сыҡҡан ул? Өҫтөндә – һалдат кейеме. Немец вәғәҙә иткән ожмахтың тамуҡ икәнлеген аңлағас, үҙебеҙҙең яҡҡа яңынан ҡасып сығыу «төлкөлөгө»н булдыра алғанмы?

Мәхмүт ҡойолоп төштө. Бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Сәлим, уңайһыҙ хәлдән ҡотолоу өсөн генә булһа ла, төрлө һорауҙар биреп ҡараны:

– Мәхмүт, һин иҫән?.. Ҡайҙарҙа йөрөнөң?

Мәхмүт ауыҙын турһайтып бирҙе яуапты:

– Минең ҡайҙа йөрөүемдә һинең ни эшең бар?..

Сәлимгә бик ҡыйын ине былай яуап алыу. Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә, тип уйланы ла китеп барҙы.

***

Иҫә елдәр. Аға һыуҙар. Үтә ғүмер… Көндәлек дәфтәренә шундай һүҙҙәр яҙып ҡуйҙы Сәлим:

*Иҫә елдәр, иҫә елдәр,*
*Ул минең елем түгел;*
*Сит илдәрҙә бик яманһыу,*
*Үҙ елен әҙләй күңел…*

Тағы ла низер яҙмаҡсы булғайны, ниңәлер мәргән, тос һүҙ табылманы.

*Тел тигән диңгеҙ бар,*
*Төбөндә ынйы-мәрйен бар.*
*Теләгәндәр сумып алыр,*
*Теләмәгән ҡоро ҡалыр.*

Шиғыр юлдарына һала-һала ижад иткән бит халыҡ. Иң бөйөк шағир халыҡ үҙелер ул. Башҡасараҡтыр, бәлки. Иң бөйөк шағир – тәбиғәт үҙелер. Мулла бабай әйткәнсә, бөтә донъя – үҙе бер ҙур китап. Тимәк, бөтә йәшәйеште шул донъя китабына Тарих бабай яҙа бара. Ул китапҡа бөтә ғаләм серҙәре туплана. Улар, бәлки, күк тулҡындары эсендә кәрәҙләнгәндәрҙер. Шиғыр яҙыу өсөн һүҙҙәр ҙә шул кәрәҙ күҙәнәктәрендәлер. Тап, шағир, шуларҙы! Йәшендәр күкте тамсылағандай, һин шул кәрәҙҙе ҡәләм осоң менән телгелә! Унда бөтәһе лә яҙылған. Ә һин шуны күсер ҙә ал! Әгәр күк тулы шиғриәт дауылы икән, ул дауыл Сәлим йөрәгендә лә ҡуторона. Донъя китабы тәьҫирелер ул, бәлки. Ер йөрәге менән күк йөрәге тоташ булыу хаҡында ла әйткәйне бит Мулла бабай. Сәлим –

Ер кешеһе. Тимәк, уның йөрәге Ер һәм Күк йөрәге тамырҙары менән дә тоташ. Нindәй ҡатмарлы был донъя! Ана шул ҡатмарлылыҡ тулҡыны эсенә кереп китәһе ине лә, сәмреғош шикелле айҡап-байҡап осоп, бөтә серҙәрҙе өйрәнәһе ине.

Сәлим Пирмөхәмәтов 469-сы «Башҡорт полкы»ның беренсе расчет командиры булды. Наводчиктар китә бара: сәбәбе йә яраланыу, йә шәһит булыу. Шунан яңы төҙәүсе килә. Уны мәргән атырға өйрәтеү бик ҡыйын. Күп осраҡта Сәлимдең үҙенә атырға тура килә. Ул яраланмай ҙа, үлмәй ҙә. Быныҡ өсөн Хоҙайға мең-мең рәхмәтле ине ул! Был – бер. Икенсенән, һынау буйынса башҡалар ата башлай. Шуға күрә уға аҙ ғына ла яңылышырға ярамай. Шулай ҙа була: ваҡыт-ваҡыт уға көндәр буйы атырға тура килә, ә башҡалар йә кәрт һуға, йә тәмәке көйрәтә, йә хат яҙыу менән мәшғүл. Атыу өсөн уның ҡулдары «автоматлашып» китте хатта. Юҡ. Ҡулдары ғына түгел, бөтә уйы. Аҡылы, хис-тойғоһо, есмәни көсө… Уны, мәргән атҡаны өсөн, «минометсы-снайпер» тип йөрөтәләр. Шул инде: уңған ат, хеҙмәт һөйгән кеше күп егелә. Һуғыштан һуң старшина булып эшләү ҙә күп көс, аң-даирә талап итте. Хоҙайға шөкөр, әрме хеҙмәтен үтәүҙә һынатманы. Ә бына хәҙер бөтәһе лә тынып ҡалды. Ял ит. Күңел ас. Рәхәтлән. Әммә оҙаҡ ял итеү ишәккә генә килешә, күп йоҡлау бесәйгә генә – моң. Шуларҙы уйлап, тышҡа-һауаға сыҡты Сәлим.

Иҫә елдәр! Аға һыуҙар! Ғүмер аға!..

Европа еле иҫә. Ниндәйҙер сөсө, йыуаш, йомшаҡ ел. «Ҡайҙа ла бер ҡояш»,– тиһәләр ҙә, ҡайҙа ла бер түгел икән. Тыуған яҡ еленә – Башҡортостан еленә етмәй мәгәр. Аһ, ул Башҡортостан еле! Уҫал, ҡаты, ыжғыр ел! Йомшағы ла бар, билдәле. Алһыу таңдарҙа, айлы кистәрҙә сәстәреңде һыйпап иҫкән елгә ни етә. Әммә ул йомшаҡлыҡта ҡатылыҡ та бар. Йомшағы әсәйҙең наҙлы ҡарашы – атайҙың көслө ҡулдары. Атай менән әсәй рухы ҡушылған ул елдәргә. Тыуған ер еле был!

Хәҙер Башҡортостанда яҙғы елдәр иҫәлер. Елдәр һуңғы ҡарҙарҙы ашайҙыр. Бер ҡанатына ҡар, икенсе ҡанатына ямғыр тейәп килгән һалҡын елдәр ҙә иҫәлер. Аҡман-тоҡман дауылдары араһына кереп, ҡар ҡатыш яуған ямғырҙарға күкрәк ҡуйып та йөрөгөһө килә. Уларҙы, бәлки, тыуған яҡтарында май елдәре ҡаршылар. Дымлы ерҙең икмәк еҫе аңҡытып иҫкән елдәре. Майҙа инде ҡояш йылмая, сәскәләр баш ҡалҡыта, урмандар йәшел шәл ябына. Ҡоштар һайрай… Әле бында ла, Австрия ерендә лә, май айындағы йылылыҡ, күркәмлек, гүзәллек. Бер аҙ талғын ел иҫә. Ләкин был СССР, Рәсәй еле түгел, Башҡортостан еле түгел. Әллә ниндәй сөсө, вайымһыҙ, йөрәктәргә үтеп кермәй торған ел.

Англия буҫтауынан тегелгән формаһын кейгәйне Сәлим. Аяҡта – көҙгөләй йылтырап торған хром итектәр. Иҙеү асыҡ. Ул хәҙер дисциплина ҡапҡанында түгел. Ошо Вена ерeнең дүрт яғы ла ҡибла. Күңеле ҡайһы тәбәккә тартһа, шул яҡҡа атлай. Шулай ҙа бер ергә лә аяҡ тартмай әле. Ҡалалағы иҫтәлекле урындар, кейем, икмәк кибеттәре, парк, баҡса, тарихи һәйкәлдәр – бөтәһе лә ҡаралған. Һаман-һаман көндәлек яҙып ултырғыһы ла килмәй. Шиғырға ла күңеле тартмай. Кәрт һуғыусылар янында ла ҡыйын. Көндөҙгө аш ашалған. Кискә тиклем ары һуғылып, бире һуғылып, үҙенең тәрән уйҙарына сумған хәлдә, тирә-яҡта ғына бер йөрөштөрөп алырға уйланы ул. Көн матур. Ҡояшлы. Һауа саф. Күк йөҙөндә ҡул усы ҙурлыҡ та болот юҡ. Көнсығышҡа – Рәсәй яғына, ҡайтаһы юлдары тарафына, ҡараны ул. Бараҡтан ике йөҙ метр самаһы көнсығышҡа ҡарап атлағас, ҡапыл туҡталып ҡалды. Сеү! Күктә яҡтылыҡ. Зәңгәр һауа тәбиғәт матурлығы менән ләззәтләнә. Ә тыуған яҡтарҙағы йәки көнсығыштағы офоҡ ситендә әллә ниндәй ҡарағусҡыл болоттар бар икән. Хоҙайым! Әллә Рәсәй

ҡараңғылығы шәүләһеме был? Шул ҡараңғылыҡ һурып алмаҡсы буламы быларҙы?

Сәлим үҙ йоҙроғо менән үҙ башына һуғып ҡуйҙы: ниңә ҡара уйҙар менән миңрәй әле ул? Ҡырт боролоп, көнбайышҡа атланы ла, бер аҙ барғас, тағы ла туҡтап ҡалды. Көнбайышта – яҡтылыҡ. Офоҡта болоттоң әҫәре лә юҡ. Туҡта! Быныһын күрмәгән икән: көньяҡ-көнбайыш офоғоноң бер ситендә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ҡыҙғылт-ҡара болот киҫәктәре бар. Былары, бәлки, Англия еренән ҡалҡып сығалыр. Туҡта! Унда бит ниндәйҙер төтөн дә бар һымаҡ. Әллә Черчилль, беләк йыуанлығы сигаретын боҫҡотоп, Рәсәйгә төтөн өрөп ултырамы? Бәй, бәй, бынағайыш, төньяҡҡа табанғы офоҡ ситендә лә ҡоңғорт-ҡара болот киҫәктәре бар. Быныһы Американың хәрби заводтары һөрөмөмө әллә? Был уйҙары өсөн дә «тфү» тип һүгенеп ҡуйҙы Сәлим. Һуғышта булмаһа, ундай уйҙар ике ятып бер төшөнә лә инмәҫ ине, моғайын. Хәҙергә Вена ҡалаһы өҫтөндә зәңгәр күк. Аяҙ. Австрия һуғыш афәтенә ҡатнашманы, йәғни, нейтралитет һаҡланы.

Шулай уйланып торғанда, Сәлимдең ике күҙен бәләкәй генә ике ҡул ҡаплап ҡыҫты. Сәлим ни эшләргә белмәй аптырап тик торҙо. Ҡатын-ҡыҙ ҡулы икәнлеген аңҡып торған хушбуй еҫе лә раҫлап ҡуйҙы. Етмәһә, бөтә ҡайнар тәне менән һырышы ул Сәлимгә. Әйтерһең, ҡайнар күкрәге менән арҡаһын ярып, уның эсенә үк үтергә теләй. Кем булыр был? Бында уның бер танышы ла юҡ бит. Ен ҡыҙымы әллә? Улай тиһәң, ен ҡыҙы ҡараңғы төндә генә йөрөй бит, әле көпә-көндөҙ саҡ. Әллә бер-бер сихырлы ҡыҙмы? Ни генә юҡ тиһең был донъяла? Мулла бабай, ана, күктән, башҡа планеталарҙан төшкән кешеләр тураһында һөйләгәйне бер ваҡыт. Әллә шуларҙың береһеме? Үҙ ауылында булһа быңдай хәл, бөтә ҡыҙҙарҙың исемен әйтеп бөтөрөр ине. Бында, арт яҡтан уттай бешереп торған был эҫе ҡосаҡтан йәһәт айырылып, уның алдында тораташтай баҫып тороуҙан башҡа юл юҡ. Шул ҡапыл һелтәнеү ваҡытында күҙҙәрҙе ҡыҫҡан ҡулдары ла ысҡыныр, был ен ҡыҙы үҙе лә әллә ҡайҙа тәкмәсләп барып төшөр. Ул шулай эшләне лә. Ҡулдары ла күҙҙәренән алынманы, уны утлы ҡоршау урынына ҡыҫҡан кәүҙә лә осоп китмәне. Киреһенсә, уның арҡаһына тағы ла нығыраҡ һырыҡты. Хәҙер инде, әйтерһең, ҡыҙҙы уның арҡаһына елемләп ҡуйҙылар. Улар, гүйә, икеһе бер һын булып кәрәҙләнде. Сәлим тайшаныуын ҡабатлағас ҡына, сылтырап аҡҡан шишмә тауыштары сығарып көлөп ебәрҙе лә, алға атылып, ҡосағына йомолдо. Бер-береһенә һыйына-һыйына, икеһе бер һынға әүерелеп, ҡайнар ирендәрен бер-береһенекенә алағайым батырышып, оҙаҡ үбеште йәштәр.

Был – мадъяр ҡыҙы Гизелла ине.

III

Сәлим ҡапыл юҡ булды. Ҡайҙа китте? Ер уптымы? Ниндәй ғәләмәт был? Кисә көндөҙ сығып киткәйне, киске ашҡа ла, бөгөн иртәнгеһенә лә ҡайтманы. Яңы дуҫын бөтә тирә-яҡты ҡыҙырып эҙләп йөрөнө Рәйес. Юҡ, юҡ, юҡ. Уның яҙмышы хаҡында борсолоп, төнө буйы керпек тә ҡаҡманы. Ете төн уртаһында ла сығып, диуана кеше һымаҡ ни уйларға белмәйенсә, башта барак тирәһендә, унан һуң әллә ҡайҙарға булып ҡайтты. Бына ул Сәлимде таба. Үлек кәүҙәһен танып ала. Тик ни эшләргә белмәй…

Шундай ахмаҡ уйҙар ҙа иҙрәтә баш мейеһен. Үҙенең олпат, уҫал, ҡырыҫ тәбиғәтле икәнлеген белә. Һөжүмгә иң алдан күтәрелеп, ҡалын тауышы менән «Ура!» ҡысҡыра-ҡысҡыра, дошманға арыҫландай ташланғанын да хәтерләй. Ә бына был ҡайғы уны, арыҫландан ҡуянға әүерелдереп, мәмәй йән итә. Тышта

оҙаҡ-оҙаҡ әрнеп, баракка ингәс, бөтәһенә төкөрөп, нарыһына менеп ята ла күҙҙәрен йома: ул, йәнәһе, тәрән йоҡола. Әммә йоҡлай алмай. Күптәр хырылдап йоҡлай. Шул хырылдаҡтар уптым илаһи бергә ҡушылып, трактор гөрләгән имәнес көслө тауыштар сығара. «Пөф» итеп ҡуйыусылар ҙа бар. Казарма эсендә тын алырға ауыр – әскелт-сөскөлт һауа. Ишелеп йоҡлаһа, быларҙың береһен дә һиҙмәҫ, тоймаҫ ине. Ишелергә бик теләй ҙә бит, йоҡо урынын әлеге яҡташы ҡалдырып киткән ҡара ҡайғы пәрҙәһе килеп ҡаплай. Ул ҡара пәрҙә төнө буйы йыртылманы. Иртәнге аштан бөтөнләй баш тартты Рәйес, көндөҙгөләктә лә ҡапҡылап ҡына ҡуйҙы. Күҙ алдынан зәңгәр күҙле, уйсан-сибәр йөҙлө, һөләктәй матур кәүҙәле яңы дуҫы – яҡташы китмәне. Етмәһә, Сәлимдең бер сумаҙанын сәлдергәндәр. Кем булыр? Ошо барак эсендәгеләрме? Әллә ситтәнме? Улай тиһәң, һалдаттар араһында – ят кешеләр буталып йөрөмәй. Тимәк, шылдырыусы үҙ араларынан. Тауыш ҡуптарырға, тентеү башларға, сумаҙанға айыу майын һөртөүсене табырға уйлап та ҡараны ул. Тик ниңәлер ашыҡманы, Сәлимдең табылыуын көттө. Ул сумаҙанында, бәлки, пүстәк кенә нәмәләрҙер. Рәйестең үҙенеке, ана, дәфтәр-ҡағыҙ менән генә тулы. Һуғыш йылдарында ҡағыҙға ла ҙур ҡытлыҡ булды бит. Хатты ҡулына ни тура килә, шуға яҙа ла ебәрә: ус төбө ҙурлыҡ ҡыйтыҡ-мыйтыҡ әллә ниндәй һарғайып, таушалып бөткән ҡағыҙ. Гәзит йыртыҡ-мыртыҡтары, китаптан умырылған биттәр… Тағы ла әллә нәмәләргә яҙалар. Рәйес, йәнәһе, шул ҡытлыҡтың йыртыҡ-мыртыҡ ерен ямай, тыуған-тыумаса, ҡәрҙәш-ырыу, яҡын дуҫтарын һөйөндөрә.

…Сәлим кискә табан ғына ҡайтып керҙе баракка. Ни күҙе менән күрһен, байрам ҡылып яталар. Шаҡтай ҡалын кәүҙәле бер сержант аккордеон уйнай. Рәйес бейеп маташа. Башта Сәлим ситтән генә ҡарап торҙо. Рәйес ихлас күңелдән бейегән кеүек. Мәгәр шаҡ ҡатырлыҡ түгел. Бейеү сәнғәтен үҙләштермәгән.

Рәйес бер һалдаттың алдына барып баҫты ла, ҡулынан уртаға тартып сығарып, бейергә димләне. Һалдаттың да бейеүе Рәйестекенән артыҡ түгел ине. Башҡалар ҙа берәм-берәм сығып торҙо. Араларында гармун моңо ритмын да, аяҡ ритмын да һаҡлай белеүселәр ҙә бар һымаҡ. Шулай ҙа, уптым фекер йөрөткәндә, табанынан ут сығарырҙай бейеүсе табылманы. Сәлим йәшеренеберәк торған еренән майҙанға сыҡты ла:

– Тартыбыраҡ уйна! – тип бейеп тә китте. Рәйес уны килеп ҡосаҡламаҡсы булғайны, әммә тыйылды. Сәлимдең кәүҙәһе бөгөлөп-һығылып тора, гармунсы, көйҙө уның аяҡтары хәрәкәтенә тура килтереп, шашып-шашып уйнай. Шашыныуға дәрт өҫтәп, ҡул сабырға тотондолар хатта. Бәй, бына ғәжәп: ныҡлап ҡараһа, гармунсы – фронтташ дуҫы Әхсән Кәлимуллин икән дә баһа! Ул пехотанан килеп ҡушылғайны. Бер аҙ һуғышҡас, яраланып киткәйне. Госпиталдән һуң полкка кире ҡайтманы. Тимәк, башҡа подразделениела һуғышҡан. Уны ла, илгә ҡайтарып ебәреү өсөн, ошонда килтереп тыҡҡандарҙыр. Бейеүен туҡтатманы Сәлим, Әхсән дә таныны Сәлимде. Ул ярһып-ярһып, шашып-шашып уйнауын дауам итте. Ә бейеүҙең матур сыҡҡанлығын Сәлим аяҡтары тыпырҙауҙа ғына түгел, бөтә кәүҙә тотошо, күңеле, хис-тойғоһо менән дә һиҙә. Үҙенсә бер ҡоторноп китеүгә иҫәпләне әле ул быны. Ҡотороноу Гизелла йөрәккә һалған мөхәббәт ялҡыны ярһытыуына ла бәйләнгәйне. Мөхәббәттең күп илаһи көстәрҙән бөйөк булыуы тураһында ишеткәне бар ине уның. Көнбайыш ҡыҙы Көнсығыш Аурупа егетенә йәшлеген, мөхәббәтен бүләк итте. Ярһымаҫлыҡмы ни?! Ярһытыу ғына түгел, енләндерә, аҡылдан шаштыра, тилертә хатта. Аурупа уртаһында Аурупаның иң сибәр ҡыҙы мөхәббәтен татыу шатлығынан. Бына… Тап ул уйлағанса килеп сыҡты. Әйтерһең, уның шул хис-тойғоһон, күңелендәге дауылын белеп торғандар бында. Гүйә, Гизелланың ҡайнар мөхәббәтенән алған

ялҡынын йәнә дөрләтеп ебәреү өсөн көткәндәр уны бында. Ул бәхетле! Бәхетле!! Бәхетле!!!

Бейеп туҡтаѓас, уратып алып, гәрсә ҡаршы килеп маташһа ла, уны сөйөргә тотондолар. Туп урынына сөйҙөләр. Был тамаша туҡталѓас, Әҡсәнгә ирек бирмәйенсә, Рәйес килеп ҡосаҡланы быны. Ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡланы. Әҡсән гармунын ҡуйып:

– Ҡана, миңә лә ирек бир әле. Ул бит минең фронтовой дуҫым, – тигәс кенә ҡотороноуынан туҡтаны Рәйес. Унан һуң Сәлимде Әҡсән ихтыярына тапшырҙы. Улар ҡулдарын тотошоп, бер аҙ ҡарашып торѓас, бер-береһенең ҡосаѓына йомолдо. Ысын ирҙәрсә, ныҡ ҡыҫышып, фронт дуҫлыѓының ҡайнарлыѓын күрегеҙ бына, тигәндәй, ярһый-ярһый ҡосаҡлаштылар. Унан һуң, был тантаналы манзара тамамланѓас, Рәйес үҙ урынына етәкләп алып китте Сәлимде. Гармунын күтәреп, Әҡсән дә эйәрҙе. Баҡһаң, Әҡсән дә улар янындаѓы бер нарѓа йайлашҡан икән.

Башҡаса уларҙың һүҙҙәре әллә ни берекмәне. Киҫелгән икмәкте ҡабат йәбештереүе ҡыйын булѓан кеүек тойолдо. Рәйес Сәлимгә әле ашарҙай итеп ҡарай. Әле тешен шыѓырҙатып ҡуя, әле йоҙроҡ уйнатырѓа тотона. Йөрәгенән ут булып сәселергә торѓан асыуын аңлай Сәлим. Һорамай. Әйтмәй ҡайҙалыр төн үткәреп ҡайтҡан өсөн өҙгөләргә әҙер торѓанлыѓын. Тап шулай булып сыҡты ла:

– Ярай, яҡташ, минең олатай: «Бер көндө ҡайѓы көйҙөрһә, икенсе көндө шатлыҡ һөйөндөрә»,– ти торѓайны; кисә ер упҡандай юѓалып ҡайѓыѓа һалдың мине, бөгөн артистарҙан да оҫта бейеп шатлыҡ яуҙырҙың тип, – тыныслана төштө.

– Ҡайҙа йөрөнөң?

Сәлим тиҙ генә яуап бирмәне, Рәйес үҙенекен ныҡышты:

– Сәлим дуҫ! Ниңә һорауыма яуап бирмәйһең?

Сәлим үҙ уйҙары даръяһына батты:

– Рәйес дуҫ, башҡа ваҡытта һөйләрмен, – тине ул ялҡауланып.

Рәйес үҙенекен туҡыны:

– Дуҫтан йәшереү – үҙеңдән йәшереү, яҡташ!

Уның һүҙен Әҡсән ҡеүәтләне:

– Дуҫтан сер йәшереү – гонаһ ул.

Сәлим быларҙың фекерен юҡҡа сыѓарманы:

– Эйе. Мин – гонаһлы, Көнбайыш Европалаѓы гонаһымды Көнсыѓыш Европаѓа алып килеүсе ахмаҡ. Алйот юлдаш булмаҫ, ишәк моңдаш булмаҫ, тиһәгеҙ ҙә була, – тине ул.

Рәйес уттай ҡыҙҙы ла:

– Алйот-малйоттарың кәрәкмәй, яҡташ, ҡайҙа олаѓып йөрөүеңде әйт! – тип секерәйҙе.

– Ярай, еңдегеҙ; күрәм: һеҙ уҫалдарҙан барыбер ҡотолоп булмаҫ, – башта бик етди уйланып, башҡалар ишетмәйме, тигәндәй, яҡ-яҡҡа ҡарап алып, ауыр ѓына тын алып ҡуйѓас, ашыҡмай ѓына, йайлап-йайлап, тегеләрҙең аңына ѓына түгел, хис-тойѓоларына ла тәьҫир итергә теләгәндәй, Сәлим мадьяр ҡыҙы Гизелла менән булѓан мөхәббәт мажараларын һөйләп бирҙе.

***

Башҡорт полкы Еңеү байрамын Германияның Дрезден ҡалаһында үткәрҙе. Унан һуң уларҙы Чехословакия еренә күсерҙеләр. Тиҙҙән Венгрияѓа китеү тураһында һүҙ ҡуҙѓаттылар. Тик унда полк өсөн урын әҙер түгел, шуѓа күрә башта беренсе дивизия разведчиктары взводы командиры өлкән лейтенант Трапезников етәкселегендә ун биш кеше барырѓа тейеш икән.

Полкка урын әҙерләү өсөн Трапезниковтың ярҙамсыһы итеп гвардия старшинаһы Сәлим Пирмөхәмәтов тәғәйенләнде. Сәлим быға ныҡ шатланды. Сөнки Трапезников – уның яҡташы: Дүртөйлө районынан. Урыҫ булһа ла, башҡорт, татар телдәрен яҡшы ғына белә. Ҡайҙа өйрәнгәндер – уныһы үҙенә генә мәғлүм. Хәйер, Илеш, Дүртөйлө районында йәшәгән урыҫтарҙың бөтәһе лә урындағы мосолман халыҡтарының телендә иркен һөйләшә.

Эйе, Трапезников бик етеҙ, еңел кәүҙәле, асыҡ йөҙлө, уртасанан аҙ ғына юғарыраҡ буйлы утыҙ йәшлек офицер ине. Осрашҡанда:

– Яҡташ! – тип, Сәлимдең арҡаһынан һөйөп китергә һис тә онотмай.

Уларҙы Чехословакиянан Венгрияға оҙатҡанда полк комиссары майор Писанный ныҡ ҡына киҫәтеүҙәр ҙә яһаны.

– Һеҙ Татабанья тигән эшселәр поселогына барасаҡһығыҙ. Унда ике ҡатлы йорт булыр, шуны полк килеүгә әҙерләп ҡуйырға тейешһегеҙ. Мәгәр бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәгеҙ, һәр мөйөштә һеҙгә ҡорал төбәлгән булыуы мөмкин.

Ике ҡатлы йорт шаҡтай оҙон. Уның эсендә элек нимә булғандыр – уныһы былар өсөн ҡараңғы. Мәгәр бик ҡотһоҙ. Һәр бүлмәлә сүп өйөмө. Тәҙрәләре ватылып бөткән. Ҡайырылып төшкән ишектәр ҙә күп. Ҡыҫҡаһы, эш етерлек бында. Тик уларҙың ҡулында бер эш ҡоралы ла юҡ. Шулай ҙа уның өсөн борсолоп ҙә ҡайғырмай ҙа, хафаланмай ҙа. Балтанан аш бешерә белгән һалдат өсөн чепуха был, йәнәһе.

Поселок әллә ни ҙур түгел, ваҡ-ваҡ ҡына бер ҡатлы йорттар. Һәр кемдең үҙ ихатаһы бар. Сусҡа, һарыҡ, һыйыр аҫырайҙар. Һәр береһенең үҙ донъяһы. Йәнә шуныһы: һәр кемдең ихатаһындағы землянка кеүегерәк эшләнгән баҙҙа – мискә-мискә йөҙөм шарабы. Эсәләр ҙә, ашайҙар ҙа, икмәге лә бар, ите лә – һуғыш ауырлығы уларҙы ҡышын ағыулы башаҡ, яҙын серегән картуф, йәйен үлән ашатмаған.

Поселоктың мунсаһы ла шәп. Өс төрлө бассейн: береһендә – һалҡын, икенсеһендә – йылымса, өсөнсөһөндә – ҡайнарыраҡ һыу. Һалдаттарға быныһы ожмахтағы кәүсәр һыуы кеүек тойолдо.

Көндәрҙән бер көндө ниндәйҙер байрам булды. Клубта ойошторолдо. Күпте белергә теләгән Сәлимдең мадьярҙар тамашаһын күргеһе килә. Трапезниковтан һорағас, ул башта рөхсәт итмәне. Ә инде ялыныуға күскәс, һорап ҡуйҙы:

– Бер үҙең генә бараһыңмы ни?

– Уныһын әле тәғәйен генә әйтә алмайым.

– Яңғыҙ йөрөргә рөхсәт юҡ.

– Улайһа, ике һалдатты алырмын.

– Ләкин ҡоралһыҙ йөрөмәгеҙ.

Тыңлаусан, хәрби ҡанундарҙы еренә еткереп ихлас күңел менән үтәп хеҙмәт итеүсе көслө яугир… был юлы тыңламаны өлкән лейтенанты. Байрам. Клуб. Тот та шунда мылтыҡ йә автомат менән барып кер, имеш. Һуғыш уты һүнгән. Европа иркен тын ала, юҡ, Европа ғына түгел, бөтә ер йөҙө. Гитлер бит башта фашизмдың ҡара эшләпәһен Англияға кейҙермәксе ине. Унынса, Американың 100–150 ҡатлы йорттары ла кейергә тейеш ул ҡара эшләпәне. Быларға, бәлки, яңыраҡ эшләпә кейҙерергә кәрәктер. Рәсәйгә – хәйерсе илгә – ҡара эшләпәнең йыртыҡ-мыртығы ла ярай. Баҫып алғас, йыртыҡ-мыртыҡты үҙҙәренән яматасаҡ. Ишәк урынына эшләтәсәк уларҙы. Фашизм ҡамсыһы менән туҡмай-туҡмай. Ярай, иле йыртыҡ-мыртыҡ булһа ла, Ватанға бирелгәнлек рухы, патриотик хис-тойғоһо, есмәни көсө ямаулы түгел икәнлекте күрһәтте совет халҡы. Еңеп сыҡты. Улар һуғышып йөрөгән Польша, Румыния, Венгрия,

Чехословакия, Германия халҡы ғына түгел, бөтә донъя аңланы быны хәҙер. Тик шулай ҙа, ҡояшта ла тап булған кеүек, был илдәрҙә йәшәгән халыҡтарҙың күңеле Рәсәйгә ҡарата барыбер саф түгел әле. Совет халҡына бүре күҙе менән ҡараусылар күп. Бәс, шулай булғас, өлкән лейтенант Трапезниковтың клубҡа ҡоралһыҙ бармаҫҡа ҡушыуы тәбиғи хәл.

Әммә тыңламаны Сәлим. Ғәлинур Әхәтов менән Сергей Майоровты эйәртте лә китеп барҙы. Ҡайҙа һуғыласаҡты әйтмәне мәгәр. Ҡорал алмаҫҡа ҡушты.

IV

Быларҙың икеһе лә – Сәлим Пирмөхәмәтов расчетында хеҙмәт иткән яугирҙәр. Уларҙың икеһен дә төрмәнән килтерҙеләр полкка. Аҙ ыҙаланманы Сәлим улар менән. Ишәктәй кире холоҡло инеләр. Ишәкте алтынға ураһаң да ишәк булып ҡалған шикелле, быларҙан барыбер рәтле һалдат сыҡмаҫ кеүек ине. Шулай ҙа Сәлим үҙенең сабыр тәбиғәте, кешелеклелек сифаттары, кәрәк саҡта мәргән һүҙ әйтеүе менән уларҙы еңде. Ғәлинурҙың эше бер ваҡыт хәрби трибуналға барып етте. Майоровтыҡы ла уныҡынан кәм түгел ине. Шулай ҙа һалдаттың ете ҡат тиреһен тунаусы, хәрби хеҙмәткә өйрәтеүсе, йәнен алырҙай ҡыланыусы, кәрәк саҡта үҙ йөрәген һурып алып бирергә әҙер тороусы иң яҡын командирҙары Сәлим Пирмөхәмәтов бәлә-ҡазаларҙан йолҡоп алып ҡалды уларҙы. Аңланылар тора-бара улар Сәлимдең кем икәнлеген. Ашҡа таш менән атыуҙың файҙаһы юҡлыҡҡа төшөндөләр. Батша күп һөйләргә тейеш түгел, тигәндәй, Пирмөхәмәтов приказ биргәндә лә аңлатып маташманы. Бер-ике һүҙ менән генә әйтә лә ҡуя. Был юлы ла шундай булды. Башта Әхәтов һораны:

– Автомат алырғамы?

– Кәрәкмәй.

Унан һуң Майоров һораны:

– Ҡайҙа барабыҙ?

– Клубҡа.

– Ниндәй клуб ул?

– Барғас күрерһегеҙ.

– Беҙ ни эшләргә тейеш унда?

– Тәртип боҙмаҫҡа!

Командирҙың серле һөйләүе барыбер барып етмәне тегеләрҙең башына. Клубҡа барыу – Сәлимдең шәхси эше: мадъяр халҡының байрамын күрәсәк. Быныһын һалдаттарға әйтергә ярамай. Ҡорал менән клубҡа барып инһәң, ябай халыҡ бүреләр алдында ҡурҡышып ҡалған һарыҡ көтөүенә әүереләсәк. Берәйһе ситтән генә тороп «пистолет кәнфите» менән һыйлаясаҡ, бәлки. Дошман әлегә һәр аҙымда. Быларҙы һалдаттарға аңлатып торманы Сәлим. Уларға бер генә һүҙ әйтте:

– Киттек!

Эшселәр ҡасабаһының үҙәк урамы төньяҡтан көньяҡҡа табан шаҡтай оҙонға һуҙыла. Полк өсөн әҙерләнә торған йорт шул урамдың төньяҡ осонда. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Сәлим байрам тантанаһы үткәрелә торған клубтың ҡайҙа икәнлеген дә белмәй. Был хаҡта юлдаштарына хәбәр һалып та торманы – табылыр әле. Һуғыш ваҡытында, ана, разведчиктар, дошмандың ут позицияһын үтеп, теге яҡтан «тел» алып ҡайта торғайны. Уларға бит «тел»де йәки тере немецты берәү ҙә әҙерләп ҡуймаған. Ә был – байрам итә торған клуб, башҡа йорттарҙан ҙурлығы, бейеклеге менән айырылып торалыр. Ул тап уйлағанса килеп сыҡты. Һулдан барһаң – туңырһың, тигәнде ишеткәне бар Сәлимдең. Уң яҡ тротуарынан атларға булды. Дөрөҫ, уны хәҙер тротуар тип атауы ла ҡыйын.

Таҡтанан эшләнгән ул. Ваҡытында бик данлы, күркәм булғандыр. Ә хәҙер таҡта бер урында ҡалшайып тора, икенсе урында серегән, мәгәр әле яҡшы ғына ерҙәре бар. Нисек кенә булмаһын, был тротуар Венгрияла эшселәр ҡасабаһының башҡа ауылдарҙан мәртәбәлерәк икәнлеген раҫлап тора.

Бер аҙ барғас, уларҙы шаҡтай ҙур йорт эсенән ағылған моң туҡтатты. Ниндәй моң был? Әскелтем-сөскөлтөм тауыштар сығара торған моң. Венгрия моңомо? Ҡайғы-хәсрәтте көйләйме? Ниңә һыҡрана мадъяр[1] халҡы? Ниңә аһ-уһ килә? Ниңә һыҙлана? Ниңә илай? Ауырлыҡ өсөн өҙгөләнәме? Һис ҡолаҡҡа ятышы юҡ был моңдоң. Сит моң. Күтәренке рухыңды төшөрә торған моң. Уны, бәлки, сырхау кешенең бер күтәрелеп, бер төшә торған ҡан баҫымы менән дә сағыштырырға мөмкиндер. Ауыр ҡайғынан күтәрелеүсән ҡан баҫымы. Ҡайғы артынан шатлыҡ килһә, тиҙ төшә ул. Унан һуң кеше күңеле үҙенсә бер тәбиғи хәленә килә. Был көй мадъяр халҡының һуғыш афәтенән ҡан баҫымы кеүек күтәрелгән йөрәк моңо аһәңеме? Әллә кереп тормаҫҡамы? Биҙа икән был мадъяр халҡы! Бикәр эш битһеҙ була бит ул. Ни бысағыма бимазалап йөрөргә уларҙы! Ниңә улар араһында һары билсән урынына ҡуҡырайып торорға? Ете уйлап бер ҡырҡырға ҡушалар. Ә бына Сәлимдең бер уйлап бер ҡырҡа торған ғәҙәте лә бар. Аҡыллы уйлағансы ахмаҡ эшләп ташлаған, тип тә әйтәләр. Ул, бәлки, эске тәбиғәте менән ахмаҡтар рәтенә инәлер?

Командирҙың ошондай ғәҙәте барлығын белә был ике һалдат. Уларҙың да эске донъяһын аңлау бик ҡыйын. Икеһенеке – ике төрлө. Сергей Майоров – тиҙ ҡабынып, тиҙ һүрелә торған зат. Ғәлинур Әхәтов та шуға оҡшашыраҡ. Әммә айырмалы яҡтары ла юҡ түгел. Сергей үҙ файҙаһы өсөн уттай ҡабынырға әҙер. Ғәлинур, киреһенсә, дөйөм мәнфәғәтте яҡлап фекер йөрөтөүсән. Буйҙары ла бер самала. Метр ярымдан әллә ни оҙон түгелдәр. Сергейҙан Хоҙай матурлыҡты әҙ генә йәлләгән. Еҙ самауыр төҫөн хәтерләткән һарғылт йөҙө лә, баҡыр сәстәре лә уны сибәр егеттәр сафына баҫтырырға ҡушмай һымаҡ. Телгә үткер, билдәле. Ярып һөйләшергә ярата, кәрәк булғанда һөйкөмлө генә йылмая белә. Ана шул үткер, бай теле, күркәм йылмая белеүе ваҡыт-ваҡыт уны нисауа егеттәр сафына ҡуя. Ғәлинур иһә сибәр егет. Ҡара сибәр. Уйсаныраҡ та. Сергей кеүек һүҙгә оҫта түгел. Шулай ҙа һөйләшкәндә мәғәнәле һүҙҙәр эҙләүсән. Кешенән ироник рәүештәрәк көлә торған ғәҙәте лә бар. Хәйер, кеше ҡарбуз түгел, эсен ярып ҡарамағас, ҡайҙан белеп бөтөрәһең инде… Сәлимгә шуныһы мәғлүм: йәш тай, тәртә араһына кергәс, пырҙымһыҙлығын ташламайынса ҡалмай; быларға ла ҡаты хәрби тәртиптең ҡоростан ҡойолған тәртәһе араһына килеп эләккәс, теләйҙәрме-юҡмы, төрмәлә алған биғәләшлектәре менән аҡрынлап хушлашырға тура килде.

Был уйҙар, сәпсек еле шикелле, бик тиҙ үтеп китте командирҙың башынан. Туҡтап ҡалыуына, эскә инергә икеләнеүенә үкенеп ҡуйҙы ул. Юҡтан баҙап китеүҙе яратмаған фронт ғәҙәте ҡанына һеңгән дәһә. Һалдаттар алдында ниңә ныйылдаҡланып маташа әле ул? Шуны һиҙгәндәй:

– Әллә инеп тормайбыҙмы, иптәш старшина? – тип һорап ҡуйҙы Сергей.

Майоровтың был сатай-ботай һүҙе икеләнеүҙе пыран-заран килтерҙе. Ярһып атакаға барғанда ҡурҡаҡлыҡ ғәләмәте күрһәтмәҫкә тейеш командир. Ниңә быҫҡып янған серек ағастай тора әле ул? Дөрләһен! Һин бит фронтовик! Крепость алырға ярһыған һалдаттай, тып-тып ҡаты баҫып, ишеккә табан ашҡынды Пирмөхәмәтов. Тегеләр уға эйәрҙе.

[1] *Венгрҙарҙы мадъяр тип тә йөрөтәләр.*

Барып инһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр, баштан аяҡ ҡара кейенгән йәштәр танцевать итә. Бөтәһе лә һалдаттыҡына оҡшашыраҡ пилотка кейгән. Улары ла ҡап-ҡара. Клубтың эсе әллә ни ҙур түгел. Утыҙынсы йылдарҙа, кулактарҙы синыф булыу яғынан юҡ итеү сәйәсәте ҡуйылғас, ауылдарҙағы мәсеттәрҙең манараларын ҡырҡып, унда клуб йә избач яһанылар. Быларҙың клуб эсе шул самалыраҡ. Әлеге илаҡ моң-көй ағыла. Шул моң тулҡыны менән әсәрләнгән пар, йәғни егет менән ҡыҙ, бер-береһенә нык берегешеп, бер-береһенең эсенә үтеп инергә теләгәндәй, талғын ғына «тансауайт» итә. Майҙан бәләкәй булғанлыҡтан, уларға бик ҡыҫыҡ. Парҙар араһында ҡул тығырлыҡ та ара юҡ. Бөтәһе лә бергә уҡмашып алған тиһәң дә ярай. Бөтәһе лә бергә ниндәйҙер ҡара тулҡын ағышын хәтерләтә. Ә музыка уйнай. Моңая. Һыҡрана. Өҙгөләнә. Ул, гүйә, бөтә йәштәр йөрәгендәге аһ-зар моңо тулҡынын бергә ҡушып һыҡрана. Әммә һалдаттар керҙе тип, музыка туҡталманы. Бер-береһенә берегешкән парҙар тулҡыны дауам итә. Уй-хистәре, бәлки, һаман шулай күңел һағындалыр, әммә күҙҙәре – быларҙа. Һеҙ кемдәр, беҙҙән ни кәрәк, ни бысағыма килдегеҙ, тигән шикеллерәк ҡарай. Гитлер менән Сталиндың ике уҫал тәкәләй һөҙөшөүе бөтә Европаны ҡанға мансыны. Һеҙҙең арҡала күпме михнәт сиктек, еребеҙҙе һаман тапап, нервы ҡылдарыбыҙ менән шаярып йөрөмәгеҙ, ҡайһы тишектән сығып килгәнһегеҙ, шул тишеккә кереп тонсоғоғоҙ, һоро хайуандар (һоро шинель кейеп йөрөгәнлектән, Европа халҡы совет һалдаттарын «һоролар» тип тә йөрөтәләр ине), тип тә уйлайҙарҙыр. Йәш-елкенсәк аҡылы ҡоторонған хис-тойғоһона баш була беләме ни ул.

Бында, әлбиттә, бер телем икмәк һорап йөрөгән хәйерселәй, ишек төбөндә оҙаҡ торорға ярамай ине. Халыҡтың:

*Һандуғастар һайрай саф ерҙә,*
*Аҡҡош йөҙә һыуҙар пак ерҙә, –*

тигән йыры иҫенә төштө Сәлимдең. Былар өсөн сафлыҡ та, паклыҡ та юҡ.

Шуны һиҙенгәндәй, әлеге ҡара тулҡынды йыра-йыра, маң-маң баҫырға тырышып, утыҙ йәштәр самаһында берәү килеп етте. Ул да шулай ҡара кейемле, йөҙө лә кейеме төҫлө ҡап-ҡара булһа ла, мөләйем генә күренде үҙе. Ул мадъярса һөйләргә кереште. Ләкин һалдаттарҙың аңламауын белеп алғас, ҡул хәрәкәтенә күсте. Танау аҫтын һуҡ бармағы менән ҡырғандай күрһәтеп, башын һелкеп ҡуйҙы. Хәҙергә бала йөндәренә бәке лә теймәгән, йәнәһе. Сәтәкәй бармағын күрһәтте лә, «тфү» тип төкөрөп ҡуйҙы. Ҡыҙҙар артыҡ йәш әле, тигәнде аңлатты шикелле. Шунан, командир икәнлеген шәйләп булһа кәрәк, Сәлимгә һуҡ бармағын күрһәтте лә, сыҡҡас, ул яҡҡа атларға кәрәклекте аңлатты.

– Клуб... социаль... демократ... – тигән һүҙҙәрҙе әйтте. Унан һуң баш бармағын күрһәтте. Уңға табан ун өй үткәс, ундағы клубта һеҙҙе яҡшы ҡаршы аласаҡтар, тигән ыҡ-мыҡты аңланы Сәлим. Ә былар...мадистар имеш.

...Тап мадъяр ымлағанса, ун өйҙө үткәс, улар башҡаларға ҡарағанда ҙур һәм бейегерәк бинаға барып төртөлдөләр. Эсенә инһәләр, шул уҡ күренеш: музыка, моң, танса. Әммә бында йәше-ҡарты, хатта бала-сағаһы бергә байрам итә, уң яҡтағы сәхнә кеүегерәк урында ир-ат, ҡатын-ҡыҙ шарап эсә. Тик быларға ныҡлап иғтибар итеү юҡ, тегендәге шикелле йыртҡыс күҙе менән ҡарамайҙар һымаҡ. Әммә мадъярҙарҙың күҙ ҡараштарынан барыбер нәфрәтләнеүгә оҡшашыраҡ тойғолар һибелде беҙҙең һалдаттар өҫтөнә.

Бында ла зал халыҡ менән шығырым тулы. Бер айырмалы яғы бар: тегендә бөтә йәштәр ҡара кейемле булһа, бындағыларҙыҡы сыбар – һәр кем өҫ-башын үҙ зауығына ҡарап бөтәйткәндер, күрәһең. Йәш ҡыҙҙар ҙа, төрлө йәштәге ир-аттар ҙа, шаҡтай йыуан ханымдар ҙа тулҡынлана танса майҙанында.

Халыҡ тулҡынын йырып, Сәлимдәр янына илле йәштәр самаһы бер ир килде. Унын клуб башлығы икәнлеген аңлауы ҡыйын түгел ине. Мадъяр теленә рус һүҙҙәрен дә ҡатнаштырып һөйләп китте ул:

– Это клуб... социаль-демократ... Есть коммунистический клуб... идите туда... – тине. Ҡарашы бүренеке түгел, шулай ҙа «ниңә былай хәйер һорашып йөрөйһөгөҙ, һеҙгә бирергә бер ҡабым ризыҡ юҡ, күршегә инегеҙ, ана, улар байҙар... тигән уй күҙ төптәрендә...

Мәсьәлә аңлашылды. Бында меҫкенләнеп йөрөүҙә бер фәтүә лә юҡ. Үҙен хатта вайымһыҙ кешегә иҫәпләне Пирмөхәмәтов. Мулла бабайҙың: «Вайымһыҙ егет ишәккә юлдаш», – тигән мәҡәлен дә ҡапыл иҫкә алды. Бына азат ит һин уларҙы фашизмдың бысраҡ тырнағы аҫтынан. Ит яҡшылыҡ – көт яуызлыҡ, тигәне ошомо әллә? Булһа икән бер граната, епфәрер ине зал уртаһына, ярай әле ҡорал алмаған, әллә ниндәй ахмаҡлыҡ эшләп ташлауың бар, хатаның бизмәне юҡ, ти бит. Былдай алама уйҙың башына килеүенә аптырап ҡуйҙы Сәлим. Фронтта ярһыған йөрәк дауылы һаман баҫылмай, күрәһең. Ысынлап та, әллә ниндәй ахмаҡлыҡ эшләп ташлауың бар. Тиҙерәк табан аҫтын ялтыратырға кәрәк бынан. Сәлим ҡырт боролоп сығып китте, ярандары уға эйәрҙе.

Сабыр кеше бер енләнһә, ҡоторған үгеҙ менән бер... Фронтта ундай саҡтары ла аҙ булманы Сәлимдең. Ғәлинурҙың уны һис тә кәйефһеҙләндергеһе килмәй ине.

– Ҡайтып ҡына китәйек. Иптәш гвардия старшинаһы, – тине ул тышҡа сыҡҡас. – Маҡсатһыҙ кеше үҙ ҡәҙерен белмәҫ, тип үҙегеҙ әйткәйнегеҙ бит бер ваҡыт.

– Был маҡсатһыҙ эш түгел, Әхәтов.

– Пустой эш был.

– Улайһа, барығыҙ, ҡайтығыҙ, һеҙ – ҡурҡаҡтар, ә миңә коммунистар клубын табырға кәрәк, – тине лә старшина юлын дауам итте.

Бер аҙ барғас, урам бөтә. Һул яҡҡа табан икенсе урам башлана. Бара-бара йәнә ҙур йортҡа килеп еттеләр. Музыка. Моң. Был моңда һыҡраныу, илау, өҙгөләнеү өнө бик һиҙелмәй. Унда аҙ ғына ниндәйҙер дәртлелек, рухи ҡәнәғәтлек, хатта шаянлыҡ тойғолары ла бар буғай.

Эскә инделәр. Мәжлес залы социаль-демократтарҙыҡына оҡшаш. Шул уҡ тансаға төшкән халыҡ тулҡыны. Сыбар кейем. Ҡарттар. Йәштәр. Ир-ат. Ҡатын-ҡыҙ. Ун, ун ике йәш самалы бала-сағалар. Танса. Уң яҡта – сәхнә кеүегерәк урында – бер нисә ир шарап менән ләззәтләнә. Шөкөр, быларҙы бүре күҙҙәре түгел, яғымлы дуҫ ҡараштар ҡаршы алды. Алтмыш йәштәр самаһы бер ир, халыҡ тулҡынын йыра-йыра, былар янына килеп туҡтаны ла, алға табан барырға ым ҡаҡты. Үҙе йәнә халыҡ тулҡынын икегә айырып, түргә уҙҙы, буш эскәмйәнән урын күрһәтеп, ултырырға ҡушты. Һалдаттар яйлашып алғас, кеҫәһенән ҡыҙыл тышлы бер билет сығарҙы ла быларға күрһәтте. Быныһы русса арыу ғына «һупалай» икән:

– Вот... май партинай билет... Я каммунис... ви туже каммунис... буди друзия... пунимаеш... – тине лә шарап эсеп хозурланған ирҙәр янына барырға ҡушты.

Сәлимдең кеҫәһендә Чехословакиянан килгән крон (аҡса) бар ине. Шуны күрһәткәс, шарап һатып алырлыҡ венгр пенгаһы (аҡсаһы) булмауы тураһында әйтте. Шунан мадьяр, ошо клуб хужаһы, уң ҡулын күтәреп, музыка һәм тансаны туҡтатты ла, эшләпәһен һалып, үҙ телендә бер аҙ нотоҡ тотто. Бер аҙҙан уның эшләпәһенә пенгалар яуырға тотондо. Әле береһе, әле икенсеһе килеп, эшләпәгә аҡса һалып китә. Был мәшәҡәт теүәлләнгәс, шул аҡсаларға буфет

һымағыраҡ эшләнгән урындан – унда йыуантаҡ бер ханым тора – ике шешә шарап барып алды һәм уларҙы әлеге ирҙәр эсеп ултырған өҫтәл өҫтөнә килтереп ҡуйҙы. Бер шешәне асып, дүрт стаканға шарап ҡойҙо. Аҙаҡ, әйткәндәй, ҙур ҡәҙер-хөрмәт менән, быларҙы шунда саҡырҙы. Башта мадъяр, ниҙер әйтеп, быныӊ бер ҡурҡынысы ла юҡ тигәндәй, үҙе эсеп күрһәтте, унан ошо хәлде «ҡунаҡтар»ға тәҡдим итте. Уларҙыӊ да эскеһе бик килә ине. Их, «һә» тигәнсе, стакандыӊ төбө көлөп ҡалырҙай итеп, башҡорт әйтмешләй, түӊкәреп ҡуйырға быны! Ләкин… Ана шул «ләкин» тигән ҡара йылан, телен сығарып, ыҫылдап тик тора бит ул һиӊә. Пирмөхәмәтов, нәҡ мадъярса булырға тырышып, һалдаттарына шарапҡа һыйыр урынына ҡапланмайыҡ тигәнде ҡарашы менән аӊлатып, уртлап ҡына ҡуйҙы. Тегеләр ҙә шулай итте.

Күренә: мадъярҙыӊ һөйләшкеһе килә. Әле бер һүҙ әйтә. Әле икенсеһен, ватаемерә, руссалап та таҡылдай. Шулай ҙа аӊлауы ҡыйын. Их, был тел белмәү. Тел – күӊел көҙгөһө, тиҙәр. Сөнки һөйләгәндә кеше башҡаларға үҙенеӊ кем икәнлеген аӊлатмайынса ҡалмай: айбарлы, һүҙ әрәсәһен белеүсе, матур күӊелле, алйот, ныйылдыҡ, алабарман – тағы ла әллә ниҙәр…

Польша, Румыния, Чехословакия, Германия, Венгрия… Ә һинеӊ шуларҙыӊ берәйһенән икмәк һорап алырлыҡ та телеӊ юҡ. «Тел – ил көҙгөһө», – тигәне лә бар бит әле уныӊ. Мадъяр, аҙ булһа ла «һупалағыҙ» тигәндәй, быларға әле русса, әле үҙ телендәгесә уны-быны ләпелдәргә тотондо. Стаканын йәнә күтәрҙе лә, башта «йа», «йа», «йа» тип йәнә уртлап ҡуйҙы, унан һуӊ «каруша», «каруша» тип шәбәйҙе. «Каруша» тигәне – урыҫса, «йа» тигәне мадъярса була, тимәк. Һауыттағы бер алманы алды ла «алма» тине. Быныһы ла башҡортса икән. Шунан эске бүлмәгә йүгереп инеп китте лә, балта күтәреп сығып, «балта» тип ҡуйҙы. Сәлим менән Ғәлинур, бер-береһенә ғәжәпләнеп ҡарашып, йылмайып алдылар ҙа әлеге һүҙҙәрҙе ҡабатланылар: «өҫтәл», «алма», «балта». Мадъяр көлөп ебәрҙе. Әллә үҙенеӊ яҡшы «уҡытыусы» икәнлегенә, әллә быларҙыӊ артыҡ «зиһенле» булыуҙарына шатлана ине ул. Шул фекерҙәрҙе раҫлағандай, «йа», «йа», «йа», «каруша», «каруша», «каруша» һүҙҙәрен ҡабатлап шатланды. Унан һуӊ, залға ҡарап, ниҙер әйтеп ҡуйҙы. Музыка яӊғырағайны, залдыӊ хоры «Катюша»ны йырларға тотондо. Тимәк, руссанан мадъярсаға тәржемә ителгән. Түҙемһеҙ Ғәлинур, йыр туҡтағас, ныҡ тулҡынланып, башлыҡ мадъярҙы барып ҡосаҡланы. Тағы ла бер тапҡыр уртлап, матур хис-тойғолар менән тәьҫирләнгән хәлдә, хужаларса залға төштө. Йәнә танса тулҡыны башланды. Беҙҙекеләр, өсәүләшеп, уларҙан бушаған урынға барып һеӊделәр.

V

Хәҙер «друзия»ларға ҡыҙҙар һөжүме башланды. Әле береһе, әле икенсеһе тансаға саҡыра. Тик йөрәккә ял, күӊелгә дәрт биреүсе, хыялдарға ҡанат ҡуйыусы был бейеүҙеӊ әрәсәһен белмәй шул былар. Өсөһө лә… Өсөһө лә был сәнғәттеӊ ибәтәйе түгел. Шуға күрә улар еләктәй сибәр ҡыҙҙарҙыӊ ихлас саҡырыуынан баш тартып, ала ҡарғалай ауыҙ асып тик ултыра бирҙеләр. Сибәр, энә осонда бейерҙәй, бал ҡашығына һалып йоторлоҡ мадъяркалар егеттәр хаҡында нимә уйлағандарҙыр – уныһы үҙҙәренә генә мәғлүм. «Боҙ йөрәктәр» тип фекер йөрөткәндәрҙер, бәлки. Әммә улар һис тә боҙ йөрәк түгел. Киреһенсә, уларҙыӊ йөрәгендә оялыу уты, ғәрләнеү дауылы, боҙ тауҙарын иретерҙәй ялҡын. И-и-х! Бәғзе береһе ете йыллыҡ һағыҙаҡ урынына килеп һылана бит һиӊә.

Матурлыҡтан, гүзәллектән, ләззәтлектән баш тартыу бит был. Нәҙекәй билен ҡосаҡлайһы, мадъяр егеттәре шикелле, бот араларына керә-керә, күкрәгенә ҡыҫып, бәхет диӊгеҙендә йөҙгәндәй, аҡрын-аҡрын ғына, ҡыҙҙар сәсенән килгән

хушбуй еҫе менән ләззәтләнеп, хозурланып ҡына тансауайт итеп йөрөйһө ине. Тфү!.. Егет түгел, шешәк кәзә былар!

Танса дауам итә, музыка уйнай. Моң ағыла. Быларға, шешәк кәзәләргә, хәҙер иғтибар юҡ. Яндарына килеп тә ҡарамайҙар. Ултырһындар әйҙә эсәк-бауырҙарын бейетеп, тип тә уйлайҙарҙыр. Шулай ҙа бер сибәр һағыҙаҡ һымаҡ тынғы бирмәй. Килә лә тота, килә лә тота Сәлимдең ҡулынан. Тыңламағас, өҫтөрәй үк башланы. Һай! Ҡыйыу ҙа, уҫал да, әрһеҙ ҙә икән сит ил ҡыҙҙары! Ауыҙыңа кереп баралар. Сәлимгә һис кенә лә ҡотолоу әмәле юҡ. Урыҫса ла бер аҙ белә икән ҡыҙый. Ватып-емереп булһа ла әйтеп тә ҡарай:

– Какуй маладай… красивай… ни тансавайт… ни нада… – тип ҡулынан тотоп торғоҙайым тиһә, Сәлим һаман ҡаршылашып маташты, шулай ҙа сигенмәне ҡыҙ, тағы ла тартҡыларға кереште, урынынан аҙ ғына ҡуҙғалғайны, Ғәлинур, командирының өҙҙөрөп бейегәнен, танса майҙанына керһә, барыбер юғалып ҡалмаясағын аңлап, күтәреп тигәндәй торғоҙғас, уны ҡыҙға табан этеп ебәрҙе. Нығыраҡ ҡыланды шикелле Ғәлинур, шул шауҡым менән, Пирмөхәмәтов ҡыҙҙың ҡосағына барып йомолдо.

Музыка. Моң. Танса. Бәй, баҡһаң, бер ҙә ул тиклем ҡатмарлығы юҡ икән дә баһа быны. Ауылда бала-саға, бындағы кеүек, клубҡа йөрөмәй. Ә инде танауына ҡыҙҙар еҫе керә башлаған малай-шалай, гәрсә йыртыҡ-мыртыҡ ыштан, ямаулы пинжәк, сәскәле сабатанан булһа ла, хатта һеләгәйен йыя алмаған йолҡоштар ҙа, трахомалы күҙҙәрен бәзерәйтеп, ҡош тоторға барғандай ярһып, клубҡа килә. Һәй, әттәгенәһе, ярһыу ҙа инде беҙҙең халыҡ: әйтерһең, эсенә терегөмөш рудаһы тултырғандар. Ҡарын һауытында кәлйемә булғанда ла, күңел һандығында дәрт гәүһәре йөрөттө. Ул бейегәндә, Урал тауы һелкенеп тора. Ә тышта йырлаһа, тауышынан таш ярыла; өйҙә йырлаһа, тәҙрә быялалары сатнай. Сәлим дә, күңел ҡытыҡлай торған еҫте аҙ ғына һиҙә башлағас, танауын тарта-тарта, клубҡа йүгерер ине. Әммә, башҡа ырҙым-мырҙым малайҙар менән сағыштырып ҡарағанда, уның маҡсаты ҙурыраҡ. Ул, беренсенән, клубҡа ҡыҙыҡ-мыҙыҡ ҡарарға ғына бармай. Дүртенсе синыфты, кем әйтмешләй, тоҙлап-борослап тамамлағас, уҡыуын ташлап, сабата яһарға тотондо ул. Сәбәпһеҙ кәзә лә баҡсаға инмәй, тигәндәй, бының етди сәбәбе бар. 1924 йылда тыуа ул. 1925 йылда атаһы Шәмсетдин мулла үлеп китә. Алты бала ҡалалар. Сәлимгә – 1, Нәсимәгә – 3, Нәзирәгә – 5, Разияға – 7, Гөлъямалға – 9, баш бала Миршатҡа – 11 йәш. Сәлим сабатаны өс ҡалып буйынса үрә: балаларға, еткән егет һәм ҡыҙҙарға, өлкән йәштәгеләргә. Мәгәр сабатаны матур ҙа, ныҡ та итеп үрә. Шуға күрә баҙарҙа уныҡылар тиҙ һатыла. Тирә-яҡта хатта «Сәлим сабатаһы» тигән дан таралды. Ул ваҡытта әле итек-ситек теләһә кемгә тәтемәй ине. Был яҡтан хәлһеҙҙе хәлленән айырып ҡарау булманы, буғай. Бөтәһенең дә тиерлек аяғында сабата. Имәнес ныҡ сатнатып бейейҙәр сабаталы аяҡтар. Ә күбеһенең аяғында – Сәлим үргән сабата. Бына шуны ҡарарға була ул. Энә осонда бейерҙәй ун дүрт, ун биш йәшлек дәртле ҡыҙҙар ҙа шашып-шашып бейей уның сабатаһын кейеп. Ул ғынамы? Бейеп туҡтағас:

– Рәхмәт, аҡыллым, һәй, һинең сабатаҡайыңды кейеп бейеүҙәре! – тип, уның бит осонан үбеп китә бәғзе береһе. Сәлимдең бит осонда уның дәрт ялҡыны һеңеп ҡала. Ә инде һуңға табан, иҫәр малайлыҡтан тиле йәшлеккә үрмәләгән осорҙа, йәки танауға еҫ керә башлағас, ялҡын бит осонда ғына ҡалмайынса, йөрәккә табан юл тотто. Сабата яһауҙың ҙур сәнғәт икәнлеген аңланы шунда Сәлим.

Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан Әхмәтсолтандың бейеүе айырыуса оҡшай торғайны уға. Ике ҡулын йәйеп, ҡош кеүек оса «прәме». Аяғына күҙ ҙә эйәрмәй.

«Ҡарабай»ға баҫа башлаһа, һалҡын ҡыҙҙың да йөрәк боҙо иреп ағырлыҡ була. Энеһе Ғабдулла ла шәп бейер ине. Әммә «Ҡарабай»ға бер ҡасан да бейемәне, «Барыня»ны ярата ине. Төҫ, йылмайыу, килеш-килбәт, ҡылыҡ-фиғел, буй-һын һәм башҡа сифаттары оҡшаш булһа ла, икеһе лә бер бәхет йөҙлөгө менән тыуһалар ҙа, бейеүҙәре бөтөнләй башҡа ине Әхмәтсолтан менән Ғабдулланың. Мәгәр улар кеүек бер кем шул тиклем килештереп, оҫта, бөтә шартына килтереп бейей алмайҙар. Сәлим уларҙың икеһененекен дә үҙләштерергә тырышты. Был маҡсатҡа иреште лә ул. Кәрәк булһа – «Ҡарабай»ға баҫа, кәрәк булһа – «Барыня»ға. «Әпипә»гә лә бейей. Шулай ҙа аяҡтарын күберәк «Барыня»ға яйлаштырҙы. Ана шунда аңланы Сәлим бейеү сәнғәтенең ни тиклем ижади икәнлеген. Бәлки, Әхмәтсолтан менән Ғабдулла ағайҙарҙың бейеү оҫталығы тәьҫир иткәндер – Күккүҙ ауылы егеттәре был «һөнәрҙе» ниндәйҙер рухи ләззәт юғарылығына күтәрә алдылар. 1924 йылда шалҡандай 33 малай пәйҙә була яҡты донъяға. Күккүҙ ауылы халҡы бер йыл эсендә шул ҡәҙәр күп ир баланың тыуыу тарихын белмәй әле. Хеҙмәт итеп, көрәшеп, дуҫ булып үҫтеләр. Һөлөктәй егеттәр. Ҡырҡынсы йылдарҙа клуб улар ҡулына күсте. Шашып-шашып бейеүҙән иҙәндәр һығыла, ә үҙҙәре манма тиргә бата торғайны. Күккүҙ егеттәре бейеүен ҡарарға күрше ауылдарҙан киләләр ине хатта. Күрше ауылдарға йыйнаулашып барып, клубтарында бейеп ҡайтырға ла иренмәй торғайны улар.

Мадъярка-һағыҙаҡ менән тансаға төшөүенә бейеү оҫталығы ярҙам иткәндер Сәлимгә. Хәйер, был ысын танса ла түгел әле. Вальс, танго, фокстрот... – тағы ла әллә ниндәй төрҙәре бар уның. Вальс өсөн иркен майҙан кәрәк. Сөнки унда шашып-шашып әйләнәләр ҙә әйләнәләр. Тансаның был төрө Азия илдәрендә лә, Аурупа илдәрендә лә бар. Мәҙәниәте, сәнғәте алға киткән илдәрҙә уны белмәгән кеше юҡтыр. Әммә шығырым тулы был бәләкәй клуб майҙанында уны бейеү мөмкинлеге юҡ. Фокстрот тигәне лә шулайыраҡ. Киң майҙан, иркенлек талап итә. Унан һуң тансаның был ике төрө күберәк йәштәр өсөн. Ҡарттарға бик еңел бирелмәй инде ул. Уларға «танго» тигәне бик йәтеш. Бындағыһы «танго» булһа кәрәк. Шуға оҡшашыраҡ. Йәштәр бер-береһенең ҡулбаштарына баштарын ҡуйышып, кәүҙәләре менән берегешеп, донъя ләззәтенә сумғандар. Уларҙың ҡулдарын ҡулбаштарына ҡуйышып, күҙҙәрен күҙҙәренә текәшкән хәлдә йөрөгәндәре лә бар. Бәғзе береһе, ләззәтлелектең иң юғары нөктәһенә еткәндәре... сут-сут үбешеп тә ала. Һис тә ғәйеп-ҡоба юҡ бында. Бәғзе бер телеграмм бағанаһындай оҙон ир кәтүк буйлыҡ ҡатын һайлаған. Һәм, киреһенсә, балыҡ һеңереләй кипкән оҙон ҡатын мискә йыуанлығы ир менән төшкән. Ҡарт-ҡоро ир, әбей-һәбейҙәр ҙә күп. Ҡыҫҡаһы, бөтә халыҡ уптым ҡупҡан байрамға. Хатта ҡыҫыҡ бында. Шашып-шашып әйләнеү тураһында уйларға ла ярамай. Ҡосаҡлашып йөрө лә йөрө. Сәлим өсөн, танса белмәгән ауыл ҡарғаһына, бына шулай кәрәк тә. Ҡосаҡлауы ҡыйын түгел уныһы. Нәфсең ҡотора башлаһа бик яман мәгәр. Тотоп ашайһы килә «прәме». Тик... Һәй, шул тел белмәүлек харап итә. Әллә ниҙәр әйтәһе килә һағыҙаҡҡа. Тел тибрәнә – һүҙ табып булмай. Шулай ҙа, тегеләй-былай итеп, руссалап (ҡыҙ бер аҙ һупалай бит әле) аңлатып бирҙе ул тансаны белмәгәнлекте. «Һағыҙаҡ» килешмәне уның фекере менән. «Йа», «йа», «йа», тип ҡабатланы. «Йа»ның «яҡшы» икәнлеген хәҙер Сәлим белә. Тимәк, ҡыҙ ҡәнәғәт. Бөгөнгә шул ҡәҙәреһе лә еткән.

Сеү!.. Оһ!.. Тағы ла шул «ләкин» тигән ҡара йылан саҡты. Ҡыҙҙың «йа» тип әйтеүе булды, шап итеп уның аяғына баҫты егет. «Һағыҙаҡ» ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе хатта. Ул башҡаларҙың да иғтибарын йәлеп итте. Тап шул ваҡыт мөң-

көй өҙөлдө. Сәлимдең тупаҫ аҙымдары өсөнмө был? Ҡыҙҙың ҡапыл ҡысҡырып ебәреүен ишетепме? Әллә тәнәфес яһап алмаҡ булалармы?

Кешеләр, парлап-парлап таралышып, стена буйынан һуҙылып киткән эскәмйәләргә ултырышалар. Тышҡа сығып китеүселәр ҙә бар. Ә «Һағыҙаҡ» баҫып тора ла тора. Атлап китергә әллә аяғы ауыртамы? Бына хәҙер күтәреп кенә алып барып ултыртыр ине лә бит, ярағанын-ярамағанын белмәй. Сәлимгә ҡыйын ине.

Сеү! «Һағыҙаҡ» атлап китте. Сәлим, ҡултыҡлап, уны үҙ янына алып барып ултыртты. Аҡһай-аҡһай барҙы ул. Һалдат итеге, күрәһең, артыҡ рәхимһеҙлек күрһәткән. Ҡыҙ быны һиҙҙермәҫкә тырыша, тик Сәлимгә һағыҙаҡланыуын дауам итә. Беләгенән тота. Башын уның ҡулбашына терәй.

Шулай ҙа был минуттарҙы үткәреү бик ауыр. Сергейҙа тел – Хоҙайға шөкөр. Әллә ниҙәр әйтеп көлдөрөр ине. Пирмөхәмәтов, төп һымаҡ, һелкенмәйенсә тик ултыра – һөйләшмәй ҙә. Бына ул бер ваҡыт, ҡапыл һикереп тороп, «Һағыҙаҡ»ҡа бер ҡайҙа ла китмәҫлекте ым менән белдерә-белдерә, тышҡа сығып китте. Бер аҙҙан инеп, музыканттарға оҙаҡ ҡына нимә хаҡындалыр аңлатып маташты, йәнә иптәштәре янына килеп шинелен һалды ла уны Ғәлинурға тотторҙо. Былай бик ҡупшы  булып китте старшина. Әлеге китель, галифе салбар. Түшендә ордендар, миҙалдар. Биле өҙөлөп тора. Һарғылт сәсе оҙон да түгел, ҡыҫҡа ла түгел, үҙенә бик килешле. Сибәр аҡ йөҙ. Ҡыҙҙарҙы сихырлай торған зәңгәр күҙҙәр. Ҡыҫҡаһы, егеттәр солтаны.

«Һағыҙаҡ» уға һоҡланып ҡараны. Тик ни өсөн егеттең шинелен һалып ырғытыуы, үҙен шулай матур күрһәтергә тырышыуы серлерәк тойолдо. Был танса майҙанына яңынан кереү өсөн ярһыуымы, әллә башҡа ғәләмәте бармы? Белмәҫһең. Ә ҡыҙ уның һылыулығына һоҡланып ҡарап торҙо-торҙо ла:

– «Йа», «йа», – тип баш бармағын күрһәтте.

«Музыканттар» тигәндәре әлеге шул ирҙәрҙең шарап, һыра эсеп ултырған урынынан уң яҡтараҡ ине. Унда – бер аккордеонсы, бер скрипкасы, тағы ла ауыҙ менән ниндәйҙер һорнай өрөп уйнаусы. Етәксе мадъяр ҙа шулар янында. Сәлим еңел һөйәген елкендереп, шунда китте. Барҙы ла әле ҡул  хәрәкәте, әле аяҡтар тыпырсыныуы менән, әле һүҙ әйтеп, уларға ниҙер аңлатырға тотондо. Халыҡ әкренләп тыштан инә. Ингән береһе стена буйына теҙелеп киткән эскәмйәләргә яйлаша. Бәғзе берәүҙәре мөйөшкәрәк һырыша. Күмәк-күмәк гәпләшеп торғандары ла бар. Мәгәр һәр береһенең күңеле күтәренке. Һәр береһенең йөҙөндә – тантана нуры.

Һыра, шарап эсеп ултырғандар ҙа ниндәйҙер мәҙәк һөйләп шырҡылдап алалар.

Тәнәфес шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылды. Ә Сәлим һаман тегеләр янында ҡайнаша. Аҙ-маҙ бейеп тә ала. Ни ҡылана был? Ни эшләмәксе? Ниндәй мөгөҙ сығарырға маташа? Әллә бейеп күрһәтмәк буламы? Ҡыҙ аяғына баҫып хур итте лә баһа инде үҙен. Шул ғәйебен оҫта бейеүе менән ҡапламаҡсымы? Ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарған ти берәү: бер ғәйебен ҡаплап, икенсеһенә батмаҡ буламы. Килеп сыҡмаһа, харап та инде.

Бына бер ваҡыт Сәлим, сәхнәнән ырғып-һикереп төшөп, матур-еңел кәүҙәһен рыцарҙарса уйната-уйната, танса майҙаны уртаһына килеп баҫты. Был ғәләмәтте күҙәткән мадъяр халҡы ҡапыл һағайып ҡалды: ниндәй кәмит күрһәтмәк була был сүбәк баш урыҫ һалдаты, йәнәһе. Әммә кәмит юҡ та юҡ. Ҡатҡан бағаналай баҫып тора бирә Сәлим. Ә музыка уйнамай ҙа уйнамай. Аҙ ғына тауыш сығарып ҡуя ла  туҡтай. Күрәһең, Сәлим әйткән көйҙө таба алмайынса ыҙа сигәләр. Был шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылды. Халыҡ араһында шау-шыу,

сүбәк сәйнәү китте. Шарҡылдашып көләп тә алалар. Сәлимгә бик ҡыйын ине. Бына хәҙер майҙанды ташлап сығып китһә, һөжүмгә ярһып барғанда ҡурҡаҡ мут кәзәләй артҡа сигенеү менән бер буласаҡ был. Бына һиңә еңеүсе һалдат! Аурупаға азатлыҡ алып килеүсе! Фашизмдың ҡара байрағын йыртҡылаусы!

Сәлим уларға «Барыня»ны уйнарға ҡушҡайны. Көйләп күрһәтте. Уға саҡлы ла беләләр ине бит. Быға тиклем дә уйнағандар. Урыҫ һалдаттарына. Кем әйтер улар араһында урыҫ һалдатын сәйнәп ырғытырға торғандар юҡ тип? Ни булһа ла булыр, тоторға ла музыкаһыҙ ғына бейергә. Ауылда шулай итәләр ине бит. Күккүҙ тигән бөтә ҙур ауылға ни бары йоҙроҡ ҙурлыҡ «Бараксин» тигән бер гармун бар ине аҡһаҡ Назифта. Мәгәр мең ялыныуға бер баш эймәҫ ине. Алып килеп булмаҫ ине клубҡа. Шунан йәштәр уға бер «сәкүшкә»лек аҡса йыя. Уны күрһәтһәң, ҡара шаҙра йөҙө шундуҡ тулған айҙай балҡып китә, йырылған алаптай ауыҙы ҡолағынаса етә, самауыр еҙенән дә ныға ырaҡ һарғайған һирәк тештәре ыржайып ҡуя, бесәйҙекеләй һоро күҙҙәре майлана, ҡартыш таяғылай тырпайып торған һары сәстәре йәнләнә; ҡыҫҡаһы, «сәкүшкә» алдында саждәгә китеп, сусҡаға әүерелергә лә әҙер. Мәгәр шәп уйнай.

Ә инде ныҡ ауырып китһә, аҡһаҡлай-туҡһаҡлай, «сүлди» артынан да эйәрә алмай ул. Ә йәштәр, йөрәктә ҡайнаған дәрт ялҡынын баҫыр өсөн, барыбер йыйыла клубҡа. Берәү бейергә төшһә, йә «Әпипә»не, йә «Ҡарабай»ҙы, йә «Барыня»ны әйтеп, ҡул сабып, сәпәкәй итеп торалар. Аулаҡ өйҙә гармун бер ҡасан да булмай. Барыбер бейейҙәр. Таҡмаҡҡа булһа ла. Йәштәр алдатмай. Әмәлде ғәмәл итә белә.

Ошо уйҙар йәшен тиҙлегендәй үтеп китте Сәлим башынан. Ауылындағы гармунһыҙ клубты күҙ алдына килтерҙе лә аҡрын ғына, музыкаһыҙ бейеп китте ул. Әлбиттә, ҡыйыныраҡ. Ике һалдаты ла борсолоп ултыра. «Һағыҙаҡ» та быны ни менән бөтәсген ҡыҙыҡһынып көтә. Халыҡ та ғәжәпләнә. Әллә аҡыл шөрөбө бушмы был тарамыш дыуамалдың, тип уйлаусылар ҙа барҙыр әле. Шулай ҙа Сәлим аҡрынлап уларҙың яңылыш-хафалы уйҙарын аяҡ табаны аҫтына һалып тапай бирҙе. Эсенән үҙе көйләне ул аулаҡ өйҙәрҙә, клубта бейегән көйҙө. Аяҡтарына шуға буйһонорға бойорҙо. Уға, гүйә, Күккүҙ ауылы йәштәре ҡул сабып тора. Гөрләтеп сабалар. Шаулатып. Ус төптәре саңҡылдап таһырлай. Ә йөрәге ярһый Сәлимдең. Күңеле тилерә. Дәрт тулҡыны ике ҡулын ҡанат итә. Аяҡтар әллә иҙәнгә тейә, әллә юҡ. Бына-бына дөлдөлдәп осоп китер кеүек ул. Бәй!.. Был ни хәл?.. Күккүҙ йәштәре түгел, мадъярҙар ҡул саба ла баһа. Тимәк, уның йөрәк ялҡынындағы көйө мадъярҙар йөрәгенә күскән. Шул ялҡын дауылы ҡулдарын саптыра. Ниндәй күңелле! Был, әйтерһең, ниндәйҙер әкиәти донъя! Сихырлы. Әкиәтле. Бәй, бына һиңә кәрәк булһа – музыка ла уйнап ебәрҙе. Музыка Сәлимдең аяҡтар хәрәкәтенә, шуға ҡарап ҡул сабыу тауышы тулҡынына эйәрә. Шул моң тулҡынының ритм һәм рифма ағылышын һаҡлаған хәлдә бейергә тырышты Сәлим. Ярһый-ярһый, осоп-осоп, шаша-шаша бейене. Йөрәге, күңеле, бөтә кәүҙәһе бейене аяҡтары менән бергә. Бына бер ваҡыт, бөтә шартын килтереп бейеп бөткәс, туҡтап ҡалды ул. Музыка ла, ҡул сабыуҙан сыҡҡан тауыш тулҡыны ла тынды. Ә Сәлим, ҡулдарын болғап:

– «Урал!», «Урал!», «Урал!» – тип ҡысҡырҙы. Был уның: «Мин – Урал егете!» тип ғорурланыуын аңлата ине. Ул, күкрәген бер аҙ кирә төшөп, ғорур бер ҡорос һынға әүерелеп баҫып торҙо. Быны аңлауы ҡыйын ине. «Бына мин Урал кеүек ғорурмын!» – тип әйтеүеме? Нисек кенә булмаһын, әллә бейеү оҫталығын, әллә Урал бабайҙың ғорур һынын алҡышлап, оҙаҡ ҡына ҡул сапты мадъярҙар. Әммә урынынан һаман ҡуҙғалманы ул. Халыҡ тынып ҡалды. Улар, күрәһең,

ниндәйҙер яңы мәрәкә көтә. Сәлим, күкрәген һаман кирелгән килеш тотҡан хәлдә, уң ҡулын ҡыйғаслата күтәреп, һул аяғын аҙ ғына алға һуҙып, өс тапҡыр:

– «Салауат!», «Салауат!», «Салауат!» – тип ҡысҡырҙы.

Бының менән «Беҙ – Урал егеттәре!», «Беҙ – Салауат тоҡомонан!», «Беҙ – көслө халыҡ!» тигәнде аңлатырға тырышты ул.

Шунан майҙанға баяғы башлыҡ сыҡты ла ниндәйҙер нотоҡ уҡырға тотондо. Оҙаҡ һөйләмәне. Ике ҡулын күтәреп, тулҡынланып бер нисә һүҙ әйткәйне, мадьярҙар (ирҙәр), төрлө яҡтан йыйнаулашып килеп, Сәлимде уратып алды. Уларҙың уртаһында – түңәрәк эсендә ҡалды Пирмөхәмәтов. Нимә был? Әллә мадьярҙарға оҡшаманымы уның былдай ҡыланышы?

Етәксе, ҡулын күтәреп, йәнә бер һүҙ әйткәйне, әлеге түңәрәк сылбыры Сәлимде ян-яғынан уратып алды. Ул уртала бөтөнләй ҡыҫылып тигәндәй ҡалды. Башлыҡ йәнә бер һүҙ әйткәс, Сәлимде күккә сөйөргә тотондолар. Ул, диңгеҙ тулҡынында сайҡалған юныҫҡылай, халыҡ күкрәгенән сыҡҡан шатлыҡлы ауаздар тулҡынында тирбәлде.

VI

Шөкөр! Үҙенең Урал егете, Европаны фашизм ҡоллоғонан азат итеүсе икәнлеген ҡорал менән генә түгел, әле бына ялҡынлы бейеүе, рухи бөйөклөгө менән дә күрһәтә алды Пирмөхәмәтов. Ә инде «Һағыҙаҡ» мадьярка яңынан ҡайнар үбеп алғас, йәнә шаулатып ҡул саптылар. Ошо зерә тантаналы күренештәр көнбайыш Европа илдәре халҡының да аҡ эшләпәле Совет армияһына булған ҡайнар мөхәббәте, ҡара эшләпәле немец армияһына ҡарата йөрәктәрендә ҡайнаған нәфрәте ине.

Сәлим шинелен кейеп алғас, «Һағыҙаҡ» ни өсөндөр тышҡа сығып китте. Аҡһаҡларға тырышмаһа ла, аяғы ауырта, буғай. Ә Сәлимгә нишләргә? Артынан сығырғамы? Килешерме? Уның бит әле ни өсөн тансаға саҡырғанын, яңаҡтарҙы көйҙөрөрлөк итеп үпкәнлеген дә белеп булмай. Улар Гитлерҙың донъяны урарға әҙерләнгән ағыулы ҡара пәрҙәһен йыртҡылап ырғытҡан совет һалдатына ҡарата илаһи бер ҙур хөрмәт кенәлер, бәлки. Һағыҙаҡлығы ла шуның өсөн генәлер, моғайын. Яратыу, ғашиҡ булыу, мөхәббәт кеүек төшөнсәләрҙең бөртөгө лә юҡтыр бында. Ҡыҫҡаһы, уға дегет силәгеләй тағылырға аслан ярамай.

Бәй, пальтоһын кейеп керҙе лә, гәрсә һиҙҙермәҫкә тырышһа ла, һаман шулай аҡһаҡлап-туҡһаҡлап килеп ҡултыҡланы ла алды Сәлимде:

– Пойдешь... дамой... око мне... – тине, урыҫ телен вата-емерә.

Тимәк, ул өйөнә ҡәҙәр оҙатып ҡуйыуҙы үтенә. Ҡайтып китеүе аяғы ауыртҡаны өсөндөр. Ризалашмай хәле юҡ ине Сәлимдең. Тик быға Ғәлинур ҡаршы төштө. Ситкәрәк саҡырып алды ла үҙенсә нотоҡ уҡырға кереште.

– Старшина!.. Яңылышаһың... Ул, бәлки, берәй шпионкалыр... Әллә ҡайҙа алып китеп, әллә кемдәр ҡулынан харап иттереүе бар бит... Һуғышта үлмәгәнде... Инде хәҙер...

Ғәлинур ысын йөрәктән, уның яҙмышы өсөн борсолоп һөйләй ине. Әммә тауыҡты йомортҡа өйрәткәндәйерәк тойолдо был. Иң кесе командир ғына булһа ла, Башҡортостандың Таутөмәненән башлап, фронттың бөтә ҡанлы ҡырында Ғәлинурҙы «тәрбиәләгән» кеше бит Сәлим. Бөтәһен дә тыңлай башлаһаң, көслө елдә шартлап һынған ағас ботағы хәлендә ҡалырға, характерыңда инабатһыҙлыҡ күрһәтергә мөмкинһең. Барҙың эше фарман менән, юҡтың эше дарман менән, тигәндәй, ул үҙ фекерен хәрби фарман шикеллерәк итеп әйтте:

– Ултырып ҡына тороғоҙ… Бер ҡайҙа ла китмәйһегеҙ… Мин тиҙ генә әйләнеп киләм…

Улар сығып киткәс, танса яңынан ҡеүәтләнеп китте. Музыка. Моң. Әллә ниндәй нескә моң. Йөҙкә килтерә торған моң. Оҡшамай был моң Ғәлинурға. Тансалары ла шул ташҡа үлсәйем генә. Рәсәй халҡы, ана, тансаға төшһә, дөбөр ҙә шатыр. Ә былар туҡ өйрәк һымаҡ ҡына һикерә. Шул фекерен әйтте лә Сергейға, бынан табан ялтыратырға өндәне:

– Киттек… Уф… Бер минут тормаҫ инем… Ҡоҫҡом килә башланы… Кәнис-мәнис нәкәнис…

Сергей ризалашманы.

– Командир әйткән закон беҙҙең өсөн…

Уларҙы ҡабат саҡырыусы булманы тансаға. Әллә күңелһеҙ ултырыуҙарын һиҙеп, әллә һәйбәтләберәк һыйларға теләп, хужа-мадъяр уларҙы бая асҡан ике шешә шарап янына саҡырҙы. Ултыртҡас, үҙегеҙ һалып эсегеҙ, тигәнде аңлатып, китеп барҙы. Берәр стакан төшөрөп алғас, Сергей Ғәлинурҙы юрамал ҡоторта башланы:

– Киттек, Ғәлинур. Бында бер ҡыҙыҡ та юҡ беҙҙең өсөн. Кәнис-мәнис нәкәнис…

Ғәлинур шарапҡа бармағы менән төрттө:

– Бынан да шәбе юҡ минең өсөн. Мадъяркалары суҡынып китһен… Боттары бер тин. Уларҙың һеләгәй ауыҙын Пирмөхәмәтов ялаһын ана. Эйәреп китте дурак бер һағыҙаҡҡа. Ете йыллыҡ һағыҙаҡ шикелле ҡылана алабарман ҡыҙ. Ата һағыҙаҡтарҙан тешләтергә алып киткәндер. Суртым беләме уны? Баш юҡ командирҙа. Быға саҡлы маҡтап йөрөгән булдыҡ. Аҡыллы, имеш…

– Һин тел тейҙермә әле командирға, кеше итте ул беҙҙе. Ундайҙар бик һирәк.

– Уныһы – факт.

– Ә фактан ҡасыу бик ҡыйын.

Ә танса дауам итә. Музыка. Моң.

***

«Һағыҙаҡ»тарҙың йорто әллә ни алыҫ булманы. Тик шул урам менән барып, һулға табан, ниндәйҙер ҡараңғы бер тар тыҡрыҡҡа боролғас, Сәлимдең күңеле шомланып китте. Ҡайҙа әйҙәй уны был «Һағыҙаҡ»? Етмәһә, әллә ниндәй соҡор-саҡырлы юл. Батып үлерлек. Атлаған һайын урам тарая, ҡараңғылыҡ ҡуйыра бара кеүек. Күҙгә төртһәләр ҙә, күренерлек түгел. Тыҡрыҡ, бер аҙ барғас, йәнә һулға боролдо. Уңға китһәң – уңырһың, һулға китһәң – туңырһың, ти. Ни эшләргә? Ошонда ҡалдырып китергәме? Ни бысағыма күнде ул ҡыҙҙың оҙатып ҡуйырға яһаған тәҡдименә?

Ҡыҙ туҡтап ҡалыуын килештермәне.

– Лушта, – тип ҡуйҙы. Был һүҙҙең урыҫсаһын эҙләп ҡарағайны, ләкин таба алманы ҡыҙ. «Ялҡау» тигәнде аңлата икән ул (быны Сәлим һуңынан белде). Ни генә булмаһын, ҡыҙҙы үҙе теләгән ергә алып барып еткермәйенсә, кире боролоп китмәҫкә уйланы. Сөнки егетлек ғорурлығы ла булырға тейеш бит әле. Ә бына ҡапҡаға барып еткәс ҡалдырып китһәң дә, гонаһ түгел. Ҡапҡаһы былай һәйбәт кенә һымаҡ. Ауылда бындайҙы «урыҫ ҡапҡа» тиҙәр. Ләкин кире китеп барырға һаман мөмкин түгел ине. Ысынында, һағыҙаҡ урынына йәбешкән уға ҡыҙ. Ихатаға үтмәҫкә теләүен һиҙенгәс, беләгенән оторо ҡыҫып тотоп, бәләкәй ҡапҡанан алып инде лә китте ихатаға.

Өйгә инделәр. Ҡыҙ ут ҡабыҙғас, үҙенең шаҡтай ҙур бүлмәлә икәнлеген аңланы Сәлим. «Һағыҙаҡ» уны сисендерергә тырышты. Шинелен, бүреген һалдырып

сөйгә элеп ҡуйҙы. Унан һуң эске ҡараңғы бүлмәгә алып кереп китте. Быныһы ниндәй ғәләмәт тағы ла? Һөйләшеп ултырыу өсөн шул бер бүлмә етмәйме уларға? Ә бүлмәләр күп икән. «Һағыҙаҡ» уны етәкләп йөрөтә. Инеү менән һәр бүлмәгә ут ҡабыҙа. Барлығы биш бүлмә булып сыҡты. Тимәк, бай кешеләр йәшәй бында. Ул инде хәҙер быны башҡа илдәрҙеке менән дә сағыштырып белә ала. Польшала, мәҫәлән, Украиналағы кеүек, күберәк утҡа сыҙамлы балсыҡтан эшләнгән ер иҙәнле бәләкәй йорттар. Улар тыштан ағартылған булыр. Молдавияла, Румынияла ла йорттар шул сифаттараҡтар. Чехославакияла башҡасараҡ. Германиялағы ауылдарҙа ла өйҙәр күберәк ике ҡатлы. Шулай ҙа бүлмәләр бик тар, ҡыҫан. Сөнки йорт һала торған аҫыл ағастар өҫтөңә ауырға тормай был яҡтарҙа. Ер етмәгәнлектән, ҡалала ла, ауылдарҙа ла урамдар бик тар. Шуға күрә уларҙың, Рәсәй халҡыныҡы менән сағыштырып ҡарағанда, күңелдәре лә ҡыҫаныраҡ кеүек тойола. Мәгәр улар хәллерәк йәшәй. Был һәр тиндең генә түгел, һәр тоҙ бөртөгөнөң ҡәҙерен белеп йәшәүҙән киләлер. Улар «Байлыҡтың ҡәҙере – йомартлыҡ менән», – тигәнде белмәйҙәр. Быларға байлыҡ күберәк һаранлыҡтар аша килә.

Шул хаҡта уйланды Сәлим. Уның уйҙарын алдына килеп баҫҡан «Һағыҙаҡ» бүлде. Юҡ, һағыҙаҡ түгел был. Кем был? Тутыйғош? Сәмреғош? Һандуғас? Бөтә ҡоштарҙағы аҫыл сифаттар йыйылмаһы барҙыр унда: тутыйғоштағы барлыҡ гүзәл төҫтәр, сәмреғоштағы кешеләргә ауырлыҡта ярҙам итә торған мөрәүәтлелек, һандуғастағы матур, моңло тауыш. Өҫтөндәге биҙәкле күлдәк оҡшата уны тутыйғошҡа. Үҙе ул аҡ сибәр. Был осраҡта ла ул сағыштырыуҙар донъяһына инеп китте. Полячкалар сибәр, уныһы раҫ. Чех ҡыҙҙары ла матур. Немкалар ул тиклем түгел. Румыния ҡыҙҙары «цыганка»ларға тартым. Молдаванкаларҙа, мадъяркаларҙа башҡорт ҡыҙҙары төҫө бар. Ә был ҡылтымҡай шуларҙың бөтәһенә ҡарағанда ла үҙгәрәк. Әллә мадъярка түгелме һуң был? Уның ҙур, сихырлы, серле, уйнаҡлап торған йәшкелт күҙҙәре шулай уйларға мәжбүр итә. Алһыу ирендәр. Ынйылай тештәр. Ғәлибәнә матур йылмайыу. Юҡ, матур ғына түгел уның йылмайыуы. Ул йылмайыуҙа кешене яратыу, яҡын күреү, ихласлыҡ, илаһилыҡ, миһырбанлыҡ, шәфҡәтлелек… Тағы ла әллә ниҙәр бар төҫлө. Ошоларға оҡшаш һанап бөткөһөҙ күркәм сифаттар сәмреғошта ла бар бит. Ә инде тауышы уның һандуғас һайрауын хәтерләтә. Буйы уның уртасанан юғарыраҡ. Нескә биле өҙөлөп китер һымаҡ. Кәүҙәһе, сиған ҡыҙҙарыныҡы шикелле бөгөлөп-һығылып тора. Тансала ҡосағына инеп йомолғас, хатта зиһене китте Сәлимдең. Аяғына баҫыуы ла шул ҡапыл ныйылдыҡланып китеү касафатылыр әле.

Бына улар икәүһе генә. Икәүһенә биш бүлмә. Һәр берейһендә карауат. Өҫтәл. Ә ғаиләнең башҡа ағзалары ҡайҙа? Байрамдалыр. Мадъярҙар төнө буйы байрам итә икән. Иртәнгә саҡлы. Йоҡламайынса. Был хаҡта белеп алғайны инде Сәлим. Тимәк, ул аяғы ауыртҡанға ғына китмәгән байрамды ташлап. Ул Сәлимде беренсе күреүҙә үк яратҡан. Мөхәббәт тилерткән уны. Мөхәббәт бөтәһенән дә бөйөк. Ул, сәмреғоштай осоп, кешегә бер генә килә. Тотоп алдың – һин бәхетле. Ысҡындырҙың – һин бәхетһеҙ. Мөхәббәтле тормош – бәхетле тормош. Мөхәббәтһеҙ тормош – бәхетһеҙ тормош. Ә бит һәр кемдең бәхетле булғыһы килә. Ғүмер бик ҡыҫҡа. Бер тотам. Ҡан-йән тартҡан кешең менән бер һөйөшөү – үҙе бер ғүмер. Һөй уны, Сәлим! Һөй! Ярат!

Сәлим уның ҡулдарынан алды. Аһ, был ҡулдар! Йомшаҡ. Нәфис. Ҡайнар. Был ҡайнарлыҡ, шундуҡ уның ҡан тамырҙарына күсте. Ҡайнар ҡан ҡайнар мөхәббәтте «һә» тигәнсе ҡайнар йөрәккә еткерҙе. Ҡайнар ҡулын ғына түгел, күкрәгенә ҡапланып, бөтә ҡайнар кәүҙәһен уның ихтыярына тапшырғас, Сәлим уны ҡыҫып ҡосаҡланы ла мамыҡтай күпереп торған йомшаҡ сәстәренән,

ҡайнар маңлайынан, ҡайнар күҙ төптәренән, ҡайнар бит остарынан шашып-шашып үбергә кереште. Ә инде ҡыҙ ҡайнарирендәре менән уның ҡайнарирендәрен һура башлағас, Сәлим бөтөнләй ғәжиз булды. Бынығы ни була тағы? Ауыҙ менән үбешеүҙе белмәй ине ул. Быны һиҙгәс, әйтеп ҡуйҙы ҡыҙ:

– Ты не знаешь…

Нимәне белмәгәнен аңламаны Сәлим. Ә инде ҡыҙ, тамам шашынып, ҡайнар ирендәрен генә түгел, ҡайнар телен дә уның ҡайнар ауыҙына юллағас, Сәлим ысын һөйөшөүҙең асылын аңлап алып, үҙенең дә ҡайнар телен «эшкә ҡушты». Оҙаҡ ҡына һурышҡас, аяҡтар аяҡҡа салышып, ике кәүҙә бер-береһенә керешеп һеңеште. Сәлим шунда сабыр һауытының шартлап ярылыуын һиҙҙе. Ярыҡтан һалҡын шыр ҡойолоп бөткәс, ҡыҙҙы күтәреп алып, карауатҡа килтереп һалды. Мөхәббәт кульминацион юғарылыҡҡа тамам еткәндә, ҡыҙ, уның аҫтынан ялт сығып, ҡыр кәзәһеләй һикергеләп, бармаҡ менән янаны:

– Так нэльзя… Рыцарь!

«Так нэльзя»нан  һуң, ҡулынан йомшаҡ ҡына тотоп, ҡәнәфигә алып барып ултыртты Сәлимде ҡыҙ. Егеттең ярһыуы йәш тайҙыҡынан һис тә кәм түгел әле. Һуғыш бөткәндә уға егерме йәш ярым ине. Хәҙер егерме бер ярым менән бара. Бер ҡараһаң, «йәш тай» осоро үткән инде хәҙер. Икенселәй уйлаһаң, армияға алынғанда ун һигеҙ ҙә тулмаған ине әле. Һуғышҡа киткәнсе ҡыҙҙар ләззәтен, мөхәббәт илаһилығын татыған егет түгел. Улар яғында «ҡуныу» ғәҙәте бар ине. Унығы 13-14 йәштәрҙә үк башлана. Ҡыҙ менән егет, ҡолаҡты ҡолаҡҡа ҡуйышып, икәүһе генә бер бүлмәлә йән рәхәте татый-татый, алағайым ҡосаҡлашып ятырға мөмкин. Мәгәр егет намыҫын, ҡыҙ ғиффәтлелеген һаҡларға тейеш. Аулаҡ өйҙә дүрт-биш пар ҡосаҡлашып ята. Һәр парҙың үҙ донъяһы: башҡалар ишетмәҫлек итеп, ҡолаҡты ҡолаҡҡа ҡуйған хәлдә, быш-быш һөйләшеп ята, бер-береһенең эсәк-бауырына инеп китерҙәй булып ҡыҫыша, аяҡтар ҙа салыш-солош, ҡыҫҡаһы, ҡайнар һөйөшөүҙең бөтә төрө, ләззәте, һуты рөхсәт ителә. Йәш тай, билдәле, бындай хозурлыҡ ялҡынында  уҫал айғырға әүерелә. Тик уға айғырланырға ярамай. Яҙылмаған ҡанун ҡушмай. Әгәр айғырланған йәш тайҙың нәфсеһе беләк буйы икәнлекте  белһәләр, ауылда уны бер ҡыҙ ҙа ҡуна керетмәй. Йәштәр намыҫы ана шулай һынала. Бынығы бөтәһе өсөн дә уртаҡ ҡанун. Халыҡ тыйыуы. Яҙылмаған ғәҙәт. Ҡосаҡлашып ятҡанда кеше ныҡ һынала. Сөнки һөйөшөүгә икәүҙең тән хәрәкәте генә түгел, бөтә аң-аҡылы, рухы, хис-тойғоһо, һүҙ сәнғәте, быш-быштан сыҡҡан йәшерен өн-ауаз тәме… – бөтәһе лә, һәммәһе лә ҡатнаша. Әгәр ошо ысулдар һәм шуларға оҡшаш башҡа сифаттар бер-береһенең йөрәгенә имандай ҡабул ителһә, был инде мөхәббәттең бөйөк илаһилығына әүерелә. Бындай парҙар бәхетле, улар инде хәҙер башҡа кеше менән ҡунмай. Быларҙың  сәстәре бәхет сылбыры булып бәйләнә. Мәңгелеккә. Улар мөхәббәт хиссиәтенән йәм таба, тормош ағышынан йәм таба.

Һәр кемдең зауығы үҙенә күрә тигәндәй, Сәлим «ҡуныу»ҙан бер ҡасан да ләззәт таба алманы.  Ауылдың шаҡтай абруйлы, алтын ҡуллы, тотанаҡлы ҡыҙы – Ғәлиә менән ҡунғанда һүҙ таба алмайынса ыҙа сикте. Икенсеһе, Сәүиә, артыҡ таҡылдыҡ булып сыҡты. Йыйын юҡ-барҙы лығырҙай ҙа ята. Өсөнсөһө, Фазила, терпе шикелле йомарланды ла ятты. Ҡосағын да асмай. Ҡыҙҙар бер ел иҫкәндә ете төрлөгә әүерелә, тигәнде ишеткәне бар ине уның. Был үҙенсәлек ҡунғанда тиҙ беленә. Ҡуныу, мәгәр, башҡа мосолман халыҡтарҙа юҡ, буғай. Сәлим йәшәгән яҡтарҙа ниндәй ҙә булһа бер этник төркөмдөң сал тарихтан килгән ғөрөф-ғәҙәтелер был. Нисек кенә булмаһын, ҡуныуҙың әрәсәһенә төшөнә алманы ул. Тал ҡом ярата, уҫаҡ дым ярата, ти, сит тынды ул ниңәлер яратманы. Бер ҡыҙҙың да бит осонан үпмәне. Ә күңел тартҡан ҡыҙы Мәрйәм Мәхмүт исемле икенсе бер

егет менән йөрөй ине. Ҡыҙҙар менән ҡуныуҙың бөтә шартын килтерә алыр ине, бәлким, тик Мәрйәм ҡуйынына бер генә мәртәбә булһа ла сумырға Хоҙай насип итмәне. Уның һәр ваҡыт ҡыҙарып торған ике бит осонан «әп» итмәйенсә ҡалмаҫ ине шәт. Инде ауыҙ менән үбешеүҙе уның ишеткәне юҡ ине. Күрәһең, улар яғында булмаған ул. Булһа, ишетмәй ҡалмаҫ ине. Ә бына был ҡылтымҡай «Һағыҙаҡ» шуның бер классик үрнәк өлгөһөн күрһәтте. Хоҙайым! Тормоштоң ошондай бер бәхетле-сәғәҙәтле минуттары ла бар икән. Ҡабатланырмы был берәр ваҡыт тағы ла?

Ә хәҙергә?.. Ул, ҡәнәфиҙән ялт һикереп тороп, йәнә ҡыҙға ташланмаҡсы булды. Әммә ҡыҙ, ярамай тигәнде аңлатып, ике усын уға ҡаршы ҡуйҙы. Ултырырға ҡушты. Үҙе лә уның янына барып һырышты. Бер талай һүҙһеҙ торғас, ҡыҙ уның исемен һораны. Бындай саҡта мосолман егеттәре урыҫ исемен әйтеүсән. Иллә-мәгәр Пирмөхәмәтовтың ундай ғәҙәте юҡ. Башҡа исемде әйткән кешене ҡабығын алыштырған йыланға тиңләй ул. Шуға күрә был юлы ла үҙенекен сатнатып әйтте:

– Салим!

Уның исемен «Сэлим», «Сэлим», «Сэлим» тип өс мәртәбә ҡабатланы ла, оҙаҡ ҡына уйланып торғас:

– Арабски слова, – тип ҡуйҙы. Йәнә мәғәнәһен дә әйтте: – «Здоровый», «йа», «йа», «карошо», «карошо!» Но ни тулка эта… есть и другой…

Эйе, «сәлим»дең ғәрәп һүҙе икәнлеген, уның мәғәнәһен аңлатырға тырышты ҡыҙ. Уның бер нисә мәғәнәһе бар: «сәләмәт», «иҫән-һау», «тура», «төҙөк», «ысын, «саф». Ошоларҙың бөтәһен дә әйтергә тырышҡайны ҡыҙ. Әммә уға урыҫса һүҙ табыуы ҡыйын ине. Әллә ғәрәп, башҡорт, татар, башҡа төрки телдәр менән яҡынлығы бармы һуң был мадъяр теленең? Клубта «өҫтәл», «алма» кеүек һүҙҙәрҙе лә әйттеләр бит. Хәҙер «Сәлим» тигән исемдең «эсәк-бауырын» аҡтарып маташа. Был ҡыҙ әллә шуның буйынса уҡыймы? Их, һорарға! Их, белергә! Телең булмағас, ултыраһың инде туң тимерҙәй ҡуҡырайып. Үҙенекен һорағас:

– Гизелла, – тине ҡыҙ.

Сәлим исемде өс тапҡыр ҡабатланы:

– Гизелла, Гизелла, Гизелла…

Шуның менән уларҙың һүҙ һауытының ҡапҡасы ябылды. Сәлим сәғәтенә ҡарап алды – уға китергә ваҡыт. Шуны аңлатып шинеленә үрелгәйне, Гизелла ла тиҙ генә пальтоһын кейеп алды. Айырылышыу вә үбешеү икеһененң дә ниәтмаҡсаттар ҡуйышыуы менән тамамланды: улар бер-береһенең телдәрен өйрәнергә, бының өсөн көн дә күрешергә һүҙ ҡуйышты.

## VII

Тышта яҡтырып килә инде. Гизелла үҙен оҙатырға ғына сыҡҡандыр, тип уйлағайны Сәлим, әммә ул клубҡа йәнә барасағын белдерҙе. Сәлим ҡарышманы.

Клубта уларҙы күңелһеҙ хәл ҡаршыланы – Ғәлинур иҫергәйне. Ултырған урынында бөгөлөп төшкән. Йығылып китмәһен өсөн Сергей уны тотоп тора, тик Сергейҙың да күҙҙәре шараптан тонғанлығын самаланы Пирмөхәмәтов. Ышан быларға! Еңеүсе һалдаттарға.

Сикте үтеп ингәс, Берлинда һәм башҡа урындарҙа хәлһеҙләнгән немецтарға махсус туҡландырыу ойошторолдо. Был Совет Армияһының ҙур кешелеклелеге ине. Әммә тора-бара был кешелеклелеккә үҙе үк ҡара ҡором яға башланы беҙҙекеләр. Ҡыҙ көсләүҙәр ҙә булманы түгел. Дөрөҫ, мөртәттәрҙе шундуҡ өс йылға ултырттылар. Ваҡ-төйәк урлашыу менән дә данын һатты беҙҙең һалдат. Әйтәйек, берәү магазинға велосипед менән килә. Килеп еткәс, ҡалдыра ла эскә

уҙа. Сыҡһа – велосипед юҡ. Атланған да сапҡан кемдер. Эсеүҙең дә ҡымын ҡуйманылар. Фашизмды еңгән Совет халҡының дөйөм кешелеклелек сифатын ана шундай ваҡ-төйәк шалопайҙар төшөрә. Бер тамсы дегет бер силәк һөттө боҙа шул. Сит ил кешеләре байрамына дегет булып тамған Ғәлинурҙың иҫереүе. Шул: «Бөкрөнө ҡәбер генә төҙәтә», – тигәндәре дөрөҫтөр. Сәлим, гәрсә эсендә асыу уты дөрләп янһа ла, уны һиҙҙермәҫкә, һалҡын ҡанлы булырға тырышып, Ғәлинурҙы һөйрәп-һөйрәкләп тигәндәй алып сығып китте.

…Ғәскәри частар ятағын «казарма» тип атанылар. Бында, әйткәндәй, көнө-төнө эш ҡайнай. Башта үҙҙәре өсөн айырым бер бүлмә таҙартылды; ашау-эсеү, ҡунуы-төнәү, буш ваҡытта гәзит-мәзит уҡыу, кәрт уйнау, фәлсәфә һатыу, хат яҙыу… – бөтәһе лә ошонда. Ашау – ҡорҙо-морҙо. Йоҡлау – һалдатса: аҫҡа ла, өҫкә лә бер шинель… Ике дәрүиш бер балаҫҡа һыйыр, тигәндәй, йылы булһын өсөн ҡосаҡлашып йоҡлаусылар ҙа бар. Өлкән лейтенантты фронтта юҡҡа ғына разведка взводы командиры итеп ҡуймағандар икән. Балта, бысҡы, сүкеш кеүек эш ҡоралдарын да ҡайҙандыр табып килтертә. Ҡуша ла, эшләтә лә белә. Етеҙ. Бер баҫаһы урынға биш баҫып тора. Ҡыҫҡаһы, ут бөрсәһе инде бына. Үҙе бик ҡыҙыу, бәғзе бер саҡ былдыр-былдыр һөйләй. Мәгәр ҡабатларға, ишетмәһәң, бер һүҙҙе ике әйтергә яратмай. Һораһаң, йылмайып ҡына ҡуя: кәбәкбаш, аңрағош тип уйлайҙыр, бәлки. Һалдат менән бергә ашап, бергә йоҡлап йөрөһә лә, артыҡ ябай булһа ла, бик талапсан мәгәр. Кемдеңдер болоҡһоп, танау соҡоп торғанын күрһә: «Мең ҡайғынан бер эш яҡшы», – тип үҙе керешә. Көс түгеп түгел, йөрәк менән, бик һәләт эшләй ул. Яратып. Илһамланып. Һол менән. Бөтәһенә лә ҡулы килешеп тора. Кем белә, һуғышҡа тиклем балта оҫтаһы булып, матур-матур йорттар төҙөп йөрөгәндер, бәлки. Уның ярҙамсыһы гвардия старшинаһы Сәлим Пирмөхәмәтов та байтаҡ эшкә һәүәҫ булып сыҡты. Фронтҡа киткәнсе (Алкинда һәм Таутөмәндә), кесе командир булараҡ, һалдаттарҙы хәрби хеҙмәткә иң әүәл ул өйрәтте. Башта өлгө-үрнәген үҙе күрһәтә. Унан һуң:

– Мин нисек эшләһәм, һеҙ ҙә шулай эшләгеҙ, – тип талап итә. Балта оҫтаһы булыу кеүек сетерекле эштең әрәсәһен белеү яғынан да һәләт кеше булып сыҡты. Бер көн:

– Ҡулыңда балта уйнап тора, ҡайҙа, ҡасан өйрәндең һуң әле һин был эшкә? – тип һораны ла, яратып, уның арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы өлкән лейтенант.

Сәлим бер һүҙ менән генә яуап бирҙе:

– Һеҙҙән!

Уныһы ла барҙыр, бәлки. Әммә улай ғына ла түгел. Башҡортостандан төньяҡта Сиров тигән бер ҡала бар. Унан өс саҡрым самаһы – Ҡола-Уральская тигән станция. Шунда һөнәрселек мәктәбендә уҡыны Сәлим. Уны ФЗО тип тә йөрөттөләр (фабрико-заводское обучение). Уны бөтөрһәң, имеш, ҙур инженер булаһың. Әммә алдағандар быларҙы. Әлеге станцияла завод та, фабрика ла юҡ. Тимер юл һалырға килтергәндәр былар ҙы. Тормош урындары – һалҡын бараҡтар. Эш буйынса улар өскә бүленде: тимер юлсы, ер ҡаҙыусы, балта оҫтаһы. Сәлим һуңғыһына эләкте. Быға бик шат ине ул. Әлеге ир-ат абруйын күтәрә торған етмеш һөнәрҙең береһе бит был! Был хаҡта уның һалдаттарға һөйләгәне юҡ. Әгәр һораһалар, әйтеп бирер ине. Һатып алған тел түгел. Ә үҙе был хаҡта гәп ҡуҙғатһа, маҡтаныу булыр һымаҡ. Маҡтаныуҙың ир-егет асылын биҙәмәгәнлеген белмәйме ни ул. Башыңа төшһә, башмаҡсы булырһың, ти. Ярай әле теге ваҡытта шундай ауыр эш төшкән уның башына. Өйрәнде. Егетлек күрһәтте. Уларҙың ауылда үҙ өйҙәре лә юҡ бит әле. Ҡайтҡас, батша һарайыныҡы шикелле үк булмаһа ла, бынамын тигән йорт һаласаҡ.

Бында уға хеҙмәт олпатлығы күрһәтеү айырыуса кәрәк. Хеҙмәт һөйгәнде генә хөрмәт итә өлкән лейтенант. Был осраҡта уның хөрмәте – Гизелла янына барыу өсөн. Ҡыҙ менән булған «мөхәббәт романы» хаҡында бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе ул. Йәшермәне. Сөнки алдағандарҙы Трапезниковтың ене һөймәй. Былай асыҡ йөҙлө булһа ла, уның ҡылыҡ-фиғелен һис тә аңлап бөтөрөп булмай. Офицер шулай булырға тейештер ҙә. Ниңә әле ул һәр һалдатҡа күңел көҙгөһөн асып күрһәтһен. Әгәр Сәлим дөрөҫөн әйтмәһә, уны ебәрмәйәсәк ҡыҙ янына. Ә Сәлим алдаша белмәй. Алдашһа, барыбер тотоласаҡ. Ә тотолһа, «мөхәббәт юлы» ҡырт киҫеләсәк. Ҡыҙ менән уның араһына ҡара һыҙат ятасаҡ. Алапай-шалопайлыҡ күрһәтһәң дә, ебәрмәйәсәк.

Өлкән лейтенант уға рөхсәт бирҙе биреүен, ләкин алъюҫыҡҡа күңелен дә төшөрҙө:

– Ҡара уны, старшина, һаҡ бул, улай-былай насар сиргә юлыҡма!

– Ул саф ҡыҙ, иптәш өлкән лейтенант!

– Сафлыҡта ла тап бар.

– Аңлайым.

– Аңлап алдана күптәр.

Гизелла янына көн дә барҙы Сәлим. Кистәрен унда була. Ремонт өсөн ниҙер етмәгәнлектән, эшһеҙ торған саҡтары ла бар. Был саҡтар – Сәлим өсөн мөхәббәт байрамы. Ҡыҙҙың атаһы, илле йәштәр самаһындағы мадъяр, ҡарап тороуға былай мөләйем генә. Уны ҡара сибәрҙәр рәтенә кертергә мөмкиндер. Әсәһе ҡырҡ йәштәрҙә булыр. Ул аҡһылыраҡ сырайлы. Мәгәр икеһе лә асыҡ йөҙлө, күркәм сифатлы, зыялы кешеләр тип әйтергә була. Утыҙ йәштәр самаһындағы бер ағаһы ла бар икән. Ул төҫ яғынан атаһына, ә Гизелла әсәһенә оҡшаған. Һәр килгәндә Сәлимде уларҙың асыҡ йөҙө, күтәренке рухы, мөләйем ҡараштары ҡаршылай. Мәгәр йәштәрҙең мөхәббәт донъяһына уларҙың ҡыҫылышы юҡ. Барҙыр, бәлки. Сәлим уны тоймай ғыналыр. Нисек кенә булмаһын, уларҙың үҙ эше, үҙ мәшәҡәттәре, үҙ соҡсоноуҙары. Сәлим килеп инһә, ҡайҙалыр юҡ булалар. Гизелла бүлмәһендә улар икеһе генә ҡала. Бында мөхәббәт романына икенсе бер ялҡын – рухи хеҙмәт ялҡыны килеп өҫтәлде: Сәлим мадъярса уҡырға, яҙырға, һөйләргә өйрәнә. Ихлас күңелдән. Мөкиббән китеп. Ваҡыт-ваҡыт бер һүҙҙе унар ҡабат әйттертә. Һаман да килеп сыҡмаһа, Гизелланың төҫө боҙола. Унан һуң йәнә ҡабатлатырға тотона. Һүҙ уның күңеленә ятырҙай әйтелһә, «йа», «йа», «йа» тип ҡуя. Бындай ваҡытта Сәлим үҙен крепость алған һалдаттай тоя.

Мадъяр телен тиҙ өйрәнде егет. Бының беренсе сәбәбе, моғайын, Гизелла үҙе. Ҡыҙ бик талапсан ҡылана. Ысын уҡытыусылар кеүек. Икенсе сәбәбе, бәлки, Сәлимдең үҙендәлер. Польша, Румыния, Молдавия, Чехославакия, Германия ерҙәрендә булғанда, кешеләрҙең һөйләшеүенә ҡолаҡ һалып: «Их, фекер алышырға ине шулар менән», – тип үрһәләнеп ҡуя торғайны. Был теләктәре фәрештәнең «амин» тигән сағына тура килгәндер, моғайын. Ул бәхетле: Хоҙай Тәғәлә уны фәрештәнең үҙе менән осраштырҙы – мөхәббәтен генә түгел, бөтә рухи донъяһын бүләк итә. Сәбәпһеҙ сәғәт тә йөрөмәй. Сәбәпһеҙ йөрәк тә типмәй. Әммә ике йөрәк тибешенең бер бөтөнгә әүерелеп китеүе – бик һирәк осраҡ. Гизелла Сәлимдең һәр уңышы өсөн ҡул саба, матур тәтәй тапҡан балалай шатлана, һикереп-һикереп ҡуя хатта, унан һуң, нәфис болан балаһылай ҡуйынына йомолоп, ҡайнар ирендәре менән уның һушын ала.

Йәнә бер сәбәп. 1939 йылда Сәлим етенсе синыфты латин графикаһы менән тамамланы. Бында ла шул уҡ таныш өндәр, таныш хәрефтәр. Тағы… Уларҙың телдәре төрки телдәргә яҡын икән. Уртаҡ һүҙҙәр ҙә бик күп. Бер ваҡыт тарихсы-

философ ефрейтор Ниғмәтуллин да һөйләгәйне. Бишенсе быуат урталарында Аттила тигән полководец Арал һәм Иҙел буйҙарында йәшәгән төрки халыҡтарҙан ҙур ғәскәр туплап, бөтә Көнбайыш Аурупаны баҫып ала. Ике урында үҙ урҙаһын булдыра. Беренсеһе – хәҙерге Әзербайжан, икенсеһе ошо Венгрия ерендә. Венгрҙар башта, етенсе быуаттарҙа, Урал буйҙарында йәшәй. Унан һуң Көнбайыш Аурупаға күсеп, бына ошо урындарға килеп яйлашалар, буғай. Тимәк, был урында венгр һәм төрки телдәр аралашып киткән. Йүкәлә икән сәтләүек, тигәндәй, төрки һүҙҙәрҙең мадъярҙарҙа күп булыу ғилләһе ана ниндәй тарихи серлектәр доньяһындалыр.

Әлбиттә, «өйрәндек» тип ауыҙ тултырып әйтеү килешмәҫ кеүек. Элек, мәҫәлән, ауыл егеттәре ситкә сығып китә торғайны. Гәрсә урыҫса бер һүҙ белмәһә лә, улар араһына барып эшкә керә. Икмәк-тоҙ һорап алалмаған «зимагур», бер ай тигәндә, ватып-емереп булһа ла, урыҫса «һупалай» башлай. Ике-өс ай эсендә инде, теге йәки был кимәлдә урыҫ менән арыу ғына фекер ҙә алыша. Әгәр асыуын килтерһә, урыҫтың үҙ теле менән уны һүгеп ташларға ла күп һорамай. Ул ваҡытта, урыҫ телен белмәгәнлектән, башҡорт, татар егеттәренә ҡарата сығарылған күп мәҙәктәрҙе лә белә Сәлим.

Иҫә елдәр, аға һыуҙар, үтә көндәр, айҙар… Һалдат казармаһы ла эшләнеп бөттө. Чехославакиянан 469-сы Башҡорт полкы тулыһынса күсенеп килде. Яҡшы казарма әҙерләнгән өсөн гвардия өлкән лейтенанты Трапезниковҡа, уның ярҙамсыһы гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтовҡа полк командиры рәхмәт әйтте.

VIII

Бер төрлө эш һалдаттарҙы шаҡтай биҙрәткәйне. Хеҙмәт, бер уйлаһаң, ашамлыҡ кеүегерәк икән – алмаштырып тороуҙы ярата. Һалдат хеҙмәте лә шуға көйләнгән бит. Бер көн эсендә әллә ниҙәр эшләп ташлай ул: гимнастика, спорт, сәйәси уҡыу, устав, партия тарихын өйрәнеү, сит ил хәбәрҙәре менән танышыу, төрлө килбәтһеҙ әңгәмә – тағы ла әллә ниҙәр. Шулар булмаһа, һалдат килбәтһеҙ, ибәтәйһеҙ, ялҡау бер кешегә әүерелә. Тик торһа, уның нәфсеһе лә һимерә башлай. Хәрәкәт! Хәрәкәт!! Хәрәкәт!!! Шул саҡта ғына һалдат, энә күҙенән үткәрелгәндәй, матур мөсәле була.

Полк килеп төшкәс, әлеге казарма ғына түгел, бөтә Татабанья поселогы йәнләнеп китте. Офицерҙарҙы фатирҙарға тараттылар. Улар хәҙер, арттырып әйтһәк, господаларса йәшәй. Ашау яҡшы. Кейем бөхтә. Күңел көр. Һуғыш уты бында ла ирҙәрҙе аҙ көйҙөрмәгән. Беҙҙең офицерҙар урамдан ғәскәри ҡиәфәттә тып-тып баҫып үткәндә, дәртле мадъяркаларҙың бәғере шашыр сиккә етеп дауыллана. Әллә шуны һиҙмәй тип беләһеңме офицерҙың йөрәге? Һиҙә. Һиҙеү генә түгел, үҙен мыҡты крапҡа шутлап, шул дауылға сума. Һалдатты казарма ҡомағы булып ятыу ҙа биҙрәтә. Гәрсә сығырға рөхсәт итмәһәләр ҙә, ҡомаҡтан дәррәү төлкөгә әүерелеп, мадъяркаларҙың йомшаҡ ерҙәрен тотҡолап ҡына булһа ла ҡайтыу хәйләһен тапмай ҡалмай ул.

Мадъяркалар, офицер «ҡармағына эләгергә» ымһынып, төндә лә сыж да выж йөрөүсән. Һалдатҡа көндөҙ гулять-мулять тыйыла. Яйын тура килтереп, төндә сығып китә. Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Ҡараңғыла мадъярка һалдатмы, офицермы икәнлеген белмәй. Ҡараңғыла үбешкәндә, офицермы-түгелме икәнлеген белеү өсөн, кавалерына һиҙҙермәйенсә генә, ҡулы менән погонын һыпырып ҡарай. Бармаҡ осона йондоҙ тейһә, ул офицер, тимәк. Улай түгел икән – йә һалдат, йә ефрейтор, йә сержант. Һалдатты ул – ҡара икмәккә, офицерҙы – аҡ икмәккә һанай.

Гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтов мадъяр телен өйрәнеүҙе дауам итте.

Бының өсөн башҡа мөмкинлектәр ҙә йылмайып ҡарай уға. Курскиҙың утлы дуғаһынан башлап фронт юлын бергә үткән взвод командиры өлкән лейтенант Әмин Харисов казарманан әллә ни алыҫ булмаған өс бүлмәле фатирға инде. Хужа һәм хужабикә һүҙсән, яғымлы кешеләр булып сыҡты. Унда йыш булырға тырыша Сәлим. Килеп инеү менән, вата-емерә булһа ла, юҡ һүҙҙе бар итеп, мадъярса таҡылдарға тотона. Ун йәшлек ҡыҙҙары, ун ике йәшлек улдары менән гәпләшеп ала. Икенсе взвод командиры лейтенант Мезенцевтың фатиры ла алыҫ түгел. Уның хужалары менән дә тел сарлап ала Сәлим. Поляк, чех, немец халҡы менән сағыштырып ҡараһаң, мадъярҙарҙа тышҡы үҙенсәлек бар. Улар күберәк төрки халыҡтарға оҡшап тора. Эске оҡшашлыҡтар ҙа юҡ түгел. Улар, төрки халыҡтар кеүек, бер ҡатлыраҡ, ябайыраҡ. Төрки халыҡтарға яҡынлығы аш-һыу әҙерләүҙә, тормош-көнкүрештә, рухи хазинаһында, сәнғәт-мәҙәниәтендә һәм башҡа сифаттарында теге йәки был кимәлдә һиҙелеп-сағылып ҡала. Офицерҙар Сәлимде, бик кәрәк булғанда, тәржемәсе сифатында ла йөрөтә башланы. Иркен, теүәл һөйләшә белмәһә лә, ике яҡтың да фекерен бер-береһенә еткермәйенсә ҡалмай. Тышҡы күренештәренең дә башҡорт, татар халҡына оҡшауын, Сәлимдең мадъярса «һупайлап» йөрөүен иҫкә алып, урыҫтар венгрҙарҙы төркиҙәр ғаиләһенә индерҙеләр ҙә ҡуйҙылар. Харисов та ошо фекерҙе яҡлай.

Сәлимдән өлгө алып, хужаһы һәм хужабикәһенән ул да мадъяр телен өйрәнә башланы. Уртаҡ һүҙҙәр күп булғаны өсөн генә түгел, төрки халҡына мадъяр теле серҙәре еңел бирелә. Ысынында, был ерҙәрҙәге боронғо ата-бабаларыбыҙҙың көрәш ҡаны һеңгән бит. Уларҙың нәҫел-нәсәбе, рухы, илаһиәте ҡалған был ерҙә. Беҙҙең эраның баштарында уҡ боронғо чин (ҡытай) сиктәренән Рум империяһынаса ерҙәрҙе әллә нисә быуаттар буйы төркиҙәр үҙ ҡулдарында тотҡан бит.

Быны башҡа милләттәр белмәй. Улар тарихты боҙоп күрһәтә. Был хаҡта философ ефрейтор Ниғмәтуллин да, Мулла бабай ҙа һөйләгәйне. Быларҙың бөтәһе лә Сәлимдең күңел һандығына һеңгән. Уның хәтере, Хоҙайға шөкөр, һәйбәт: бер белгәнде онотмай. Тик… Мадъяркаларҙың һалдатҡа бер төрлө, офицерға икенсе төрлө мөхәббәт ялҡыны өләшеүҙәре генә оҡшамай Сәлимгә. Бер көн ашҡына-ашҡына барһа, ишек шаҡығас, Гизелла үҙе түгел, беренсе дивизион комиссары капитан Соколов күҙен бәзерәйтеп ҡаршыланы уны. Сәлим ҡаушап ҡалды. Комиссар уның янған йөрәгенә ялҡын ғына өҫтәне:

– Старшина Пирмөхәмәтов, һин аҙ ғына һуңлап килдең.

– Ваҡыт булманы, иптәш гвардия капитаны.

– Ваҡыт тураһында аҙаҡ һөйләшербеҙ. Ә хәҙергә китергә мөмкин.

– Тыңлайым, иптәш гвардия капитаны!

Ишек нәҡ старшина мороно төбөндә шапылдап ябылды.

Сәлим, башын түбән эйеп, китеп барҙы. Ҡапҡанан сыҡҡас шулай ҙа туҡтап ҡалды ул. Гизелла йүгереп килер ҙә, муйынына аҫылынып, һәр ваҡыттағыса сут-сут үбә башлар кеүек тойолдо. Ләкин… Хәҙер ул Гизелла өсөн – ҡара икмәк, комиссар уға – аҡ икмәк.

***

Берәү хөрмә һөйә, берәү һуғанға ғашиҡ, тигәндәй, Соколовты яратмағанлыҡтан «әсе торма» тип тә йөрөттөләр бер килке, ә һуғыштан һуң «тиле торма» тигәнде лә һағыҙлап ҡуйҙылар. Сәлимгә Советтар Союзы Геройы исеме бирергә булғас, уны кире ҡағып, бөтә йөрәге менән әсенеп йөрөнө һәм «әсе торма» икәнлеген шунда ғәләмәт «оҫта» күрһәтте. Әммә һүҙе аҫта ҡалғас, шартлап ярылырға

етешеп, ғәрләнеп йөрөнө. Бына хәҙер, ғорурлығын һаҡлаған хәлдә, шул аҫта ҡалған һүҙҙе өҫкә сығарырға тырышып, әтәсләнеп йөрөй. Тиле торма! Иң әүәл беренсе батарея командиры гвардия капитаны Исхаҡовҡа, унан һуң взвод командиры гвардия өлкән лейтенанты Харисовҡа барып әйткән. «Һеҙҙең батареяла тәртип юҡ, хәйер һорашҡан кеше шикелле, өйҙән өйгә инеп йөрөй һалдаттарығыҙ»,– тигән, миҫалға әлеге Пирмөхәмәтов менән булған хәлде әйткән. Шунан һуң батарея командирына ҡыҙ менән ниндәй шарттарҙа танышыуы, уны ныҡ яратыуы тураһында түкмәй-сәсмәй һөйләй Пирмөхәмәтов. Булған хәлде Харисовтан да йәшермәй. Ҡамалыуҙа ҡалғас, Пирмөхәмәтовтың ниндәй батырлыҡтар күрһәткәнлеген Харисов яҡшы белә. Шундағы ҡаһарманлығы өсөн генә лә Герой бирерлек ине уға.

Еңеү байрамын улар Германияның Дрезден ҡалаһында үткәрҙе. Ҡала ситендәрәк булған ниндәйҙер бер йәйге танса майҙаны янында. Батарея командиры, Сәлимде үҙ янына саҡырып, уның менән сәкәштереп эсте. Был – уның фронтта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн булған һуңғы ҙур рәхмәте ине. Бына шуға күрә лә ике командир ҙа Пирмөхәмәтовҡа ҡаты бәрелмәне. «Алдыңды, артыңды ҡарап йөрө» кеүегерәк кенә әйттеләр. Тырнаҡ араһынан кер эҙләп маташҡан Соколовтың хөсөтө йәнә аҫта ҡалды. Эсендәге әсе торма күпме генә ҡоторонмаһын, Сәлим өҫтөнә әллә ниндәй бысраҡ өйөп, уны әхлаҡи яҡтан сереп тарҡалған итеп күрһәтергә тырышмаһын, ниәте барып сыҡманы.

Шулай ҙа был юҫыҡта бөтөнләй үк еңелеп ҡалманы комиссар: Гизеллаларға фатирға инеп алды. Был совет офицерының ике йәш мөхәббәт араһына ҡара тараҡан булып төшөүе ине. Сәлим эсендә әсе торма ла, сөсө торма ла юҡ ине. Кешеләрҙе түгел, үҙен ғәйепләне ул. Бында Мәрйәм менән булған беренсе мөхәббәте хаҡында ныҡлап уйланды. Ярата ине бит уны Мәрйәм. Ныҡ ярата ине. Ана, ниндәй йыр яҙғайны:

*Аҡлы күлдәктәр тектерҙем*
*Байрамдарҙа кейергә;*
*Йөрәгемә уттар яҡтың*
*Мәңгелеккә һөйөргә.*

Сәлимдең үҙенеке лә йөрәктән алып яҙылғайны:

*Һинең яҡтан елдәр иҫһә,*
*Елдәрҙән хәбәр көтәм;*
*Һине һөйәм, күңелем һиндә,*
*Кәрәкмәй миңә бүтән.*

Йырҙың йыртығы юҡ, тиҙәр. Бар икән шул. Йыртыҡ йырҙар булып сыҡты былар. Йыртыҡ йырҙар… Һуғыш бөтөп, Сәлимдән өлкәндәр ҡайтҡас, Мәрйәм Әғләм исемле бер егеткә тормошҡа сығып, ситкә китеп барған. Белә ул егеттең кем икәнлеген Сәлим. Бер шарҙыуан, алабарман нәмәкәй ине. Бәхетле итмәйәсәк ул Мәрйәмде. Бәхетле итмәйәсәк. Шуны уйлап үрһәләнде. Ә үҙе бәхетле итә алыр инеме Мәрйәмде? Йөрәгенә ут яғыу, мәңгелек һөйөү тураһында һүҙ йөрөтә бит. Ут яғыу менәнме ни? Уны һүндермәҫкә, дөрләтергә кәрәк ине. Йәш ҡыҙ күңелендә бер егеткә ҡарата ҡырҡ төрлө уй булыр… Ярай, үткән эшкә – салауат. Гизелла хаҡында ла шулайыраҡ уйланы гвардеец башта. Бер ил гөлө икенсе илдә аңҡымаҫ, ти. Ваҡытлыса булған был мөхәббәт романы гөлөнөң сәскә атмаясағын аңланы ул. Хис-тойғоға аҡылды башлыҡ итеп ҡуйыуҙан яҡшыраҡ сара юҡ хәҙер. Ярһыма. Янма. Көймә. Сабырлыҡтың һары алтын икәнлегенә инан. Йөрәк ярһыуыңды пыран-заран килтер. Бына шул!

Шулай ҙа ул. Ярһыу йөрәккә аҡылды баш итеп ҡуйыу ҡыйын. Был, күрәһең, айбарлы ир-егеттәр эше. Сәлимдә юҡмы ни һуң илаһи тойғолар? Бар! Бар!! Бар!!! Уның уң яҡ ҡырындағы фәрештәһе шулай фекерләргә ҡуша. Ә һул яҡтағы шайтаны башҡаға ҡоторта: «Мөхәббәт – иң бөйөк изге тойғо, әҙәм балаһын ләззәтле һөйөшөү генә аҫыл рухлы итә, ҙур бәхет-сәғәҙәт ғашиҡлыҡтың күҙгә күренмәгән сихри гәүһәрҙәрендә, бар һин унда, артҡа сигенмә, егетлек ғәййәрлегеңде күрһәт», – ти. Шайтан ҡотҡоһона бирелә Сәлим, командирҙарҙың асыуланыуы ла, гауптвахта ла ҡурҡытмай уны. Китә лә бара Гизеллаһы янына. Ләкин инергә ярамай. Унда комиссар бар. Төндә бара күберәк. Ҡараңғыла. Һалдаттар йоҡлағас, ҡасып-боҫоп. Оҙаҡ тора ҡапҡа янында. Ҡапҡа бағанаһын ҡосаҡлап һөйһә лә, күңеле була, Гизелланы ҡосаҡлап һөйгәндәй тойола.

Ә эстә ут яна. Ваҡыт-ваҡыт Гизелланың кәүҙәһе күренеп ҡала. Соколовтың да һыны күҙгә сағыла. Бына улар бер-береһенә яҡын килә. Үбешәләр… һәм… ут һүнә. Сәлим бойоғоп ҡайтып китә. Һалдаттар йоҡлай. Ә ул уйланып, илереп ята. Йоҡоһоҙ төндәре күбәйә. Ашауының да ибәтәйе юҡ хәҙер. Элекке кеүек икмәк сәйнәгәндә ҡолағы һелкенеп тормай. Тора-бара уның был хәле һалдаттарға ла, офицерҙарға ла билдәле булды. Инде бөтөнләй сик ҡуйылды Пирмөхәмәтовтың казарманан сығып йөрөүенә. Шулай ҙа бер көн, уны бер ни тиклем йәлләп булһа кәрәк, Харисов ҡыҙы янына барып ҡайтырға рөхсәт итте. Әммә уның киҫәтеүе лә бар ине:

– Тотола күрмә.

– Мин унда бармайым.

– Ниңә?

– Соколовты беләһегеҙ бит…

– Ул өйҙә юҡ. Командировкала.

Сәлимдең юлы уңманы барыбер. Соколовтың адъютантын осратҡайны, әллә ниҙәр лыҡылдап маташты, Сәлимдең йөрәгенә ут яҡты:

– Комиссар Гизелла менән көн дә бергә йоҡлай.

– Ысын әйтәһеңме?

– Һуң, Гизелла ауырға ҡалған да инде.

– Ҡайҙан белдең?

– Комиссар үҙе әйтте.

Шулай, Сәлимдең мөхәббәт романы сиселеше фәрештә менән шайтан бәрелешенә тапшырылды.

## IX

Төн. Көнбайыш Аурупа төнө. Австрия. Уның баш ҡалаһы Вена биҫтәһе. Теҙелеп-теҙелеп киткән барактар. Һәр береһендә һалдаттар иҙрәп йоҡлай. Былай уйлау дөрөҫлөккә бигүк яҡын килеп тә бөтмәйҙер. Армия хеҙмәтендә һалдат ике нәмәгә моң булып йәшәй: туйғансы йоҡлау, туйғансы ашау. Ә бына хәҙер быларға тормош тамуҡ утынан мең бәлә менән сығып, ожмахтың гөл баҡсаһына килеп эләккән бәхет әһелдәренеке кеүек: шартлағансы аша, дейеү пәрейеләй ишелеп йоҡла – аслан һүҙ әйтеүсе юҡ. Әлбиттә, быңдай ирәүән тормош, эшһеҙ йөрөү әсегән ялҡауҙар, ныйылдаҡтар рухына бик ҡулай. Ә инде йәшәүҙең иң ауыр михнәте итеп хеҙмәтһеҙ үткән көндәрен һанаған аҫыл егеттәр мәмрәп йөрөүҙе намыҫын юғалтҡан алйот кеүек күрә. Ата-бабаларҙың: «Хеҙмәтһеҙ көн – ҡараңғы төн», – тигәнен дә иҫкә ала. Гвардия старшинаһы Сәлим Пирмөхәмәтов – шундайҙарҙың береһе. Әле ул йоҡламай. Башында мең төрлө уйҙар әйләнә. 1925 йылда, ул бер йәшлек сағында, атаһы мәңгелек донъя

намыҫына тапшырыла. Аслыҡ. Яланғаслыҡ. Ике апаһы, ауырлыҡтарҙан иҙелеп булһа кәрәк, еләктәй матур сағында, 15-16 йәштәрендә, гүр эйәһе булдылар. Берeһе һуғыш йылдарында бәләкәй сана менән утынға барғас, көслө буранда аҙашып үлде. Тыуған ауылында уны әле күп михнәт-хәйерселектәрҙән иҫән ҡалған Гөлъямал апаһы ғына көтә. Уның да оҙаҡ йәшәүе икеле – үпкә ауырыуынан ыҙа сигә. Етмәһә, торор урыны ла юҡ. Кеше өҫтөндә генә йәшәй.

Әлбиттә, ҡайғы ҡайын башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй, ҡайғыһыҙ кеше юҡтыр ҙа был донъяла. Бына ефрейтор Ғәлинур Әхәтовты ғына алайыҡ. Кеше үлтереп төрмәгә ингән. Атылырға тейеш булған. Һуғыш сыҡмаһа, бәлки, йәне күптән тамуҡта булыр ине. Әле атаһы ла, әсәһе лә юҡ. Ә ул тыуған тупрағы – Башҡортостанға ҡайта. Уны ни көтә алда? Ниндәй яҙмыш? Һәр кем күңелендә әле ҙур, данлыҡлы еңеү аша килгән аҫылташ гәүһәре балҡый. Әммә ул гәүһәр һәр кемдең шәхси ҡайғыһы менән ҡараланырға тора. Ә инде һуғыш афәте арҡаһында килгән уртаҡ ауырлыҡ Сәлим өсөн ул тиклем биҙа тойолмай. Уртаҡ ҡайғыларҙы күтәреү еңелерәк. Бөтә халыҡ менән. Ил менән. Донъя менән.

Сеү! Рәйес ниңә дыуамаллана? Ятҡан ерендә яраланған крокодил урынына дыңғылдарға кереште. Кәүҙәһе бер аҙ күтәрелә лә гөп итеп кире төшә. Ҡалтырана бит был. Әллә биҙгәк тота?

Сәлимгә был зәхмәт-сирҙең дә ғазабын кисерергә тура килде. Бәләкәй сағында ла албаҫты урынына иҙҙе ул уны. Сүплеккә сығарып ырғыта торғайнылар үҙен. Шулай итһәң, биҙгәк ғәрләнә, йәнәһе. Әҙәм мәсхәрәһенә ҡалған бахыр менән тиреҫ, көл араһында ваҡланып ятҡы килмәй, ташлай ҙа китә, ти. Биленә иҫке сабаталар бәйләп, ен-пәрейгә оҡшатып та кейендергәндәр. Биҙгәк ундай заттан ерәнә, имеш. Ни ғәжәп, биҙгәк-ҡәбәхәттең ағыулы тулҡыны Сәлимдең бөтә йән-тәнен фронтҡа керер алдынан да урап-солғап алды. Иң әүәл ул кешене зерә ҡаты өшөттөрә. Бөтә мөсәһе ен һуҡҡан шикелле ҡалтырай. Эсенә, әйтерһең, ҡотоп боҙо тултырғандар. Кеше яр башына ырғытылған балыҡтай һикергеләй. Бер нисә сәғәткә һуҙыла быңдай аҗғырыу. Унан һуң әлеге ҡотоп боҙо аҡрынлап ирей башлай. Кеше эсендә хәҙер, гүйә, тамуҡ уты дөрләй. Шунан меҫкен шыбыр тиргә бата. Боҙ һәм ут сәкәшеүе тамам хәлдән тайҙыра әҙәмде.

Курскиҙың утлы дуғаһына керер алдынан тап ана шундай михнәт сиккәйне Сәлим. Полктың баш табибәһе Нина Андреевна уны госпиталгә ебәрмәк булғайны. Ләкин ризалашманы Пирмөхәмәтов. Һуғышҡа кермәҫ борон ауырып тылға китеүҙе килештермәне. Ниңә үҙенде уттан ҡурҡҡан күбәләк итеп күрһәтергә? Ауыр тормош ҡалыбында ҡыҫылған Сәлим бәләкәй саҡта ла гел сирләшкә булды. Һуғышҡа ингәндә лә балыҡ һеңере шикелле ябыҡ ине әле. Ә биҙгәктең нәфсеһе шундайҙарҙы һайлаусан. Биҙгәктең серәкәйе лә бар бит әле. Шул тарата зәһәр йоғошло ауырыуҙы. Әммә суйындан ҡойолғандай бәһлеүәнәзмәүер кәүҙәле Рәйес кеүектәрҙең ул серәкәй тешләгәнгә бер сәс бөртөгө лә һелкенмәҫ. Тик ниңә ҡалтырана һуң әле ул? Бынағайыш, ҡалтыранды-ҡалтыранды ла: «Впере-е-д!», «За мно-о-ой»!», «Ура-а-а!», «За родину!», «За Сталина-а-а!»– тип, әллә ниндәй ҡалын-тутыҡ тауыштар менән аҡырырға тотондо. Ул ғына етмәгән, ен һуҡҡан кешеләй, ҡапыл һикереп тороп, һаман шулай «ура» ҡысҡыра-ҡысҡыра, тышҡа йүгереп сығып китте. Уның ут сыҡҡандағылай баҡырған тауышына күптәр уянып ултырҙы. Бәғзе берҙәре: «Ну и дурак»,– тип һүгенде. Мәгәр уның артынан тышҡа Сәлимдән башҡа сығыусы булманы.

Яҡтыра инде. Офоҡ алға мансылған. Ҡояш Европа донъяһын матурлап сығасағына ышандыра. Сәлим ярһыған Рәйесте ҡосаҡлап алды:

– Атакаға барҙыңмы?

Рәйес көлөп ебәрҙе:

– Көн дә барам. Был Гитлер үләкһәләре менән көн дә шулай төштә һуғышып йәшәрбеҙ микән ни?

– Ҡаныбыҙға һеңгән ул, Рәйес дуҫҡай, һуғыш бөткәнгә ике йыл тулып килә, ә бына минометтан атмай ҡалған төн юҡ. Был инде, минеңсә, тауыҡ төшөнә керә торған ярма бөртөгө генә түгел, кешелек яҙмышына йомарланған серле, ҡиммәтле йомғаҡ.

– Дөрөҫ әйтәһең, дуҫҡай, аҡыллы кеше ауыҙынан аҡыллы һүҙ сыға. Шулай ҙа мин ата дурак икәнмен. Аҡырып-баҡырып тор, имеш. Ә ниңә бына һин улай түгел? Иплеһең. Әҙлеһең, әҙәпле.

– Ҡуй, Рәйес, маҡтама, төрлө саҡтар була. Яманлыҡҡа тәһәрәт кәрәкмәй.

– Һинең төшөң дә матурҙыр ул. Тик береһен дә һөйләмәйһең. Ә мин таҡылдауҙан башҡаны белмәйем.

– Һиңә һөйләйәсәк серҙәр күп әле ул, Рәйес дуҫ!

– Һөйләрһеңме?

– Әлбиттә!

– Мадъяркаң хаҡында ла әйтеп бөтөрмәнең?..

– Бүлделәр бит теге ваҡытта.

– Минең дә бер гүзәлем ҡала көнбайыш Европала. – Һинеке – Гизелла булһа, минеке – Гүзәл.

– Әйҙә йоҡламайыҡ, Рәйес, Көнбатыш ҡояшын икәү ҡаршылайыҡ.

– Һинең менән әллә ҡайҙарға китергә әҙермен, дуҫҡай!

***

Сәлим көндәлек яҙа. Ғөмүмән, яҙыу-һыҙыу эше менән ул даими шөғөлләнә. Бәләкәй саҡтан бирле. Икенсе синыфта уҡығанда уҡ әле мәктәп стена гәзитенә ҡош телендәй ваҡ-ваҡ әкиәттәр, шиғырҙар бирә торғайны. Уҡытыусылар: «Күккүҙ ауылынан бер яҙыусы сыға», – тип, уның күңелен ете ҡат күккә күтәреп ҡуя торғайнылар. Дүртенсе синыфта инде ул үҙен оҫта рәссам итеп тә танытты. Стена гәзитенә матур һүрәттәр ҙә яһай, байрам алды көндәрендә, һәр хәрефенә һоҡланып ҡарап торорлоҡ итеп, лозунгылар яҙа. Ләкин… Һай, шул «ләкин» тигән ҡара бесәйҙе!..

…Ауылда ете йыллыҡ юҡ ине. Хәллеләр Үрмәт, Дөмәй, Ҡорос мәктәптәренә китте уҡырға. Сәлим дә дәртләнгәйне. Әммә әлеге ҡара бесәй, күҙҙәрен тоҙҙай итеп, уның ҡаршыһына килеп баҫты ла: «Сәлим абзыҡай, ямаулы киндер күлдәк, йыртыҡ ыштан менән кеше көлдөрөп йөрөмә, унда фатирға түләрлек һуҡыр тин аҡсаң юҡ бит, исмаһам, аҫҡа ҡойроҡ сәнсеп, үҙ оянда ята бир, хәлһеҙ эттәй бөгәрләнеп», – тине.

Ҡара бесәйҙең күп кәңәше менән килеште Сәлим. Тик анауы «үҙ ояң» тигәне генә күңел ҡылын тырнаны. Үҙ ояһы юҡ шул уның. Атаһы мәрхүм, Шәмсетдин мулла, ике ҡатлы йортто һалып та бөтөргән, был яҡты донъя инсаниятына бәхет-сәғәҙәт теләп, матур йәшәйешкә оло фатихаһын биреп, мәңгелеккә китеп тә барған. Утыҙынсы йылдарҙа, синыфлы йәмғиәттән синыфһыҙ йәмғиәт төҙөү тулҡыны башланғас, бер өйөр баланы урамға сығарып ҡуйып, тирә-яҡҡа йәннәт йәме балҡытып торған ике ҡатлы был аҫыл йортто пыран-зыран килтереп һүтеп ташлайҙар ҙа, алып китеп олаҡтырғас, ҡалған урынына көл һибәләр: дини ҡараңғылыҡ һаҡлаған был йорт урыны иҫкелек еҫе аңҡытып тормаһын, яңы тормош, ажарлы заттарҙың рухына зыян-хилаф ҡылмаһын, йәнәһе. Иҫкелек еҫен тамам бөтөрөү йәһәтенән Мулла абзый ултыртҡан

алмағастарҙы ла, төбө-тамыры менән һурып алып бөтөрөп, ҡаһҡаһалы рәүештә көлә-көлә яндыралар. Урам аша ғына «Мулла абзый» һалдырған мәсет яҙмышы ла шундай мәсхәрәләргә дусар ителә. Иң әүәл манараһын ҡырҡып төшөрәләр. Унан һуң бинаһын зөлфәрәкән һүтеп ырғыталар. Ярлылар, тиҙ генә ташып бөтөрөп, уларҙы утын итеп яға.

Мулла абзый ихатаһында, ауылдың тап уртаһында, иң хозур урында, ҡойо янында, һөйкөмлө Матҡай йылғаһы буйында колхоздың ат аҙбары төҙөлә: ул, йәнәһе, яңыса йәшәүҙең символы булып торасаҡ. Иҫкелек еҫе, мәңге килмәҫлек булып, ер аҫтына китте, имеш. Мулла абзыйҙың алмалары еҫе урынына хәҙер, яңы тормоштоң күркәм бер сифаты булып, ат тиҙәктәре еҫе, серегән тиреҫ быуы тарала ауылға. Ундағы мең төрлө себен, ауылдың иң күркәм еренән үҙҙәренә йәннәттәй йәмле урын хәстәрләп биргән өсөн, яңы тормош төҙөүселәргә рәхмәт әйтә-әйтә ҡайнашалар. Уларға рәхәт. Йәй көнө ауыл халҡының ишектәре, тәҙрәләре шаран-яра асыҡ була. Әлеге шаран-яра ишектәрҙән, тәҙрәләрҙән өй эсенә мымылдашып кереп, икмәктәрен, аш-һыуҙарын һырып алалар. Ҡыҫҡаһы, хөрриәт уларға!

Йәнә шуныһы: элекке мәсеттән сыҡҡан моңло аҙан аһәңдәрен хәҙер кәзәләр тауышы алыштыра. Шуғалыр, бәлки, Кәзә урамы тип атанылар был урамды. Һыйыр урынына кәзәләр күбәйеп киткән, күрәһең. Хәйер, Туҡай әйтмешләй, халыҡ ҙур ул, әллә ниҙәр уйлап сығара: «Ҡәһәр төшһөн Никулайға, алты һыйыр һауҙырҙы, рәхмәт инде Сталинға, бер кәзәгә ҡалдырҙы», – тип тә ебәрәләр бит. Сәбәпһеҙ һәнәк тә урынынан ҡуҙғалмай, тигәндәй, һәр нәмәнең сәбәбе бар. Тимәк, Кәзә урамының да тарихи ерлеге юҡ түгел икән.

Халыҡ, Туҡай әйткәнсә, ҙур ғына түгел, изге күңелле лә ул. Урамға ырғытылған алты бала әсәһе Әсмәбикә абыстай янына иң әүәл уларҙан ике өй аша ғына йәшәгән ҡырҡ йәштәр самаһындағы Хәтмулла исемле киң күңелле уҙаман килә.

– Әйҙәгеҙ, абыстай, беҙгә киттек, Мулла абзыйҙың күрһәткән изгелектәрен мәңге онотасағым юҡ, егерме беренсе йылғы аслыҡта мине үлемдән ҡотҡарып ҡалды бит. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең, йәне ожмахта йәшәһен, – тип һөйләнә-һөйләнә, алып китте ул бер көтөү балалы абыстайҙы үҙҙәренә.

Хәтмулланың өйө тышҡы яҡтан уҡ тауыҡ кетәген хәтерләтеп тора. Һалам түбәле сүккән өй. Үҙе, бисәһе, бер ҡыҙы өсөн дә ҡыҫыҡ булғандыр әле. Бына шунда бер өйөр бала менән абыстай даны алған әсә килеп ояһаһын әле: бер уйлаһаң, иҫең-аҡылың китерлек! Хоҙай йән биргәнгә йүн биргән, иҙәндә урын етмәгәндәр һике аҫтында теҙелешеп ята.

Сәлим ең һыҙғанып сабата яһарға тотона. Күп тә яһай. Матур ҙа. Бер йылдан һуң Күккүҙ ауылында ла бишенсе синыф асыла. Сәлим уҡыуын дауам итә. Һәләт бар. Талант бар. Тик яҡшы уҡырға ваҡыт юҡ. Сөнки уға «сабата ене» ҡағылғайны. Сабата үреү үҙенсә бер сәнғәт һымағыраҡ тойола. Уҡыуҙан ҡайтыу менән дәррәү тотона, зил-зәбәр эшләп ташларға ярата ул. Сабата ене уны ваҡыт-ваҡыт мәктәпкә лә ебәрмәй. Быныһы уның өсөн икенсе бер ҡара бесәй булып сыҡты. Сабата киндерәләрен матур-матур итеп ишкәндә күңелендә әллә ниндәй сихырлы йырҙар ҙа, шиғырҙар ҙа тыуа. Эш араһында ашыҡ-бошоҡ ҡына шуларҙы ҡәләм осонан аҡ ҡағыҙға гәүһәр итеп ҡуйорға ла онотмай.

Бына бер ваҡыт синыфташтар, дуҫтар араһында иҫтәлек дәфтәре яҙышыу ғәҙәте башланды. Ул күберәк шиғыр, йыр менән яҙыла. Туҡайҙың халыҡты шағир тип атауы ла дөрөҫ икән. Күңелдә булған, йөрәктә ҡайнаған йәшлек хис-тойғо иҫтәлек сәхифәләренә кәрәҙләнә: һәр кем үҙенең шағирлыҡ ғәләмәтен

күрһәтергә тырыша. Әлбиттә, бында Сәлим таланты күберәк ҡанат йәйә. Ул иҫтәлек дәфтәре сәхифәләрен төрлө-төрлө ҡәләмдәр менән сәскәләр яһап биҙәргә лә ярата. Бындай зауыҡты булдыра алмағандар Сәлимгә мөрәжәғәт итә. Ә ул ярҙам ҡулы һуҙыуҙан бер ҡасан да ҡыйынһынмай. Иҫтәлектәр, көндәлектәр яҙыу армия хеҙмәтенә алынғас та, фронт ҡырында ла, ут эсендә лә дауам итә. Тау күкрәген бәреп сыҡҡан шишмәнең инешкә әүерелеүе, һаман киңәйә барғаны һымаҡ, уның яҙмалары инде хәҙер, арттырып әйтәйек, романдар яҙыуҙы көтөп торғандай.

X

Көндәрҙән бер көн яҙмалары менән Рәйес тә ҡыҙыҡһынды. Баҡһаң, уның атаһы ла яҙыусылыҡ ижады менән шөғөлләнә икән. Атаһы Ҡазанда «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһендә уҡыған. Ғабдулла Туҡай, Фәтих Әмирхан, Ғәлимйән Ибраһимовтар менән аралашып йәшәгән. Еҫле гөл янында еҫһеҙ гөл дә хуш еҫләнә, тигәндәй, әлеге әҙәбиәт йондоҙҙарының нуры атаһы – Бимәттең дә күңел даирәһен шаҡтай ныҡ яҡтыртҡандыр. Рәйестең әйтеүенсә, Бимәт ҡарттың һандығында яҙып теүәлләгән әллә күпме роман исраф булып ята. Тик баҫтыра ғына алмай икән. Рәйестең борсаҡ сәсә торған ғәҙәте барлыҡты ла аңлай Сәлим. Әллә нисә роман яҙырға күпме көс кәрәк! Ә ниңә баҫтыра алмай икән? Ул, бәлки, үҙе өсөн генә яҙалыр. Ундайҙарҙың да булыуы хаҡында ишеткәне бар Сәлимдең. Талант, бәлки, Рәйестең үҙендә лә барҙыр. Бала атанан мең өлөш арттырып ебәрергә тейеш, ти бит. Рәйестең яҙмалар менән ҡыҙыҡһыныуы ла шунан киләлер.

Рәйес, яҙмаларҙы алғас, рәтле-рәтһеҙ аҡтарырға тотондо. Шунан күҙе «5 август 1943 йыл» тигән урынға төштө.

«5/VIII, 1943. Ур-р-а-а! Беҙ еңдек! Гитлерҙың бөтә донъя өҫтөндә елберҙәтәсәк ҡара факелы мәңгелеккә һүнде. Беҙҙең арыған-алйыған яугирҙар, аслыҡ-хәйерселектән яфа сиккән илебеҙ генә түгел, тыныслыҡ һөйөүсе бөтә донъя халҡы иркен тын алып ҡуйҙы. Философ ефрейтор Ниғмәтуллин әйтә ана: «Курскиҙың утлы дуғаһындағылай зәһәрле һуғышты Тарих бабайҙың күргәне юҡ икән әле. Уны төрлөсә атап йөрөттөләр бит: «утлы дуға», «тамуҡ уты», «ут йомғағы», «пәрей уты»... Бөтәһен дә һалдат уйлап таба. Тамсы тама-тама таш яра, тигәндәй, бәләкәй генә, энә осо ҙурлыҡ ҡына бер фекер башланһа, уны ҡупырайтып һөйләй-һөйләй, тау дәүмәллеге итеп өйә һалдат. Һәр береһе үҙ уй ҡаҙанында ҡайнағанын әйтмәйенсә ҡалмай. Шунан фекер тауы барлыҡҡа килә. Киреһенсә лә була. Берәү тимерҙәй ҡаты фекер әйтә. Уны ҡорос тишкес менән дә тишерлек түгел. Ә һалдат һүҙ бырауы менән дә тишә шуны. Мең төрлө мәргән һүҙ ҡорос бырауға әүерелә лә, тишә лә ҡуя тимер фекерҙе. Балтанан аш бешерә белгән һалдат аптырап тора ти һиңә. Балтанан аш бешереү, бер уйлаһаң, чепуха әле ул. Курскиҙың ут ҡаҙанында немецтарҙың аждаһаларҙан да ҡурҡынысыраҡ булған «Тигр», «Пантера» кеүек танкыларын ҡайнатты.

Донъя уттан да, һыуҙан да торған. Ошо хаҡта Мулла бабай бер риүәйәт һөйләгәйне. Тормош-йәшәү, имеш, ҡапма-ҡаршылыҡҡа ҡоролған: яҡшылыҡ – яманлыҡ, аҡлыҡ – ҡаралыҡ, бәхетлелек – бәхетһеҙлек, батырлыҡ – ҡурҡаҡлыҡ, шәфҡәтлелек – шәфҡәтһеҙлек, әҙәплелек – әҙәпһеҙлек... Ут менән һыуҙағы ҡапма-ҡаршылыҡ бөтә инсаниәтселек йәшәйешенең үҙәк сылбыры булып иҫәпләнә, имеш. Донъя уттан арынғанда ут шайтаны, уны бер ҡитғаға йыйып ҡалдырып, насар ниәттә файҙалана икән. Йәки донъяны яңынан ут менән көйҙөрмәк була. Ә инде яҡшы ниәтле Һыу фәрештәһе һыуҙы ана шул утты һүндереү

өсөн һаҡлай, ти. Утлы бәрелештәр ғәмәлдә күп булған. Һыу тулҡындары уларҙы һүндерә килгән. Донъя утта ҡайнаған сағында ла һыу уға артыҡ шашынып китергә ирек бирмәгән. Шундай ҡайнар фажиғәләр көрәше майҙанында атабыҙ – Әҙәм, әсәбеҙ – Һауа бер-береһе менән ҡауыша. Улар – Ер һәм Күк мөхәббәте емеше!

Риүәйәтте һөйләгәндә, әлеге «пәрей уты»н Курск дуғаһына күсерҙе Мулла бабай: «Пәрей уты», «пәрей уты», – тип ҡабатларға ярата ине ул.

Шунан уға һорау бирәләр:

– Ниндәй «пәрей уты» тураһында һүҙ бара, Мулла бабай?

– Әллә ҡасанғы «пәрей уты». Хан заманындағы.

– Бәлки, һөйләп бирерһең, ә?

– Һеҙгә аңлатыуы ҡыйын уны.

– Беҙ шулай дурак баштармы әллә?

– Улай тимәйем.

– Шулай булғас, ниңә ялындыраһың?

– Улайһа, тыңлағыҙ, – тип әлеге риүәйәтте һөйләне лә, берғауым тын торғас, әйтеп ҡуйҙы:

– «Пәрей уты» күҙ алдығыҙҙа. Ана бит, танкылар сәкәшеүенән мең дейеү пәрейе сыйнаған тауыштар сыға ла, улар яныуынан күккә ут дауылы күтәрелә. «Пәрей уты»нан да яман!

Һауала тегеләрҙеке менән беҙҙең мең-мең самолеттар бер-береһенә шашҡан аждаһалай ажғырып килә. Ҡайнашалар. Йөрәгендә тубалдай ут булып ҡабарған асыуы самолет эсенә һыймаһа, ул, һуңғы сиктә үҙен-үҙе сағып үлтергән саян һымаҡ, харап булаһын һис иҫәпләмәйенсә, таранға[2] ташлана. Шулай итеп, самолеттар ҙа ҡоторған үгеҙ урынына һөҙөшөргә тотона. Немец бомбардировщиктары, шуларҙы йырып сығып, беҙҙең ут йомғағына мең албаҫты урынына ажғыра-ажғыра, һыҙғыра-һыҙғыра төшә торған әллә күпме бомбаларҙы ла борсаҡ урынына яуҙырырға тотона. Бомбалар, снарядтар, миналар ярылыуынан, катюшалар атыуынан, ерҙә танкылар, күктә самолеттар ыжғырыуынан сыҡҡан тауыш һалдаттарҙың ҡолағына сатнатып килтереп һуға. Шунан уның башы тилергән бәрәндекеләй әйләнә, күҙе тонған балыҡтыҡылай була, ҡолағынан, морононан ҡан китә. Мәгәр түҙә һалдат. Ут араһында янмаҫ ҡорос пәрейгә әүерелә. Ҡырҡ көн ҡайнай совет һалдаты Курскиҙың ут ҡаҙанында. Шулай ҙа еңеп сыға. Тамуҡ утында мәңге янмаған Прометейға әүерелә ул. Шөкөр, еңдек! Бишенсе августа Мәскәү беҙҙең еңеүҙе ҡотлап салют бирҙе. Һуғыш башланғандан бирле беренсе салют әле был. Ура! Гитлер факелы һүнде. Донъя иркен тын ала. Күп ҡаһарманлыҡтар күрһәтеп, ут йомғағы эсендә янмай сыҡҡан 469-сы Башҡорт полкы, көнбайышҡа табан томоролоп, Гитлерҙың Берлиндағы бөтә донъяға ағыу сәсеп балҡыған факелын тонсоҡтороу өсөн ашҡынасаҡ...»

Шуларҙы һәм башҡаларҙы уҡып сыҡҡас, Рәйес Сәлимгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Бына һин ниндәй икәнһең, тигәнде аңлата ине уның ҡарашы. Унан һуң тулҡынланып:

– Һинән бына тигән яҙыусы сығасаҡ, Сәлим, ә минең атай былай уҡ булдыра алмай, – тип ҡуйҙы. – Һинең һүҙҙәрең «ҡанатлы», ә атайҙыҡы сатай-мотай... Молодец! Минең хатта һинең кеүек ана шундай ут эсендә һуғышҡым килеп ҡуйҙы. Хәйер, һин минометсы бит, пехотала булһаң, ай-һай-һай...

---

[2]*Таран – дошман самолетын йәки танкыһын самолет йәки танк менән төкөтөп атакалашыу.*

Рәйестең ғорур тәбиғәтле, ҡаһарман йөрәкле икәнлеген дә аңлай Сәлим. Уның Курскиҙың «тамуҡ уты»нда була алмауына үкенеүе лә быны һиҙҙереп тора.

Сталиндың артиллерияны «Һуғыш аллаһы» тип атауын да иҫкә алырға кәрәктер. Ә минометсылар артиллерияның бер төрөнә ҡарай. Был– бер. Икенсенән, минометсыларҙа пехота өсөн кәрәк булған бөтә ҡоралдар ҙа бар: пулемет, автомат, ПТР (танкыға ата торған ҡорал), карабингранат… Сигенергә тура килә икән, йәйәүле һалдат рухи ғәрлектән башҡа әллә ни ауырлыҡ күрмәй: мылтығын күтәрә лә, тупаҫ итеп әйтһәк, ҡойроғон һыртына һалып йүгерә бирә… Ә Сәлим хеҙмәт иткән полк минометының ауырлығы – 360 килограмм. Уны күтәреп китеп булмай. Ташлап китһәң, хәрби трибунал: аталар. Шуға күрә, батырлыҡ бирә торған аятыңды мең ҡат ҡабатлап, ярһып килгән дошманыңды аяуһыҙ ҡаршы алырға тура килә. Курск дуғаһында ажғырып килгән танкылар теҙмәһен минометсылар ҡаршы алды. Әлбиттә, үлемесле көрәш ине. Полк минометы 400 метр яҡынлыҡҡа ата алмай. Хәҙер бөтә ышаныс ПТР, граната, пулемет, автомат һәм башҡа ҡоралдарҙа. Гранаталар бәйләме менән дошман танкыһы аҫтына ташланыусылар булды хатта. Пирмөхәмәтов үҙе лә ПТР менән бер танкыны тонсоҡторҙо. Был мәхшәрҙә күптәр янып харап булды. Ярай әле беҙҙең танкылар теҙмәһе килеп сыҡты. Юғиһә, бөтә полк харап була ине.

…Бер ваҡыт Сәлим расчеты солғанышта ҡалды. Минометтан атыу мөмкинлеге бөткәс, атакаға килгән немецтарҙы әлеге «пехота ҡоралдары» менән ҡаршы алырға тура килде. Өс тәүлеккә һуҙылды көрәш. Ашарҙарына бер ҡабым ризыҡ юҡ. Ҡырҡ кешенән дүртәүһе генә иҫән ҡалды. Әммә бирелмәнеләр. Беҙҙекеләр килеп еткәндә был дүрт яугирҙың ни бары бер гранатаһы ғына ҡалғайны. Үҙҙәре өсөн. Әгәр дошман йәнә килеп тереләй ҡулға алырға маташһа, һуңғы сиктә, саяндың үҙ-үҙен сағып үлтергәне шикелле, үҙҙәрен харап итеү ине иҫәптәре. Ә инде миномет окобы алдында улар ҡоралынан сәнселеп үлеп, һаҫыҡ еҫтәр таратып ятҡан фрицтар кәүҙәһе һанһыҙ ине. Быларҙы Геройға тәҡдим итергә тип тә йөрөнөләр, ләкин һүҙҙә генә ҡалды шикелле.

Был хаҡта ла яҙылғайны Сәлимдең көндәлегенә. Уларын да уҡыған, минометсылар хаҡында фекерен үҙгәртте Рәйес… Гәрсә полк табибы госпиталгә оҙатырға тырышһа ла, Сәлимдең уны тыңламайынса сафта ҡалыуы Рәйестең яҡташына ҡарата булған йылы дуҫлыҡ хистәрен йәнә ҡайнарлатып ебәрҙе. Бер ай эсендә ике мәртәбә контузия ла алды әле ул. Ике дошман пуляһы уң яҡ сикә һөйәктәрен семетеп тә китте бит әле. Полк табибы капитан Нина Андреевна, марля менән бөтә башын урап-бәйләп, уны йәнә госпиталгә ебәрмәк булды. Китмәне Сәлим. Сөнки беренсе минометта унан башҡа мәргән атыусы яугир юҡ ине.

– Бәхетең бар икән, Пирмөхәмәтов, был ике пуля сикәңде ҡыйып ҡына киткән, бер сантиметр самаһы эскәрәк үтһә, харап була инең бит, – тип, уның арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы табибә. – Мең ҡурҡаҡҡа бер ҡыйыуҙы алыштырмайҙар!

Был тамуҡ утынан иҫән-аман сығыуҙы, ысынлап та, ҙур бәхет тип белде Сәлим. Дөрөҫөн генә әйткәндә, һуғышҡа ҡурҡып керҙе. Юҡ, үлемдән түгел. Әзмәүерҙәй яугирҙар араһында оятҡа ҡалыуҙан. Уттан бүре лә ҡурҡа. Ул ҡурҡманы. Һынатманы әзмәүерҙәр араһында. Уның атҡанын бер ваҡыт армияның артиллерия начальнигы генерал майор Полуэктов ҡарап торған. Өсөнсө минаһы дошман пулеметына туп-тура килеп төшкәс, беҙҙең пехота дәррәү атакаға күтәрелеп, алдағы бейеклекте ала. Бөтә фронт буйынса иҫәпләгәндә, фрицтарҙы иң күп үлтереүсе, дошмандың хәрби техникаһын иң күп ҡыйратыусы – сержант Пирмөхәмәтов миномеtы.

## Икенсе бүлек

*Кеше! Тәбиғәттең ғорур, аҫыл йәне.*
*Ғаләм гәүһәре бөртөгө уның тәне.*
*Ник гәүһәргә кеше үҙе ҡара яға?*
*Ҡараларҙан ил йөрәге яралана.*

I

“...12 июнь, 2008 йыл. Өфө иркен тын ала”. Көндәлегенә шундай фекер теркәп ҡуйҙы профессор Сәлим Шаһиәхмәт улы. Был йылдың ҡышы боронғосараҡ килгәйне. Ишелеп-ишелеп ҡар яуҙы. Ҡар яуа – икмәк яуа... Ил, халыҡ мәнфәғәте менән йәшәгән аҡ ҡар төҫлө фәрештә күңелле кешеләр шулай уйлай. Ҡар ауылда юлдарҙы өҙә. Ҡалала күп мәшәҡәттәр яһай. Уйҙары үҙ кендеге тирәһендә генә әйләнгән, оло бәхете – бөгөнгө тәмле тамағы, өҫтөндәге йылтыр кейеме менән генә сикләнгән бәғзе берәүҙең быға эсе боша. Тәбиғәт уның шәхси уйы менән иҫәпләшмәй, йәнәһе. Нисек кенә булмаһын, яҙын сабыр холоҡло ҡар аҡрынлап ер йөрәгенә һеңде. Ағиҙелдең боҙҙары шартлап ярылды. Киҫәк-киҫәк боҙҙар, сабыр ҡиәфәт күрһәтеп, яй ғына түбәнгә аҡтылар. Әммә яҙ ҡоро килде. Шулай ҙа ләйсән ямғырҙың көмөш тамсылары ер күкрәгенә шифалы мәрйен булып төшкөләмәне түгел. Унан һуң ҡоролоҡ ҡанатын йәйҙе. Ямғыр юҡ та юҡ. Мәгәр һөйгән егетенә оҙаҡ ялындырып торғас ҡына йылмая-йылмая килгән ләйсәнҡыҙ һымаҡ, ямғыр бер ваҡыт барыбер ер-егет ҡуйынына төшөп йомолдо. Күктең шәфҡәте киң булды. Аҙналар буйы ҡойҙо ямғыр. Ер туйынды. Уға хәҙер йылылыҡ кәрәк. Шөкөр, Хоҙай Тәғәләнең киң күңеле йәнә нығыраҡ асылып китте. Ҡояш шифалы нурҙарын ҡоя.

Бына 12 июнь. Рәсәй Федерацияһы көнө. Кесе йома. Сәлим Шаһиәхмәт улы ғәжәп төш күрҙе бөгөн.

Төн. Ҡурҡыныс. Ҡара болоттарҙы йыра-йыра, иләмһеҙ баҡыр тештәрен шыҡылдата-шыҡылдата, йәмһеҙ бер йән эйәһе ҡыуа уны. Ләкин Сәлим Шаһиәхмәт улы тоттормай. Ҡаса. Ҡояш тирәләй секундына утыҙ саҡрым осҡан Ер шарылай елдерә. Бер ваҡыт ул уҫал арыҫландан ҡурҡаҡ ҡуянға әүерелгәнлегенә ғәрләнә. Туҡтай. Тын ала. Әлеге ҡурҡыныс зат уның елкәһенән эләктереп ала. Бәрәкәт, ҡапыл бөтә донъя яҡтырып китә. Әйләнеп ҡараһа, уның алдында көмөштәй кейенгән, ап-аҡ һаҡаллы, ҡояштай нурлы йөҙлө, бит остары киске шәфәҡтәй ҡыҙарып янған бер мөләйем зат баҫып тора. Һүҙҙе ул башлай:

– И, меҫкен әҙәм балаһы, минән ҡасып берәү ҙә ҡотола алмай, әйҙә, киттек...

– Ҡайҙа?

– Гонаһһыҙ донъяға.

– Гонаһһыҙ ил юҡ ер йөҙөндә.

– Дөрөҫ әйтәһең: ерегеҙ гонаһ менән тулы. Кешеләр аламалыҡты үҙҙәре яһай. Аҡ күңел менән тыуған бала йөрәге үҫә-үҫә ҡараға әйләнеп бөтә. Былай дауам итһә, ерегеҙ ҡайғынан шартлаясаҡ бер ваҡыт.

– “Ерегеҙ” тиһегеҙ. Үҙегеҙ беҙҙеке түгелме ни?

– Түгел. Әйттем бит: мин гонаһһыҙ илдән.

– Ҡайҙа һуң ул гонаһһыҙ ил?

– Ете ҡат күк аръяғында.

– Әллә һеҙ Ғазраил ғали йәнәптәреме?

– Зирәк икәнһегеҙ. Аңланығыҙ.

– Ни өсөн тәғәйен миңә ҡанығаһығыҙ әле?

– Мин ҡарттарҙы сүпләйем. 84 йәшкә еттегеҙ бит инде.

– Минең әле фәнни хеҙмәттәр, романдар яҙаһым бар.
– Ә миңә “план” үтәргә кәрәк.
– Һуң, ғали йәнәптәре, бөткәнме ни һеҙгә минән башҡалар?
– Кемдәр һуң улар?
– Ана, урамда эсеп йөрөгән алкаштар. Ней үҙенә, ней халҡына, ней ата-әсәһенә, ней ҡатынына, ней балаларына һуҡыр бер тинлек тә файҙалары юҡ...
– Һуңғы йылдарҙа мин алкаштарҙы бигерәк тә күп йыйҙым. Уларға инде хәҙер тамуҡта урын да етмәй башланы. Ә һеҙҙе хөрмәтләп ожмах тажына ултыртмаҡ булам.
– Ашыҡмағыҙ әле, Ғазраил әфәнде, “84”-тең “94”-те лә, “94”-тең “104”-те лә бар.
– Гонаһҡа батыуҙан ҡурҡмайһығыҙмы?
– Мин бит хеҙмәт һөйәм. Мөхәббәте хеҙмәткә ҙур кешенән гонаһ үҙе ҡурҡып йөрөй.
– Дөрөҫ. Һеҙ яҡшы күңелле кеше. Абруйлы. Мәғлүмәтле. Мәғрифәтле. Шәфҡәтле. Мерәүәтле. Әйҙә, киттек!
– Ҡайҙа?
– Ожмахҡа тим бит инде.
– Фани донъялағы хеҙмәтемдең кәбәне осланмаған бит әле, Ғазраил! Шул кәбәнде ослағас, ҡәләмем ожмахты үҙе үк эҙләп табыр. Был хаҡта яҙған шиғырым да бар. Бер яҡын, ләкин ялҡау дуҫым “картайҙың инде” тип теңкәмә тейә. Шуға асыу итеп яҙҙым был шиғырҙы. Ул “Яҙам әле” тип атала.

*“Яҙма” тиһең, “яҙма” тиһең,*
*“Яҙма, ҡартайҙың инде”,*
*– Яҙһаң күңел күтәрелә,*
*Шуны белмәйһең, тиле!*
*Яҙам киске шәфәҡтәрҙә,*
*Һыҙылып таңдар атҡансы;*
*Ҡартайһам да һаман яҙам,*
*Ҡәләмем ожмах тапҡансы.*

– Тимәк, ожмахҡа ҡәләм көсөң менән инмәксеһең?
– Яҙыусының, ғалимдың аң-аҡылы, хис-тойғоһо, Хоҙай тарафынан бирелгән бөтә илаһи көс-ҡөҙрәт аҡ ҡағыҙға ҡәләм осонан иман гәүһәре булып түгелә. Ожмахҡа беҙ шул гәүһәрҙән түшәлгән һуҡмаҡтан барасаҡбыҙ.
– Көслө кеше һеҙ!
– Аллам илаһилығы менән!
Тап шул мәлдә ҡояш һүнә, ер шартлай, донъяны ҡараңғылыҡ баҫа, Сәлим Шаһиәхмәт улы уянып күҙҙәрен аса.

***

Сәлим Шаһиәхмәт улы Өфө ҡалаһындағы телеүҙәктән әллә ни алыҫ булмаған туғыҙ ҡатлы йорттоң өсөнсө ҡатында йәшәй. Дүрт бүлмәләге фатирындағы ике ҙур тәҙрәһенең асыҡ йөҙө көньяҡҡа – телеүҙәк манараһына ҡаратып ҡуйылған. Ике тәҙрәһе – төньяҡтағы ҡала манараһын ҡарап ләззәтләнеү өсөн. Бында, әлбиттә, “ләззәт” һүҙенең эске хосусиәтен аңлау кәрәк. Көҙөн, ҡышын, бәғзе һалҡын яҙҙа үҙәккә үтерҙәй ҡырыҫ елдәр иҫһә, асыҡ йөҙлө тәҙрә быялаларының да сырайы һытыла. Сөнки ел, саҡырылмаған әрһеҙ ҡунаҡтай, энә күҙе ҙурлығы тишек-тошоҡто табып, эске яҡҡа үтеп инә. Төньяҡтарҙыҡына ябырылған ҡышҡы ажғырлы елдәр, ваҡыт-ваҡыт йоҙроғо менән тәҙрәне дөмбәҫләргә тотона. Ярай, ундай хәлдәр, кем әйтмешләй, мәңгелек хафа. Донъя бер алдын, бер артын

күрһәтә. Бына ғына йылмайып, яратып, миһырбанлы күҙҙәре менән һөйөп ҡарай, икенсе бер мәлдә башыңа килтереп ора, яңағыңа сабып ебәрә, арт яғыңа тибеп осора. Яҡшылыҡ – яманлыҡ, миһырбанлыҡ – алйотлоҡ, йомартлыҡ – оңҡотлоҡ, шәфҡәтлелек – шәфҡәтһеҙлек көрәше тәбиғәт ҡанундарында ла, кешеләр йөрәгендә лә дауам итә.

Алла беҙҙе төрлөсә һынап ҡарай. Ҡапма-ҡаршылыҡтар күҙгә күренмәгән зәррәләрҙә лә, ваҡыт төшөнсәһен белдереүсе секунд, минут, аҙна, ай, йылдарҙа ла бар. Әйтәйек, шәғбан, рәжәп айҙары – Рәсүл менән Хоҙайҙыҡы. Был айҙарҙа гонаһ ҡылыу – дуңғыҙлыҡ. Рамаҙан айы – кешеләрҙеке. Алла бәндәләре үҙҙәренсә тәғәйенләп бирелгән айҙы нисек ҡәҙерләп үткәрә икән? Гонаһтарыңды кешенән йәшерһәң дә, Алланан йәшереп булмай. Тупаҫ итеп әйтһәк, алйотлоғоң эсәкбауырыңа инеп оялай. Үҙенә бирелгән рамаҙан айында кеше намыҫы ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер Салауат күпере аша үткәрелә.

Әле йәй уртаһы. Сәлим Шәһиәхмәт улы яңы роман яҙып ултыра. Уның өҫтәле – көньяҡҡа ҡараған тәҙрә ҡаршыһында. Тышта, тәҙрәнән утыҙ метр самаһы ерҙә, шау япраҡҡа сумған йүкә ағасы донъя матурлай. Ботаҡтары олононоң төбөнән үк тейерлек ян-яҡҡа йәйелеп киткән. Япраҡтары зөбәржәт гәүһәреләй йылтырай. Ул зөбәржәт-гәүһәр йәшел япраҡтарҙан бал тама (әле бал осоро). “Өфө иркен тын ала” тигәнде көндәлегенә шуларҙы уйлап яҙып ҡуйғайны.

“Иркен тын алыу”ҙы Башҡортостанда йәшәмәгән кешенең аңламауы ла мөмкин. Профессор Пирмөхәмәтов уның шулай икәнлеген аң-аҡылы, хис-тойғоһо, күңел шәрәфе, йөрәк илаһилығы менән һиҙеп белә. Быға боронғоларҙың: “Сағыштырыу – танып белеүҙең әсәһе”, – тигән ғибәрәһе ярҙам итә. Сағыштырыуға наҙан кеше яҙыусы ла, ғалим да була алмай.

Әле бына 84 йәшкә етеп, яңы роман ижад иткәндә “Өфө иркен тын ала” тигән һүҙҙәрҙе бер ҙә юҡҡа ғына яҙып ҡуймағандыр Сәлим Шаһиәхмәт улы! Башҡортостандың ҡояшы ла уға гел йылмайып ҡарағандай. Йәйге айҙарҙа иртәнге ҡояш нурҙары төньяҡтағы тәҙрә төптәрендә балҡый. Көн үҙәгендә нурҙарын яҙып ултырған өҫтәле ҡаршыһындағы тәҙрә аша бүләк итә. Кисен, байып барғанда, ҡояш нурҙары төньяҡтағы балкон тәҙрәһен иркәләй.

Беренсе ҡарашҡа ябай тойолған әйбер, предмет, есемдәр йөрәгендә әллә ниндәй серлелек, сәйерлек, аңлауы ҡыйын булған хәл-әхүәлдәр бар. Улар кеше йөрәге менән дә бәйле икән. Төньяҡ балконға сыҡты ниһә, Сәлим Шаһиәхмәт улының күҙе йорттан егерме метр самаһы йыраҡлыҡтағы трамвай линияһына төшә. Унан һуң уның күҙ нурҙары йәнә шул сама алыҫлыҡта үҫеп ултырған өйәңке ағасын иркәләй. Был өйәңкенең төбө ике-өс кешенең ҡоласы етмәҫлек йыуан. Ул ботаҡтарын тирә-яҡҡа рәхәтләнеп, ләззәтләнеп ебәреп, хосусан бер хозурлыҡта үҫкән. Ул ботаҡтар бик йыш, яҙын йәшел япраҡҡа төрөнгәс, уларҙы күреп тә булмай. Космонавтар Ер шарын йәшел йомғаҡ шәкелендә күрә икән. Был өйәңке лә Ер шары һымаҡ йәшел йомғаҡ.

Ҡайғың күп булһа, борсолған мәлдәрҙә матурлыҡҡа ҡарарға ҡушалар. Хатта улары булмаһа ла, балконға сығыу менән, Сәлим Шәһиәхмәт улының күҙе тау дәүмәллеге шул йәшел йомғаҡҡа төшә. Йомғаҡ эсендә кешеләргә матурлыҡ өләшә торған йөрәк инсафлылығы бар һымаҡ. Бәй, уйыңды тәрәнәйтә төшһәң, ул ысынлап та шулай икән. Ямғыр яуғанда, кешеләр унда йәшеренеп тора. Ул үҙенә яратып килгәндәрҙе эҫенән дә һаҡлай. Тик... Көндәрҙән бер көндө көтмәгәндә күңелһеҙ хәл килеп сыҡты. Кисен Шаһиәхмәт улы уның матурлығына, хозурлығына, әйткәндәй, ғалибәнә иҫе китеп, хисләнеп ҡарап торғайны. Шул хистойғоларҙы мөкиббәнә дауам иттереү өсөн балконға сыҡһа, төндә ниндәйҙер

рәхимһеҙҙәрҙең “йәшел шар”ҙы ҡырҡып ауҙарғандарын күреп әрнене. Йәне түҙмәне профессорҙың, ерҙә ыңғырашып, тәгәрәп ятҡан матурлыҡ символын яҡындан күрергә тип, унан-бынан ғына кейенеп, тышҡа сыҡты. Өйәңке янына барһа, шуны күрҙе: төптән ярты метр самаһы ҡалдырып, тип-тигеҙ итеп ҡырҡҡандар. Ҡырҡылған урын түңәрәк өҫтәл өҫтөн хәтерләтеп тора. Әкренләп кешеләр йыйыла башланы. Бөтәһе лә был гонаһлы эшкә хайран ҡала: кем ҡырҡҡан, ни өсөн, кемдең ҡулы ҡысыҡкан – шундай борсоулы һорауҙар миңрәтә йөрәге әрнегәндәрҙе. “Ҡулы ҡороғоро”, “күҙе сыҡҡыры” тигән ҡарғыш яңғырай. Ҡырҡылып ауған “йәшел шар” был ҡарғыштарҙы ҡеүәтләй генә түгел, йөрәге ярылыр сиккә етеп һыҡрана, хатта илап ята төҫлө тойола. Уның күҙ йәштәренә оҙон буйлы, ябыҡ сырайлы бер ир кешенең күҙ йәштәре ҡушылды.

Ябыҡ сырайлы, оҙон буйлы кеше күҙ йәштәрен әле еңе, әле ҡулъяулығы менән һөртә. Әрнеүенең сәбәбен ул үҙе үк аңлатып та бирҙе. Был урында ул йорт һалған. Ихатаһында хатта ҡош-ҡорт тотҡан. Өйәңкене матурлыҡ өсөн ултыртҡан. Ул ваҡытта был урындар ҡала сите булып иҫәпләнә. Елдәр иҫә. Һыуҙар аға. Өфө ҡалаһы һаман киңәйә лә киңәйә. Ҙур йорттар бында ла аҡрынлап һалына башлай. Әлеге оҙон буйлы, ябыҡ сырайлы ир-егет, донъяһын туҙҙырып, ҡала уртаһындағы биш ҡатлы йортҡа күсенә. Ә өйәңке ата-бабаның нигеҙ иҫтәлеге булып ҡала. Оҙон буйлы, ябыҡ сырайлы ир-егет өйәңке менән күрешеү өсөн көн дә бер мәртәбә килеп китә.

II

Ваҡиға утыҙ йыл элек була. Хоҙайҙың бүләк иткән йылы, йәй уртаһындағы ҡыҫҡа бер көнөндә иртән, алһыу-ҡыҙғылт нурҙарын донъя йөҙөнә йәйә-йәйә, ҡояш сыға. Тәгәрәп ятҡан өйәңкене күреп, ҡояштың да йөрәге әрней. Уны шулай иркәләп, яратып, наҙлап, һөйөп үҫтерә-үҫтерә, матур “йәшел шар” дәрәжәһенә еткергәйне бит. Әй, кешеләр, кешеләр, инде ер биҙәген ҡороторға тотондоғоҙмо?

Күҙ алдында күпереп үҫкән был өйәңкене Шаһиәхмәт улы үҙ эске донъяһы рухиәтенә лә сағыштырып ҡарай торғайны. Һуғыштан ул ете йыллыҡ белем менән ҡайтты. Үҙлегенән уҡып, ҡулына шәһәҙәтнамә алды. Унан һуң – институт. Аспирантура. Докторантура. Филология фәндәре докторы. Профессор. Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы. Бер үк ваҡытта шиғыр, поэма, хикәйә, повесть, драма әҫәре, романдар яҙыу, фән менән шөғөлләнеү, хәбәрнамәсе (публицист), тәнҡитсе булыу, әҙиптәрҙең тел-өслүб (стиль) хосусиәтен тикшереү, йәмәғәт эштәрендә йөҙөп йөрөү, университетта лекциялар уҡыу...

– Хеҙмәт йөгөн яурыныңа бигерәк тә күп тейәйһең, Сәлим Пирмөхәмәтов, ул һине һытмаҫмы? – тип әйтеүселәр ҙә булғылай.

Шаһиәхмәт улы яуапты шаян һүҙҙәр менән бирергә ярата:

– Күп хеҙмәт иткән кешенең ҡара уйҙар донъяһына сумырға ваҡыты ҡалмай.

Мәгәр үҙе шикләнә. Анауы ҡырҡылып ырғытылған өйәңке хәлендә ҡалмаҫмы, йәнәһе. Ваҡыт-ваҡыт үҙ хатаңды үҙең дә аңлайһың. Ә кеше күҙе күпте күрә. Берәүҙәр уның эсәк-бауырына ғәйбәт аты егеп, икенселәр шарманка ҡаға-ҡаға, өсөнсөләр кешеләрсә ҡыҙғаныу хис-тойғоһо менән инә.

Былдай саҡта Шаһиәхмәт улы Болғар осоро (XIII быуат) шағиры Ҡол Ғәлиҙең сабырлыҡ тураһында әйткән һүҙҙәрен иҫкә ала:

*Сабыр берлә эшләгел ошбу эши,*
*Сабыр берлә эшләнер эшләр башы.*
*Морадына тиҙ йитәр сабырлы кеше,*
*Бу эш эчрә күрекле сабыр кылгыл имди.*

Ҡылыҡ-фиғелде бер һүҙ менән генә лә билдәләйҙәр: “сабыр”, “йыуаш”, “үткер”, “зиһенле”, “аҡыллы”, “алйот”, “алабарман”... Сәлим хаҡында һүҙ сыҡһа, уға “сабыр” тигән һүҙҙе елемләп ҡуялар. Ҡаҙаҡ аҡыны Абай: “Һүҙҙең эсе – алтын, тышы – көмөш”, – тигән. Һүҙ эсендә. Ғәмәлдә ғәжәп серле алтын бөртөктәр күп. Һүтеп ҡарамайынса, уның серен аңлау бик ҡыйын. Туҡай, ана, ваҡыт-ваҡыт, сабыр төбөнән һары алтын түгел, һары бәрәңге лә сыҡмау тураһында әйтә. Нисек кенә булмаһын, Сәлим Шаһиәхмәт улы тәбиғәтенә “сабыр” тигән һүҙ бик ҡулай. Әҫәр яҙырға ҡулына ҡәләм алғанда уның бәғзе йәштәше бишалты китап сығарып, “әҙип әһеле” булып алғайны инде. Ә был изге эшкә Сәлим ҡырҡ йәштәрҙә генә ныҡлап тотондо. Фән ҡапҡаһын да шул йәштә генә етди асырға ҡыйыулыҡ итте. Хәҙер инде фән менән әҫәр яҙыу уның киләсәк яҙмышы өсөн яғалаша. Ҡайһыһы еңер? Әллә икәүһе лә бынауы ҡырҡып ырғытылған “йәшел шар” хәл-әхүәленә әйләнерме?

Уй! Уй!! Уй!!! “Йәшел шар” ҡырҡылып ырғытылһа ла, әллә ултыртҡан кешеһенең нигеҙен һаҡларға теләп, әллә ғәжәйеп бер мәғжизә күрһәтергә уйлап, яңынан үҫергә тотондо. Әкиәттәге кеүек булды был. Ҡалған төп икегә айырылды. Кем айырҙы уны? Шайтанмы? Енме? Йә булмаһа, изге йәнле берәй затмы? Һуңғы фараз дөрөҫлөккә күберәк тура килә кеүек. Айырылғас, ике төп, бербереһе менән ярыша-ярыша, яңынан үҫергә кереште: әле береһе өҫтөнлөк ала, әле икенсеһе. Был үҙенсәлекте лә үҙ донъяһындағы эске рухиәткә оҡшата Сәлим Шаһиәхмәт улы: әле фән өлкәһе алға сыға, әле яҙыусылыҡ шөғөлө. Фән өлкәһе мулыраҡ булғас, уны “профессор” тип кенә йөрөтә башланылар. Шулай ҙа өйәңкенең төптән турыға үҫеп киткәне нығыраҡ аяҡлы булып сыҡты. Тимәк, фән яғы алдыра. Ә инде ҡырыйҙан шытып үҫкәне кәкрерәк. Тимәк, әҙәбиәт әһеллелеге ҡылдый-былдыйыраҡ. Әлбиттә, фән тауына еңел генә менелмәне. Докторлыҡ диссертацияһын Бакула – Әзербайжан фәндәр академияһында яҡланы ул. 1982 йылда. “Отлично” тип, ҡул саптылар хатта. Ләкин Мәскәү әһелдәре мөһөр һуҡманы хеҙмәткә: ВАК (высшая аттестационная комиссия) үткәрмәй! Төлкөләнә, ялағайлана, аҡылына түгел, аяғына тынғы бирмәгән хәйләле бәғзе фән әһелдәре докторлыҡты яҙғанда ВАК тажында ултырыусыларҙың берәйһен консультант итеп һайлай икән. Консультант, йыртылыр сиккә етһә етә, үҙ “ҡолон” үткәрмәйенсә ҡалмай, имеш. Был хаҡта әйттеләр Сәлим Шаһиәхмәт улына. Әммә сыш-быш, ҡылдый-былдый, кәкре-бөкрө хәбәрҙәргә ҡолаҡ һалманы шул. Ҡыҫҡаһы, үҙ көсөнә ышанды. Ләкин көсө ВАК тажында ултырыусыларҙың намыҫ ҡаралығында күмелеп ҡалды. ВАК йыл һайын Министрҙар Советы алдында яҡлаусылар тураһында иҫәп-хисап бирә икән. ВАК һәр йылда ун процент диссертацияны үткәрмәҫкә тырыша. Министрҙар Советы ҡаршыһында талапсанлыҡ күрһәтәләр, йәнәһе. Сәлим Шаһиәхмәт улы ана шул ун процентҡа эләгә. Төрлө хәйләләр өйрәтеп ҡарайҙар уға:

– Бар, йәһәт ҡылан, йоҡлап йөрөмә, бер яйын тап, хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ, – тиҙәр. Тик берәүҙе лә тыңламай ул. Икенсе мәртәбә яҡлай Бакула. Икенсеһендә ғәҙеллек еңеп сыға: фән докторы була Шаһиәхмәт улы.

Күп осраҡта халыҡтың “Сабырлыҡ төбө – һары алтын”, “Сабыр иткән – моратына еткән” тигән мәҡәлдәрен хәтергә төшөрөүсән. Аҡыллы һынамыштар Ҡол Ғәли замандарынан бирле килә. “Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар” тигәне лә бар әле уның. Курск дуғаһында янмаған, Днепрҙың ҡанлы һыуында батмаған, Көнбайыш Аурупа илдәрендә батырлыҡ күрһәткән ҡаһарман ауырлыҡ алдында уҫаҡ бәшмәгенә әүерелергә тейешме? Иламаны, хәйләлек һаҙлығына батманы, Мәскәү таждары алдында, дуҫ-иш, тыуған-тыумаса, ҡәрҙәш-ырыу, йәмәғәтселек

араһында маҡсатҡа үҙ көсөң, үҙ илаһилығың, үҙ егәрлелегең, үҙ аҡылың менән ирешергә кәрәклек өлгөһө күрһәтте. Диссертацияһын ике тапҡыр "яҡлағаны" өсөн ғорурланып йөрөнө хатта. Суртан балыҡтай шыма ғына, яй ғына үтеп китһә, фәндең ҡәҙерен белеп бөтөрмәгән булыр ине, бәлки. Ике тапҡырлыҡ шуны белергә ярҙам итте. Алдау, ваба микробтарылай, фән донъяһына ла үтеп инә, имеш. Алдашыу аҫыл ир-егеттәрҙең башына етә. Алдашыу батшаларҙы харап итә. Алдашыуға ҡоролған ил фажиғә һаҙлығына бата.

Йәнә өйәңке яҙмышына ҡайтайыҡ. Әлеге кәкрәйеберәк торған ботағы, тураһына таба тартылып, барыбер үҫеп китте. Ул кәкрелек хәҙер һиҙелмәй ҙә хатта. Үҫә-үҫә ботаҡтар бер-береһенә керешеп китте. Кәкре яҡты яҙыусылыҡ шөғөлөнә оҡшата профессор. Егермеләп сәхнә әҫәре яҙҙы. Улар Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында, башҡа урындарҙа ҡуйылды. 70 менән 80 йәш араһында һигеҙ роман ижад итте. Ваҡ-төйәге менән иҫәпләгәндә, хәҙер 60-ҡа яҡын китап авторы инде ул. Өйәңкенең кәкрәйеберәк торған олоно ла турайыбыраҡ китте хәҙер. Ике олондан сыҡҡан ботаҡтар бер-береһе араһына керешеп, ҡосаҡлашып алдылар. Хәҙер инде өйәңке имәнес ҙур, мөһабәт, һөйкөмлө "йәшел шар"ға әйләнде. Элеккеһенә ҡарағанда ла матурыраҡ. Ул йәй көнө осло тау дәүмәллеге йәшел кәбәнде лә хәтерләтә. Шаһиәхмәт улының әҫәрҙәре лә, фәнни хеҙмәттәре лә шул кәбән эсендә. Күп тармаҡтарҙан торған ижад кәбәненең осланыуына шатланырға ғына кәрәк.

2008 йыл. 13 июнь. 8 сәғәт. Балконға сығып, Шаһиәхмәт улы бөгөнгө алһыу ҡояш нурҙары, "йәшел шар" менән иҫәнләште. "Өфө иркен тын ала"… Үҙе лә иркен тын ала-ала, фатиры эсенә инеп, яҙыу өҫтәле артына ултырҙы. Асыҡ форточканан бал еҫе беленә. Тимәк, тәҙрә ҡаршыһындағы йүкә бал менән тағы ла нығыраҡ ҡойонған. Бал! Бал!! Бал!!! Башҡортостан – бал иле. Башҡортостан балын американдар ҙа ләззәтләнеп ашай. Өфө урамдарында бал еҫе аңҡый. Йүкә ағастары араһында һандуғастар һайрай. "Өфө – бал һәм һандуғас ҡалаһы" тип яҙып ҡуйҙы профессор көндәлегенә. Баллы һәм һандуғаслы бүтән ҡала ер йөҙөндә бармы?

Көндөҙгө 12 сәғәттә ҡапыл телефон шылтыраны:

– Курск дуғаһында күрһәткән ҡаһарманлыҡтарың менән ҡотлайым, гвардия старшинаһы Сәлим Шаһиәхмәт улы Пирмөхәмәтов!

Тауышынан уҡ танып алды – йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы Таһир Ахунйәнов ине.

– Рәхмәт! Ниңә кинәт кенә ул көндәрҙе иҫкә алдың әле, Таһир Исмәғилевич?

– Был көндәрҙә, бынан 65 йыл элек, һин Курск дуғаһындағы ут уртаһында инең. Ҡаһарманлыҡ күрһәттең. Полкта "За боевые заслуги" тигән миҙалды иң беренсе һинең күкрәгеңә таҡтылар. Ҡотлайым. Байрам ит! Роман яҙып ултыраһыңдыр әле. Ҡәләм осоң һаман ожмах эҙләйме?

– Башҡортостан – үҙе ожмах ул. Шул хаҡта уйлап ултырам әле.

Улар оҙаҡ ҡына һөйләште. Эшкә күмелеп, Курск дуғаһындағы һуғыш утының иң ҡаты дөрләгән көндәре икәнлеген дә онотҡан икән Шаһиәхмәт улы. Шулай ҙа уны хәтергә төшөрөүселәр күп. Шуларҙың береһе – иң әһәмиәтлеһе – Рәсәй Федерацияһы Президенты Д. Медведев ғали йәнәптәре ҡотлауы булды. Ул былай яҙылғайны:

*"Уважаемый Салим Шахиахматович!"*

*Примите самые сердечные поздравления с 65-летием Курской битвы!*

*В историческом сражении на "Огненной дуге" ярко проявились*

*самоотверженность и отвага советских солдат и офицеров, мастерство полководцев и превосходство нашей военной техники. Разгром гитлеровских полчищ на Курской дуге внес коренной перелом в ходе Великой Отечественной войны, открыл дорогу на Берлин.*

*В Вашу честь прогремили залпы первого победного салюта в Москве. Время не властно над памятью, и подвиг поколения победителей вечно будет жить в наших сердцах, в сердцах наших детей и внуков, служить ярким примером героизма и беззаветной любви к Родине!*

*Здоровья Вам, благополучия и всего самого доброго!*

*Президент*
*Российской Федерации Д. Медведев.*

Уны төрлөсә атанылар: “утлы дуға”, “утлы йомғаҡ”, “тамуҡ уты”. Иң ажарлы, дәһшәтле, утлы көрәш унда 1943 йылдың 5 июлендә башланды. Прохоровка станцияһы янында, 5 августа, беҙҙекеләр Белгородты алғас, һүнде Курскиҙың тамуҡ уты. Шул уҡ көндө Мәскәү еңеү салюты бирҙе. Хәҙер тикшереп ҡараһалар, тамуҡ утынан дүрт процент һуғышсы ғына иҫән сыҡҡан... Шул яугирҙарҙың бер бәхетлеһе – Сәлим Шаһиәхмәт улы Пирмөхәмәтов.

Башҡорт полкы ут эсенә беренсе мәртәбә 1943 йылдың 11 июлендә ташланды. Сәлим беренсе көндө үк фашистарҙың бер танкыһын тонсоҡторҙо. Торараҡ уның расчеты ҡамалышҡа эләгә. Өс тәүлек буйы ас килеш һуғышалар, 40 яугирҙан дүртеһе генә иҫән ҡала.

Шуларҙы иҫкә алды Шаһиәхмәт улы. Көнө буйы эшләп арығас, кисен Ҡояш менән хушлашырға балконға сыға ул. Бөгөн дә шулай итте. “Беҙ – Ҡояш балалары”, – тип тә һөйләшәбеҙ. Сөнки Ҡояш – галактикабыҙҙың үҙәге. Ер шарындағы тормош-көнкүреш дилбегәһе Ҡояш ҡулында. Ер һәм Ҡояш йөрәге Аллаһы Тәғәлә рухиәте менән бәйләнгән. Ысынбарлыҡҡа ышандырырға теләгәндә, Ҡояшҡа ҡарап ант итәбеҙ. “Ҡояшта ла тап бар”, – тип әйтеү дөрөҫлөккә тура килеп бөтмәй. Ул тап түгел. Ерҙәге бәғзе изге есемдәрҙең тышҡы сифаты сағыла унда. Был – Ер йөрәге менән Ҡояш йөрәгенең бер илаһиәт сылбыры менән бәйләнеше. Ҡояш Ер шарындағы ваҡиға-күренештәргә ҡатнашып тора. Байырға янып барған ҡояш. Түңәрәк шар шәкелендәге ҡояш уттай яна. Ут үҙе аҡһыл-алһыулы шыйыҡса – алһыу, ҡыҙғылт тәгәрмәс менән уратып алынған. Бер аҙҙан Ҡояш-ут офоҡҡа килеп терәлде. Тиҙҙән Ҡояш төшөп сумды. Офоҡ тирәһендәге ҡып-ҡыҙыл нурҙар һаман янып тора. Был Ҡояштың инсаниәткә тыныс йоҡо теләп, ҡул болғауылыр, моғайын. Үҙ балаларының тәмле төш күреп йоҡлауын Хоҙайҙан үтенеп һорауылыр.

Бер аҙҙан, ҡараңғылыҡ төшә башлағас, офоҡта төрлө төҫтәге болоттар пәйҙә булды: күк, аҡһыл күк, зәңгәр күк, ҡара күк, ҡарағусҡыл күк... Уларҙан хәҙер ерҙә була торған төрлө есем-әйберҙәр яһала: береһе дөйәғошҡа, икенсеһе дөлдөлгә, өсөнсөһө арыҫланға оҡшаған. Бәй, һуғыш техникаһы ла бар ҙаһа: танк, миномет, пушка...

2008 йыл. 14 июль. Ғабдулла Туҡайҙың “Уянғас беренсе эшем” тигән яҙмаһын хәтерләне Сәлим Шәһиәхмәт улы. Төрки телдә һөйләшеүсе халыҡтар шиғриәте майҙанында алтын бағана булып балҡыған Туҡай 27 йәшендә классиктар тажы сифатына баҫа. Уның шулай икәнлеген Туҡай үҙе лә аңлай. Ижадының шишмә башында уҡ ҙур поэтик диңгеҙ тураһында уйлана. Ул замандарҙа Байрон ер йөҙөндә беренсе шағир булып иҫәпләнгән. Лермонтов яҙа башлағанда уҡ Байрон дәрәжәһенә күтәрелеү маҡсаты ҡуя. Лермонтов йөрәгендәге был поэтик

ялҡын Туҡай йөрәгенә лә күсә. Икенсе төрлө әйтһәк, Лермонтовтың: “Мин Байрон юғарылығына күтәрелергә теләйем”, – тигән хыялын эләктереп ала Туҡай. Пушкин поэзияһының йәненә, ҡан йөрөшөнә, йөрәгенә инеп китә. Уның шулай икәнлеге һүҙҙә генә түгел, баҫмала ҡала: “Пушкин, Лермонтов, Туҡай – өс йондоҙ ул”, – ти Туҡай. Хәҙер Туҡайҙы Ҡытай менән сиктәш йәшәгән ҡырғыҙҙар, Рәсәй Федерацияһындағы, сит мәмләкәттәрҙәге башҡа милләттәр ҙә, Байрон илендәге инглиздәр ҙә уҡый.

“Уянғас беренсе эшем”дә Туҡай талапсанлығы арҡаһында баҫмаға эләкмәйенсә ҡалған әҫәре, сүп өйөмө булып ятҡан төрлө ҡарамаларҙан арынырға теләүе тураһында яҙа. Ундай “сүп өйөмдәре” Сәлим Шаһиәхмәт улында ла быуа быуырлыҡ. Ваҡыт-ваҡыт уларҙы архивҡа тапшырырға ла уйлай. Шулай ҙа, ниңәлер ҡыйынһына. Улар араһында әле сабата яһаған саҡтарындағы яҙмалары ла бар. Шуларға һуғыштағы, унан һуңғы йылдарҙа яҙған көндәлектәр ялғанып китә. Бына “Директор көндәлеге”.

“1957 йыл. 11 октябрь. Баҡсалағы алмағастарҙы кәзә кереп кимергән. Ни ҡәҙәр хеҙмәт бушҡа китте. Мин бик әсендем. Йыйыштырыусыларға ҡысҡырынырға, екеренергә тура килде. Ике йыл эш дәүерендә кешеләргә былай ҡаты бәрелгәнем юҡ ине. “Ҡысҡырыныу – көсһеҙлөк бәләһе”, – тип әйтәләр – раҫ икән. Ысынлап та, кеше эштең һөҙөмтәһен аңламаһа йәки аңлата белмәһә, ул ҡысҡырыныу юлына баҫа. Мин дә бөгөн үҙемде шундай ахмаҡ тип хис иттем. Оҙаҡ үкенеп йөрөнөм”.

“1957 йыл. 12 октябрь. Мәктәптең утыны әле һаман ташылмаған. Ул Ағиҙел аръяғында. Паром менән был яҡҡа сығарырға кәрәк. Халыҡ грипп менән ауырый. Грузчиктар табып булмай. Ә һуң үҙебеҙ, уҡытыусылар, утынды тейәп, бушата алмайбыҙмы ни? Көн һалҡын. Коллектив менән 45 кубометр утын сығарҙыҡ. Ауыр булды, әлбиттә, ләкин берәү ҙә ыңғырашманы”.

**Бына университеттағы группа етәксеһе көндәлеге.**

*“25.09.1966. Минең группа студенттары колхоз эшенән ҡайтты. Дөйөм ятаҡҡа барҙым. Ғәлимова менән һөйләштем. Былай һәйбәт кенә эшләгәндәре һиҙелә. Колхоз аҡса биреү мәсьәләһендә йомартлыҡ күрһәткән. Ләкин егеттәр һуғышҡандар.*

*27.09.1966. Тимершин янына барҙым. Ҡылған эше өсөн бик үкенә. Ғәфү үтенде.*

*28.09.1966. Мөхәммәтов менән һөйләштем. Ул миңә күҙ күтәреп ҡарарға ла ояла. Бынан һуң бындай ахмаҡлыҡ булмаҫ, ти.*

*29.09.1966. Һуғышыу мәсьәләһендә группа старостаһы Үзбәк, комсорг Лүзә, профорг Вәжиһә менән махсус һөйләштем. Улар был күңелһеҙ хәлде группа йыйылышында ҡарарға тәҡдим иттеләр. Йыйылышта, куратор булараҡ, мин дә ҡатнашырға тейешмен”.*

Етмеш йыл буйы яҙылған көндәлектәр үҙҙәре генә әллә нисә томлыҡ. Әлбиттә, бәғзеләре нигеҙендә хикәйә, хәбәрнамә, тағы ла әллә нимәләр яҙылды. Бына әле аҡтара-аҡтара, көндәлектәренең йәнә береһенә туҡталып ҡалды: *“12.III. 1947. Австрия. Вена ҡалаһы. Бараҡтарҙа йәшәйбеҙ. Шунан беҙҙе Рәсәйгә оҙатырға тейештәр. Беҙҙең өсөн әҙерләнәсәк махсус товар вагондары эшелонын көтөп ятабыҙ. Бында һуғыштан ҡасҡан дезертирҙы тотоҡ, судты үҙебеҙ яһаясаҡбыҙ. Мине судья итеп ҡуйҙылар. Көләһе лә, илайһы ла килә. Мин ниндәй судья инде? Етмәһә, дезертир – ауылдашым. Уға үлем язаһы бирергә тейешбеҙ”.*

III

Гвардия старшинаһы Сәлим Шаһиәхмәт улы Пирмөхәмәтовтың сумаҙанын сәлдереүсе әлеге шул дезертир сержант Мәхмүт булып сыҡты. “Караҡ”ты 469-сы миномет полкында разведчик хеҙмәтен үтәгән Карабанов тота. Карабанов һуғыш сығырҙан бер йыл алда 12 йылға хөкөм ителә. Өфө төрмәһенә ябыла. Бик уҫал, көслө, ғәйрәтле була, төрмәлә “башлыҡ” вазифаһын башҡара, көсһеҙҙәрҙән көлөргә ярата. Бәғзе зәғиф алабарманды башы менән “парашка”ға тығып алыуҙан ләззәт таба. 1942 йылдың аҙаҡтарында Өфө төрмәләренән тотҡондарҙы фронтҡа оҙатыу мәсьәләһе ҡаралғас, улар араһында зобаный Карабанов та була. Таутөмән ауылында ойошҡан 469-сы миномет полкы һалдаттары сафына килтереп баҫтырғас, уҫал айғырҙай тиберсенә ул. Сафҡа баҫтырғас, “равняйсь”, “смирно” уның өсөн диуарға борсаҡ менән бәргәндәй ҙә тойолмай. Өйҙән өйгә йөрөп, ҡурҡытып, тамаҡ туйҙырып йөрөй. Бындай “бандитты” һуғышҡа алып, ниңә уның ҡулына ҡорал бирергә? Ул бит иң яҡын командирын атып ҡасыуҙан да ҡурҡмаҫ. Ишәкте – толпар, ҡарғаны – бөркөт, тауыҡты – аҡҡош итеп булмағандай, төрмәлә кешелеклелек сифаттарын юғалтҡан был алйоттан әҙәм рәте һуғышсы сыҡмаясаҡ барыбер, тип уға ҡул һелтәүсе командирҙар аҙ булманы. Тик үҙенең талапсанлығы, кешелеклек сифаттары, аҡыллы фекер йөрөтөү яғынан күптәрҙән өҫтөн торған полк командиры майор Чернявскийҙың аҡыл ҡаҙанында башҡасараҡ уй ҡайнай ине.

– Түҙегеҙ, сабыр итегеҙ, тәрбиәләгеҙ, уларҙың йыртҡыс йәнлек түгел, кеше балаһы икәнлеген онотмағыҙ, – тигән һүҙҙәрҙе йыш әйтергә тура килде уға.

Карабановтың ҡанында ниндәйҙер ҡыҙыулыҡ уты бар. Бер баҫаһы урынға биш баҫып торорға ярата. Үҙе былай йәмһеҙ ҙә түгел ул. “Кара сибәр” тип әйтергә лә мөмкиндер. Күҙҙәре – ҡарағусҡыл. Ул күҙҙәр әсәнән тыуғанда матур, нурлы, мәрхәмәтле булғандыр. Хәҙер улар уттай янып, уйнаҡлап тора. Ҡыҫҡаһы, ҡурҡыта торған ҡараш. Ул Курск дуғаһында һуғышҡанда Сәлим етәкселегендәге расчетҡа килеп эләкте. Кешеләргә ҡарата полк командиры майор Чернявскийҙың изге тойғоһо нисегерәк булһа, расчет командиры Сәлим Пирмөхәмәтовтыҡы ла шулайыраҡ. Кешегә йыртҡыс күҙ менән түгел, аҡыллы күңел тәҙрәһе аша ҡарарға кәрәк.

Шулай эшләргә ҡушты Сәлимдең аҡыл гәүһәре. Тик был тормошта бөтәһе лә һин уйлағанса түгел, ниндәйҙер башҡа, серле, йәшерен көстәр ярҙамында барғанлыҡты Сәлим аңлап бөтөрмәй ине әле ул ваҡытта. Төрмәләге, Таутөмәндәге уҫал ғәҙәттәре, һуғыш тирмәне аҫтында бер аҙ йыуашлана башлаһа ла, Карабанов ҡанындағы йыртҡыслыҡ ялҡыны һаман дөрләй әле. Сәлим уны үҙенең сабыр тәбиғәте менән һүндерергә тырышып та маташты, ләкин ул ыҙа сигеүгә Карабановтың утлы ҡарашы яңы ялҡын өҫтәй. Был Сәлимде ҡурҡытмай, әлбиттә. Уның расчетында йәнә икәү – Сергей, Нурғәли бар. Уларға ла һалдат бутҡаһы ашатыу еңел булманы Сәлимгә. Ә Карабановты бутҡа менән генә ҡәнәғәтләндереп булмай. Уға батшалар ризығы кәрәк. Тик бына хәрби техника уның тамағын йырта. Осҡондар сәсеп торған утлы күҙҙәренә, бер баҫаһы урынға биш баҫып тороуына, әллә нисә двигателде алыштырырлыҡ энергияһы тураһында уйлап, башта Сәлим уны төҙәүсе (наводчик) итеп ҡуйҙы. Бында сәғәт уғылай теүәл эшләргә кәрәк. Угломер, прицелды ҡуйғанда бер миллиметрға яңылыштың – минаң сәпкә барып төшмәй, һөткә китә (“һөткә китеү” – минометсылар уйлап тапҡан ғибәрә). Полк минометының һәр минаһы 16 килограмм. Атҡан ваҡытта уны сәпкә туп-тура төшөрөү өсөн Карабановтағы ут булыу ҡиәфәте, утлы ҡараш менән эш итеүе, пәрей ҡалтырсаһылай дыр-дыр ҡыланышы һис тә ярҙам итмәй. Бындай

ҡыланыу әлеге миллиметрҙар менән эш итеү әрәсәһен боҙоп ташлай. Бында Сәлимдә булған сабырлыҡ тәбиғәте, минометтан яҡшы атыу сәнғәтен үҙләштереү оҫталығы, маҡсаттың йөрәгенә күңел уғы менән тондора белеү мөмтазлығы йәки мөмкинлеге кәрәк. Быларҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн Карабановтың ҡауҙырлығы хыянат итте.

Шунан Карабановты ҡороусы (заряжающий) итеп ҡуйҙы. Бер ботлоҡ минаны минометтың көбәгенә һалыу – Карабановҡа бәрәңге ашау кеүек кенә. Бында ла, кем әйтмешләй, мәсьәләнең “әтнәкәләре” күп. Тутыҡҡан, зарядтары дөрөҫ кейҙерелмәгән мина үҙенең төшөп ярылырға тейешле урынын таба алмай. Бында ла Карабановтың иғтибарһыҙлығы ҡамасаулай. Шунан Сәлим уны мина ташыусы итеп ҡуйҙы. Был да бик яуаплы эш. Осҡанда бармаҡ йыуанлығы ботаҡҡа тейһә лә, ярыла мина.

Бер ваҡыт ҡауҙыр Карабанов бер минаны яңылыш ҡулынан төшөрөп ебәрә. Уның шундуҡ ярыласағын аңлап, һеләүһен тиҙлеге менән йәһәт кенә окопҡа һикерә был. Мина шартлай – Карабанов иҫән ҡала. Иҫән ҡалыуына ут кеше булыу хикмәте ярҙам итә. Бер ныйылдаҡ булһа, теге донъяға паспортһыҙ ғына китеп барыр ине.

Нисек кенә булмаһын, минометтан оҫта атыу серҙәрен үҙләштерә алмағанлыҡтан, Карабанов разведкаға китеү юлдарын эҙләй башлай. Бик үтенеп һорағас, беренсе батарея командиры капитан Исхаҡов уның теләгенә ризалыҡ бирә.

Разведкала иҫ киткес хәрби оҫталыҡ күрһәтә Карабанов. Уның хаҡында төрлө атамалар барлыҡҡа килә: Овчарка, Һеләүһен, Суртан... Карабановҡа ҡушһаң, генерал ҡуйынындағы ҡыҙҙы тартып алып ҡасырға хәйләһе етәсәк, тип тә ҡупайталар.

Бер ваҡыт, Яссы-Кишинев операцияһында ҡамауҙа ҡалғас, Сәлимдең яратҡан ҡыҙы, телефонсы Алтынай, котелок менән һыу эҙләп китә. Ләкин ул юҡ та юҡ. Шунан йөрәк яндырғыс хәбәр килә: Алтынайҙың сибәрлегенән фашист йыртҡыстары файҙалана, имеш. Быға ҡәҙәр “сабыр һуғышсы” атамаһы алған Сәлим йөрәгендә дошманға ҡарата яңы нәфрәт дөрләй. Нисек ҡотҡарырға Алтынайҙы? Взвод һәм батарея командирына ул, Алтынайҙы табыу һәм язаларҙан ҡотҡарыу өсөн, дошман тылына разведкаға ебәреүҙәрен үтенә. Ләкин улар рөхсәт бирмәй. Был ваҡытта элекке беренсе батарея командиры Исхаҡов полк менән етәкселек итә башлағайны инде. Шуға мөрәжәғәт итә Сәлим. Башта Исхаҡов та икеләнә. Сәлим – полктың беренсе батареяһындағы беренсе расчет командиры. Был расчет һынау атыуы яһай. Ул алған сәп буйынса бөтә батарея, бәғзе ваҡыт бөтә дивизион ата. Шуға күрә Сәлим Пирмөхәмәтов ғүмере бөтә полк өсөн ҡәҙерле. Разведкаға китеп, юғалған мөхәббәтен эҙләп йөрөү – уның эшеме? Был бик хәүефле бит. Сәлимде юғалтыу – полк фажиғәһе менән бер. Шул хаҡта һөйләй яңы полк командиры. Шулай ҙа сигенмәй Сәлим.

– Курск дуғаһындағы утта янманым, Днепрҙың ҡанлы һыуында батып ҡалманым, Көнбайыш Аурупа илдәрендә лә һынатмам, мин үлмәйәсәкмен. Ышанығыҙ, иптәш полк командиры, мөхәббәтемде табып алып ҡайтасаҡмын, – тип ялына Сәлим.

Полк командиры Исхаҡов ғәжиз булып ҡала. Үҙенең мөхәббәт фажиғәләрен күп кисергәнлеген уйлап, рөхсәт бирә, киҫәтеү ҙә яһай:

– Бына нимә, Пирмөхәмәтов, разведкаға һине бөтөнләй күсермәйбеҙ. Һинең кеүек оҫта атыусыны табыу – һалам эҫкертенән энә эҙләү менән бер. Мөхәббәтеңдең ысын, ҙур, ихлас икәнлеген аңлап, дошман тылына китергә рөхсәт итәм, үҙеңдең урыныңа кемде ҡалдыраһың?

– Яңы төҙәүсем яҡшы ата.

– Улайһа, бына нимә, мин һине Овчарка – Карабанов менән ебәрәм, әйҙә, табығыҙ мөхәббәтеңде.

– Иҫән-аман йөрөп ҡайтасаҡбыҙ, иптәш майор, Карабанов менән!

– Ышанам!

“Ышанам” тигән һүҙ фәрештәнең “амин” тигән сағына тура килгәндер: фашистар тарафынан үлем сигенә еткергәнсе туҡмалған Алтынайҙы табып алып ҡайталар.

...Сәлимдең бер сумаҙаны юғалғас, уны эҙләргә Карабанов китә. Овчарка тапмай ҡаламы? Дөйә урлаған да – бур, энә урлаған да – бур. Хәҙер инде суд яһаганда дезертирлығына бурлыҡ оңҡотлоғо өҫтәлеп тикшереләсәк. Мәгәр “атаман” Карабановтың йөрәген бер шик ҡорто кимерә. Нимәләр тултырған Сәлим ул ике ҙур сумаҙан эсенә? Әллә берәй ерҙән аҫыл әйберҙәр сәлдергәнме? Шул хаҡта һораны Карабанов.

Былай булды. Венгрияла хеҙмәт иткәндә, Татабанья поселогынан Сомбатель ҡалаһына күскәс, Сәлим Пирмөхәмәтовты старшина итеп ҡуйҙылар. Бер ярышта ҡатнашыу өсөн бөтөн полк данын тоторҙай төҙәүсе таба алмайҙар. Ике иңбашына һалдат погоны таҡтылар ҙа ебәрҙеләр Сәлимде ярышҡа. Бына атып торҙо, исмаһам. Бер сәпте алыу өсөн егермеләп мина сарыф итеүселәр ҙә булды. Өс мина менән сәпкә сәпәй ҙә тора Сәлим. Оҫта атыуы менән ул һуғыш ваҡытында 5-се гвардия армияһы командующийы генерал лейтенант Жадовты, шул уҡ армияның артиллерия начальнигы генерал-майор Полуэктовтарҙы хайран ҡалдырғайны. 1946 йылда була был хәл. Мәргән атҡаны өсөн гвардия старшинаһы Пирмөхәмәтовҡа 48 көнлөк отпуск бирелә. Ә инде бер корреспондент шәп атыу серҙәре тураһында армия гәзитенә мәҡәлә яҙырға ҡуша. Яҙа Сәлим. Ҡарышмай. Баҫылып сыҡҡас, йөҙ һум гонорар килә быға. Ни кәрәге бар уның Венгрияла? Ошо һорау борсой Сәлимде. Башта уға Рәсәйгә ебәрергә кәңәш итәләр. Тыуған-тыумасаларына йөҙ һумға бер кило он да бирмәйҙәр. Йөҙ һумды ебәреү – үҙеңде кесерәйтеү, туғандарыңды мыҫҡыл итеү буласаҡ.

Бер ваҡыт, әлеге яҙырға ҡушҡан хәбәрсе килеп, ҡала банкыһында рус аҡсаһын венгр пенгоһына алыштырыу мөмкинлеге барлығы тураһында әйтте. Әлбиттә, корреспонденттар өсөн генә. Алыштырҙылар. Сәлим өсөн хәбәрсе булыу һөнәренең шишмә башы ине был. Беренсе гонорар. Аҡса шаҡтай мул эләкте. 400-ҙән артыҡ пенго бирҙеләр. Ҡайҙа ҡуйырға был тиклем күп венгр пенгоһын?

Ҡарлуғас балаларын осорға айыу өйрәтмәгәндәй, үҙ хеҙмәтеңде үтәргә батша кәрәкмәй икән. Үҙ аҡыл йүгәнен тотоп, китте был магазиндар эҙләп.

Полк Чехословакиянан Венгрияға сыҡҡан ваҡытта пенгоның ҡәҙере бөтөнләй бөткәйне. Быға әлеге лә баяғы шул ҡәһәр һуҡҡан һуғыш ғәйепле. Пенгоны ҡапсыҡ менән йөрөтәләр. Бер ҡап шырпы... миллион самаһы тора. Унан ҡапыл ғына реформа булды. Бөтә нәмә арзанайҙы. Колбаса, май, шарап, икмәк – тиндәр генә тора. Ә СССР-ҙа әле аслыҡ. Ниңә шулай? Күпте белергә теләгән һалдат был хаҡта ла төпсөнә. Төпсөнөүҙең төбө тишелмәйенсә, сере асылмайынса ҡалмай. Тишелде лә, асылды ла. Венгрия – бәләкәй мәмләкәт. Уға һуғыш ҡоралдары әҙерләргә кәрәкмәй. Ҡыҫҡаһы, ил ҡаҙнаһы – халыҡ ҡорһағына. Рәсәй өсөн һуғыш бөтөнләйгә бөтмәгән әле. Һуғыш йылдарындағы “дуҫтар” (Америка, Англия) яңы ут-дауыл тураһында хыяллана. Илебеҙ ҡаҙанында аҙыҡ-түлек түгел, һаман хәрби техника ҡайнай. “О, бедная Россия”

тигән яман һүҙҙәр ҡолаҡ барабандарын ҡоторған елдәй бәреп инеп, йөрәк төпкөлөн әрнетеп тора. Ә Венгрия магазиндарында ашамлыҡ-эсемлек кенә түгел, кейем-һалым да арзанланып китте. Матур, килешле, аҫыл, күҙ яуын алырҙай зиннәтле костюм хаҡы – 12 пенго. Әлеге 400-ҙән артыҡ пенгоны алып ҡайтып китеү – урмандан өйгә яғырға ярамаған утын ташыу һымаҡ ҡына. Тотонмаһынмы Сәлим пенголар менән кейем-һалым байлығына инеп сумырға. Костюм, пальто, күлдәк, бүтән затлы әйберҙәр ала-ала, ике ҙур сумаҙанын дыңҡыслап тултырҙы ла ҡуйҙы. Быға уның мөмкинлеге лә бар. Ул – старшина. Бер үҙенә бер бүлмә. Һалдаттарға алмашҡа бирә торған эске күлдәк-ыштан, гимнастерка, башҡа кәрәк-яраҡтар шунда һаҡлана. Нимә улар? Бәхетме?

“Бәхет” тигән өмөтлө һүҙҙәр ҙә бик ҡаршылыҡлы. Сепрәк-сапраҡ байлығы бәғзе берәүҙе фажиғә һаҙлығына батыра. Был фажиғә Сәлим тирәһендә лә ҡоҙғондай ҡарҡылдап торған икән. Мәсьәлә шунда: сафҡа теҙеп, оҙатыусыларҙың һалдат тоҡсайын тикшерәләр. Унда һалдат өсөн ҡаралғандарҙан тыш энә лә булырға тейеш түгел. Артыҡ икән, уны алып ҡалалар. Бөтә фронт буйынса атыу оҫталығы күрһәткән Сәлим сафҡа ике сумаҙан күтәреп теҙелергә тейешме? “Байлыҡҡа ла оҫта ата белгән икән был”, “мал ҡоло икән”, тип һатасаҡтар ғәйбәтте.

Шуны уйлап, ике сумаҙанды алманы Сәлим. Сафҡа һалдат ҡапсығы тотоп ҡына теҙелде. Старшиналыҡ вазифаһын ул фронтташы, өлкән сержант Чумаковҡа тапшырғайны инде.

Улар араһында ошолайыраҡ һөйләшеү булды:

– Бына был ике сумаҙан һиңә ҡала, Чумаков.

– Аңламайым, иптәш старшина.

– Һалдат ҡанунын беләһең.

– Һуң бит… гонорар аҡсаһына.

– Аңлатырһың уларға быны...

– Ә шулай ҙа... Мин бынан китмәйәсәкмен… Төнө буйы көтәсәкмен... Бер яй табып килергә тырышығыҙ...

– Белмәйем... Вәғәҙә бирә алмайым... Ә бәлки....

– Көтәм, иптәш старшина...

Улар, фронтташ дуҫ булараҡ, ҡосаҡлашып, ҡат-ҡат үбешә-үбешә айырылыштылар. Сәлим, һалдат тоҡсайын иңбашына элгән хәлдә, сығып йүгерҙе. Ни ҡылырға ла белмәй аптыраған Чумаков, тораташтай ҡатып, оҙаҡ ҡына баҫып торҙо.

***

Венгрияның Сомбатель ҡалаһындағы һалдаттар торған был урын өс метр самаһы бейек таш ҡойма менән әйләндереп алынған. Ныҡлы тимер ҡапҡаһы төбөндә һәр ваҡыт һаҡсы тора. Казармаларҙа яйлашҡан һалдат, ефрейтор, сержант, старшиналарға ҡалаға сығып йөрөргә рөхсәт ителмәй. Шулай ҙа һалдат антына туҙан төшөрмәй, яҡшы хеҙмәт иткәндәргә аҙнаһына бер мәртәбә ҡала урамдарын тапаштырып ҡайтыу бәхете йылмая. Офицерҙар ҡала фатирҙарында йәшәй. Таш ҡойма менән әйләндерелгән был урын ҡасандыр ниндәйҙер крепость булған, имеш. Бейек тимер ҡапҡаһынан сығарып бөтөргәс, дембелгә оҙатыласаҡтарҙы сафҡа теҙеп, төньяҡ-көнбайышҡа табан алып киттеләр. Оҙаҡ та барылманы. 500 метр самаһы юл үткәс, ниндәйҙер бараҡтарға килтереп тултырҙылар. Араларында Карабанов та бар ине. Ике тәүлектән һуң улар шунан ҡайҙалыр оҙатылырға тейеш.

“Ике тәүлек” тигәне Сәлимде шатландырып ебәрҙе. Сөнки уға ике сумаҙанын алып килергә кәрәк. Был хаҡта ул әле тегендә, әле бында ороноп йөрөгән Карабановҡа һөйләне. Фронтта Овчарка атамаһы алған разведчик өсөн ул

сумаҙандарҙы алып килеү – сәүкә тотоуҙан да еңелерәк кеүек тойолдо. Хатта шатланып ҡуйҙы.

– Ҡайғырма, брат, әсирлеккә эләккән Алтынайыңды фашист тырнағы аҫтынан урлап алып киттек бит, ә былар – үҙебеҙҙекеләр... – тине ул.

– Үҙебеҙҙекеләр ҙә бит... Ҡапҡа тимерҙән... Ҡойма таштан...

– Таш стенаның аҫтынан соҡоп үтәбеҙ. Төндә көрәк табырға кәрәк.

“Аҡыллы уйлағансы, ахмаҡ эшләп ташлаған... Мәгәр Карабановҡа һис тә “ахмаҡлыҡ” эшләпәһе кейҙерәһе килмәй. Ныҡлап, төптән, кешеләрсә уйлаһаң, ул, ғөмүмән, ахмаҡ түгел: төрмәгә уны ғәйепһеҙ ултыртҡандар. Шунан уның күңеленә кешеләргә ышанмау ҡоромо ултыра. Был ҡором әкренләп баш мейеһе күҙәнәктәренә тарала. Ундағы аҡыл хис нейрондары менән аралашып китә. Ҡоторта, енләндерә, ҡанды ҡайната, ваҡыт-ваҡыт тилебәрән орлоғо ашап ахмаҡланған кешегә оҡшата.

Ундай “ахмаҡлыҡ” йылдары үтте инде Карабановтың. Һуғышта үҙенең яҡшы разведчик икәнлеген танытты. Ҡайтҡас, Халыҡ-ара разведка идаралығы мәктәбендә уҡырға хыяллана. Бирһен Хоҙай! Тик ата-әсәһе юҡ. Таяныҙҙай, арҡалаш булырҙай туғандары ла юҡ икән. Хәйер, ул мороно менән боҙ яра торған зат. Яра-яра алға барыр барыбер. Маҡсатына ирешмәйенсә ҡалмаҫ. Әле бына ҡайҙандыр көрәк табып алған. Ҡараңғы төшкәс, Сәлим менән икәүләп китеп, таш ҡойма аҫтын соҡоп үттеләр. Сәлим ҡулына көрәгенн тотторманы ла.

– Үҙем, үҙем, – тип соҡой бирә. Артыҡ ашыҡмай ҙа. Мәгәр һол менән ҡылана. Ҡулындағы көрәге уйнаҡлап тора.

Чумаков һүҙендә торған. Фронтовиктарса йәнә ҡосаҡлашып һаубуллашҡас, ике сумаҙанды алып, бүлмәнән сығып та киттеләр. Чумаков хәйерле юл теләйтеләй оҙатып ҡалды.

...Ике сумаҙан тарихын һөйләп биргәс, Карабанов Сәлимгә күҙ ҡыҫып ҡуйҙы:

– Бөтә нәмәгә оҫта ата беләһең, бәхетле булырһың һин!

– Бәхет ул, Карабанов, алышынып торған мөхәббәт менән бер.

– Эйе, алыштыра ла беләһең. Ауылыңда – Мәрйәм. Һуғышта – Алтынай. Һуғыштан һуң – Гизелла. Ә минең берәү ҙә юҡ.

– Һин оҫта разведчик. Табырһың мөхәббәтеңде.

– Әйтеүе генә еңел. Һинең ус төбөңә улар ҡош булып килеп ҡуна. Ә миңә йүнһеҙгә, яҡын килергә лә ҡурҡалар. Тирә-яғымда осоп йөрөйҙәр-йөрөйҙәр ҙә, алйот икәнлегемде белгәс, төкөрөп ҡасалар. Әллә мин бөтә яҡтан да бәхетһеҙме?

– Һин яҡшы күңелле кеше, Карабанов.

– Әллә...

Был минутта Карабановты ҡыҙғанып та ҡуйҙы Сәлим. Өҫтөндәге гимнастеркаһының да рәте юҡ. Уйҡып-уйҡып туҙған. Аяҡтарындағы кирза итектәренең башы тишек. Пилоткаһы ла бәлшәйеп төшкән.

– Карабанов, минең сумаҙандарҙа ике костюм бар. Шуларҙың береһен бүләк итәйем әле һиңә.

– Кәрәкмәй, старшина, йәлләмә мине. Ундайҙы яратмайым. Үпкә сире менән ыҙа сиккән апайың көткәнлеген беләм. Ҡайтҡас, һатып, шул апайыңды дауаларһың. Һинең уй уҡтарың намыҫлыҡҡа төҙәлгән булһа, минеке – киреһенсә...

– Нисек инде ул киреһенсә?..

– Мин намыҫһыҙ кеше.

– Кит әле, борсаҡ сәсмә...

– Тотам да урлашам.

– Хәҙер разведчик булыуың ярҙам итәсәкме?

– Белмәйем... Шулай ҙа мин намыҫлы кешеләрҙең әйберҙәренә теймәйем. Намыҫһыҙҙарҙыҡын сәлдерәм.
– Һинең менән һөйләшеүе ауыр, Карабанов.
– Эйе, күп ауырлыҡтар килтерҙем һиңә.
– Онотайыҡ быларҙы.
– Юҡ, старшина. Дезертир ауылдашың яңы ут ҡабыҙҙы. Судҡа әҙерләнәбеҙ. Үлем язаһы ул кәзә тәкәһенә...

IV

Суд!.. Уны нисек яһарға? Суд ғәләмәте элек-электән, хан заманынан бирле килә. "Ырыуҙар суды", "ҡәбилә суды", "ҡәүемдәр суды", "халыҡ суды", "урам суды"... тағы ла әллә ниндәйҙәр бар.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында күп кенә подразделениеларҙа "офицерҙарҙың намыҫ суды" ойошторолдо. Сәлим хеҙмәт иткән Башҡорт полкында ла булды ул. Судтың рәйесе итеп беренсе батарея командиры капитан Абдулла Исхаҡов тәғәйенләнде. Был хаҡта һуғыш утында янмайынса иҫән-имен ҡалған һалдаттар, демобилизация бәхетенә эләгеп, хәҙер тыуған яҡтарына ҡоштай осоп ҡайтып китергә ярһығандар яҡшы белә.

Суд мәсьәләһен Карабанов уйлап тапты. Йыйнаулашып кәңәшләштеләр ҙә Сәлим Пирмөхәмәтовты – судья, Рәйесте – прокурор, Әхмәҙуллинды – адвокат, Алдарбайҙы – ултырышсы итеп ҡуйырға булдылар.

Ҡайтыусылар араһында һуғышта төрлө хәрби вазифа башҡарыусылар бар: миномётсы, артиллерист, танкист, пехота... Бараҡтарҙа һаман бер төрлө тормош хөкөм һөрә: өс мәртәбә ашау, кино ҡарау, кәрт һуғыу, әллә ниндәй әңгәмәләр менән баш ватыу, бейеп, йырлап алыу, көләмәс һөйләү, ҡала урамдарында йөрөп ҡайтыу... Шулар өҫтөнә дезертирға суд яһау мәшәҡәте килеп ҡушылды. Ни өсөн дезертир? Быны асыҡлау бик ситен. Хәйер, беҙҙе ҡапсыҡта һаҡлап булмай – барыбер тишеп сыға. Дезертирҙың беҙе лә шуға оҡшаш. Был осло беҙ сере Сәлимгә бәйле асыҡланды.

"Политзанятие" тигәндәре һуғышта ла булып торҙо. "Полк комиссары", "полк замполиты", "дивизион комиссары", "дивизион замполиты", "полк парторгы", "батарея парторгы"... – тағы ла әллә ниндәйҙәре бар. Һуғыш уты тынған арала, гәзиттәрен күтәреп, киләләр ҙә етәләр һалдаттар араһына. Аҙна-ун көн обороналa торған саҡтар була. Һалдат башын ағартырға йөрөгән әһелдәр бындай ваҡытта һыу эсергә ашҡынған өйрәктәрҙәй ябырыла. Шулай кәрәктер ҙә. Мәшәҡәтһеҙ ятҡан һалдат мискәгә әүерелә. Өйрәккә даими рәүештә ашарға биреү талап ителгәндәй, һалдат аңына ла аҡыл гәүһәре тамыҙыуҙы өҙмәҫкә кәрәк. Тик ятҡан һалдаттың аҡыл тамағы тутыға. Һуғыш бөткәнгә ике йыл. Был йылдар эсендә лә һалдаттың аҡыл ҡаҙанын ҡайнатырҙай кәрәк мәғлүмәттәр бирелмәне түгел. Әгәр бер һалдат әбейгә балтанан аш бешереп ашатҡан икән, был да уның хәрби хеҙмәттә алған сослоғона бәйле. Юғары аң – халыҡ аҡылы кәрәҙе. Һалдат аҡылында шул кәрәҙҙең бәлзәмләнеүе бар. Бер полководец генералдарына: "Һалдатты өйрәтеү менән генә ҡәнәғәтләнмәгеҙ, үҙенән дә өйрәнегеҙ", – тигән. Һуғыштан һуң ике йыл буйы хәрби техниканы яңынан ныҡлап өйрәнеп, донъя яңылыҡтары менән танышып барыу, өҙлөкһөҙ уҡыу – һалдат аҡылына яңынан-яңы уй гәүһәрҙәре нағышланы. Ул нағыш Сәлим аҡылында ла шаҡтай мул. Урта белем дәрәжәһенең тәҙрәһен юғары белем алыу өсөн шаҡыйҙыр, бәлки. Ә инде бында, сит ил бараҡтарында, аҡыл нағышының күп ҡанатлы икәнлеген күрһәтте: өҙҙөрөп бейей, моңло йырлай, бәхәстә еңеп сыға. Тик ауылдашына булған һалҡын мөнәсәбәте генә борсой ҡайтыу дәрте менән

ялҡынланған “демаш”тарҙың йөрәктәрен (ҡайтыусылар “демобилизацияланған” тигән һүҙҙе ҡыҫҡартып, бер-береһенә “демаш” тип кенә өндәшә башланы). “Демаш” тигән һүҙҙә бер-береһенә яҡынлыҡ тойғолары ла, бер ни тиклем юмор ҙа, халыҡса дуҫлашып һөйләшеү сатҡылары ла бар.

Этлекте күпме генә эшләмәһен, ауылдашы дезертир Мәхмүт өсөн күңелендә төйөр йөрөтмәй Сәлим. “Асыу өс көндән һуң ағыуға әйләнә”, – ти торғайны Мулла бабай. Ағыу һаҡлау – кеше йөрәген серетә. Барак ихатаһында беренсе осрашҡанда уҡ ауылдашы дезертир Мәхмүт уға бүре күҙе менән ҡараны. Яманлыҡ төпкә батмайса, яҡшылыҡ өҫкә ҡалҡмай барыбер. Ауылдашын төпкә батырмаҫҡа, өҫкә ҡалҡытырға кәрәк. Кеше булһын!

Шулай уйлай Сәлим. Әммә ҡайһы бер демаштар аңлап бөтөрмәй быны. Сәлим үҙе бында талантттан ҡанатлана, ауылдашы мөйөштә дыңҡытыла, йәнәһе. Мәхмүттең кем икәнлеген күптәр һорашҡас, Сәлим һөйләп бирергә мәжбүр булды. Тыңлаусылар араһында Карабанов, Рәйес, Алдарбай, Садул һәм башҡалар бар ине.

…Сәлим менән Мәхмүт ауылда Мәрйәм исемле ҡыҙға икәүләшеп ғашиҡ булды. Йәшлек дәрте менән йәшәгән, ҡайнар мөхәббәт дауылы араһында ләззәтләнеп, алданып, алдап, аң-аҡылдан бигерәк хис-тойғолар ҡоло булып йөрөгән йылдар. Сәлимдең аң-аҡылы, хис-тойғоһо еңде булһа кәрәк, ауылдың йөҙөк ҡашы булып иҫәпләнгән Мәрйәм мөхәббәте тора-бара сабыр тәбиғәтле Сәлим йөрәгенә күсте.

1924 йылда тыуған егеттәр араһында Мәхмүт үҙен ҡояш утынан тәмәке ҡабыҙа белә торған отҡор зат кеүегерәк тотто. Атаһы колхоз рәйесе булғанлыҡтан, башҡалар даирәһендә маҡтанып, осоноп йөрөнө. Фронтта Сәлим – минометсы, Мәхмүт – йәйәүле һалдат. Бына бер ваҡыт пехота сигенә. Сигенеүселәрҙән бер төркөм араһында Мәхмүт тә була. Батарея командиры капитан Исхаҡов был төркөмдө үҙ подразделениеһына алып килә. Сәлим менән Мәхмүт ҡосаҡлашып күрешә. Ауылдаштар икәнлеген белгәс, Исхаҡов Мәхмүтте үҙ батареяһында ҡалдыра. Ул Сәлим расчетына беркетелә. Мәгәр Мәхмүттең минометсы булырлыҡ рәте юҡ. Мина ташып, теләһә ниндәй “ҡара” эштәр генә башҡарып йөрөй. Әммә үҙенең телдә – шарлатан, хеҙмәттә – ныйылдаҡ икәнлеген аңламай. Һалдаттар араһында әҙәм мәсхәрәһенә ҡалыуын… Сәлимдең Мәрйәм өсөн үс алыуы тип уйлай. Хәҙер Мәхмүт ауылдашын ҡара дегеткә мансыу юлдарын эҙләй. Немецтар беҙҙекеләрҙе бомба менән генә тетеп ҡалмай, самолеттан төрлө листовкаларҙы ла борсаҡ урынына яуҙырып тора. Ҡыҫҡаса мәғәнәһе шул: “Беҙҙең яҡҡа үҙе теләп сыҡҡандарҙы Германияла ожмахтай матур тормош көтә”. Шул листовкаларҙың береһен табып, Сәлимдең һалдат тоҡсайына һалып ҡуя ла дивизион комиссары өлкән лейтенант Шашкинға йүгерә Мәхмүт. Беренсе расчет командиры Сәлим Пирмөхәмәтов теге яҡҡа сығып китергә йыйына, ти. Килеп ҡараһалар, ысынлап та, Сәлим тоҡсайынан шундай листовка табыла. Сәлим эше хәрби трибуналға барып етә. Унда ғәйепләнһәң, йә ун-ун биш йылға ултырталар, йә штрафной батальонға ебәрәләр (унда иҫән ҡалған кеше бик һирәк), йә үлем язаһы бирелә. Тикшереү башланған ваҡытта комиссар Шашкин бомба аҫтында ҡалып харап була, Сәлим расчеты ҡамауға эләгә.

Ҡамауҙа ҡырҡлап кеше була. Өс тәүлек ас килеш көрәшәләр дошманға ҡаршы. Берәүҙәр үлә, икенселәр ҡаты яралана. Дүртенсе көндө расчетта ни бары дүрт кеше генә ҡала. Аслыҡ үлеменән һаҡланып ҡалыу өсөн һис юғында бер йотом һыу булһа икән. Унымы ла юҡ. Яҡында бәләкәй генә бер инеш барлығын

беләләр, әлбиттә. Ләкин инештең арғы яғында – немецтар. Унда барыу – үлем менән йәшәү араһы. Шулай ҙа, ауылдашын эйәртеп, ике котелок менән һыуға китә Сәлим. Әле түш менән шыуышып, әле тәгәрәй-тәгәрәй барып, ҡасып-боҫоп, инештән һыу алыу бәхетенә ирешә.

Алдылар. Һаман шулай йәшеренә-йәшеренә китеп, хәл йыйыр өсөн бер ҡыуаҡ араһына барып туҡталғас, Мәхмүт ике котелокты тибеп осора ла Сәлимгә мылтыҡ төҙәй.

– Һин… Яратҡан ҡыҙымды тартып алдың, хәстрүш, шуның михнәтен күр хәҙер, – тип ата ла ебәрә.

Сәлим һуштан яҙып йығыла. Мәхмүт йөрәгенә тип атҡандыр, ләкин улай түгел икән, һул яҡ беләгенә тейгән. Һушына килһә, ике ҡулын күтәреп, Мәхмүттең немецтар яғына шылғанын күрҙе Сәлим. Автоматын алып, сәнселдерәйем тиһә, дискыһында бер генә патрон да ҡалмаған. Шунан башҡаһын белмәй Сәлим. Ҡайҙа йөрөгән, немецтарға нисек хеҙмәт иткән? Ниңә сержант дәрәжәһе менән демаштар араһында буталып йөрөй ул? Хәйер, хәйләкәр һыуҙан ҡоро сыға белә, аҡыллы аяҙ көндә лә сылана.

Шуларҙы түкмәй-сәсмәй генә булһа ла һөйләп бирҙе Сәлим. Демаштар төрлө фекер әйтергә тотондо:

– Сволочь икән...

– Әбрәкәй ҡомағы ул...

– Вәт сабакы!

– Хәҙер мин уның боғаҙын сәйнәйем...

– Ә мин һалдат ботинкаһы менән аталығын иҙәм...

– Ә мин, боғаҙынан алып, ишәк итеп ҡысҡыртам...

– Үлем был һоро ҡортҡа...

– Йөрөмәһен донъя йәмһеҙләп...

Һүҙ бутҡаһын Сәлим үҙе туҡтатты:

– Һеҙ ашыҡмағыҙ әле, суд бөтәһен дә асыҡлар. Уға ҡәҙәр сабыр итергә кәрәк.

– Сыҙар әмәл дә ҡалманы…

Мәхмүтте Австрияның Вена ҡалаһындағы комендатураға йәки хәрби трибуналға тапшырырға ине. Ләкин ул сержант погоны тағып йөрөй бит. Теге ваҡыттағы дезертирлығына амин тотоп, үткән алйотлоғон ҡабатламаҫҡа ант итеп, әллә бер-бер часта гонаһын йыуып аҡланғанмы? Сер йомғағы эсендәге йомғаҡ был. Йомғаҡ сере судта һүтеләсәк. Үҙенән һөйләткәс. Һөйләрме? Төлкө хәйләһе бүренең ҡойроғон мәкелә туңдырғандай, быларҙың бөтәһен дә төп башына ултыртып ҡасмаҫмы? Ишәкте баҡырыуҙан, төлкөнө хәйләнән, бүрене йыртҡыслыҡтан туҡтатып булмай.

Шундай һөйләшеүҙәр булып алды. Гәпләшеүҙәр өйөрмәһенән бер фекер ҡалҡып сыға: дезертирға – үлем язаһы. Ә нисек ғәмәлгә ашырырға уны? Атырға ҡоралдары ла юҡ. Аҫырға дар ағасы эшләү ҡыйын түгел. Әммә был ахмаҡлыҡ буласаҡ. Көнбайыш Аурупаны фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарған Совет Армияһы, һуғыш бөткәс, бер-береһен тонсоҡтора башланы, тип тамаҡ ярмаҫтармы? Дар ағасында аҫылынып торған совет һалдаты был ғәйбәт утына бензин тамыҙасаҡ. Аҫтыртын дуҫтан эскерһеҙ дошман яҡшыраҡ. Һуғыш йылдарындағы беҙҙең дуҫтар (Англия, Америка) эскерһеҙ булып сыҡманы. Һуғыш уты үҙ мәмләкәттәренә төшөүҙән ҡурҡып, Совет иленә ярҙам ҡулы һуҙған булдылар, ә һуғыштан һуң яңынан ут ырғытырға тотондолар.

Нисек кенә булмаһын, дезертирға – үлем язаһы. Уның шулай булырға тейешлеген барлыҡ демаштар белеп алды инде. Белеү – бер, ғәмәлгә ашырыу – икенсе. Фекер алышыуҙа бөтәһе лә ҡатнашты. Ғәйрәтбай сығышы көлкөлө булды хатта.

Унының исеме есеменә нык тура килә. Уртаса буйлы йыуан кеше ул. Ут сығарырҙай ҡаты баҫып йөрөй. Мускулдары гер ташы һымаҡ. Уҫал күҙ ҡараштары ла ғәйрәт сәсеп тора. Йоҙроҡтары – имән суҡмары. Үҙе һөйләүенсә, гел һуғышып үҫкән. Днепрҙың уң яҡ ярында булған ҡул һуғышында ун ике фрицтың ғүмерен өҙә. Береһен имән суҡмарылай йоҙроғо менән шаңлатып ебәрә, икенсеһен тимерҙәй ҡаты аяғы менән тибеп осора, өсөнсөһөн уйнаҡлап торған башы менән һөҙөп ырғыта, дүртенсеһенең боғаҙын сәйнәй... Ауылда саҡта уны "һуғыш суҡмары" тип йөрөтәләр. Был атамаһының данын һуғыш уты дауылында тағы ла көсәйтеп ебәрә Ғәйрәтбай. Әле ул, телде вата-емерә, шулайыраҡ һөйләне:

– Бына ней әйтәм мин, нәкәнис, братва! Грамутнай түгелмен, уҡығаным – класс ярым ғына. Көлмәгеҙ. Пәчәмү класс ярым ғына? Пәтәмүште тауыҡ кетәге ҙурлыҡ өй эсендә ун ике әрәм тамаҡ... туис... ун ике малай шарҡылдап үҫтек. Өҫтә ямаулы киндер күлмәк... Аяҡта башы сәскә атҡан сабата... Бәғзе ваҡыт уныһы ла тәтемәй, вәт тәк. Беҙҙең комбат әйткәндәй... прәме ыскажу... сабата юҡ тип... маңҡа ағыҙып йәшәмәнек. Ҡышҡы һалҡында ла ҡар өҫтөнән һаташҡан шайтан урынына һыпырта торғайныҡ ялан аяҡ. Әпәй урынына серегән бәрәңге кәлйемәһе... Ашайбыҙ ҙа шуны, туҡ бүреләй кикереп йөрөйбөҙ. Ә илемде һатманым... Пәтәмүште Ватан беҙҙең өсөн ғәзиз ул... Әсә кеүек... Ә был диз... диз... тфү, дезертир, аныһын эт талағыры, персидәтел малайы булғас, эсе жир менән ҡапланғандыр... Ҡыҫҡаһы, теге нәмәкәйенән аҫып ҡуйырға! Йәне сыҡмайынса интекһен... Ҡәбәхәт... Үлем дезертирға!

Бөтәһе өҫтөнән дә күҙ йүгертеп алды Ғәйрәтбай. Әйттемме, сәпәнемме, суҡындырҙыммы тигәнде аңлата ине унын тантаналы ҡарашы.

Унан һуң ҡаҙаҡ егете Садул һөйләне. Фамилияһы – Садулов. Фронтта уны "Садул" тип кенә йөрөттөләр. Ҡыҫҡа ғына буйлы ул. Түңәрәк йөҙлө. Муйылдай ҡап-ҡара йөҙлө. Бик хәрәкәтсән. Ундайҙы "ут бөрсәһе" тип йөрөтә беҙҙең халыҡ. Һөйләй башлаһа, ата һандуғастай һайрай. Туҡтатыу ҙа ҡыйын хатта. "Тел биҫтәһе" тигән даны ла бар. Ваҡыт-ваҡыт төҙәүсе булып хеҙмәт итте. Ҡороу, мина ташыу кеүек эштәрҙә лә мах бирмәне. Әле бына ярһый-ярһый, хисле итеп, ҡулын болғай-болғай һөйләне:

– Шырағым![1] Сәлим! Һинең ауылдашың тәкәбей[2] , йүнһеҙ, алйот кеше. Ауылда саҡта Мәрйәм исемле сибәр ҡыҙҙы ятраҡанһығыҙ. Мөхәббәт һинең файҙаға булған. Шәп! Алабарман Мәхмүттең ауыҙына ла, йөрәгенә лә сәпәгәнһең, ғуй! Беҙҙә, ҡаҙаҡтарҙа, мөхәббәт өсөн йән бирерҙәй булып көрәшәләр. Әйтәйек, осһоҙ-ҡырыйһыҙ ҡаҙаҡ далаһы. Дала тулы халыҡ. Егет менән ҡыҙ ат өҫтөндә. Сабып китергә фарман бирелә. Киттеләр. Ярыш уттай ҡыҙа. Егет ятраҡан ҡыҙын сабып барған ерҙән тотоп үбергә тейеш. Шуны эшләмәһә, йититпаймайт, егет асыҡ ауыҙ, мәмәй, ебегән булып сыға. Тимәк, ҡыҙ уныҡы түгел. Мин дә, туғыҙынсы класты бөткәс, ятраҡан ҡыҙым Көмөшбикә менән ярышҡа сыҡтым, ғуй. Башта уны алдан ебәрҙем. Юрамал. Һынар өсөн. Теге, йититпаймайт, артына боролоп ҡараған була. Унын өсөн мин ебегән, йәнәһе. Бәй, бер ваҡыт атҡа нык сабырға кәрәк икәнлекте шәйләттем. Ҡанатлы толпарҙай елдерә был. Һәй, сырағым!.. Ҡыуып та еттем. Көмөшбикәмде ҡосаҡлап та үптем, күтәреп алып, үҙемдең алдыма ултыртып та саптым. Ҡыҙ – минеке. Вәссәләм. Мөхәббәт көслөләрҙе ярата, ғуй! Көндәшем Асылбәк, шырағым минең, еңгәнем өсөн ҡосаҡлап ҡотланы. Мөхәббәтте ана шулай яуларға кәрәк, ғуй!.. Тәкәбей Мәхмүт тә Сәлимде ҡосаҡлап ҡотларға тейеш. Шиш!.. Үс алыу юлына баҫа тәкәбей үләт.

[1] *Шырағым — ҡаҙаҡтарҙың яратып, яҡын итеп әйтә торған һүҙе.*
[2] *Тәкәбей — үҙ һүҙле, тиҫкәре, алйот кеше.*

Фронтҡа килгәс, күрмәҫтәр әле тип, Мәрйәмдең күҙ ҡараһылай һаҡлап йөрөгән иҫтәлектәрен, хаттарын Сәлим тоҡсайынан алып, ут төртөп яндыра. Һәй, шыраҒымдар!.. Кешелекһеҙлектең иң яман миҫалы был... Ҡаҙаҡтарҙа тенәй бөркөтө, яман булғаны өсөн, үҙ хужаһын талап үлтерә. Тимәк, яҡшылыҡ өсөн йәнлектәр ҙә, хайуандар ҙа, ҡоштар ҙа көрәшә. Илен һатҡан кеше тамуҡ уты язаһын ошо яҡты донъяла уҡ татырға тейеш. Үлем был фашист ялсыһына, үлем, үлем!

***

Башҡорт ере менән Австрия ере йөрәге әүәл-әүәлдән тоташ. Урал тауҙары ҡуйынында йәшәгән мадъярҙар VII–VIII быуаттарҙа күсенеп килә был яҡтарға. 1812 йылғы Ватан һуғышында Ҡаһым түрә етәкселегендә сиреү (ғәскәр) Парижға барғанда ла, унан ҡайтҡанда ла, Австрия ерендә төк ҡалдыра. “Ҡаһым түрә” тигән легенда-риүәйәт барлыҡҡа килә.

...Бер заман француз батшаһы Наполеон, Рәсәйгә ҡаршы һуғыш асып, рус батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша ғәскәре менән Мәскәүҙе кире үҙ ҡулына алыу өсөн ни тиклем һуғышһа ла, булдыра алмай. Көн уйлаған, төн уйлаған, көндәрҙең береһендә бер уйға килә. Үҙенең һалдаттарына әйткән: “Минең ҡул аҫтымда башҡорт тигән халыҡ бар бит әле. Шуларҙан ғәскәр һорап ҡараһаҡ, ҡалай булыр икән?”– тигән. Һанаттар: “Дөрөҫ әйтәһең, батша хәҙрәт, был эште булдырһа, шулар ғына булдыра инде”, – тигәндәр. Башҡорт иленә илсе ебәргәндәр. Был хәбәрҙе алғас, башҡорттарҙың аҡһаҡалдары йыйылышып кәңәш-төңәш иткәндәр. “Барайыҡ, шул дошмандарҙы айҡайыҡ, батырлығыбыҙҙы күрһәтәйек”, – тигәндәр. Тирә-яҡҡа һөрән һалғандар: “Һуғышырға теләгән кешеләр ҡоралдарын алып, аттарына менеп сыҡһын”, – тигәндәр.

Мәскәүгә барып еткәндәр. Башҡорт халҡын күреү менән Наполеон Мәскәүгә ут төрткән дә ғәскәрен алып ҡаса башлаған. Быны күргәс, Ҡаһым түрә батырайып киткән. Наполеондың артынан баҫтыра башлаған. Ун көн, ун төн баҫтырған. Наполеон ғәскәрен һуҡтырып, рус батшаһы еренән сығарып ташлағандар. Шунан һуң Ҡаһым түрә алдына ҡараған, артына ҡараған, сит батша еренә инергә баҙнат итмәгән. Ғәскәрен эйәртеп, кире Мәскәүгә килгән. Килһә, Александр батша, дошмандар китте инде тип иркенләп, йәйрәп тәхетендә ҡалған, ти. “Йә, ниңә былай вайымһыҙ ултыра һалдығыҙ, батша хәҙрәт, ул мәлғүн французларҙы былай ғына ҡалдырып ҡуймайыҡ. Үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙҙәренә күрһәтәйек. Улар Мәскәүҙе алһалар, беҙ Парижды барып алайыҡ. Миңә сит батша еренә сығырға рөхсәт итһәгеҙ, мин ғәскәрем менән китәм”, – тигән. Батша бик оҙаҡ ҡына уйлаған да әйткән: “Рөхсәт бирәм, әйҙә барығыҙ”, – тигән. Башҡорттар Мәскәүҙән сыҡҡанда: “Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем”, – тигән көйгә йырлап сығып киткәндәр:

*Пәлүән башҡорт халҡын дан итеп,*
*Батша хәҙрәт алды ла ҡаршына,*
*Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.*
*Атабыҙҙан ҡалъан уҡ-һаҙаҡты*
*Яуҙырайыҡ дошман башына,*
*Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем...*

Был риүәйәттең ҡыҫҡараҡ йөкмәткеһен Башҡорт полкының 5-се батареяһында расчет командиры булып хеҙмәт иткән Салауат Хәйҙәров һөйләне. “Ат аунаған ерҙә төк ҡала” тигән мәҡәлде бик боронғо ата-бабаларыбыҙ ижад иткән.

Унын йөкмәткеһе матди байлыҡ барлыҡҡа килтереүсе, фани донъяла ожмах төҙөй белеүсе, хәйәти матурлыҡ хис-тойғолары менән йәшәүсе даһи КЕШЕ эшсәнлеге менән бәйле. Ҡайҙа ғына булмаһын, кеше унда төк йәки яҡшылыҡ, аҡлыҡ, илаһилыҡ ҡалдырып китергә тейеш. “Илаһилыҡ” менән бәйләп фекер йөрөтһәк, фанилыҡтан мәңгелеккә ҡара йөрәк менән күсергә ярамағанлығы тураһында һүҙ бара. Яҡты донъялағы төгөҙ ожмахҡа аҡ иман булып күсһен.

Ҡаһым түрә күптән юҡ инде.

“Котаҙғу белек” авторы Йософ Баласағуни (XI быуат) ана нимә ти:

*Аҙмы дәүләт – илдәр йән тәслим итте,*
*Үлмәҫ тойған батшалар бар ҙа китте.*

Ҡаһым түрә ошо Австрия ерендә лә төк ҡалдырған. Францияла ла. Башҡорттар илендә лә. Совет һалдаты ла шулай Көнбайыш Аурупа илдәрендә лә төк ҡалдырҙы. 1812 йылғы Ватан һуғышында Австрия ерендә Ҡаһым түрә ҡалдырған төк төгө менән килеп ҡушылды. Тик был төккә, бер биҙрә һөттө бер тамсы дегет боҙғандай, дезертирҙың йөрәгендәге ҡара ҡан ағыуы тамыу ғына ҡыҙғаныс. Фашизмды еңгән һалдат Көнбайыш Аурупа илдәрендә ҡара эҙ ҡалдырып китергә тейешме?

Салауат оҙон ғына буйлы, бик хәрәкәтсән, ҡара сибәр егет. Үҙе һөйләүенсә, уның Йомағол олатаһы йыр сығарған, шиғырҙар ижад иткән, таҡмаҡсы булған. Уны “сәсән” тип тә йөрөткәндәр. Был һәләт Өфөләге “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә уҡыған атаһы Аҡшамсафаға ла күскән. Нәҫел төгө дауам итә. Ете йыллыҡ белемле Салауат ҡанында олатай-атайҙар төгө ҡайнай. Был төк аң-аҡылында, хис-тойғоһонда ла тамырлана. Ул тамырҙар япраҡ яра, сәскә ата. Япраҡ-сәскә аҡрынлап теләнә күсә. Салауаттың һүҙгә оҫталығы – шуның хикмәтелер. Һәр хикмәттә – йәшәү икмәге. “Ҡаһым түрә” тураһында олатаһы Йомағол атаһы Аҡшасафаға һөйләгән. Был риүәйәтте һүҙгә оҫта Салауат иң тәүҙә зиһенле атаһы ауыҙынан ишетә. Әлеге сығышында, “Ҡаһым түрә” легендаһы тураһында һөйләп биргәс, былай тине ул:

– Беҙ, демаш туғандар, Австрия ерендә әле ата-бабайҙар ҡалдырған изге төктө тапап йөрөйбөҙ. Изге төккә ҡара тап төшөрөүсе дезертирға ҡаты яза бирергә тейешбеҙ.

V

Ишектән ингәс тә, уң яҡта бер бүлмә бар. Эсендә бәләкәй генә өҫтәл. Стена буйында ултырғыстар. Унан һуң ике яҡлап нарҙар теҙелеп китә. Уртанан коридор һуҙыла. Коридор осонда – йәнә буш урын. Дезертир шунда һаҡлана. Карабанов – ҡарауыл башлығы. Фронтта, полктағы разведчиктар взводы командиры капитан Корнышевтың ярҙамсыһы булып алғансы, Карабановты “атаҡлы бандит” тип тә йөрөтәләр ине. Мәхмүт быны яҡшы белә. Карабановтың үҙенән генә түгел, еленән дә ҡурҡа торғайны ул. Разведчиктың шул усаллығы һаман дауам итә. Һаҡҡа ҡуйылған кеше ике сәғәт һайын алыштырылып тора. Ә инде ҡарауыл башлығы Карабанов зәһәр йоҙроғон Мәхмүттең танауы аҫтында уйнатып алырға ла онотмай. Ҡасһаң, “капут”[3], йәнәһе.

Ике һалдат юлға сыҡһа, уның береһе – башлыҡ. Бер нисә һалдат отделение, расчет булып ойоша. Отделение, расчеттарҙан взвод, рота, батальон, батарея, дивизион, полктар барлыҡҡа килә. Бындағы демаштар әллә нисә баракка урынлаштырылған. Бөтәһен һанаһаң, әллә нисә полк булырлыҡ.

---

[3]*Капут – немец һүҙе, “бөттө” тигәнде аңлата, һуғыш йылдарында, унан һуң да йыш ҡулланылды.*

Судты башта Сәлим Пирмөхәмәтов барагында яһамаҡсы булғайнылар, тора-бара был фекерҙән кире ҡайттылар. Сәлим барагында буласаҡ суд тураһында башҡа бараклар ҙа ла ишеткәйнеләр инде. Бөтәһе лә суд һөҙөмтәһен түҙемһеҙлек менән көтә. Ни булыр? Ни өсөн бирелгән фашистарға? Бер-бер маҡсат булғанмы? Ҡурҡаҡлыҡ ҡорто кимергәнме йөрәк итен? Немецтарҙың листовкаларҙа яҙып ташлаған матур тормош вәғәҙәһе ҡотҡоһона бирелгәнме?

Дошман яғына уйламайынса сығыусы алабармандар 1914 йылғы Герман һуғышында ла булды. Бәғзе берәү сит илдә ҡалыуҙы уларҙың йәшәү рәүешен өйрәнергә тырышыу менән аңлата. Шул инде: аҡыллының маҡсаты – кендектән юғары, аҡылһыҙҙың маҡсаты – кендектән түбән. Сәпсектең дә үҙ бизмәне. Ә бында – матди байлыҡ тыуҙырыусы, рухи илаһилыҡтар барлыҡҡа килтереүсе, тормош ожмахын матурлап, мәңгелек ожмахҡа юғары аң менән китергә хыялланыусы даһи кешеләр бизмәне. Һәр кем бизмәне уптым илаһи ил биҙмәнен барлыҡҡа килтерә. Ул ил бизмәнендәге гонаһтар йә шәфҡәтһеҙлектәр, кешелеклелек йә кешеһеҙлектәр Ер йөҙөндәге башҡа илдәргә көҙгөләгеләй күренеп тора. Бер ил үҙ ҡаһармандары менән ғорурланһа, икенсе ил үҙ алйоттары өсөн хурлана. Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡы фашизмды хәрби һәм рухи ныҡлыҡ менән еңде. Уның намыҫ бизмәне башҡа барлыҡ илдәрҙекенә ҡарағанда ла ауырыраҡ тарта. Көҙгөнө диуарға арт яғы менән дөрөҫ урынлаштырмаһаң, уның ал яғы йәки йөҙө таплана. Бер ваҡыт көҙгө бөтөнләй яраҡһыҙ булып ҡала. Өҙөлөп-өҙөлөп һағынған тыуған илдәренә ҡайтыу уйы менән дәртләнеп, ялҡынланып, ҡайнар хис-тойғоларға бирелеп йөрөгән демаштар араһында Мәхмүт – көҙгө йөҙөндәге тап ул. Дезертир – ил дошманы. Дезертир – ил йөрәгенең боҙоҡ ҡан тамсыһы.

Бер бүре килһә, уны туҡмарға бөтә ауыл халҡы күтәрелә. Демаштар ҡулына эләккән дезертирҙы ла шундай яза көтә. Судты тышта яһарға булдылар. Бының өсөн барак бүлмәһендәге өҫтәл, урындыҡтар ихатаға сығарылды. Башҡа барактағыларҙың да ҡайһы береһе төрлө урындыҡ, төрлө ултырғыс алып килеп яйлашты. Күптәр баҫып торорға тейеш.

Судья, прокурор, адвокат, ултырышсы үҙҙәре алып сыҡҡан өҫтәл тирәһенә ҡуйылған урындыҡтарға барып ултырҙылар. Мәхмүтте һаҡлаусыһы суд алдына алып килеп баҫтырҙы.

Мәхмүттең хәле мөшкөл. Шүрәлегә оҡшап ҡалған. Йөҙө күм-күк булған. Яңаҡтары эскә батҡан. Ирендәре бына-бына өҙөлөп төшөрҙәй көҙгө япраҡ шикелле дерелдәй. Шулай ҙа уның иләмһеҙ, нурһыҙ, көлһыу күҙ ҡараштарында йыртҡыслыҡ сатҡылары һирпелә ине әле. Быға бөтәһе лә иғтибар итмәгәндер, бәлки. Сөнки күҙ ҡарашының йөрәк көҙгөһө булыуын аңлап бөтмәүселәр күп. Судья Сәлим Пирмөхәмәтов:

– Суд башлана, баҫығыҙ!.. – тип ҡысҡырҙы.

Был тауыш фронттағыса: “Батарея, огонь!”– тигән кеүегерәк яңғыраны. Команданы көр, ҡаты, һалдаттарҙың йөрәген ярһытырҙай, бер ни тиклем моңло тауыш менән бирергә Сәлим расчет командиры булып торғанда ла, һуғыштан һуң старшина хеҙмәтен башҡарғанда ла өйрәнгәйне. “Суд башлана, баҫығыҙ!” – тигәндә лә шул ҡатылыҡ, шул ярһыулыҡ, шул моңлолоҡ яңғырап киткәндәй тойолдо. Сабыр ғына булырға тырышып, ләкин йәшен тиҙлегендә бөтәһе өҫтөнән күҙ йүгертеп сыҡҡас, ултырырға ҡушты. “Ултырыу” тигән һүҙ бындағы ысынбарлыҡҡа бөтөнләй үк тура килеп тә бөтмәй. Сөнки бөтәһе өсөн дә ултырғыстар юҡ. Бәғзеләре, ауылдағыса, теҙен ҡосаҡлап сүкте, ҡайһы берҙәре сиҙәмгә ятты хатта.

Сәлим һүҙен дауам итте:

– Һеҙ, Мәхмүт Бәкеров, дезертирлыҡ ҡылдығыҙ, Ватанығыҙҙы һаттығыҙ, ғәйептәрегеҙҙе таныйһығыҙмы?

Мәхмүт танауын сирып яуап бирҙе:

– Минең ғәйебемде тикшерергә һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ.

– Ни өсөн улай уйлайһығыҙ?

– Сөнки һеҙ ысын судья түгел, кулак балаһы.

– Бында кемдең кем балаһы булыуы тураһында һүҙ бармай.

– Кулак балаһы булғаның өсөн һине фронтта партияға ла алманылар.

– Алалар ине. Мин үҙем баш тарттым. Партияға инергә, коммунист булырға яраҡлы түгел икәнлегемде әйттем.

– Дөрөҫ әйткәнһең. Коммунист булырға һинең хаҡың юҡ. Ә мин – ысын коммунист.

– Тимәк, дошманға партбилетыңды күтәреп бирелдең?

– Коммунист булмаған кеше коммунист булған кешене хөкөм итә алмай.

– Бында һалдаттарҙың намыҫ суды бара. Шуны онотмағыҙ.

– Намыҫһыҙ кешенең намыҫлы кешене хөкөм итергә хаҡы юҡ.

– Был судта, хөкөм ителеүсе Мәхмүт Бәкеров, кешенең ниндәй мөхиттән сығыуы түгел, Ватан алдындағы бурысы ҡарала.

Елдең былай көтөлмәгән яҡтан иҫә башлауы бөтәһен дә хайран ҡалдырҙы. Нимә был? Судмы? Судья өҫтөнә бысраҡ атырға ни хаҡы бар хөкөмгә тартылған дезертирҙың? Күптәр был судтың әрәсәһен аңлап та бөтөрмәй икән әле. Судья өҫтөнә төрлө һорауҙар яуҙы:

– Бәлки, дезертир ҙа түгелдер әле ул?

– Кем ҡушты һеҙгә суд яһарға?

– Рөхсәт ҡағыҙығыҙ бармы?

Бындай һорауҙарҙың яуыры тәбиғи ине. “Судья” башта ҡаушабыраҡ ҡалды. Шулай ҙа үҙен тиҙ генә ҡулға алырлыҡ көс тапты. Атылаһы мина атылмайынса ҡалмаған кеүек, әйтеләһе һүҙ ҙә тамаҡ төбөндә иреп юғалырға тейеш түгел. Көбәккә яңылыш ике мина һалғанлыҡтан, 469-сы полктың һәр батареяһында бер миномет шартлап, бөтә расчет һуғышсылары харап булды. Сәлим төҙәүсеһе лә Курск дуғаһында ике мина тондорғайны. Шулай ҙа миномет шартламаны. Бындай осраҡта полк командиры, артиллерия начальнигы рөхсәте менән миномет юҡ ителә. Ләкин был – алйотлоҡ, томаналыҡ, әрпешлек. Һәр бисмилланың изге аҙағы көтөлгәндәй, һәр ғәмәлдең айышы-яйына тиҙ төшөнә белгән Сәлим был ҡурҡыныс осраҡта ла ҡаушап ҡалмай. Йәнен ғазраил ҡарамағына ҡуйып, атылмай ҡалған ике минаны көбәктән алыу бәхетенә ирешә. Бер минометты шартлауҙан һаҡлап ҡалыу – Сәлимдең фронтта күрһәткән күп ҡаһарманлыҡтарының береһе ине. Әле бына судья булып ҡыланыу, кеше яҙмышын хәл итеү – уның өсөн фронтта күрһәткән батырлыҡтарына ҡарағанда ла ауырыраҡ шөғөлдөр, бәлки. Ә ниңә һәр осраған яңы ауырлыҡты фронт бизмәненә һалып үлсәп йөрөргә әле? Тормош – көрәш. “Тормош – диңгеҙ, беҙ – карап” тигәнде ишеткәне юҡмы ни? Бар. Алда – Ватан. Янып көлгә әйләнгән ауылдар, ҡалалар. Аслыҡ. Хәйерселек. Яланғаслыҡ. Ил – ир иңендә, ир – ил иңендә, алда айбарлы ир-егеттәрҙе гөлбаҡса түгел, гөлбаҡса ителергә тейешле алйыған, сырхау, хәлһеҙ дәүләт көтә. Ә хәҙергә ил айбарлылығын үҙ ҡорһағы мәнфәғәте менән бысратыусыға ғәҙелдән елле генә хөкөм сығарырға кәрәк.

“Кем ҡушты суд яһарға?” Һорауға яуап бирмәй тороп, судты дауам итеп булмаясаҡты аңланы Сәлим. “Демаштар” тигәс тә, уларға кешегә хас булған бөтә

яуаплылыҡты, намыҫлылыҡты онотоп, тәртип тәртәләрен типкеләп, һындырып бөтөрөргә тимәгән. Бында әллә нисә полклыҡ демаштар пыран-заран ҡыланып йөрөй. Рәсәйгә оҙатыр өсөн вагондар әҙерләнеп бөткәнсе үк барасаҡ поездың башлығын һайлап та ҡуйғандар икән. Ул – 469-сы полктың беренсе дивизионындағы элемтәсе-разведчиктар командиры капитан Трапезников булып сыҡты.

Трапезников – алсаҡ йөҙлө, йомарт һүҙле, иҙемле ҡылана торған офицер. Һәр ваҡыт йылмайып, көләмһерәп йөрөй. Кеше яҙмышын уңай хәл итергә тырыша. Шуға күрә һуғышсылар уны ныҡ ярата. Венгрияның Татабанья ҡасабаһында полк өсөн урын әҙерләнгәндә капитан Трапезников етәксе, старшина Сәлим уның ярҙамсыһы булды. Трапезников хәҙер – демаштар тейәләсәк поездың начальнигы. Сәлим – уның ярҙамсыһы. Көлә-көлә, йылмая-йылмая килде лә, арҡаһынан һөйөп:

– Татабаньялағы кеүек, һин бында ла, поезға ултырғас та, минең ярҙамсым буласаҡһың, – тине.

Яуапты фронттағыса бер һүҙ менән генә бирҙе Сәлим:

– Тыңлайым.

Капитан бында ла күҙ-колаҡ булып йөрөргә тейеш икән, дезертир тураһында белә, яҡшы белә ул. Уға суд яһалырға тейешлекте ишетеп килгән. Судья, прокурор, адвокаттар тураһында һөйләгәс, йылмайып ҡуйҙы капитан. Төрлө-төрлө фараздар ҙа әйтте. Судтың мәғәнәһен, юҫығын, йөкмәткеһен аңлатырға ҡушты. Фронтта “Офицерҙарҙың намыҫ суды” эшләне. Был фәҡәт офицерҙар өсөн ине. Уның рәйесе лә офицер. Рәйес, тимәк, судья, ә демаштарҙыҡын “Һалдаттарҙың намыҫ суды” тип атарға ҡушты. “Һалдат” һүҙе ике мәғәнәлә йөрөтөлә. “Һалдат тормошо” тигәндә барлыҡ дәрәжәләгеләр күҙ уңында тотола. Ә инде “һалдат” һүҙе офицерҙар, генералдарҙан тыш ҡулланыла икән, уларға һалдат, ефрейтор, сержант, старшиналар ҙа инә. “Һалдаттарҙың намыҫ суды” офицер, генералдар өсөн түгел. Сәлим ҡыҫҡаса ғына ошо хаҡта әйтте, “рөхсәт ҡағыҙы”ның һалдаттар намыҫында икәнлеген аңлатты. Дезертир булыу-булмауҙы асыҡлау мәсьәләһенең судьяға ғына ҡайтып ҡалмаясағын иҫкәртте. Шуға күрә “суд” тип атала ла ул. Асыҡ суд был. Теләһә кемдең үҙ фекерен әйтергә хаҡы бар. Был хоҡуҡты демаштар аңлағандар булһа кәрәк. Уның шулай икәнлеген бирелгән һорауҙар ҙа һиҙҙереп тора.

Һорауҙар күп буласаҡ. Сәлим-судья был хаҡта яҡшы белә. Уның төп маҡсаты – Мәхмүт Бәкеровтың ысын йөҙөн асыу. Дезертирлыҡҡа һалдат погоны менән киткәйне. Ә бына демаштар араһында сержант погоны балҡытып йөрөй. Дезертирлыҡҡа командиры Сәлим Пирмөхәмәтовты атып ҡасҡан. Шул атылып-яраланып ҡалған командир хәҙер уны суд алдына килтереп баҫтырҙы. Бер уйлаһаң, бында бер ниндәй ҙә шик-шөбһә булырға тейеш түгел. Уның дезертир икәнлеген Сәлимдең бер һүҙе лә раҫлай ала. Әммә хәҙер инде ул командир-Сәлим генә түгел, судья-Сәлим дә. Судья була белергә тейеш. Шул хаҡта уйлап, һорауын йәһәт ҡабатланы Пирмөхәмәтов.

– Һеҙ, Мәхмүт Бәкеров, дезертирлыҡ ҡылдығыҙ, Ватанығыҙҙы һаттығыҙ. Ғәйептәрегеҙҙе таныйһығыҙмы?

Мәхмүт тағы ла әтәсләнергә теләгәйне, Сәлим фронтта атырға команда биргән ҡалын тауыш менән:

– Һорауыма тиҙ, аныҡ, әҙәмсә яуап бирегеҙ, – тип ҡысҡырҙы.

Был тауыштан Мәхмүттең башы бөгөлөп төштө. Ул, биҙгәк тотҡан кеше һымаҡ, ҡалтыранырға кереште. Әкрен генә иҫкән елгә дерелдәгән һыу өҫтөндәге күбектәй сайҡалып торғас, ике ҡулын ике яҡҡа ниҙер эҙләгәндәй йәйеп, әсе

буранда сыйылдаған шайтан балаһылай йәмһеҙ тауыштар сығарып, ҡысҡырып илап ебәрҙе. Хөкөм ҡарарын көтөүселәр шаҡ ҡатты. Тамашаны төрлөсә баһаланылар:

– Аҡылдан яҙған был...

– Ен һуҡҡан кешеләй ҡалтырана...

– Аңын юғалтҡан даһа...

Сәлим быларҙың береһенә лә ышанманы. Имза ҡуйырға ла ҡулынан килмәгән Мәхмүттең атаһы колхоз председателе булып йөрөнө. Ҡурҡаҡтар өсөн – ул йыртҡыс бүре, түрәләр алдында – ялағай ябалаҡ, алабармандар араһында – хәйләкәр төлкө, кәрәк икән – йыуаш ҡуян, йүгерек сәпсек, әрһеҙ алйырҙан... Был сифаттарҙың бөтәһе лә бар Мәхмүттә. Күберәктер ҙә әле. Бала атанан мең өлөш арттырып ебәрергә тейеш, тиҙәр бит. Яҡшы яҡҡа булһа – Алла өсөн. Яман яҡҡа икән – шайтандыҡы.

Сәлим һорауҙарҙы ваҡлап бирергә булды:

– Немецтар яғына ни өсөн сығырға булдығыҙ?

Һыуға батҡанда һаламға булһа ла тотоноп ҡалырға ҡушалар. Был һорау уны әҙәм рәтенә баҫтырыр, бәлки. Хәҙер Мәхмүт, йән һаҡлап ҡалыу өсөн, төлкөләнеү юлына баҫты:

– Беҙҙең ауылдағы Ғарифйән ағай беренсе империалистик һуғыш ваҡытында немецтарға әсирлеккә үҙе теләп бирелгән. Уға немец халҡының иген үҫтереү оҫталығын белергә кәрәк икән. Атайым колхоз председателе булып эшләгәндә: “Их, сит илдәргә барып, юғары уңыш алыу юлдарын өйрәнеп ҡайтырға”, – тип борсола ине. Бына ни өсөн бирелдем мин немецтарға.

Мәхмүт уйлауынса, ошо төлкөләнеү бөтәһен дә кәкре ҡайынға һөйәйәсәк. Тик һуғыш утында сарланған яугирҙарҙы кәкре ҡайынға терәү, ай-һай-һай, бәрәңге ашау кеүек еңел шөғөл түгел икән шул. Ышанманылар Мәхмүттең һүҙенә. Умарта ҡорттарылай бер аҙ гөжләшеп алғас, төрлө мәсхәрәле һүҙҙәр дауылы ҡупты:

– Алдай был ҡыл ҡойроҡ...

– Ояты юҡ икән хәсистең...

– Үлем кәлйемәһе ашаған эт...

Башҡасараҡ фекер йөрөтөүселәр ҙә булды:

– Уның хәле яман...

– Күрмәйһеңме ни, күҙҙәре аҡайған...

– Сирле себеш менән бер бит...

– Судты туҡтатып торорға кәрәктер...

Быларҙың барыһын да судья ишетеп торҙо. Бер үк ваҡытта ул прокурор менән адвокаттың ғәйепләү ҡараштарын да тоя. Бәлтерәмә, кәзә бәшмәгенә әйләнмә, имән бәшмәге бул, ти ине уларҙың талапсан ҡараштары. Судья һорауын дауам итте:

– Тимәк, һеҙ үҙегеҙҙе ғәйепле тип иҫәпләмәйһегеҙ?

– Мин ғәйепле түгел.

– Немецтар яғына фронтташыңды атып китеү – ғәйеп түгелме?

– Шулай кәрәк булды.

– Ә хәҙер немецтар ҡулына килеп эләккәс башланған мажараларығыҙ тураһында һөйләгеҙ.

– Мин ер эшкәртергә өйрәндем.

– Киләсәктә кем буласаҡһығыҙ?

– Колхоз председателе.

– Әгәр бөтәһен дә дөрөҫ итеп һөйләп бирмәһәгеҙ, һеҙҙе ҡаты хөкөм көтә.

## VI

Демаштар тәмәке янсығы ҡапшай башланы. Янсыҡ та тарихи бер төҡ булып ҡалыр һымаҡ. Уның ыңғай һәм кире яҡтары ла бар. Ыңғай яғы – мөхәббәт, дуҫлыҡ, йөрәк, намыҫ менән бәйле булыу. Фронтҡа оҙатҡанда ауыл ҡыҙҙары егеттәргә тәмәке янсығы бүләк итә торғайны. Мәгәр ул ябай тәмәке һауыты түгел. Ҡыҙҙар уны сигеүләп, суҡлап, ҡарап туймаҫлыҡ нағышлап яһай. Тәмәке янсығы янында бүләккә күҙ яуыңды алырҙай итеп сигелгән ҡулъяулыҡ, аяғыңды иркәләп, йылытып, мамыҡтай итеп тороусы һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡбаш, ҡулҡайҙарыңа ләззәт, сихәт, хозурлыҡ өҫтәүсе аҫыл бирсәткә лә була. Йөрәктәре мөхәббәттең алтын сылбыры менән мәңге өҙөлмәҫтәй бәйләнгәндәр бүләге генә түгел был. Ҡайнар дуҫлыҡтың юғары илаһилығын бөтә аң-аҡылы, хис-тойғоһо менән аңлап йәшәүсе аҫыл заттарҙың да шөғөлө. Бүләкте ил һаҡларға китеүсе егеттәрҙең бөтәһе өсөн дә әҙерләй ауыл ҡыҙҙары. Бәғзе бүләк дуҫлыҡ осҡонон мөхәббәт ялҡынына ла әйләндереп ебәрә.

Әлбиттә, аяҡ-ҡулдарҙағы ойоҡбаш, бирсәткәләрҙәге уңған, аҡыллы, дуҫлыҡ-мөхәббәт тойғоларының ҡәҙерен белеүсе ҡыҙҙарыбыҙҙың йөрәк йылыһын һаҡларға күпме генә тырышмайыҡ, улар бер ваҡыт, һалдатса әйтһәк, барыбер “сафтан сыға”. Ә бына тәмәке янсығы ҡала. Замана ҡыҙҙарыбыҙ иҫтәлеге тип атарға ла мөмкиндер уны.

Фронтта старшина бер аҙналыҡ махорканы бармаҡ семтеме генә өләшә. Был семетем иң әүәл әлеге ҡыҙ йөрәге бүләк иткән янсыҡ төбөнә төшә. Тимәк, ҡыҙ йөрәге менән янсыҡ йөрәге осраша. Ҡыҙ йөрәген һалдат арҡаға кейә торған хәрби тоҡсайына һалып ҡуя. Шуның менән ул атакаға күтәрелә. Ҡыҙ йөрәге уға айбарлылығын юғалтмаҫҡа ярҙам итә. Еңеүҙән һуң бер тартып ебәреү – һалдат өсөн ҙур ләззәт. Тәмәке төтөнө был ваҡытта һалдат күңеленә ҡыҙ һыны булып һеңә. Тәмәкенең кире яҡтары хаҡында уйламай торған мәл был.

Башҡортостан – фронтҡа иң ныҡ ярҙам итеүсе мәмләкәт. Эвакуацияланған заводтар, бай тәбиғәтле, гүзәл, матур Башҡортостан ерендә яңы, йылы оя тапты. Эвакуацияланып, йонсоп, хәлһеҙләнеп, арып-алйып килгән меңдәрсә кешеләрҙе киң күңелле Башҡортостан халҡы асыҡ йөҙ менән үҙ ҡосағына алды. Фронтҡа посылка ебәреүҙә лә Башҡортостан халҡы үҙенең йомарт икәнлеген раҫланы. 469-сы миномет полкы Башҡортостандың Иглин районындағы Таутөмән һәм Покровка ауылдарында ойошторолғайны. Был ике ауыл менән полк араһында йөрәк дуҫлығы яралды. 1943 йылдың яҙында фронтҡа оҙатҡанда ҡыҙҙар бүләк иткән әйберҙәр араһында сигеүләп теккән тәмәке янсығы ла була. Быныһы ғына етмәгән, Таутөмән ҡыҙҙары был полкка 1944 йылда махсус посылкалар ебәрә. Посылкалар эсендә шаҡтай күп тәмәке янсыҡтары ла булды. Был янсыҡтар ауыр һуғыш йылдарында фронтовиктар менән ауыл ҡыҙҙары араһындағы дуҫлыҡ, мөхәббәт хис-тойғоларын нығытты.

Демаштар тәмәке янсыҡтарын ҡапшай башлауҙарын күреп кенә түгел, судты киләсәктә ниндәйерәк юҫыҡта алып барыу өсөн прокурор, адвокат, ултырышсы менән кәңәшләшеп ҡарарға кәрәклекте лә аңлап, судья бер ни ҡәҙәр тәнәфес яһап алырға ҡушты. Тәмәке янсыҡтары дәррәү сиселеп китте. Бер аҙҙан баш өҫтөндә зәңгәр төтөн уйнаҡлай башланы.

Ҡарауыл башлығы Карабанов Мәхмүтте үҙ урынына алып китте. Ике демашҡа уны ҡарап торорға ҡушты. Судья, прокурор, адвокат бараҡтың был башындағы әлеге бәләкәй бүлмәгә инделәр. Сәлим армияға алынғансы тартманы. Фронтта ла тәмәке ҡоло булмаҫҡа тырышты. Ә инде һуғыштан һуң, старшина хеҙмәтен башҡарғанда, тәмәке төтөнөнә йотолғанлығын үҙе лә һиҙмәйенсә

ҡалды. Бер үҙенә бер бүлмә. Һалдаттарға тейешле тәмәкене ул ала. Бер ваҡыт сигарет бирә башланылар. Бер блокта – йөҙ бөртөк. Шуны һалдаттарға берәмләп тарата.

Старшина үҙ бүлмәһендә яҙыу-һыҙыу эштәрен дә башҡара. Дүртенсе синыфты тамамлау менән уҡыуын ташлап, йүгерә-йүгерә йүкә ташырға, ярһый-ярһый сабата үрергә, фронтта иң оҫта атыусы булырға ғәҙәтләнеп бөткән Сәлимде бүлмә "комағы" булыу һис тә ҡәнәғәтләндермәй. Яңғыҙлыҡты ул, ни эшләптер, бәләкәй саҡта ла ауыр кисерә ине. Ә инде һуғыштың ҡайнар ҡаҙанында барлыҡ яугирҙар менән бергә ҡайнашып, атакаларға иң алдан "Ур-р-р-а!"– тип аҡыра-баҡыра сапҡан кешенең бына хәҙер айырым бүлмәлә, тупаҫыраҡ әйтһәк, төрмәләге яңғыҙ камераға бикләнеү менән бер икән. Яңғыҙлыҡ ерһетә. Яңғыҙлыҡ йөрәк итен кимерә. Яңғыҙлыҡ һағындыра. Бына шундай яманһыу ваҡыттарҙа тәмәкенең иң яҡын дуҫына әйләнеп китте Сәлим. Тәмәкенән ҡотолоуҙан ауыр буласағын да аңлай ул. Тик аңлау артында тештәрен шығырҙатып көлөп торған алдау шайтаны барлығы тураһында уйланмай ине әле. Ғаләмдәрҙе байҡап торған кеше аҡылы, ике ҡайын араһында аҙашҡан алабармандай, ваҡыт-ваҡыт кескәй генә хәл-ваҡиға араһында ла иҫәңгерәп йөрөй.

Махорка тартыуҙың ауыр яҡтары шаҡтай. Уны төрөргә, төкөрөкләп йәбештерергә кәрәк. Быны теләһә кем оҫта башҡара алмай. Әле лә бына тәмәке тартыу өсөн прокурор ҡатып бөткән гәзит ҡағыҙы йыртты. Башҡалар ҙа шул уҡ мәшәҡәтте ҡабатларға тотондо. Уларҙы был бәләнән ҡотҡарыу өсөн, Сәлим һәр береһенә сигарет бирҙе. Шунан көлөшөп тә алдылар:

– Судья булғас, Сәлим ағайығыҙ бай ҡылана.

– Блатной судья булырға оҡшай ул.

– Прокурор алдында ялағайланмаҫҡа кәрәк.

– Судья адвокат яҡлауына ла мохтаж.

– Иң кәрәге – дезертирҙың йөҙөн асыу.

– Йөҙөн ләм ҡаплаған.

– Таҙартырға кәрәк.

"Таҙартырға кәрәк" тигәне Мәхмүттең "кеше" һәм "дезертир" төшөнсәһе араһында буталып йөрөгән сифатын асыҡлау менән бәйле. Ни тиһәң дә, кеше яҙмышын хәл итеү сыуалған йомғаҡты рәтләү генә түгел. "Дезертирға үлем язаһы", йәнәһе. Шундай хөкөм сығарырға кәрәк. Әйтеүе – еңел, ғәмәлгә ашырыу – ауыр. Ошо юҫыҡтараҡ фекер башланғас, судья, прокурор, адвокат араһында ҡапма-ҡаршылыҡтар дауылы ҡупты. Дауыл, тәбиғәттәгесә, талғын елдән башланды. Прокурор Рәйес Байымов судья Сәлим Пирмөхәмәтовты йомшаҡлыҡта ғәйепләне. Уға судтың башланып китеүе оҡшамаған.

– Ни бысағыма ғәйепләнеүсе үҙен дауылда һелкенмәгән имәндәй тота? Судьяны бысратырға маташа? "Кулак малайы", "мулла малайы" тип ырылдарға тотондо. Ни өсөн коммунист малайы – дезертир, кулак балаһы – Советтар Союзы Геройы? Ошоно аңлаймы ул маңҡа ауылдашың?.. – тине.

Прокурор ярһып һөйләүгә күсте. Уның һуңғы һүҙҙәренә дөрөҫлөк ойотҡоһо һалырға кәрәк ине. Рәйес райондашы менән беренсе танышҡанда уҡ уны "Советтар Союзы Геройы" тип атағайны. Унан һуң, яйы тура килгән һайын, "герой" тип кенә өндәшә. Уға ҡушылып, башҡалар ҙа "герой" тип йөрөтә башланы. Был һүҙ Сәлимдең нервы ҡылдарын дерелдәтә. Сөнки ул ялған исем. Ә бит икенсе баракта ысын герой бар. Тик ул үҙен Петр батшанан да өҫтөн ҡуйып йөрөй. Танауы тау башына эленә. Күкрәге генералдыҡылай кирелә. Аҙымдары һарыҡ эләктерергә барған бүренеке һымағыраҡ. Башҡа демаштар менән күктән ҡарап һөйләшә. Ауыҙынан һәр ваҡыт хәмер еҫе аңҡып тора. Күберәк һалһа, туҡ

өйрәктәй, сайҡала-сайҡала йөрөй. Демаштарға мыҫҡыллап өндәшә торған ғәҙәте бар. Шуға күрә уны яратмайҙар. Ҡыҫҡаһы, “Кеше” һәм “Герой” төшөнсәһен аңлап бөтөрмәй. Прокурор менән судья араһында шул хаҡта һөйләшеү булып алды:

– Рәйес дуҫ, һин мине беренсе күреп танышҡанда уҡ “Советтар Союзы Геройы” тип атағайның...

– Мин был хаҡта хәрби гәзиттән уҡығайным.

– Унда бит тәҡдим итеү тураһында ғына яҙылғайны.

– Ә мин ысынға алдым.

– Кәрәкмәй. Башҡаса был хаҡта ләм-мим...

– Һин барыбер герой.

– Түгел.

– Ә бына ни өсөн бирелмәгәнлеген беләм мин.

– Ни өсөн?..

– Днепрҙы кискәндә геройлыҡҡа ун меңдән артыҡ кеше тәҡдим ителгән. Ике меңдән артығына ғына биргәндәр. Һигеҙ меңләбе ҡалған. Һин – һыҙылыусы. Һинең урынға, бәлки, икенсе берәүҙе килтереп тыҡҡандарҙыр. Берәй ялағай алйот тағып йөрөйҙөр һинең алтын йондоҙоңдо. Бынау күрше бараҡтағы “герой” түшендәге алтын йондоҙ һинекелер, бәлки. Герой түгел ул, ҡороған ҡурай. Шаҡшы йөҙө ерәнгес хатта. Орден менән аҙ шаярманы намыҫы тутыҡҡан командирҙар. Кибини...

– Рәйес дуҫ! “Прокурор” булып алғас һин бөтә донъяны һүгә башланың.

– Ә һин судья булғастың, йомшараһың.

– Эйе, һорауҙарыма биргән яуаптарыңа үҙем дә хайран ҡалдым. “Сын кулака”, “беспартийный” тигән һүҙҙәргә күнеккәнмен инде. Уларҙы киләсәктә лә әйтәсәктәр. Дауылға бирешмәгән имән кеүек ҡаршы аласаҡмын ул һүҙҙәрҙе. Ҡабатлап әйтәм: ул һүҙҙәр мине ҡурҡытмай. Аллам, ата-әсәйем, иманлы кешеләр биргән намыҫым бар. Бына был изге намыҫты ауылдашымдың ҙур гонаһына баһа биргәндә лә һаҡлай алһам ине.

– Был осраҡта һин, Сәлим дуҫҡай, ауылдаш булараҡ түгел, судья булараҡ аҡыл йөрөтөргә тейешһең.

– Үлем язаһы биреү кәрәкмәй.

– Ни өсөн?

– Беҙ – еңеүселәр. Хәҙер Аурупа уртаһындабыҙ. Һуғыш бөткәнгә ике йыл тулып килә. Беҙ – фашизмды еңеүсе. Тарих көҙгөһөн бер кеше бысрағы менән тапларға тейеш түгелбеҙ.

– Аңлатып һөйлә әле!..

– Беҙ изге һуғыш алып барҙыҡ. Ошо изгелек Көнбайыш Аурупа өсөн беҙҙең төк булып ҡалһын. Изге төк урынына бына ошонда, Австрия ерендә, дар ағасында аҫылынып торған һалдат кәүҙәһе ҡалдырыуға ҡәтғи ҡаршы мин.

Бәхәс ҡыҙа, ҡыҙа барҙы. Әкрен генә иҫкән елдең тора-бара дауылға әйләнгәне шикелле. Сигареттар тартыла-тартыла тора. Бүлмәләге ҡуйы төтөн хәҙер балта элеп ҡуйырлыҡ.

Бында кеше яҙмышын хәл итеү хәҙергә хөкөм ҡанундары менән түгел, намыҫ бизмәне буйынсараҡ бара. Фронтта “офицерҙарҙың намыҫ суды” эшләһә, бындағыны “һалдаттарҙың намыҫ суды” тип тә ебәрәләр. Хөкөм тажында ултырыусыларҙың юридик ҡанун менән танышлыҡтары юҡ түгел. Һуғышҡа саҡлы Дүртөйлө районында прокурор булып Билал Ҡаҙыханов эшләне. Башҡортостанда атаҡлы прокурор ине ул. Рәйестең ауылы Бүләк Дүртөйләнән әллә ни йыраҡ түгел. Һәр нәмә менән ҡыҙыҡһынып йөрөүсе Рәйес бер ваҡыт Дүртөйләләге

судта була. Шунда судьяның да, прокурорҙың да, адвокаттың да сығышын тыңлай. Унда берәүҙе “лесникты” үлтергәне өсөн ултырталар хөкөм урындығына. Ә лесник урманда үлтерелгән көндө теге абзый Өфөлә була. Шулай ҙа кешене ултыртырға кәрәк. Ете йылға иркенән мәхрүм итәләр был меҫкенде. Хөкөм ваҡытындағы судья, прокурор, адвокат сығышын беренсе мәртәбә шунда тыңлай Рәйес.

Бәлә ағас башынан түгел, йә “лесник”, йә “матрос” башынан йөрөй. Былдай бәлә ҡармағына Сәлим дә эләгә. Етенсе синыфты тамамлағас, кем әйтмешләй, билен бишкә бөкләп, ус төптәренә ҡат-ҡат төкөрә-төкөрә, аяҡ табандарын тағы ла ныҡыраҡ сарлап, колхозда эшләргә тотона ул: яҙын ер тырмау, иген сәсеү, йәйен бесән сабыу, көҙөн көлтә ташыу, ҡышын лом менән туң тиреҫ сабыу... Бер эш төрө лә унан ҡасып ҡотола алмай. Быға тиклем утынға йәй көнө бәләкәй арба, ҡыш көнө бәләкәй сана менән бара торғайны. Ә бына, уңған аттай егелеп эшләгәне өсөн, бер ҡышта бригадир уға утынға барырға ат бирә. Төндә бара Сәлим утынға. Сатнап торған һалҡын. Етмәһә, аждаһалай ажғырып, һаташҡан буран ҡуба бер ваҡыт. Арып-алйып, бәләнең мең төрлө сират күперен үтеп, ҡар дауылын йыра-йыра, таң күҙендә көскә ҡайтып етә ауылына. Утынын бушатып, атын-санаһын бригадирға алып барып тапшырғас, өйөнә кире ҡайтып, һикеләгә бер мөйөшкә түнә. Үлем йоҡоһо менән иҙрәй. Тик оҙаҡ иҙрәргә форсат бирмәйҙәр.

Көн күҙендә берәү арт яғына тибә-тибә уята. Был лесник ине. Әлеге утынды ауыл советы бинаһын йылытыу өсөн алып барып тапшырырға ҡуша. Урмандан урлағаны өсөн штраф менән янай. Лесник ҡушҡандың бөтәһен дә эшләй Сәлим. Хужа әйтмешләй, юрған да китте, ғауға ла бөттө. Юҡ, бөтмәгән икән шул. Бер ваҡыт уны район судына саҡыралар. Бөтә ауырлыҡтар ҡаҙанында ҡайнап сыныҡҡан ауыл малайына утыҙ саҡрымды йәйәү үтеү ҡурҡытмай. Тик судта судья менән прокурорҙың һүгеүе генә намыҫ тәрилкәһен селпәрәмә килтерә. Муйынына “бур” ҡамыты кейҙереүҙәре… Аҡылыңдан шашырлыҡ. Хоҙай йән биргәнгә йүн биргән, тиҙәр ҙә ул. Тышта ас бүреләй һалҡын буран ажғырһын, өй эсендә ҡыҫыр аш бешерерлек утының да булмаһын. Әйткәндәй, асҡа ҡойроҡ сәнсеп ултыр, ниндәй йүн булһын, ти һиңә. Етмәһә, ҡаҙна утынын урлағаны өсөн ярайһы ғына штраф сәпәнеләр. Йыл буйы яһап һатҡан сабата аҡсаһы шул штрафтың ғуж ауыҙына һалынды. Судья, прокурор “эшсәнлеге”нең әрсәһен ана шунда аңланы Сәлим.

***

Хөкөм – ғәҙеллек. Был ғәҙелһеҙлек айырым шәхестәрҙең иман хосусиәте биҙмәне менән генә үлсәнмәй. Аллаһы Тәғәлә тарафынан инсаниәтселеккә бирелгән намыҫ шәүкәтлелеге. Хөкөм менән шаярырға ярамай. Ҡояш, ер, ай, миллион-миллион йондоҙҙар Аллаһы Тәғәлә тәғәйенләп ҡуйған һыҙыҡ буйынса оса. Был – уларҙың намыҫ иманы. Иманды боҙған планетаны Алла һуға. Ер йөрәге – ҡояш йөрәге, ай йөрәге, йондоҙҙар йөрәге ҡылдары менән эске һәм тышҡы яҡтан бәйле. Беҙ – ҡояш балалары. Тимәк, беҙҙең йөрәктәр ҡояш йөрәге менән айырыуса ныҡ тоташ. Һәр кемдең үҙ йондоҙо бар. Йондоҙҙар менән тоташлыҡ ҡояш йөрәге аша үтә. Намыҫлылыҡ сикһеҙ ғаләм донъяһында ла хөкөм һөрә. Кеше йөрәгендәге намыҫтың рухи сылбыры шуларҙың бөтәһе менән дә элемтә тота. Алла рухы, Алла иманы, Алла ҡеҙрәте менән йәшәгән аҡыллы, алтын баштар был хаҡта яҡшы белә. Ундайҙарҙың нәҫел тамыры, нәҫел нигеҙе, нәҫел олоно, нәҫел ботаҡтары, нәҫел япраҡтары бәхетле була. Был хаҡта мәғлүмәтһеҙҙәр, ике сауҡа ҡыуағы араһында аҙашҡан ауыҫҡалһыҙҙарҙай, мәғәнәһеҙ йәшәй.

Гәрсә миллион-миллион йылдар ишетә-ишетә тау күкрәген бәреп сыға алһа ла, зәғиф шишмә барыбер йылғаға әүерелеп китмәгәндәй, ундай нәҫел ер күкрәгенә ныҡлап аяҡ баҫа алмай. Тәбиғәт йөрәгендәге серҙәр – кешеләр йөрәгендә. Тик беҙ уны аңлап бөтөрмәйбеҙ. Донъя сағыштырыуға ҡоролған. Ә беҙ һаман әле әйбер-есемдәр араһындағы оҡшаш, айырмалы яҡтарҙың эске һәм тышҡы сифатын аҙ беләбеҙ. Бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙың сағыштырыуҙың кеше аҡылын билдәләй торған хосусиәт икәнлеген әйткән тәғлимәткә иғтибарһыҙбыҙ. Донъяның мөхәббәткә ҡоролоуы хаҡында ла аҙ беләбеҙ. Яҡты донъяны ҡараңғылаусыларҙың нәҫел тамыры серек. Сәлим нәҫеле Болғар осоронан уҡ (XIII быуат) килә. Шәжәрәнең ете быуын башы тажында – Ғәҙелйән хәҙрәт. Унан һуң мулла, мәзин, ишандар мөбәрәк тәсбих төймәләреләй теҙелеп китә.

Иген игеү, матур тормош төҙөү, өлгөлө ғаилә булдырыу, мәҙәниәтле йәшәү, емеш-еләк үҫтереү, ауылды гөл-баҡса менән балҡытыу буйынса бөтә тирә-яҡта ғәлибәнә күркәмлек күрһәтә был затлы нәҫел тоҡомдары. Репрессия йылдарында “кулак малайы”, “мулла малайы” тип мыҫҡыл ителгәндәр икән, бының ваҡытлы икәнлеген аңлай Сәлим. Ҡара дауыл күпме генә ҡотормаһын, ағастарҙы төбө-тамыры менән йолоп ырғытмаһын, бер ваҡыт ул барыбер тына. Һынған зәғиф ағастар баш күтәрә алмайынса харап була. Төптән ныҡ үҫкән ағас, дауыл ваҡытында әле тегенән, әле бынан һынып бөтһә лә, һуңынан ул элекке хәленә ҡайтып, барыбер айбарланып китә.

…Окопта серем итеп алғанда бер төш күргәйне Сәлим. Алда – боҙ тауы. Йүгереп кире тәгәрәй. Шулай ҙа гел еңеп йәшәргә ғәҙәтләнгән Сәлим маҡсатына ирешмәйенсә ҡалмай. Йәнә йүгереп менеп китә. Йығыла. Бына бер ваҡыт ул боҙ тауы башында. Бөтә донъяға ҡул булғап тора.

Әле Сәлимдең парта араһындағы белеме ете йыллыҡ. Сабата яһағанда ла, туң тиреҫ сапҡанда ла, һабан һөргәндә лә, буш ваҡыттарында ул китаптан айырылманы. Уҡыны, уҡыны, уҡыны. Армияға алынғас полк мәктәбендә сарланыу, фронтта мәғлүмәтле кешеләрҙән өйрәнеү, һуғыштан һуң йәнә ике йыл уҡыу, мадьяр телен үҙләштереү, сәйәсәт ҡаҙанында ҡайнау, хәрби дисциплина диңгеҙендә йөҙөү, һәр яңылыҡты күңел сәхифәһенә яҙа барыу ... – быларҙың барыһы ла фәлсәфи белемгә юл яра.

Киләсәктә күренекле яҙыусы, ҙур ғалим буласағын ул әле белмәй. Шулай ҙа күңеле һиҙенә. Кемдер уға ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш. Аллаһы Тәғәлә үҙеме? Яҡшы, бай күңелле, аҡыллы кешеләрме? Нисек кенә булмаһын, нәҫел олононоң тажын ҙурайтып ебәрәсәк ул. Был тажда яҡтылыҡ, нур, илаһиәт булырға тейеш.

Ауыл халҡының: “Өйөңдәгенекен күршеңдән һора”, – тигән серле әйтеме бар. Кеше үҙ эске донъяһын аңлап бөтөрә алмай. Аңлап бөтөрһә, ул атлаған һайын фани донъя йөҙөнә ҡаралыҡ яғып йөрөмәҫ ине. Үҙ боҫоғон күрмәйенсә, кеше боҫоғон аҡтарып йөрөүсе ахмаҡтар ҙа баштан ашҡан. Ябай халыҡ ундайҙарҙы: “Тырнаҡ араһынан кер эҙләүсе”, – тип йөрөтә ине. Мәҙәниәтлеләр: “Алтын баҙынан сүп эҙләүсе”, – тип атай. Был хаҡта ауыл халҡының артыҡ тупаҫ итеп әйткәне лә бар: “Ыштан бөрмәһенән бет эҙләүсе”. Быларҙың бөтәһе лә кеше аҡылының ғәжәп һинсыл икәнлеге тураһында һөйләй. Кешеләрҙән йыйылған алтын аҡылдар нағышы бөтә милләттең эске хозуриәтен аңларға ярҙам итә. Нағыш эсендә – ыңғай һәм кире яҡтар синтезы. Кире яҡты халыҡ күҙе күберәк күреүсән. Күргәндәрен синтезлап, бер һүҙ менән аңлата ла ҡуя. Был аңлатма ауыл ерендә айырыуса тиҙ үрсей: тупаҫ кәүҙәле булһа – айыу, хәйләкәр икән – төлкө, ҡурҡаҡ икән – ҡуян, юҫыҡһыҙ икән – һөмһөҙ һыйыр ... – тағы ла әллә ниндәйҙәр. Күккүҙ ауылында бер ваҡыт Хажи исемлеләр күбәйеп китте. Уларҙы бер-береһенән һүҙ-ҡушымта (эпитет) менән айыра башлайҙар: Табан Хажи (табаны

яҫы булғаны өсөн армияға алмайҙар), Әжәл Хажи (бик бәләкәй, көскә тын алып йөрөй), Күркә Хажи (күркә урлағаны өсөн ташҡапсыҡҡа ултыртыла). Йәнә: Һөтсө Хажи, Бүре Хажи, Албаҫты Хажи, Кәтүк Хажи...

Мәхмүттең атаһы – Тимерғәли. Атаһы Бәкерйән бындай исемде уйламайынса ғына бирмәгәндер. Тимер – ныҡлыҡ символы. Ғәрәптең "ғәли" һүҙе "бөйөк" тигәнде аңлата. Был сифаттар унда юҡ түгел. Дөрөҫ, тимерҙәй ныҡ булырға тырышыуы төлкөләнә белеүгә бәйләнгән. Буйға ул уртасанан түбән. Кәүҙәһе – етен көлтәһе. Йоҙроҡ ҙурлыҡ баш түбәһендәге тырпайып торған баҡыр сәстәр уны мәрәкә кеше итеп күрһәтә. Һарғылт йөҙө уртаһындағы борсаҡ ҡәҙәр танау, эскә батҡан яңаҡтар, нурһыҙ күҙҙәр уны йәмһеҙ кешеләр араһына баҫтыра. Белеме – сәпсек теҙенән. Ә ни эшләп шундай һөйкөмһөҙ һөйәк ауыл Советы председателе булып алған? Йәмәғәтселектә үҙен күрһәтә белә торған төлкөләнеүҙәр мең вагон унда. Кәҙә тауышлы ғына булһа ла, ярып һөйләшергә ярата. Үҙен батшанан да ҙур ҡуя белә. Һаҡалы ла уның кәзәнекенә оҡшап тора. Һөйләгәндә ул кәзә һаҡал ут сығарырҙай булып дерелдәй. Түрәләр алдында уның кеүек оҫта ҡойроҡ болғаусы ер йөҙөндә юҡтыр. Уҫаллығын белдереү өсөн табан аҫтынан ут сығарырҙай ҡаты баҫып йөрөгән була. Йыйылыштарҙа, Ленинса ҡул күтәреп, ярһый-ярһый һөйләй. "Йәшәһен Ленин-Сталин партияһы!", "Йәшәһен коммунистар партияһы!", "Йәшәһен совет власы!" кеүек ҡыҙыл һүҙҙәрҙе сәтләүек урынына яра. Ярылған сәтләүектәрҙән сәселгән төкөрөктәре уны ен балаһылай йәмһеҙ күрһәтә. Ул урамдан шашынған шайтандай үткән саҡта, күҙ күрмәһен өсөн, кешеләр ихатаһына инеп ышыҡлана. Репрессия йылдарында ауылға йәм биреп тороусы аҫыл йорттарҙы, матур-гүзәл баҡсаларҙы, нигеҙ таштары ныҡ булған ҡаралтыларҙы туҙҙырып, хужаларын Себергә һөрөүсе лә ул булды. Сәлимдәрҙең ике ҡатлы мөһабәт йортон, ауылға нур сәсеп тороусы иләк-емеш баҡсаһын пыран-зыран килтереп, уның урынына өйөм-өйөм тиҙәктәр булдырыусы, себен ояһы яһаусы ат аҙбары эшләтеү йәһәтенә лә йөрәк ҡанын ҡойорҙай булып тотондо.

Мәхмүт бына шундай ғаиләлә үҫте. Атаһына хас булған кире сифаттарҙы мең өлөш арттырып ебәрҙе. Бындай ләғәтһеҙлек ауыл халҡын ныҡ ярһытты. Ләкин ярһыу ярҙарҙан сығыу өсөн ҡотороноп килеп тә бик тиҙ кире сигенгән диңгеҙ тулҡыны һымаҡ ҡына булып ҡалды. Сөнки: "Кара халыҡ – аңғыра һарыҡ", – тигән ғибәрә-һынамыш һаман йәшәй әле. Һүҙ әйтергә ҡурҡа халыҡ. Әйттеме, ғәзиз башҡайы Себер китә. Шулай ҙа халыҡ өнһөҙ ҡалмай. Тимерғәлиҙе үҙ-ара һөйләшкәндә "Төкси" тип атаны. Был уның мыҫҡыллап әйтә торған ҡушаматы була. Күккүҙ ауылында талантлылар күп ине. Шиғыр яҙыу менән шөғөлләнеүселәр ҙә шаҡтай. Сәлимдең бер апаһы (Гөлъямал), 1925 йылда аталары үлгәс, шиғри юлдар менән бер бәйет яҙған. Уның башланышы ғына хәтерендә ҡалған:

*Барып яндарына индем,*
*Ни хәлдә, атайым, тинем.*
*Васыяттарын әйтә алманы,*
*Хәлем ауыр, бәпкәм, тине.*

Сәлим үҙе шиғыр яҙыу менән икенсе синыфта укығанда шөғөлләнә башлай. Нәҫелдә таланттар Хоҙайға шөкөр! Әсәһе яғынан ике туған Ғәлимйән һуғышҡа саҡлы төрлө гәзиттәрҙә шиғырҙар баҫтыра башлай. Ике туған Әнүәрҙә лә талант уты бик иртә ҡабына. Атаһы яғынан ике туған Ғәзизйән дә шиғырҙарҙы табалағы ҡоймаҡтай ҡойоп тора. Сәлим әлегә Әнүәрҙең киләсәктә уйғур яҙыусыһы, үҙенең башҡорт яҙыусыһы буласағын белмәй әле. Әммә Аллаһы Тәғәлә өсөн шуныһы асыҡ: һәр алһыу таңдың киске шәфәғе була.

Күккүҙ ауылынан Ғимазетдин ағай һәр ваҡиғаны шиғыр ҡалыбына һалып һөйләй торғайны. Ауылда уның шиғыры менән атама алмаған берәү ҙә юҡтыр. Ниндәйҙер серле һүҙ менән атарға ла ярата. Ул сер йомғағын һүтеп-ҡарап та булмай. Үҙенән һораһаң - әйтмәй.

*Һүҙ эсендә алтын бар,*
*Тышындағыһы - көмөш;*
*Һорап башымды ҡатырма,*
*Үҙең белергә тейеш, –*

ти ҙә ҡуя. Эйе, Мәхмүттең атаһы Тимерғәлиҙе нәҡул “Төкси” тип атай. Ҡыҫҡартыу ауылда бар инде ул: Мөхәммәт – Мөхти, Ғабдрахман – Әптерәй, Шәмсеғәли – Шәмей. Быларҙың ниндәй исемдән ҡыҫҡартылғаны аңлашылып тора. Ә бына “Төкси”ҙең ни икәнлеген башта берәү ҙә аңғара алманы. Оҙаҡ ваҡыттар төрлө фараздарҙан һуң ошондай һөҙөмтәгә киленә. “Ат аунаған ерҙә төк ҡала” тигәнгә йәнә туҡталайыҡ. Кешенең эшләгән, йәшәгән урында төк ҡалдырыуы уның ижтиһадлылығы менән бәйле. Тимерғәли нәҫеле был яҡты донъяла сей төк ҡалдыра. Тимәк, сей төк + сийтөк + төкси. Төксиҙең балаһы Мәхмүт әле бына Көнбайыш Аурупаның Австрия ерендә сей төк йәки яман төк ҡалдырамы?

Ошо хаҡта уйланды Сәлим. Уның расчетында ата бандит Карабанов тәрбиәләнде. Тора-бара разведчик-овчарка булып китте. “Тюремщик” Ирғәлин дә мәңге ауыҙлыҡ бирмәгән пырҙымһыҙ ат кеүек ине. Тора-бара уны ла ауыҙлыҡлай алды Сәлим Пирмөхәмәтов. Разведкаға күскәс, юғалған полк байрағын табып, подразделениене тарҡалыу ҡурҡынысынан ҡотҡара. Яҡында ғына шартлаған снаряд ярсыҡтарынан ҡурсалау өсөн үҙ тәне менән яратҡан ҡыҙы телефонсы Мәҙинә кәүҙәһен ҡаплай. Мөхәббәт илаһилығы өсөн йән бирә Әлфрит Ирғәлин.

Сәлим киләсәктә, журналист-яҙыусы булып алғас, төрмәгә ултырырға тейеш Наилә исемле бер ҡыҙҙы тәрбиәгә аласағы, уны намыҫлы кешеләр атлай торған аҡ, изге, мөҡәддәс юлға баҫтырып ҡуясағы тураһында яңылыш ҡына булһа ла уйлай алмай әле. Әҙәм балаһына әрем күҙ менән түгел, әрнеүле йөрәк менән ҡарау ғәҙәте уның ғүмере буйынса намыҫ иманы тәсбихе булып һуҙыласаҡ. Был сифат уның нәҫел тамырына уҡ бөлзәмләнеп ҡуйылған була. Был бөлзәм нәҫел тамыры олононоң ныҡлы ботаҡтар ебәреүенә, шаулап япраҡтар ярыуына ярҙам итә. Сәлимдең атаһы Шәмсетдин мулла гүр эйәһе булғас, утыҙынсы йылдарҙа ул һалған ике ҡатлы мөһабәт йорттан алты баланы урамға ырғытып-бәреп бөтөргәс, күршеләре Хәтмулла ағай ат егеп килә лә:

– Әйҙә, абыстай, киттек беҙгә, мулла абзый мине егерме беренсе йылғы аслыҡта үлемдән ҡотҡарып ҡалғайны, яҡшылыҡтың әжере – яҡшылыҡ, – ти.

Күккүҙ ауылы халҡы бәндәселек яғынан икегә бүленә ине: кешелеклелек, кешелекһеҙлек. Шәмсетдин мулла үҙ хужалығын ғына түгел, бөтә ауылды eләкемеш баҡсаһы, гөл-сәскә баҡсаһы эсендә балҡытыу тураһында хыяллана. Был хыялдың офоҡтары һаман киңәйә барып, бөтә донъя матурлығы менән тоташырға тейеш. Иҫ киткес ҡанатлы хыял. Донъя матурлығы тураһында уйланыу – кешенең иң аҫыл сифаты. Сәлим егет ҡорона еткәс, ауыл ҡарттары “ҡойоп ҡуйған атайың”, “ике тамсы һыу кеүек оҡшашһығыҙ”, “төҫөң-битең дә атайыңдыҡы”, “һинең кеүек йылмайып һөйләшә торғайны” кеүек һүҙҙәрҙе йыш әйттеләр. Сәлим атаһын күреп белмәй. Сөнки яҡты донъя менән ул Сәлим бер йәштә саҡта уҡ хушлашҡан. Ҡарттар әйтеүенсә, ауыл халҡы күңелендә ул изге төк ҡалдырып киткән. Был төк менән ныҡ ғорурлана Сәлим. Төк уның бөтә

илаһиәтендә иман ҡаны булып урғыла. Ата рухиәте менән йәшәү – бала өсөн ҙур бәхет!

Төкси нәҫеле кешелеклелек баҡсаһына көл һибә. Атаһы юлынан китерме Мәхмүт? Бына нимә борсой Сәлимде. Шулай ҙа ул үлем язаһына ҡаршы. Бәлки, тәүбә итер? Халыҡтың: “Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ эшләү – һәр кем эше, яманлыҡҡа яҡшылыҡ эшләү – ир-егет эше”, – тигәне лә бар бит.

VII

Хөкөмдарҙар бәхәсе ҡыҙа барҙы. Сигареттар тартылып торҙо. Рәйес яңы дуҫы Сәлимде үҙе шикелле пырҙымһыҙ түгел, сабыр тәбиғәтле булғаны өсөн ныҡ яратҡайны. Фронт уты дәһшәтендә ҡаҡшаған нервы ҡылдары һаман ҡылдый-былдый килә. Сәлимдең сабыр төбөндәге һары алтыны ла сатнап ярылды.

– Мин судья булыуҙан баш тартам, судты дауам иткегеҙ килһә, башҡаны һайлағыҙ, мин… үлем язаһына ҡаршымын, – тине лә, тып баҫып, сығып китмәк булды. Ләкин уның юлын Рәйес бүлде:

– Туҡта!.. Былай ҡыланып, һин үҙең дезертирлыҡ гонаһы күтәрәһең. Беҙ әле үҙеңде судить итеп ташларға можем. Вот так! Ҡурҡаҡ һин!..

“Ҡурҡаҡ” тигән һүҙ Сәлимдең сабыр төбөндәге һары алтынын йәнә тураҡлап ташланы. Ул ҡалтыранды-ҡалтыранды ла, тораташтай ҡатып ҡалып, бер һүҙ әйтә алмаҫ сиккә етте. Бынаһы ла һуғыш уты ғәләмәте.

– Мин ҡурҡаҡ түгел, Рәйес дуҫ, – тип, уның алдына йәнә барып баҫты Сәлим. Уның тәне дерелдәмәй ине хәҙер. Тик ҡараштары уҫал, ҡурҡыныс, шөкәтһеҙ. Әллә яңы дуҫына мина шикелле бәрелеп шартламаҡсымы был? Атака ваҡытында ҡолағыңды тондорорлоҡ ҡаты тауыш менән “ура!” тип ҡысҡырып, дошманға иң алдан томоролған Рәйестең дә ҡиәфәте Сәлимдеке шикеллерәк ине. Уларҙың бер-береһенә ҡарашы бына-бына һөҙөшөп китергә ҡоторонған ике үгеҙҙе хәтерләтә. “Үгеҙҙәр” араһына адвокат Әхмәт Әхмәҙуллин килеп инде.

Әхмәт Әхмәҙуллин 469-сы миномет полкында полк командиры подполковник Чернявскийҙың адъютанты булып хеҙмәт итте. Түшендә ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм миҙалдар. Өлкән сержант. Һуғышҡа саҡлы район прокуратураһында секретарь булып эшләгән. Суд эштәрен ярайһы ғына белә. Шуға күрә уны бында адвокат итеп ҡуйҙылар. Хәрби хеҙмәтте бик ғәҙел үтәне. Шулай булмаһа, полк командирының йән һаҡсыһы булып йөрөмәҫ ине. Башта бер ни ҡәҙәр элемтәсе булып та алды. Разведчик булараҡ та үҙенең тәртипле, етеҙ, кескәй генә вазифаға ла ҙур иғтибар менән тотона белеүен күрһәтте. Уртаса буйлы. Аҡһыл-һары йөҙлө. Дуҫ-иптәшлек тойғолары менән йәшәргә ярата. Ҡайтҡас уҡырға, йә судья, йә прокурор булып эшләү хыялы менән йөрөй. Бирһен Хоҙай!

Прокурор менән судьяны тынысландырырға тырышып:

– Минең һуғышҡа тиклем прокуратурала эшләгәнлекте беләһегеҙ, – тине ул. – Судта кеше яҙмышы хәл ителә. Боҙоҡ нервы менән судты алып барып булмай, Сәлим! Ни эшләп былай ҡапыл ғына әтәсләнә башланың әле? Суд эшендә мина атҡан сағыңдағыңа ҡарағанда ла түҙемле сабырлыҡ кәрәк, Рәйес туған! Бер көн һаташып та барҙың атакаға. “Ура” тигән тауышың һаман ике ҡолаҡты ярып тора. Бына нимә? Беҙгә ябалашып түгел, аҡыл менән эш итергә кәрәк. Һин бит, Сәлим, бөтә полкта кеше яҙмышын ныҡ белеүсе командир икәнлегеңде күрһәттең.

Әхмәт Сәлимдең ҡулын ҡыҫты. Улар ҡулына Рәйес ҡулы килеп өҫтәлде. Алты ҡул уҡмашып алды. Унан һуң фронттағыса көлөштөләр. Был бер ни тиклем балалыҡ йылдарын да хәтерләтте. Бер көн дуҫ булыу өсөн ҡул ҡыҫышалар. Икенсе көндө танау ҡанатҡансы һуғышалар. Өсөнсө көндә ҡабат дуҫлашалар…

***

Ялған бәхет эҙләгән – ярыҡ ялғашҡа ултырған... Мәхмүт яҙмышы шулайыраҡ булып сыҡты. Курск дуғаһында үҙе теләп дошманға бирелгәс, немецтар уны күптән көткән ҡәҙерле ҡунаҡтай ҡаршы ала. Немецтарҙың, кем әйтмешләй, ҡойроҡтарын һырттарына һалып, көнбайышҡа, йәғни үҙ илдәренә табан сигенгән сағы ине был. Ниндәйҙер еңел машинаға ултыртып, алдылар ҙа киттеләр уны. Мәхмүт иркен тын алып ҡуйҙы. Уның уйлауынса, бына ҡайҙа икән ҙур бәхет. Әлеге листовкаларҙа яҙылғанса, немецтар совет халҡын рәхәт тормошта йәшәтер өсөн һуғыша икән. Ауылда, атаһы председатель булғас, кеше башынан йөрөргә өйрәнде. Тиҫтерҙәре унан ҡурҡып йәшәнеләр хатта. Атаһының саптарын тарантасҡа егеп, артта туҙан болото ҡалдыра-ҡалдыра елдергәндә, йәштәштәре һеләгәйҙәрен ағыҙа-ағыҙа, их, ошондай бәхет миңә тәтеһә ярай ине тип, уфтанып ҡарап ҡала торғайны. Шул инде: йүнле сыбыртҡыһын ҡаты шартлатҡанда, йүнһеҙҙең ҡаны ҡалтырай. Утта янмай, һыуҙа батмай йүнле кеше. Курск. Алда киң, тәрән даръя осраһа ла, йөҙә белмәһә лә хатта, барыбер батмаясаҡ ул. Йүнле кеше ҡайҙа ла үҙе өсөн юл таба белә. Бөтә ауылды тетрәндереп, ҡурҡытып, кулактарҙың йорттарын сәнселдереп, үҙҙәрен Себергә һөргән ҡаты ҡуллы Төксі малайы әле ул.

Еңел машинала шаҡтай елдергәс (унда ике унтер офицер ҙа бар ине), ниндәйҙер бер ауылға барып еттеләр. Бер өй эсенә инһәләр, уларҙы бай ниғмәтле өҫтәл ҡаршы алды. Уның әйләнәһендә ике матур кейенгән, ҡарап тороуға уҡ ҡылтым ҡиәфәтле, зифа буйлы офицерҙар ултыра. Мәхмүтте, ҡәҙерләп, өҫтәл янына ултырттылар. Үҙҙәре Мәхмүткә ҡарап йылмая, уға асыҡ йөҙ күрһәтә. Береһе уға бәләкәй генә билле рюмкаға эсемлек һалып бирҙе. Үҙҙәренең шаҡтай төшөргәнлеге күҙҙәре йылтырауынан, кәүҙәләренең ҡыйышланыуынан уҡ һиҙелеп тора. Мәхмүт, юрамал ялындырған булып, беренсе рюмканан баш тартты. Тегеләр бик ҡыҫтап, үҙҙәренекен эсеп тә ҡуйғас, Мәхмүттең тартылған ауыҙы рюмкаһын тиҙ эҙләп тапты.

Ауылда саҡта кешеләр яҙын серегән картуф кәлйемәһе, үлән ашағанда, уларҙың өҫтәленә арыш икмәге ҡуна торғайны. Бындағы аҡ икмәктең тәмлелеге. Йәнә колбаса, бешкән ит, консерва, тағы ла әллә ниҙәр бар. Башта, наҙлы ҡунаҡ һымаҡ, семетеп-семетеп кенә ашарға тырышты ул. Немецтарҙың киң күңеллелеген һиҙгәс, бәхәсләшеп бер һарыҡ ашап бөтөргән боронғо башҡорт һымаҡ, тәрилкәһенә ҡат-ҡат өйөп-өйөп һалған ризыҡты ысын ҡомағайҙарса йота бирҙе. Ашҡаҙаны башҡаса ҡабул итмәй башлағас, ҡомһоҙ өйрәктәй тығыныуҙы туҡтатып, бер-ике кикереп ҡуйҙы. Немецтар, хор менән тигәндәй, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Сөнки улар өсөн үҙе бер тамаша ине был. Немецтар таманса ғына ашай. Шуға күрә улар зифа буйлы, мөсәгә матур, ипле, күркәм булып үҫә. Табында кикереү – убырҙарса тығыныу фәләмәте. Үҙҙәрен донъя йөҙөндә иң мәҙәниәтле милләт итеп күрһәтергә тырышҡан немецтарҙа кикереү – наҙанлыҡ, томаналыҡ, тәрбиәһеҙлек билдәһе. Мәхмүттең быны ишеткәне бар. Әллә шуға көләләрме? Әйҙә, көлһөндәр. Һалдат өсөн ике ҡәҙерле нимә бар: туйғансы ашау, туйғансы йоҡлау. Туйғансы бер ашаны, исмаһам. Йоҡоһо ла булыр. Листовкаларҙа яҙылғанса, немецтар теләһә ниндәй милләт өсөн фәҡәт бәхет кенә теләй икән.

Бер ваҡыт һорау башланды. Тәржемәсеһенә тиклем әҙерләп ҡуйғандар икән. Һорауҙы оҙон ғына буйлы, ябыҡ сырайлы, яңаҡтары бер ни тиклем эскә батҡан ерән немец бирә. Шундайыраҡ ҡиәфәтле икенсе немец уны урыҫ теленә ауҙара.

– Һеҙ беҙҙең яҡҡа ни өсөн сыҡтығыҙ?

Мәхмүт кеçәһенән улар яҙған бер листовканы алып күрһәтте. Уҡығас – йәнә бер һорау:

– Тимәк, һеҙгә матур тормош, рәхәт йәшәү кәрәк?

– Минең бәхетле булғым килә.

– Беҙ бөтә донъя халҡы бәхете өсөн көрәшәбеҙ.

– Һеҙҙең бөтә әмерегеҙҙе үтәргә ризамын.

– Бына бында һеҙҙең исемдән яҙылған листовка бар. Уҡып сығығыҙ ҙа имзағыҙҙы ҡуйығыҙ.

Уҡыны Мәхмүт. Шул минутта уҡ ҡулын да ҡуйҙы.

– Беҙ быны күп итеп баçтырып, самолет менән урыçтар яғына ташлаясаҡбыҙ.

– Был яҡҡа сығыусылар күп буласаҡ.

Игеҙәктәр бер-береһенә ике тамсы һыу төçлө оҡшаш булған кеүек, Мәхмүт кеçәһендә йөрөткән, әле бына уға уҡырға бирелгән листовкалар араһында ла мәғәнә айырмалылығы юҡ ине. Һораусы һүҙен шуның менән бөтөрҙө:

– Һинең Ватаның хәҙер – Бөйөк Германия...

Ватан менән һатыу итеүсе Мәхмүттең иң бәхетһеҙ минуты ине был.

...Ялған бәхет — тамуҡтағы тәхет... Мәхмүт Германияға оҙатылырға теләгәйне. Унда бер бай немец ҡыҙына өйләнеп, бәхет тажы араһына сумыу тураһында уйлағайны. Ләкин уны хәҙергә немецтар ҡулындағы бер ауылға староста итеп ҡуйҙылар. Немецтарҙың бик боронғо гот-ҡәбиләләре Днепр йылғаһының уң яҡ ярына тиклем булған ерҙәрҙе биләп йәшәгән. Мәскәү янында мәсхәрә ителгән, Сталинградта ыстырам хәлендә ҡалған, Курск дуғаһындағы утта көйгән немец армияһы 1943 йылдың йәйендә үҙ яҡтарына һуғыша-һуғыша сигенһә лә, Гитлерҙың планы, шул боронғо гот-ҡәбиләләресә, үҙ донъяһын Днепрҙың уң яҡ яры менән сикләнмәксе ине. Гитлер өсөн быныһы – киләсәк, Мәхмүт өсөн аңлайышһыҙ, ҡараңғы төшөнсә. Шулай ҙа был ҡараңғы төшөнсә эсендә уның үҙ хазинаһы өсөн йыйған күңел аҡлығы талпына. Уға бөгөнгөһө ҡиммәт. Үлмәй. Иçән ҡала. Немецтар яҙып биргәнде ул үҙе уҡыны. Уның көр тауышын тыңлағандар, ай-һай-һай, көслө кеше булып сыҡты был, тип уйлағандарҙыр. Гитлерҙың “еңәсәгенә” ул ышана. Һуғыш бөткәс, Германияла ҡап ҡорһаҡлы әфәнде булып йәшәйәсәк. Бының өсөн староста булып эшләгәндә үҙенде немецтарҙың табан аçтын ялай торған зат итеп күрһәтергә кәрәк. Унан һуң, Германияла хеҙмәт итә башлағас, юғарыға үҙ табан аçтынды ялатып күтәрелеү насип буласаҡ. Утта янмай, һыуҙа батмай торған Төкси балаһы әле ул. Хәйлә уғын йөҙ тарафҡа ҡаратып ата беләә.

Шулай ҙа бындағы староста уғы, сағыштырып ҡараһаң, атаһының председатель уғы ғына түгел икән шул. Башта ул, атаһы һымаҡ, ҡаты ҡуллы, ен тәбиғәтле, миһырбанһыҙ, үтә шәфҡәтһеҙ булырға тырышты. Ул староста булып эшләгән ауыл партизандар менән ныҡ элемтә тота, имеш. Армия йәшенә етмәгән малайҙар, армия йәшенән үткән ирҙәр партизанлыҡҡа китеп бөткәндәр. Бындай хәлдәр башҡа ауылдарҙа ла бар. Кемдәр киткән? Ҡайҙа партизанлыҡ ҡылалар? Староста шуларҙың исемлеген төҙөргә тейеш. Унан һуң үҙҙәрен табып биреү ҙә мотлаҡ.

Күккүҙ ауылында Мәхмүт егеттәр солтаны данын алырға тырышты. Ә хәҙер Украиналағы Кичко ауылы “ханы” булмаҡсы. Ошонда солтанлығын да, ханлығын да күрһәтһә, һуғыш бөткәс, Германияла пан буласаҡ. Бының өсөн Кичко ауылы уртаһында дар ағасы яһатты. Унан һуң һәр йортта кем йәшәгән, хәҙер кемдәр йәшәй, китеп барғандары ҡайҙа, ни менән шөғөлләнә?.. Шундай

һораууҙарҙы асыҡлау өсөн төҙөнө исемлекте. Көндәрҙән бер көндө бөтә ауыл халҡын йыйып, үҙенсә бер телмәр тотто:

– Кем дә кем, Бөйөк Германия талап иткән фармандарҙы үтәмәй, уның кәүҙәһе дар ағасында эленеп торасаҡ; кемдең атаһы, туғандары партизанлыҡҡа киткән, әйтегеҙ: ҡайтһындар, беҙ уларға теймәйәсәкбеҙ. Миндә хәҙер барлыҡ партизандарҙың исемлеге бар. Атаһы ҡайтмаһа, ҡыҙын йә улын аҫасаҡбыҙ, – тип ярһыны.

Шуларҙы һөйләп бөтөргәс, егет ҡорона етәрәк, ике арт аяғынан тотоп, бер бесәйҙе телеграмм бағанаһына бәреп үлтерелгәнлеген иҫкә алды. Был егет сослоғо күрһәтеү өсөн ине. Хәҙер ирлек ҡөҙрәтен кешеләр яҙмышына бәйле рәүештә һынап ҡарай. Атаһының ҡайҙа икәнлеген әйтмәгән өсөн, ун биш йәшлек бер ҡыҙҙы ысынлап та дар ағасына аҫтырта Мәхмүт. Ул күрше ауылда ғына йәшәгән немец полицейскийҙары ҡул аҫтында эшләй. Кичко ауылында Мәхмүт ойошторған йыртҡыслыҡтар өсөн халыҡтың күңеле ҡоторона башлай. Бер ҡараңғы төндә килеп, партизандар Мәхмүттең үҙен алып китәләр. Уларҙың маҡсаты – хыянатсыны яуапҡа тарттырыу. Әммә маҡсат үтәлмәй ҡала. Был урманда йәшәгән күп партизандар тураһында немецтар белә. Ошо төндә улар өҫтөнә немецтар бомба ҡойорға тотона. Бомбалар ямғыр урынына яуа. Иртән немецтарҙың йәйәүле ғәскәре контрһөжүм яһай. Танкылары ла күп ине. Ҡаты көрәштә үлеүселәр, яраланыусылар бихисап. Шул алышта Мәхмүт тә яралана.

Көрәш ҡаты була. Партизандар еңелә. Күптәре ҡасып ҡотола. Бәғзеләре мәңгелек донъяһына китә. Берәүҙәре яралана. Мәхмүт яралылар араһында була. Немец йәйәүлеләре береһен атып, икенсеһен тапап киткәндә, Мәхмүт үлгән атлы булып ята. Немецтар бер төркөм партизандарҙы әсирлеккә алып китә. Ваҡытлыса ҡупҡан дауыллы көрәш шуның менән тамамлана.

Мәхмүттең яраһы ауыр ине. Һул аяғының балтырына тейгән пуля. Кемдеке? Беҙҙең партизандарҙыҡымы? Немецтарҙыҡымы? Хәйер, был хаҡта уйланыу уға – ағастағы ике алманың ҡайһыһын өҙөргә белмәйенсә икеләнеү кеүек. Тән-мөсәһе – Сталин армияһы менән Гитлер армияһы араһында. Аң-аҡылы, хис-тойғоһо Крыловтың суртаны, ҡыҫалаһы, аҡҡошо һымағыраҡ – өсөһө өс яҡҡа тарта: үҙенә, көнсығышҡа, көнбайышҡа. Үҙе! Үҙе!! Үҙе!!! Төп маҡсат – иҫән ҡалыу. Үлмәү. Аҡҡош күккә тарта. Суртан һыу төбөнә әйҙәй. Шунда ҡалдырып, яҙмышын ҡыҫала ҡайсыһына тапшыра.

Әкиәттәгесә, көн киттек, төн киттек, энә буйы ер киттек, тигәндәй, аңына килгәс, Мәхмүт шыуыша башлай. Ләкин аяҡтағы яра һыҙлауы йөрәккә төшә хатта. Һис алдырып булмай. Тыңламай ҡәһәр һуҡҡыры яралы балтыр. Ҡайҙа уның ер күкрәгенән ут сығарырҙай булып, ярһый-ярһый, тып-тып баҫып атлауҙары? Бөтәһе лә бөттөмө? Сәнселдеме? Ғүмере ҡыҫала ҡайсыһына эләктеме? Шәрә үлем уның күҙ алдында бейей хәҙер. Юҡ, үлмәҫкә! Йәшәргә! Йәшен ташылай ярһып йөрөгән Төкси малайы әле ул.

Хәйерсегә ел ҡаршы, тигәндәй, көҙгө һалҡын ямғыр һибәләй башланы. Торабара һибәләү ҡойоуға күсте. Биҙрәләп ямғыр ҡоя. Мәхмүт шыуыша, шыуыша, шыуыша... Һәр ынтылғанда энә буйы ер китә. Ә ҡан аға, аға, аға... Ул хәрби кейемдә түгел ине. Эске аҡ ыштан. Ҡара күлдәк. Ҡара костюм... Бөтәһе лә лысма һыу булып бөттө. Аҡҡош ямғырҙан алда уҡ зәңгәр күккә осоп китте. Суртан уны һыу төбөнә һөйрәтә. Ҡыҫала уның килеүенә ҡайсыһын рәтләп ҡуйған. Бирешмә, Мәхмүт, бирешмә! Бирешмә!! Бирешмә!!! Атайың шикелле йәшен ташы була бел! Ҡапыл ямғыр тынды. Ҡара болоттар араһынан ҡояш ялтырап сыға. Мең бәлә менән тороп ултырырға көс тапты ул. Өҫтөндәге плащын, пинжәген

һалып ырғытып, аҡ ыштанын йыртҡылағас, шуның менән яраһын бәйләп ҡуйырлыҡ көс тапты. Һәй! Ҡояш! Мәрхәмәтле бул. Йылы нурҙарың менән наҙла үҙ балаңды, үҙ ҡолоңдо. Гонаһ ҡылһаҡ, яңынан ҡабатламаҫ өсөн, һиңә ҡарап ант итәбеҙ. Ант! Ант!! Ант!!! Һин әллә нисә миллиард йылдар буйы Хоҙай һыҙып биргән юлдан елдерәһең. Тәртипле һин! Иманлы һин! Оло йөрәкле һин! Үҙең эйәртеп осҡан планеталарҙы ла үҙ һыҙыҡ-ҡыҫаларыңдан сығармайһың. Ә кешеләр сыға. Йөрәгенә һинән алған утты дөрләтә-дөрләтә, бөтә йәнен-тәнен уйнаҡлата-уйнаҡлата осҡон сәсерҙәй баҫып йөрөгән бәғзе улдарҙың да күңел юлынан ситкә тайпылғандарын һиҙмәй ҡалалар. Аллаһы Тәғәлә үҙе өҙөлөп һөйгән, йәндәй яҡын күргән бер планетаһында (Ерҙә) КЕШЕ тигән бөйөк затты яратҡан. Кешенең тәртибен һынар өсөн күп илаһилыҡтар боҙолһа, Аллаһы Тәғәлә Ер шарын йәшәүҙән туҡтатасаҡ. Тимәк, Ер йөҙөнөң аҡлығы – бөтә халыҡтар йөрәге паклығы.

Аңлаймы Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән был изге хаҡлыҡты Мәхмүт? Юҡ, аңламай. Аңлаһа, Аллаһы Тәғәлә һыҙып биргән иман һыҙығы буйынса ғына атлар ине. Бәлки, ул был хаҡта уйлағандыр ҙа. Әллә шайтаны уны шул һыҙыҡтан этеп йығырға самалап ҡына йөрөймө? Дөрөҫ, кешенең уң яғындағы изгелек фәрештәһе шайтанға ҡаршы ныҡ көрәшә. Шулай ҙа фәрештәнең еңелгән саҡтары ла була. Еңелде Мәхмүттең фәрештәһе. Ул, бәлки, әле бына йылы ҡояш нурҙары менән ярҙамға килгәндер. Шыуыша Мәхмүт, шыуыша. Тештәрен ҡыҫып, уртын сәйнәй-сәйнәй шыуыша. Бына ул үле кәүҙә янына барып етә. Барып етә лә, алйып, мәйет өҫтөнә башын ҡуя. Аңын юғалтты шикелле. Ҡайҙа уның һыҙығы? Көнбайыш Аурупа иле Алманияламы? Көнсығыш Аурупа иле Советтар Союзындамы? Мейеһе күҙәнәктәрендә шул хаҡта уйларлыҡ урын ҡалған икән әле.

Күпмелер ятҡас, бер ни ҡәҙәр аңына килде ул. Көҙгө ҡояш бер ҙә рәхимһеҙ түгел. Байырға табан йылы нурҙарын ҡоя-ҡоя бара. Был нурҙар Мәхмүттең йәшәү менән үлем араһында булған уйҙарын да йылытып ебәрҙе. Юҡ, йәшәргә кәрәк! Йәшәргә!! Йәшәргә!!! Аҡыллы уй терелтә, йүнһеҙ уй – үлтерә. Тороп ултырырға, үлектең кәүҙәһенә хәлһеҙ ҡулдарын ҡуйырға ҡояш ярҙам итте.

Бәй, ныҡлап ҡараһа, үлмәгән икән дә баһа. Әллә йоҡлап ҡына ятамы? Тын ала. Ғырлай. Шәп! Хоҙай йән биргәнгә – йүн биргән, тигәнде ишеткәне бар ине уның ауыл ҡарттарынан. Бына йүн бирҙе. Шатлығынан шартлап ярылыр сиккә етте ул. Бер-бер йүн бирмәйенсә ҡалмаҫ был.

– Һәй, йүнең бармы, ни эшләп ятаһың, тор, ярҙам ит мин яралыға, – тип баҡыра Мәхмүт.

Йүн бирергә тейешле кеше үҙе лә ныҡ яраланғайны. Шулай ҙа үлмәгәйне әле. “Ярҙам” тигән һүҙҙе ишеткәндә, яҡты донъя менән хушлашып ята ине инде. Мәгәр был хаҡта ярҙам һораусы белмәне. Ята-ята бер аҙ хәл йыйып алғас, ярҙам бирергә тейешленең әйберҙәренә “ревизия” яһарға кереште. Шинеле һәйбәт кенә. Пилоткаһы бар. Маңлайында – йондоҙ. Погоны – сержанттыҡы. Аяғында – кирза итек. “Ревизия” яһағандан һуң әкренләп, бөтә кейем-һалым нәмә ярҙам һораусы өҫтөнә күсте. Шәп ярҙам итте был сержант.

Ошо минутта ялған менән дөрөҫлөктө намыҫ бизмәненә һалып үлсәп ҡараһаң, ҡайһыһы ауырыраҡ тартыр ине икән? Уларҙың икеһе лә бик күп бит. Ҡояш быны белә. Төнгө бишегенә төшөп сумыр өсөн офоҡҡа ҡып-ҡыҙыл ут шары булып килеп терәлгәс, ни өсөн йоҡларға ашыҡмайынса ҡарап тора һуң? Ни өсөн йөҙө ҡыҙара? Ер йөҙөндә намыҫһыҙлыҡ бизмәне ауыр тартҡанғамы?

Ҡояш йөрәген әрнетә-әрнетә, йөҙөн ҡыҙарта-ҡыҙарта оҙаҡ ҡына ҡарап торғас, киләсәктә көр йәшәүҙе өмөт итеп, төнгө сәйәхәткә китте. Офоҡ, ҡыҙыл

яулыҡ бәйләгән моңһоу ҡыҙҙай, оҙаҡ ҡына бойоғоп торҙо. Унан һуң, ҡыҙ йөҙөнә ҡара ҡайғы һөрөмө һибелгәнде хәтерләтеп, үҙ тирәһенә тәүҙә алһыу-аҡһыл, һуңыраҡ алһыу-ҡыҙыл, күк, күкһел, ҡарағусҡыл болоттар йыя башланы. Ҡара болоттарға күктә хасил булған бүтән ҡара болоттар килеп ҡушыла. Улар көнө буйы һуғыш уты ялҡынында көйгән Ерҙе һыу шифаһы менән һыйлау тураһында хәбәрләшә. Ел ул болоттарҙы партизандарҙың Совет Армияһы менән бергә фашистарға ҡаршы һуғышҡан урынға ҡыуа. Был ерҙә немецтарҙың танкылары ағастарҙы пыран-зыран килтереп бөтөргән. Тегендә-бында үлек кәүҙәләр аунап ята. Яралылар ыңғыраша. Ер-Әсә, йөрәге ҡыҫҡан кешеләй, ауыр тын ала. Ел ҡарағусҡыл болоттарҙы ошо төбәккә килтереп тупланы. Болоттар төбәккә биҙрәләп һыу түгергә тотондо. Һыу әле шыуыша-шыуыша, әле тәгәрәй-тәгәрәй, яңы йүн эҙләп, сәғәтенә энә буйы ер киткән Мәхмүтте лә урап үтмәне.

Икенсе көндө ҡояш көнсығыштан йәһәт килеп сыҡты. Ямғырҙан һуң ергә йылы нурым, кешеләргә асыҡ йөҙөм кәрәк тигәндәй, йылмая-йылмая, зәңгәр күккә күтәрелә.

Беҙҙекеләрҙең яҡынлашып килеүе кисә үк һиҙелә ине. Күктә, хыялый сәмреғоштар һымаҡ, самолеттар сәкәшә. Бомба ҡоялар. Ҡайһы берҙәре янып ергә ҡолай.  Ерҙә, енләнгән үгеҙҙәрҙәй, танктар һөҙөшә. Күктә лә ут. Был уттар ҡушылыуынан сыҡҡан гөбөрлө таһырлау, партизандар көрәшендәге гөрөлдәү менән дә ҡушылып, Ер шарын шартлатыр һымаҡ. Әгәр шулай килеп сыҡһа, Мәхмүт үҙ йүнен тамуҡта тапҡан булыр ине. Шөкөр, хәҙергә Хоҙай уның алама йүненә кәртә тотобораҡ тора. Ә киләсәге ни менән сикләнер? Уныһы өсөн ишәге ҡайғыртһын. Шулай ҙа ишәк түгел, кешеләр йүн тапты уға. Рәсәй тупрағында бәхет эҙләргә ярһый-ярһый килгән фрицтар, шалҡан урлаған малайҙар шикелле, хәҙер үҙ илдәренә табан һыпырта. Беҙҙекеләр, көнсығышҡа тағы ла яңылыш боролоп ҡарамаҫлыҡ итеп, уларҙың арт яҡтарына ут төртә-төртә ҡыуа. Бына бер ваҡыт утлы фронт һыҙығы беҙҙең партизандар көрәшкән ерҙәрҙе лә көйҙөрә-көйҙөрә көнбайышҡа табан үтте. Көрәш дауылында ятып ҡалғандар ерләнә. Яралылар тылға оҙатыла. Беҙҙең Мәхмүт тә үҙ йүнен хәҙергә госпиталдә тапты.

VIII

Мәхмүт бөтөнләй таныш булмаған сержант кейеме менән килеп эләкте фронттағы ялан госпиталенә. Мәңгелек ожмахҡа йүн тотҡан сержант уға йәдкәр өсөн хәрби хеҙмәт кенәгәһен ҡалдырған. Тик ул ямғыр ваҡытында сыланып, сепрәккә әйләнеп бөткән. Ундағы һүҙҙәр хәҙер, әллә ниндәй лупа менән уҡыһаң да, һис тә танырлыҡ түгел. Төрлө алдашыу йүндәренә хәйләле уҡ менән ата белгән Мәхмүт бында ла аптырап ҡалманы. Тотто ла, “сержант Бәкеров Мәхмүт Тимерғәли улы” тип яҙҙырҙы. Кенәгә биттәренә башҡа “ул-был”дар ҙа уның әйтеүе буйынса беркетелде.

Госпиталь күсеп-күсеп йөрөнө. Бер ваҡыт Мәхмүт аяҡҡа баҫты. Һауыҡҡас, уны 95-се уҡсылар дивизияһына ебәрҙеләр. Яҙыуы уның матур ине мәгәр, шуға дивизия штабына писарь итеп ҡуйылды. Мәхмүт өсөн яңы, шәп йүн ине был. Штаб начальнигы капитан Федоров мыштыр кеше булһа ла, эште еренә еткерергә ярата. Дивизияның разведчиктары үҙҙәренә беркетелгән офицерҙарҙы араҡы менән һыйларға ярата икән йән һаҡлау өсөн. Ә араҡыны адъютанттар табып ҡына тора. Хәҙер инде Мәхмүт араҡыға хәйлә уғы ата башланы. Дивизия писаренә һәр разведчиктың йомошо төшөп тора. Мәхмүттең атҡан уғы араҡы тулы һалдат фляғаһына бара ла тейә. Ҡармаҡ һалған һайын балыҡ эләктереү

менән бер был. Мыштыр Федоров ибәтәйле ҡулы менән фляганы аса, ашыҡмайынса ғына көрөшкәһенә араҡы ҡоя ла, башҡорт әйтмешләй, төбөнәсә түңкәреп тә ҡуя. Унан һуң, терпе энәһеләй тырпайып торған етенһыу сәстәренә ҡағылып алғас, Мәхмүткә ҡарап йылмая. Был аҫтыртын йылмайыуҙы үҙенә ҡарата рәхмәт тойғоһо тип ҡабул итә Мәхмүт. Тора-бара араҡы йүне йүнһеҙлеккә әйләнә башланы. Мыштыр Федоров тамам эсеүгә һабышты. Араҡынан, тирмән ташылай, башы дырылдап әйләнә. Етенһыу сәстәре ағарғандай була. Бит остары бешкән алмалай ҡыҙара. Йөрәге саптар аттыҡылай ярһый. Күңеле әллә ниндәй ҡыҙыҡ-мыҙыҡ уйлап күбәләкләнә. Бындай саҡта ул “Шумел камыш”ты йырлап ебәрергә ярата. Шунан файҙаланып, Мәхмүт теләһә ниндәй документҡа ҡул ҡуйҙырып ала. Бер миҙгелдә ул үҙенә Ҡыҙыл Йондоҙ орденына мөһөр һуҡтырҙы.

Араҡы менән аҡылһыҙ баштарҙы һатып алыу тураһында ишеткәне бар ине Мәхмүттең. Дөрләп янған һуғыш уты эсендә араҡы ахмаҡлығы хаҡында уйлағаны булманы мәгәр. Был ахмаҡлыҡ Федоровты араҡы һаҙлығына батырҙы. Бер ваҡыт бик күп эскәс, иҫерек килеш арбаға һалып, ҡайҙалыр оҙаттылар үҙен. Был ғәйептә ҡыҫылышы булыуҙы аңлап, һуңғы ваҡытта артыҡ ҡуҡырайып йөрөй башлаған Мәхмүттең дә штабтағы урынын ыҫмала менән буяп ҡуйҙылар.

Мәхмүт пехотаға ебәрелде. Атака ваҡытында, “ура” ҡысҡырып, алға ырғылманы ул. Нисектер йән һаҡлау йүнен эҙләргә тырышты. Ваҡ-төйәк яраланыуҙар булып торҙо. Шулай ҙа шәфҡәтһеҙ үлем уны урап үтте. Бына 1924 йылғыларға ла ҡайтыу ҡояшы йылмайып ҡараны. Быға бик шат ине Мәхмүт. Тик хәйләкәр төлкөнө тотоусы һунарсы булған кеүек, хыянатсыны эләктереүсе айбарлы иргеттәр ҙә бар икән шул. Бына хәҙер Мәхмүтте үлем язаһы көтә.

Хаҡлыҡ – ағарта, ахмаҡлыҡ – ҡарайта. 1914 йылғы Герман һуғышында беҙҙең халыҡ:

*Мендем аттың биленә,*
*Киттем Герман еренә;*
*Герман ере ҡара үлән,*
*Әллә ҡайтам, әллә үләм… –*

тип йырлаған икән, немецтарҙың ҡара төҫ ятраҡанлығын йөрәк аҡылы менән аңлағандар. Ҡара төҫкә мадьяр йәштәре лә ынтылды. Ҡара төҫкә табыныу һуғыш уты һүнгәс тә дауам итте. Мәхмүт әле лә аҡ менән ҡара араһында. Донъя йөҙөндә аҡ менән ҡара сәкәләште. Аҡ еңеп сыҡты. Хәҙер ул халыҡ байрағы булып елберҙәй. Ҡара ахмаҡлыҡ пәрҙәһенә төрөнгәндәр ғазап икмәге ашай. Ҡара ахмаҡлыҡтан хаҡлыҡ ағына күсә алырмы Мәхмүттең күңеле?

Тәнәфес ваҡытында уны “үҙ мөйөшөнә” ҡуйҙылар. Берәү һаҡта тора. Карабанов килеп:

– Һи, мөртәт, үлеп бараһың бит, иблис тоҡомо, – тип, суҡмарҙай йоҙроғон уның танауы аҫтында йәнә уйнатып китте.

“Мөртәт”, “иблис тоҡомо”, “үлеп бараһың” тигән һүҙҙәр бәғерен киҫте Мәхмүттең. “Дөрөҫ әйтмәй” тип уйланы. Ю-у-ҡ, “мөртәт” түгел. Ана, ниндәй соҡорло-саҡырлы, утлы-дауыллы, аҡлы-ҡаралы юлдар үтте. Үлем ауыҙына килеп эләкте бер ваҡыт. Бер ебегән булһа, сәнселеп ҡатыр ине шунда. Ә ул, Мәхмүт, йыл миҙгелдәренә ҡарап төҫөн үҙгәрткән йәнлектәй, һәр урындың үҙенә йән бирерҙәй урындығына ултыра белде. Ҡыҫҡаһы, аңра бәндәләрҙең танауына оҫта сиртте. Хәҙер инде ике иңендә ике сержант погоны ялтырап, ҡуҡырайып тора.

Шулай уйлай Мәхмүт. Әлбиттә, ул уй ҡаҙанында мең төрлө хикмәттәр ҡайнаша. Аҡ менән ҡара төҫ яғалаша. Ҡараңғылыҡҡа батып харап булды. Уға бөйөклөк кәрәк. Бөйөклөктө теге яҡта ла таба алманы. “Тоҡом” тигән һүҙ уның

нәҫеленә ҡарай ҙа баһа. “Иблис тоҡомо” тип әйтеүе йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте. Атаһы ла, ҡартатаһы ла, уларҙан элек тыуғандарҙың бөтәһе лә иблис булып сығамы? Мәхмүт үҙе шул иблистәрҙән яралған һоро ҡортмо? “Үлеп бараһың” тигән һүҙҙәре лә уның һарыуын ҡайнатты. “Постой!” тип дәртләнде ул. Дәртлелек осҡонон ҡалай ғына ялҡынға әйләндерергә тырышмаһын, уның дарман уты һүнеп бара ине инде. Бер ваҡыт география уҡытыусыһы Шамил ағаһы былай һөйләгәйне: Ҡояш Ай үҙенең күп өлөшөн ҡаплағанда ныҡ тотола. Ҡояш был ҡапланыуҙан тиҙ ҡотола. Элеккесә юлын дауам итеп, Ер йөҙөн йылы нурҙары менән иркәләй. Ай, элеккесә, Ҡояшҡа ҡарағанда көсһөҙөрәк планета булып ҡала килә. Ай Ҡояштан алған нур менән генә маҡтала… Күккүҙ ауылында улар нәҫеле Ҡояштай балҡымаймы ни? Балҡый. Яңы тормошҡа аяҡ салыусы кулактарҙы Себергә һөрөп бөтөрҙө атаһы. Ҡояш булып балҡыны. Һм… “Үлем язаһы” менән ҡурҡыталар. Булмаясаҡ үлем. Ул ярлы нәҫелдән. “Бөтә донъя пролетарийҙары берләшегеҙ!” тип яҙалар гәзит һайын. Пролетариат диктатураһы урынлаштырылды. Бөгөн килеп, кулак балаһы уны үлем язаһына тарттырырға маташа. Шиш!..

Шулай уйлай Мәхмүт. Тик уй ҡояшына ай күләгәһе төшкән мәл бит әле. Ниңә шул ҡәһәр төшкән немец листовкаһындағы алтын һүҙҙәргә алданды һуң? Әллә ул, Карабанов әйткәнсә, ысынлап та ҡурҡаҡ йән булып сыҡтымы? “Пуля батырҙарҙан ҡаса, ҡурҡаҡтарҙы эҙләй”, – тиҙәр ине фронтта. Ана, еңеүселәр уйнай, йырлай, шаяра, көлә, күңел аса, тыуған яҡтарына тиҙерәк ҡайтып китергә ашҡына. Ә һин кәзә бәшмәгенә әүерелдең. Һинең өсөн хәҙер: кешеләр – йыртҡыс, ил – ғазап баҡсаһы, бөтә донъя – тамуҡ уты. Уф!.. Шәүләңдән дә ҡурҡып йөрөгән кулак балаһы Сәлим, судья булып, һиңә үлем ҡарары сығарһын имеш:

– Кулак балаһының мине хөкөм итергә хаҡы юҡ, – тине бит. Шул һүҙҙәрен йәнә ҡабатлаясаҡ. Еңеп сығасаҡ... тик ... Уйҙарының элек Күккүҙ ауылы янындағы аҡҡоштар йөҙөп ҡыуанған күлдең хәҙер инде ҡороп ҡалғаны һымаҡ ҡына икәнлеген Мәхмүт һаман аңлап бөтөрмәй әле.

***

Суд хөкөмөн сығарғансы, Мәхмүт менән күҙгә күҙ ҡарашып, ысын йөрәктән, бер ауылдың тупрағын тапап, бер үк шишмәнән һыу эсеп, хеҙмәт итә-итә, йырлай-йырлай үҫкән, аулаҡ өйҙәргә бергә йөрөгән кеше булараҡ һөйләшеп алырға булды Сәлим. Баш етмәй был буталсыҡҡа. Ҡалай итеп былай килеп сыҡты һуң әле ул? 1924 йылда Күккүҙ ауылында 33 ир бала донъяға пәйҙә була. Ауыл тарихы быға тиклем ундай шатлыҡлы хәлде белмәй әле. Шул 33-тән бишәү генә иҫән ҡала. Өсәһө ауылда инде. Инвалидтар. Икеһе бында – Австрия ҡалаһында. Күккүҙ ҙур, абруйлы, матур ауыл. Хоҙай тәбиғәт гүзәллеген мул биргән. Ауылды ҡап урталай бүлеп, Матҡай йылғаһы аға. Матҡай йылғаһына көньяҡтан Оло Гүрҙе, Кесе Гүрҙе, төньяҡтан Йәмәк, Нәжәде, Теләүбирҙе йылғалары килеп ҡушыла. Төньяҡтағы аҡ ҡайынлы Ослотау, көнсығыштағы шулай аҡ ҡайынлы Кәсәй тауы, аҡҡоштар яратҡан Түңәрәккүл, көньяҡҡа һуҙылып киткән йәшел болондар, ҡалын, серле, моңло урмандар… – бөтәһе лә ауыл күрке.

Егеттәр солтаны булып иҫәпләнгән Хәтмулла, Әхмәтсолтан, Назиф, Мәкдәнур, ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә Күккүҙ ауылының ғорурлығы инеләр. Улар, иҫән ҡалып, ошонда булһалар, ни эшләтерҙәр ине икән Мәхмүтте? Ә Сәлим ни ҡылырға тейеш? Әгәр был бәләнән ҡотолоп ҡалһа, бөтә этлектәрен ҡабатламаҫҡа ант итеп, Мәхмүткә ауыл халҡы алдында ғәфү үтенеү мотлаҡ. Ҡысҡырып түгел,

әлбиттә. Эстән генә. Антын иртәнге алһыу таңдарға, төш мәлендәге янып торған ҡояшҡа, зәңгәр күкте биҙәгән зөбәржәт йондоҙҙарға әйтһен.

Сәлим алдында ла үҙенә күрә намыҫ хөкөмө. Демаштар үлем язаһы һорай. Сәлим быныӊ менән килешә. Дошман яғына командирыңа атып шылыу дезертирлығы үҙе генә лә иң ҡаты хөкөм талап итә. Ә инде дошман яғында ҡылған ҡәбәхәтлектәре, был яҡҡа сыҡҡас эшләгән ҡара гонаһтары ҡырҡ йыл буйы һабынлап йыуһаң да бөтөрлөк түгел.

Шундай уйҙар менән килде Сәлим дезертир ауылдашы янына. Ҡарауыл демашҡа китеп торорға ҡушты. Уға ауылдашы менән ихлас күңелдән, ысын йөрәктән, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү өсөн аулаҡ кәрәк ине.

Бына уларҙың ҡараштары осрашты. Мәхмүттең кешегә атырҙай итеп, бер ни ҡәҙәр мыҫҡыллы, юғары әһәңлелек менән һалҡын нур тулы элекке осҡор, һауалы күҙ ҡараштары хәҙер йыуашланып, меҫкенләнеп, хәлһеҙләнеп ҡалған. Шулай ҙа ул эскә батҡан бесәйҙеке төҫлө һарғылт-һоро күҙҙәрҙә бүре асыуын хәтерләтеп торған уҫал сатҡыларҙың йылт-йылт итеүе бер ни тиклем һиҙелеп ала әле. Сәлимдең кешеләргә ниндәйҙер эске хис-тойғо, мөкибәнлек, яратып, ваҡыт-ваҡыт талапсан, ягымлы зәңгәр күҙ ҡараштары Мәхмүтте был юлы ла шатландырманы.

Мәхмүт нык ябыҡҡан. 1942 йылдың август айында армияға алынғанда Мәхмүт Сәлимгә ҡарағанда бер башҡа оҙонораҡ ине. Ә хәҙер, киреһенсә, бер башҡа ҡыҫҡараҡ һымаҡ. Сәлим һуғыштан һуң 1945 – 1947 йылдарҙа нык үҫеп, 170 см кимәленә күтәрелде. Кем әйтмешләй, аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, тап-таман. Әле март айы. Совет Армияһы ҡышҡы кейемдән йәйге кейемгә күсмәгән. Рәсәйҙә ҡышҡы кейемдә (өҫкә – шинель, башҡа бүрек кейеп) йөрөйҙәр. Австралияла хәҙер йылы. Шулай ҙа демаштар иртән шинель кейеп йөрөүсән. Ҡояш күтәрелеп, төшкөлөккә еткәндә, байырға табан барғанда ла өҫтәрендә гимнастерка, галифе салбар, баштарында йондоҙло пилотка, аяҡтарында йылтырап торған ҡара кирза итек булыр. Фронт окоптарында ләмдә аунаған сусҡалай әрпешләнгән һалдаттар түгел инде хәҙер улар. Һәр көн иртәнге ашҡа хәтле гимнастика яһау, ашағандан һуң гимнастеркаға аҡ яға тегеү, кирза итектәрҙе көҙгөләй итеп таҙартыу, кейәү егетеләй биҙәнеү, шуларға оҡшаш ваҡ-төйәк ҡылтымлыҡтар демаштар күңелендә рухи тойғо осҡондары ҡабыҙмайынса ҡалмай.

Ҡылтымлыҡ тигәндән, бәғзе демаш үҙ тоҡсайында биҙәнеү әйберҙәре йөрөтә. Иртән үткер бәке менән ҡырынып, һабынлап йыуынып алғас, ашағансы йәки ашағас, биҙәнергә тотона. Битенә, һиҙелер-һиҙелмәҫлек итеп, матур-көйәҙ булһын өсөн, кершән һөртә. Ирендәренә, бит остарына, бәғзеһе ҡолаҡ япраҡтарына алһыулыҡ төҫө йүгертә.

Ҡайҙан, кемдән, ни өсөн башланды был көйәҙ ҡыҙҙарға оҡшатып ҡупшыланыу? Фронтта контр һөжүмдән һуң атака башлана. Фрицтар ҡаса. Землянка һымағыраҡ итеп яһалған окоптарына инһәң, нарҙарҙа аунап ятҡан биҙәнеү әйберҙәре менән осрашаһың. Ни өсөн ҡалдыралар? Бына беҙ, немец ирегеттәре, һеҙҙең кеүек бысраҡ йөрөмәйбеҙ, һуғыш уты эсендә лә әҙәплелекте, матурлыҡты, мәҙәниәтлекте ташламайбыҙ, тип әйтәләрме? Һуғышҡа саҡлы зыялы заттан булғандар әлеге биҙәнеү әйберҙәрен тиҙ генә сәлдереп, йә шинель, йә салбар кеҫәһенә һалып ҡуйырға ла етешә. Венгрияның Татанабанья ҡасабаһында торғанда элекке яугирҙар араһында биҙәнеү ғәҙәте ныҡлап ҡанат йәйҙе. Был һөймәлекле мадьяркаларҙың һынсыл ҡараштары алдында сибәр күренеү өсөн кәрәкте. Ошо ғәҙәт, ҡайҙа барһаң да артыңдан ҡалмаған

күләгәндәй, Венгрия мәмләкәтенән Австрияға ла эйәреп килде. Демаштар Австрия ҡыҙҙарының да рухи донъяһын фырт-мырт йөрөүҙәре менән генә түгел, матур ҡиәфәт яғынан да яулап алырға тырыша.

Гимнастеркаһының аҡ яғаһын һәр көн алыштырып тора. Төймәләрен, уҡаһы ҡойолмаһын тигәндәй, ипләп-ипләп ағартып, ялтыратып ҡуя. Бил ҡайышы ла ҡыҙҙар күҙен ҡыҙҙырырҙай итеп йылтыратыла. Биҙәнеү әйберҙәре һиҙелер-һиҙелмәҫ яғылған сибәр биттәр ҙә Австрия ҡыҙҙарының йәшлек нәфсеһен йәнә лә мең өлөш ҡотортоп ебәрерлек булһын. Бер күгәрсенгә ем һал – “һә” тигәнсә башҡалары осоп килә. Австрия ҡыҙҙары ла шулай. Иң тәүҙә бында Сәлимдең һөйөклө мөхәббәте мадьярка Гизелла килде. Уның артынан – Австрия ҡыҙҙары. Күҙ яуыңды алырҙай кейенеп, иркә аҡҡоштарҙай ипләп – ипләп, матур – матур баҫып, барактарға хәйләле күҙ ҡырыйы менән өмөтлө ҡараш ташлай-ташлай, үҙҙәренсә ҡыҙҙарға ғына хас була торған ғорурлыҡ ҡиәфәте һаҡлап, йөрөй бирәләр. Ҡара диңгеҙ буйында йәшәгән молдованкаларҙың моряктар һөйәген елкендереүҙәре тураһында сығарылған йыр ҙа бар. Былар Дунай йылғаһы буйҙарында үҫкән ҡыҙҙар. Демаштарҙың йөрәген улар ҙа шашындыра. Шашынған йөрәктәр “дунайка”лар (демаштар уларҙы шулай тип атаны) йөрәгенә мөхәббәт уты яҡмаҡ булып ташлана. Мөхәббәткә кәртә ҡороп булмай. Мөхәббәт, һуғыш уты боғауҙарын емерә-емерә, үҙ ҡануны менән барыбер йәшәй бирҙе. Мөхәббәт – үҙе ут. Мөхәббәт – йәшлек уты. Мөхәббәт – донъя тотҡаһы. Мөхәббәт әле демаштарҙы йәйге кейемгә күсерҙе. Уларҙа – ғәскәри ҡиәфәт. Уларҙа – баш юғары. Уларҙа – саптар аяҡ.

Сәлим дә йәйге кейемдә ине. Күкрәге тулы ордендар, миҙалдар, “Гвардеец”, “Отличный минометчик” тигән значоктар… Өҫтөндә – инглиз буҫтауынан тегелгән китель, галифе салбар, аяғында йылтырап торған хром итектәр, башында килешле фуражка. Мәхмүт ҡышҡы кейемдә ине әле. Башында ҡарға ояһылай туҙған алама бүрек. Өҫтөндә алама ғына шинель. Ул Мәхмүт өсөн шаҡтай ҙур шикелле. Ҙур шинель эсендә Мәхмүт 15-16 йәшлек бала шикелле генә тырпайып тора. Аяғында ботинка. Балтырына обмотка уралған. Эскә батҡан яңаҡтары, нурһыҙ күҙ ҡараштары, ауыр тын алыуы уны зәғиф бер меҫкен итеп күрһәтә. Мулла бабай бер ваҡыт әйткәйне: “Йүнһеҙҙәрҙең эске кере йөҙөндә булыр”, – тигәйне. Ул керле йөҙҙәр күбәйеп китһә, ил йөҙө күгәрә. Күгәргән ил бер ваҡыт йәшәүҙән туҡтай.

Сеү!.. Ни булды?.. Машина тауышы ажғыра. Мәхмүтте яғаһынан тотоп торғоҙҙо Сәлим.

– Смирно!

– Их, һин, Мәхмүт, Мәхмүт!.. “Смирно” тоторлоҡ та хәлең ҡалмаған. Бөткәнһең.

– Хаталандым мин... – Мәхмүт ҡапыл ҡан ҡоҫто.

Ул арала НКВД кейемендәге ике кеше килеп, ҡабаланып ике ҡулына бығау һалғас, төрткөләй-төрткөләй алып киттеләр ҙә, ҡара машинаға типкеләй-типкеләй индереп ырғыттылар Мәхмүтте. НКВД хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре лә инеп ултырғас, ҡарағусҡыл төтөн борхотоп, ҡара машина үҙ юлына ҡуҙғалды.

*(Аҙағы бар.)*



Тимер
ЙОСОПОВ

# «ШАТЛЫҒЫМ ДА, ҺАҒЫШЫМ ДА ҺЫЙМАЙ ЭСЕМӘ...»

***

*Үттәй әсе йәшем,*
*Керпегемдең*
*Утта янһанмы ни һәр бөртөгө.*
*Шундай әсе йәшем,*
*Аңлаймы ни*
*Был донъяның һәмһеҙ һәр өтөгө.*
*Кукрәп яҙҙар килә,*
*Ташып килә,*
*Күҙ йәш аша күрәм был йәмдәрҙе.*
*Тыным менән тартып алырҙаймын,*
*Һағындым да инде ейәндәрҙе.*
*Ғүмер үтмәй, тиеп йөрөгәнмен,*
*Бөгөн генә һиҙҙем алданһанды...*
*Ай-һай һына тиеп*
*Бер күрһөнгәс,*
*Өркөткәнмен икән ялһан данды...*
*Ғүмер үтмәй, тиеп йөрөгәнмен,*
*Елеп уҙа икән яланынан.*
*Йыш ҡаһылдым яла-ялһанынан,*
*Йыш ҡабындым көндөң яманынан.*
*Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам*
*Ғүмеремдең моңһоу аҡҡанында.*
*Самаларҙан йәйәү ҡасҡанмынмы:*
*— Әҙәм шаша, — тиеп ташҡанымда.*
*Ялҡтым инде даулы табындарҙан,*

*Тимер Йосопов (1938) Дыуан районының Әпсәләм ауылында тыуған. БДУ-ны, Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры.*

*Биҙҙем инде шаулы туйҙарынан.*
*Буйлатмағыҙ ирҙе,*
*Буйлатмағыҙ,*
*Буйлатҡандар уҙа буйҙарынан.*
*Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам,*
*Иҫтәремә килдем көҙ мәлендә.*

*Ҡайғылының йырын йотмағанмын*
*Табындарҙа шашып көлгәнемдә.*
*Бөгөн килеп*
*Үткәндәрҙән ҡалһам,*
*Үҙ эҙемдән ҡалҡам үҙ эҙемә.*
*Нисә йылдар үҙ эҙемдән ҡасып,*
*Әй, яңырып ҡайтам*
*Үҙ-үҙемә...*

*II*

*Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам,*
*Салдарымдан һыйпап*
*Йыуатмағыҙ...*
*— Аҫыл ирһең! — тиеп,*
*Иңдән ҡағып,*
*Буйлатмағыҙ мине,*
*Буйлатмағыҙ...*
*Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам,*
*Таң тип алданғанмын*
*Ҡисләгәндә.*
*Ауыҙ асып ҡына ҡалғанмын шул*
*Үрә тороп шатлыҡ кешнәгәндә...*

***

*Иренеп тә уҫҡа ҡарҙар ҡуна:*
*— Төшәйемме, әллә юҡ, — тиеп.*
*Тауҙа ятам икән,*
*Йөрәгемә*
*Ғәйбәт кенә тигән уҡ тейеп.*
*Тауҙа ятам икән.*
*Улым да юҡ,*
*Хәлгенәмде белер ҡатын юҡ.*
*Йылы ялдарына йәбешеп кенә*
*Ҡалҡыныр ҙа инем — атым юҡ.*
*Күҙкәйҙәрен йома һалҡын ҡарҙар,*
*Осоп ҡуныр минең йәшемә.*
*Хәл белергә килгән күк боланҡай*
*Ҡыуыҡ араһына йәшенә.*
*Ҡыуыҡ араһынан миңә баға,*
*Яҡын килергәме тартына.*
*Алып китһен мине күк боланҡай*
*Ауылыма, тауҙар артына.*
*Ойоп ҡына ҡарҙар яуа ергә,*
*Ҡояш һала тауға эйәген.*

*Тауҙарымда йылы ҡарҙар яуа,*
*Балҡып ята тыуған төйәгем.*
*Нурлы донъя,*
*Онотола ғәйбәт,*
*Онотола фәлән-төгәнең.*
*Ҡараңғы бер күләгәләй ҡаса*
*Яндарымдан ғәйбәт тигәнең.*
*Ҡояшыма килеп ултырырға*
*Аҡ тауҙарым — яҡты түрҙәр бар.*
*Ғәйбәттәрҙән мине араларға*
*Күктәремә ашҡан үрҙәр бар.*

***

*Күҙ генәйем терәр яҡындар юҡ,*
*Хыялдарым тора тағалырға.*
*Аһым тамған,*
*Күҙ-йәштәрем тамған*
*Ерем ҡалған даһа таянырға.*
*Был тауҙарҙан һыбайлылар үҙған,*
*Һуҡмаҡтарҙың төшөп тап-тарына.*
*Аһылдап та башҡорт ҡан түккәргән,*
*Ерҙе бирмәйем, тип, яттарына.*
*Был тауҙарҙан һыбайлылар үткән,*
*Ер һелкетеп үҙған үҙамандар.*
*Батырҙарҙың эҙҙәренә төшһәм,*
*Ялҡын бөркә миңә ул замандар.*
*Башың төртөр бары ерең ҡалған,*
*Боҙға теймәй әле морондарың.*
*Ҡосағыңда ҡалһын урмандарың,*
*Ҡосағыңда ҡалһын болондарың.*

***

*Күкрәкте терәйем,*
*Терәйем күк елгә.*
*Боҙҙары килә лә*
*Бәрелә күңелгә.*
*Ашамын, ахыры,*
*Сабырлыҡ арғаһын.*
*Шик боҙо*
*Йырғыслай*
*Ғүмерем дарғаһын.*
*Ҡағылып һуғылдым,*
*Күнмәнем йәбергә.*
*Шик боҙо килә лә*
*Бәрелә бәғергә.*

***

*Теләктәрем ҡабул булһын инде,*
*Ғәмәлдәргә ашһын юрауым.*
*Ваҡытында етте яҡшы хәбәр,*
*Уҙһа ла ул юлдың урауын.*
*Юраганым ғәмәлдәргә ашты,*

*Ҡабул булды инде теләгем.*
*Ҡыуаныстан шаштым,*
*Мине хуплап,*
*Башын ҡағып ҡуйҙы тирәгем,*
*Юрауҙарым ыңғай килде әле,*
*Бешкән дә ул, һис тә көймәгән.*
*Ҡояш әйтте төҫлө:*
*«Әйҙә, ҡыуан,*
*Гелән һиңә ҡайғы тимәгән...»*
*Күҙ-йәш аша баҡһам,*
*Тертләп китте,*
*Төҫөн боҙҙо хәүеф яланы.*
*Тура юлдар табып,*
*Һуңламаны*
*Хәбәрҙәрҙең миңә яманы.*
*Хәтәр хәбәр һис тә һуңламай шул,*
*Бәхет тигәндәре кисегә.*
*Бар ҡайғылар беҙҙе ситләп үтһен,*
*Яҡшы һүҙҙәр етһен Кешегә...*

***

*Яҙым таша,*
*Үргә ҡалҡынамын,*
*Сытыр килеп, елдәр йыртыла.*
*Тау биттәре сыбарланып ята*
*Ала-ҡола һыйыр һыртылай.*
*Үрҙә торам,*
*Ҡалай рәхәт миңә,*
*Һауалары ниндәй күгелйем.*
*Һулҡ-һулҡ килеп кенә монар уйнай, —*
*Әйтерһең дә, минең күңелем.*
*Үҙ еремә баҫҡас,*
*Тамырланам,*
*Ҡыйыуһыҙ ел һыйпай ялымдан.*
*Күңелем тыныс,*
*Һағыш ташлап киткән,*
*Бар шиктәрем тайған янымдан.*
*Күкһел тауҙар миңә мәрхәмәтле,*
*Ҡала еле йәнде иретмәй.*
*Йыһан тигән йортта баҫып торам,*
*Телефоны башты серетмәй.*
*Елдең теле хатта аңлашыла,*
*Бөтәһе лә ябай — әйтемсә.*
*Әүтүбәндә ятҡан ауылдарҙа*
*Яҡташтарым йәшәй һәүтемсә.*
*Ил өҫтөндә ҡояш балҡып торһон,*
*Елдәр генә нурҙар талҡыһын.*
*Йорттарын, тим, ҡайғы урап үтһен,*
*Тик бәхеттәр генә балҡыһын.*

II

*Тауҙа торам.*
*Шундай тып-тын донъя,*
*Көнө әле кискә ауышҡан.*
*Донъя камил һымаҡ,*
*Ваҡыт менән*
*Тынлыҡ ҡына бында ҡауышҡан.*
*Бөтәһе лә камил,*
*Елдәре лә*
*Яндарымдан ҡасмай ялбырап.*
*Юҡлығы ла, алдарыңа ҡалҡып,*
*Юлдарыңды ҡыймай һалдырап...*
*Үҙ еремдә тамырланам төҫлө,*
*Ҡыйыуһыҙ ел һыйпай ялымдан.*
*Күңелем тыныс,*
*Һағыш ташлап киткән,*
*Бар шиктәрем тайған янымдан.*
*Үҙ еремдә шатлығымдан осам,*
*Күк һығыла минең ҡанаттан.*
*Тауға ҡалҡҡанымда*
*Туҙғайным да,*
*Был донъяға тыуҙым ҡабаттан.*

***

*Ҙур кәүҙәһен һөйрәп төн ҡуҙғала,*
*Ҡыҙғылт тауҙарыма таңдар — арҡа.*
*Йөрәк итем — минең тыуған тупраҡ,*
*Эйелеп кенә алһам — ҡандар һарҡа.*
*Уһылдап та бында йылдар ауған,*
*Аһылдап та бында ауған ирҙәр.*
*Тыуыр быуаттарға ҡалҡып сыҡҡан*
*Салауаттай батыр, ауан ирҙәр.*
*Имәндәре бөгөн орлоҡ һибә,*
*Үләндәре ергә сәсә емде.*
*Ҡайғы килеп,*
*Мәңге ҡайтмаҫ һыртҡа*
*Алып киткән инде әсәйемде.*
*Ҙур кәүҙәһен һөйрәп төн ҡуҙғала,*
*Ҡыҙғылт тауҙарыма таңдар — арҡа.*
*Йөрәк итем — минең тыуған тупраҡ,*
*Эйелеп тә алһам — ҡандар һарҡа...*

## Яҡынаям ҡояшҡа

*Еремдә мин — ялан аяҡ,*
*Еремдә — ялан башмын.*
*Ваҡыт менән икәү ҡалһаҡ,*
*Үҙем — баш,*
*Үҙем — ҡашмын.*
*Үҙ һүҙемде бирмәм һис тә*
*Еткәндә лә етмешкә.*

*Шундай ҡаты ҡағылмағыҙ,*
*Һуғылмағыҙ еңмешкә.*
*Елдәр ҡағылыр, тимәгеҙ,*
*Күп һуғылды елдәре.*
*Биттәремде ялап үтте*
*Яман ялҡын телдәре...*
*Ваҡыт үтында көйрәтте,*
*Күрмәгәнде күрһәтте.*
*Көнгә ай тиеп баҡҡанмын,*
*Тешләп булмай терһәкте.*
*Юлда бер аҙ талдыммы ни,*
*Тауҙарыма һалам баш.*
*Еремдә мин — ялан аяҡ,*
*Әле һаман — ялан баш.*
*Үҙ иткәнгәме ҡояшты,*
*Эҫе һуҡты был башты.*
*Яҙмышымдан уңдым мин,*
*Араларҙа туңдым мин.*
*Юлым булды ураулы,*
*Ә һуҡмағым — ҡыраулы.*
*Тауҙарыма ҡалҡынамын,*
*Донъя һыя ҡоласҡа.*
*Халҡым ҡала гел бейектә —*
*Яҡынаям ҡояшҡа...*

***

*Һары ла ғына сәскә атҡан икән,*
*Юл буйҙары — һары тубылғы.*
*Әллә ниңә күңел тартып тора,*
*Йәшлегемә килә һуғылғы...*
*Һары тубылғының сәскәләре*
*Яҙ еленә килә һарылып.*
*Яландарҙа йәшлек эҙем ҡалған,*
*Һағышымдан китәм ярылып...*
*Йәшлегемдең яҡты биләмәһе*
*Сумғым килә, килә убылғы.*
*Һуңлап ҡына әллә сәскә атҡан,*
*Минең һымаҡ, һары тубылғы.*

***

*Талған саҡта таянамын*
*Уралыма — терәккә.*
*Заманаһың ауырлығы*
*Төшкән икән йөрәккә.*
*Ҡайһы саҡта ел ҡағылды*
*Миңә — йөксө егеткә.*
*Замандарҙың ауырлығы*
*Төшкән икән елеккә...*
*Оло ҡалаға һыймайса*
*Йөрөйөм яныып-көйөп.*
*Ҡуш услап ул бәхет бирҙе,*

*Ҡайғыһын бирҙе өйөп...*
*Башымды ҡуйҙы төйөп...*
*Күрмәгәндәрҙе күрһәтте*
*Аяуһыҙ замандары.*
*Ғүмер буйы көс төшкән шул, —*
*Һулҡылдай табандарым.*

***

*Хыялдарым елдә еленләне*
*Тормош тигән асыҡ болонда,*
*Ялан аяҡ күп бейенем, буғай,*
*Буш өмөттөң ялтыр боҙонда.*
*Тормош ҡурайында гел бейенем,*
*Һүҙ әйтергә телем бәйләнде.*
*Мин бейенем хәтәр,*
*Ҡояшы ла,*
*Ер шары ла зыр-зыр әйләнде.*
*Мин бейенем дәһә,*
*Әйләнгәндә*
*Айҙың сите төштө кителеп.*
*Тынды ҡура*
*Күҙ асҡыһыҙ тиҙлек,*
*Сыртланымы сәсем өтөлөп...*
*Дауылдарҙа гелән йолҡонам да*
*Ҡыйғыр ғына талдай һығылам.*
*Ҡурай моңдарына өҙә баҫып,*
*Еркәйемә килеп йығылам.*
*Бер аҙ ғына арып талдым кеүек*
*Еткән саҡта ғүмер кисемә.*
*Әллә нисек инде:*
*Шатлығым да,*
*Һағышым да һыймай эсемә...*

## *Ҡышҡы таң*

*Һырт ҡабарта,*
*Ҡоторона,*
*Ни көтәһең был ҡыштан.*
*Еле ниҙер лаңҡылдаймы, —*
*Ялҡтым инде тыңҡыштан.*
*Бурандарын бейетә лә*
*Туҙынғандан-туҙына.*
*Йылынам тип*
*Ҡулды һонам*
*Таңдың һалҡын ҡуҙына.*
*Әсе елдәр, —*
*Туңдыммы ни,*
*Ә эсем минең ялҡын.*
*Һиңә баҡтым,*
*Ҡараштарың*
*Ҡышҡы офоҡтай һалҡын.*

***

*Ер тырматтыҡ,*
*Ат өҫтөндә*
*Ҡайта күҙҙең ҡоросо.*
*Ара алыҫ,*
*Һис күренмәй*
*Бер осонан бер осо.*
*Ҡаршы ятҡан тау һыртына*
*Көскә барып етәһең.*
*Өмөт аты туғарыла,*
*Ни хәл генә итәһең.*
*Ҡаршы елгән аҡ томанды*
*Ел биткә китә һылап.*
*Атың һинең яйлап атлай,*
*Түҙемлегеңде һынап.*
*Бер туҡтамай ҡара ерҙән*
*Юлдар яраһыңмы ни...*
*Түҙер әмәлең ҡалмаған,*
*Ай, йыл бараһыңмы ни?!*
*Ара үтәһең дауылда*
*Йәштәреңде һыҡмайса.*
*Бала сағым үтеп киткән*
*Бураҙнанан сыҡмайса...*

***

*Арыҫландай*
*Аҫау ирҙе*
*Донъя ҡартайта икән.*
*Әллә ниңә ерле юҡҡа*
*Һыртын ҡабарта икән.*
*Донъя тигәне тиҫкәре,*
*Һис тә килмәй ул ыҡҡа...*
*Уңға, һулға һуғылғанда*
*Алманы һис уллыҡҡа.*
*Мыжыма, тим үҙ-үҙемә,*
*Әй, балҡып тора иртәм.*
*Көй сыҡмаҫмы, —*
*Ҡояшымдың*
*Нур сымдарына сиртәм...*
*Күңелдәрем күтәрелә*
*Йөҙөн асҡанда иртәм.*
*— Хәйерле бул! — тип*
*Көнөмдөң*
*Ҡолағына һүҙ киртәм...*
*Офоҡтай балҡый өмөтөм,*
*Ҡалҡҡанда яңы иртәм...*



Таңһылыу
ҠАРАМЫШЕВА

# «ЯҘҘАР КИЛДЕ ТАҒЫ – НАҘҘАР КИЛДЕ!»

## *Байлыҡ*

*Һәр кемгә лә етерлек ул*
*Бәрәкәте донъяның.*
*Бөтәһе лә яҙған малдың,*
*Ейер ризыҡ, ҡалъяның.*

*Ҡояш аҫтындағы ерҙә*
*Бөтәһе юҡ байманлыҡ.*
*Һәр кемгә лә йәшәр өсөн*
*Бар мөмкинлек, дарманлыҡ.*

*Һәр кемгә лә эсергә һыу,*
*Һулар һауа етерлек.*
*Ашлыҡ үҫкән, емеш бешкән*
*Тупраҡта көн итерлек.*

*Йәйрәп ята бар бәрәкәт*
*Офоҡтарҙан офоҡҡа.*
*Сарыфланмай, тәләфләнмәй*
*Юҡҡа-барға, юҫыҡҡа.*

*Бер эше юҡ уның беҙҙә –*
*Үҙ тормошо донъяның.*

---

*Таңһылыу Ҡарамышева (1948) Бөрйән районының Байназар ауылында тыуып үҫкән. Өфөләге 1-се һанлы башҡорт интернат-мәктәбен, БДУ-ны тамамлай. Оҙаҡ йылдар республика матбуғатында эшләне. Республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ҡояш балҡый, елдәр иҫә,*
*Һыуҙар аға тулғанып.*

*Шыта ҡыяҡ, үҫә үлән —*
*Кеше өсөн бөтәһе!*
*Кеше өсөн бар бәрәкәт! —*
*Ҡәҙер генә итәһе,*
*Ҡәҙер генә итәһе...*

## Дәүмәллек

*Юҡҡа сыға күпме дәү исемдәр:*
*Ҡәбиләләр, милләт, халыҡтар,*
*Хөкөмдарҙар, хаким, башлыҡтар,*
*Ҡағанаттар, дәүләт, ханлыҡтар,*
*Тәғлимәттәр, тау-тау байлыҡтар...*

*Тороп ҡала бары тәү есемдәр:*
*Күктең көмбәҙендә Ут яна!*
*Ҡояш аҫтындағы Ер ҡала!*
*Ер һәм Күктең ике араһында*
*Һауа ҡала, иҫер Ел ҡала!*

*Ут, Һыу, Һауа, Тупраҡ тәүгелеген,*
*Тәүгелектең генә мәңгелеген,*
*Мәңгелектең генә дәүлелеген,*
*Дәүлелектең генә тәңрелеген,*
*Ғүмеремдең генә мәллелеген*
*Төшөндөртә кеше йәнлелегем...*
*Ғәмлелегем...*

## Бөрө

*Үләндәрҙән алда, ерҙән алда*
*Ағас баштары бит йәшәрә.*
*Иң әүәле ботаҡ бөрөләнә,*
*Шәрә тәнен ул тәү йәшерә.*

*Ул беренсе — бөрө тумалана,*
*Ул беренсе — бөрө бөрөшә!*
*Шунан ғына сыға умырзая,*
*Шытымларға үлән керешә.*

*Ул беренсе булып — кескәй бөрө —*
*Өнһөҙ-тынһыҙ шартлай, ярыла.*
*Ваҡыт үҙе шулай, әйтерһең дә,*
*Бөрө ярылғанда ярала!*

*Ҡабарына, тула, үҫә бөрө,*
*Яңы миҙгел башлап килүнә.*
*Бөрө ҙурайҙынһә, япраҡланһа,*
*Донъя үҙе, гүйә, киңәйә!*

*Яҙҙар килде тағы — наҙҙар килде!*
*Йәшәрҙе бит күңел — һөйөнсө!*
*«Бер» һүҙенән килә «бөрө» һүҙе.*
*Алла кеүек, ул да — беренсе.*

## Нөктә

*Тамамланмыш һәм башланғыс —*
*Икеһе лә бер нөктәлә.*
*Нөктә тигән бер урында*
*Ни башланһа, ни бөтһә лә.*

*Оҙон-оҙон һөйләм бөтмөш.*
*Яңы һөйләм ала үҫеш.*
*Бер нәмә лә мәңге түгел!*
*Бар тик нөктә. Бар тик күсеш.*

*Тамам ерҙә дауам тыуа —*
*Бүтән сифат, бүтән төрлөк.*
*Үлем, ғүмер — улар бары*
*Бер нөктәлә уҡмаш берлек.*

*Нөктә ялғай бар нәмәне.*
*Сикһеҙлекте нөктә яһай.*
*Ниндәй мәшһүр нөктә сере!*
*Мәшһүр булған өсөн — ябай.*

## Ҡоҙоҡ

*Ҡаҙалар ҡоҙоҡто*
*Дарман үә көс барҙа.*
*Йәншишмә табалар*
*Әжәлдәрҙән алда.*

*Дандың да ҡоҙоғон*
*Алдараҡ ҡаҙалар.*
*Аҙаҡтан һуң була,*
*Һуң була ыҙалар.*

*Кәрәк бит ҡоҙоҡҡа*
*Ғүмерҙе бағларға.*
*Аҙаҡтан һуң була*
*Йәшәүҙе аңларға.*

## Тәгәрмәс

*Бер тәгәрмәс эстәрендә —*
*Әллә күпме тәгәрмәстәр.*
*Барыһы ла хәрәкәттә,*
*Һуғып торғанда сәғәттәр!*

*Эстәге ваҡ тәгәрмәстәр*
*Тыштағыһын этеп тора.*
*Тарихтың ҙур тәгәрмәсе*
*Ошолайтып китеп бара.*

*Ҙур тәгәрмәс эстәрендә*
*Бағы — беҙ бит булабыҙҙыр.*
*Һәр ҡайһыбыҙ хәрәкәтте*
*Тәшкил итеп торабыҙҙыр.*

*Ваҡыттарҙың сәғәттәрен*
*Туҡтатмаусы беҙ булабыҙ.*
*Донъяларҙы бер секунд та*
*Йоҡлатмаусы беҙ булабыҙ.*

*Тәҡдир эсендә тәҡдирбеҙ,*
*Ғүмер эсендә ғүмербеҙ.*
*Тик түгелбеҙ ҙур тәгәрмәс —*
*Күктең Тәңреһе түгелбеҙ.*

*Беҙ бары тик эске бер көс,*
*Үҙебеҙҙең юл башсыһы.*
*Ә шулай ҙа беҙ ҙә, беҙ ҙә*
*Ҙур тарихтың ҡатнашсыһы!*

## Йәшенмәк

*Сығып китеп булмай замананан,*
*Өйҙән сығып киткән шикелле.*
*Булмай унан аша ырғып сығып,*
*Күнәктәге һыуҙай һирпелеп.*

*Күҙҙе бәйләп, ҡолаҡтарҙы тығып,*
*Йоҙаҡ элеп ҡапҡа-индеккә,*
*Ҡасып булмай унан бер нисек тә,*
*Ҡасып булмай шырлыҡ, сүллеккә.*

*Донъяларға тыуғас, тура килә*
*Ваҡыт менән бергә булырға.*

*Дәүеремә кәрәкме мин, тиеп*
*Тура килә уйҙар ҡорорға.*

*Йәшенмәкте уйнап булмай оҙаҡ.*
*Тура килә күҙҙе асырға.*
*Һин кем менән? Яҡшы, яман менән?*
*Ҡайһы юлға аяҡ баҫырға?*

*Теләйһеңме, әллә теләмәйһең —*
*Тормош менән кәрәк яҡынлыҡ.*
*Һайларға бит барыбер кәрәк була:*
*Йәки ҡоллоҡ!*
*Йәки хакимлыҡ!*

*Йәки ирек!*
*Йәки ирекһеҙлек!*
*Бер саҡ бөтә уйын-йәшенмәк.*
*Өсөнсө юл — мөмкин түгел нәмә:*
*Урталыҡ юҡ! Ниңә әсенмәк?*

*Үкенергә тура килмәһен тик*
*Һуңғы һүҙҙе ваҡыт алғанда.*
*Ҡарарҙарһыҙ ғына йәшәп булмай,*
*Йәшәп булмай һәр саҡ ялғанда.*

## *Остазлыҡ*

*Үҙ-үҙемдең генә остазы мин.*
*Үҙ тәжрибәм — тик шул дәресем.*
*Үҙ хатамдан киләм тәүбәләргә*
*Аңлағанда тормош дөрөҫөн.*

*Бүтәндәргә һабаҡ бирмәйем мин! —*
*Ул ҡәҙәр мин түгел аҡыллы.*
*Аҡыллылар булһа алдарымда,*
*Түбән эйелдерәм башымды.*

*Нотоҡ, нәсихәттән алыҫ улар.*
*Күп һүҙ менән улар һөйләшмәй.*
*Тынлыҡ тыңлайым мин улар менән!*
*Һүҙҙәр — ҡыуыҡ. Һүҙҙәр өйрәтмәй.*

*Ҡолағымды баҫам ике ҡуллап,*
*Шартлап ярылғанда ҡыуыҡтар.*
*Ишеткәндә азат күңелемде*
*Йәшәй алам остаз булыптар...*

## *Тарих эйәре*

*Бөгөн эйәрҙә булғандар*
*Иртәгә ҡайҙа булыр?*
*Билдәһеҙлеккә осормо?*
*Мәңгелектәме торор?*

*Кешеһен ныҡ һайлап ҡына*
*Эйәрен бирә тарих.*
*Һирәктәрҙе хәтерендә*
*Онотмай һаҡлай тарих.*

*Ҡатилды ла онотмай ул,*
*Батырҙы ла онотмай.*
*Ҡәһәрләй яуыз даһиҙы,*
*Изгеләрҙе олоҡлай.*

*Кем эйәрҙә — шул сәптә тик!*
*Бар уҡ уға төбәлгән!*
*Кемдәр мәхрүм мәшһүрлектән —*
*Шулар оса эйәрҙән.*

## *Теләк*

*Ҡала донъя сәсәндән дә,*
*Тороп ҡала мәжнүндән дә,*
*Ябай ғүмер һөргәндән дә,*
*Ҡала донъя мәшһүрҙән дә;*

*Бәхетленән, бәхетһеҙҙән,*
*Аҡыллынан, иҫәрҙән дә,*
*Ҡарттарҙан да, йәштәрҙән дә,*
*Баймандан да, фәҡирҙән дә —*

*Кемдән дә бит ҡала донъя!*
*Тороп ҡала киткәндәрҙән:*
*Һулар һауаһын һулаған,*
*Эсер һыуын эскәндәрҙән.*

*Ҡалмаҫ кеүек тойолһа ла,*
*Донъя тороп ҡала икән.*
*Бер ҡайғырып, бер шатланып,*
*Бер үкенеп ала икән.*

*Бер моңайып алам мин дә:*
*Мин киткәндә, мин дә — юлсы,*
*Илап ҡалһа ҡалһын донъя,*
*Тик көлөптәр ҡалмаһынсы!*



**Әхмәҙин**
**ӘФТӘХ**

# «ҺЕҘ УЛАРҘЫ, ТАУҘАР, КӨТӨГӨҘ...»

## *Балан көҙө*

*Балан көҙө — яңғыҙ бүре күҙе,*
*Көнө-төнө мине һағалай.*
*Ҡулды һелтәп башты эйеү менән,*
*Боғаҙҙарҙан килеп яғалай.*

*Яңы белдем ҡара тынлыҡтарҙың*
*Ятыу таштай аңды баҫыуын.*
*Хәйерлегә генә булды микән*
*Дуҫ-иштәрҙе ташлап ҡасыуым?..*

*Балан көҙө — яңғыҙ бүре күҙе,*
*Мин уға һуң инде ни хәжәт?*
*Уны, мине, ахры, әҙәрлекләй*
*Өйөрҙәрҙән ҡалған бер ғәҙәт.*

## *Ҡыш*

*Оҙон ҡыштар килде... Был ҡоштар, тим,*
*Оҙонлоғон ҡайҙан беләләр:*
*Өймәкләшеп осоп китәләр ҙә*
*Йылы яҙҙа кире киләләр.*

*Ап-аҡ ҡыштар... Уның аҡлыҡтарын*
*Һоро көндәр яйлап күмәләр.*
*Яҙҙы көтөп, айлы оҙон төндә*
*Алйып олой, ана, бүреләр.*

---

*Әхмәҙин Әфтәх (1947) Белорет районының Абҙаҡ ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар республика матбуғатында эшләне. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## *Йәйе лә үтеп бара*

*«Йәй ҙә йәй!» тип көткән инем,*
*Йәйе лә үтеп бара.*
*Йәйғор, яулыҡ болғай-болғай,*
*Офоҡҡа китеп бара.*

*Үҙе йырлай моңло итеп:*
*— Былдай миҙгел бер була,*
*Ҡосағымда яныл-көйгән*
*Мәңгелеккә йәр була.*

*«Йәй ҙә йәй!» тип мин дә, бына,*
*Киттем әллә йәйелеп.*
*Йылы елдәр сәләм илтә*
*Ҡолағыма эйелеп.*

*Бер кемгә лә һөйләй күрмә,*
*Икебеҙҙең сер булыр.*
*Көттөң... Килдем... Инде китәм,*
*Былдай бәхет бер булыр.*

*«Йәй ҙә йәй!» тип көтөүҙәрем*
*Йөрәкте үртәр инде.*
*Был ғүмерҙәй, үкендереп*
*Йәйе лә үтер инде.*

## *Өр-яңы донъя*

*Сыңлап торған йәй айҙары*
*Йәйҙе лә офоҡтарын,*
*Күккә сөйҙө: «Һайра!» — тиеп*
*Мең төрлө ҡошсоҡтарын.*

*Барлыҡ ғәләм моңға сумды —*
*Ерҙә ожмах ошолор.*
*Туң күңел дә, наҙға ирел,*
*Әкиәткә ышаныр.*

*Аһ, йәй айҙары, айҙары*
*Ниңә мәңгелек түгел?*
*Аҡ болоттар араһына*
*Әйҙәй ҙә тора күңел.*

*Ҡатын-ҡыҙҙар — фәрештәләр,*
*Һәр береһе гөл-сәскә.*
*Өр-яңы бер донъя астым*
*Етеп мин ошо йәшкә.*

*Ҡапыл офоҡ тертләгәндәй,*
*Йәшен уттары телә.*

*Күктәр күкрәп өндәшкәндәй:*
*— Изге теләктәр телә!*

*Сыңлап торған йәй айҙары*
*Үтеп тә китмәҫ, тимә.*
*Бер мәл килеп, уфтандырып,*
*Әкиәт бөтмәҫ, тимә.*

***

*Шаулап яҙҙар килә.*
*Ҡарт-ҡоролар,*
*Арҡаһына аҫып муҡсаһын,*
*Ҡара көҙгә тиклем, билен бөгөп,*
*Тәрбиәләй ҡырҙа баҡсаһын.*

*Атай кеше йәшлек дәрте менән*
*Елле көрәк ала ҡулына.*
*Эстән уйлай: «Етте ел ҡыуырға,*
*Кәләш димләр кәрәк улыма».*

*Әсәй кеше, моңло йырын һуҙып,*
*Түтәлдәрҙә таңдан ҡаҙына.*
*Алла бирһә, көҙгө уңыш менән*
*Яусы килер, бәлки, ҡыҙына.*

*Ә ул ҡыҙҙар, алйып, төн оҙоно*
*Һикерешә шайтан көйөнә.*
*Ниндәй ғаилә ҡороу?*
*Ашап-эсеп*
*Ял итергә ҡайта өйөнә.*

*Илап көҙҙәр килә... Ҡарт-ҡоролар,*
*Арҡаһына аҫып муҡсаһын,*
*Фатирына ҡарай юлға сыға,*
*Яҙға тиклем бикләп баҡсаһын...*

## *Ғәфү итегеҙ...*

*Мин тауҙарға инде менә алмам,*
*Албырйытып таңда әйҙәмә.*
*Тертләп ятам, етеҙ елдәр ҡапыл*
*Тәҙрә ситтһә, һорап: «Өйҙәме?»*

*Өйҙәмен мин, эйе, өйҙәмен мин,*
*Элеккеләй таңда уянам.*
*Хәҙер инде ғорур тауҙар түгел,*
*Мин тауҙарға ғыжлап таянам.*

*Ә тауҙарым бер ҙә үҙгәрмәгән,*
*Үҫмәй-сүкмәй тора бер килеш.*
*Бөтә ғәйеп, күрәм, үҙемдәлер.*
*Артҡа сигенәмме?*

*Был ни эш?*
*Әҙәми зат ваҡыт һынауында*
*Күккә ашып, берсә сүгәлер.*
*Беҙҙең һыҙланыуҙы күрә тороп,*
*Тауҙар нисек, нисек түҙәлер?*

*Мин тауҙарға инде менә алмам,*
*Зинһар, берүк ғәфү итегеҙ.*
*Йәш-елкенсәк ярһып кәпәс сөйә,*
*Һеҙ уларҙы, тауҙар, көтөгөҙ.*
*Мине, берүк, ғәфү итегеҙ.*

## Кешенең юҡ эше кешелә

*Әллә ниндәй заман килә ерғә:*
*Кешенең юҡ эше кешелә.*
*Киләсәккә булған хыял-өмөт*
*Ҡом тауындай бөгөн ишелә.*

*Иле, халҡы өсөн янған ирҙәр*
*Йөрәктәре шартлап ауалар.*
*Ни аллаға, ни муллаға түгел —*
*Быуынһыҙҙар ерғә тыуалар.*

*Өҫтәгеләр күрмәй аҫтағыны,*
*Аҫтағының өҫкә буй етмәй.*
*Ниндәй илдә бөгөн йәшәйбеҙ һуң?*
*Бына шуға аҡыл, уй етмәй.*

*Аңлашырға «ярты» алыр инең,*
*Кешенең юҡ эше кешелә.*
*Күгүләнгә ятып хет оло һин...*
*Ҡалманы шул ипле эте лә.*

## Тартыу көсө

*Көҙгө тынлыҡ, япраҡ яуа.*
*Атлап киләм. Ашыҡмайым.*
*Үткән тормош асылдарын*
*Бөгөн килеп асыҡлайым.*

*Әй, был тормош, һиҙҙермәйсә*
*Яндарымдан үтеп бара.*
*Көҙҙөң тәүге ҡырауҙары*
*Сәстәремдән үбеп бара.*

*Ҡайҙа бөгөн ашығырға?*
*Ҡан ҡайнатҡан кәрем дә юҡ.*
*Йөрәгемә елкән ҡуйып*
*Саҡырып торған йәрем дә юҡ.*

*Япраҡ яуа шыптыр-шыптыр,*
*Аһ, был ерҙең тартыу көсө.*

*Күпме генә тыпырсынма,*
*Һинең алда — көсһөҙ кеше.*

*Көҙгө тынлыҡ. Тыңлап киләм.*
*Ҡайҙа миңә ашығырға?*
*Был донъяның асылдарын*
*Йыйып барам ошо йырға.*

## Сирләп ятам

*Сәсрәп китеп, бына, сирләп ятам,*
*Буталышты көндәр иҫәбе.*
*Ҡояш менән айым сайпылғандай —*
*Әллә бөгөн, әллә кисәге?*

*Маңлайыма бинттай төшөп ятты*
*Аҡ болоттоң ялбыр киҫәге.*
*Донъялары, гүйә, түңкәрелде —*
*Әллә бөгөн, әллә кисәге?*

*Түшәктәргә сырмап һалған сирҙең*
*Төйөрҙәрен нисек сисәһе?..*
*Яуап көтөп минән, ғәләм баҡҡан —*
*Әллә бөгөн, әллә кисәге?*

*Үткәндәрҙә булды тулағаным*
*Һыймайынса ҡайсаҡ тәртәгә.*
*Үҙ тәүбәмде һеҙгә әйтмәксемен*
*Йәки бөгөн, йәки иртәгә.*

## Япрак катыш ямғыр

*Япраҡ ҡатыш бысҡаҡ ямғыр*
*Ирәйеп яуа тышта.*
*Тәбиғәттең иҫкәртеүе,*
*Ғүмерҙәр, тиеп, ҡыҫҡа.*

*Ҡыҫҡа бөгөн көндәре лә,*
*Таң атмайса кис етә.*
*Үҙебеҙ ҙә кисә егет,*
*Бөгөн кембеҙ? Иҫ китә!*

*Ғүмер юлы ир-егеткә*
*Бер ҡыҫҡа ара икән.*
*Был тормоштоң шау-шыуҙары*
*Йөрәкте яра икән.*

*Тышҡа баҡам: бысҡаҡ ямғыр*
*Яуа ла яуа мышнап.*
*Ә тирәктәр үткән көнгә*
*Япрағын һибә услап.*

## Республика йәш прозаиктар семинарынан

# Йәштәр ҡанат нығыта

Йәш прозаиктарҙың 2010 йылдың 24—26 февралендә Сибай ҡалаһында үткән республика семинары ғәҙәти ҙә, үҙенсәлекле лә. Ғәҙәти — элек тә быңдай семинарҙарҙың булғаны хәтерҙә, әҙәбиәтебеҙҙең киләсәген хәстәрләүҙән тыуған матур практик сараларҙың береһе ул. Үҙенсәлекле — семинарға һәр береһенең үҙенә генә хас ҡәләме булған, тормошҡа етди ҡараштары формалашҡан йәш әҙиптәр саҡырылған. Һигеҙ авторҙың бишәүһенең тәүге китаптары сыҡҡан. Был да уларҙың әҙәбиәт юлындағы тәүге табыштары барлығын һәм рухи донъяға буш ҡул менән килмәүҙәрен күрһәтеүсе фактор.

Семинарҙа тикшереүгә ҡуйылған йәш прозаиктарға оло ҡәләмдәштәренең төп дәғүәләренең береһе — йәштәрҙең телгә иғтибарһыҙлығына ҡарата булғандыр. Айырым әҫәрҙәрендәге тел ярлылығы, йә иһә урыҫса фекерләү, бай ҙа, образлы ла башҡорт теленә битарафлыҡтары уларҙың башланғыс ижадтарындағы үҙәк кәмселектәр ҙә әле. Фекер һәм һүҙ — әҫәрҙе әҫәр итеүсе нигеҙ таштары. Фекер юҡ икән — художестволы асыш юҡ, ә ни бары һүҙ бутҡаһы ғына. Урыҫса фекерләү ҙә шәп күренеш түгеллеге мәғлүм: әҫәрҙең милли колориты, халыҡсанлыҡ көсө, һуты, наҙы юҡ тигән һүҙ. Ят мөхит йоғонтоһо, үҙәк телевидение һәм интернет, күбеһенсә урыҫса аралашыу әҫәрҙең саф милли тойғололоғон, халыҡсанлығын бөтөрөүгә булышлыҡ итә лә инде.

Йәш ҡәләмдәштәргә йәнә ашығыу, әҫәрҙәрендә өҫтән-мөҫтән «йүгереп» үтеү хас. Алынған тормош материалын, хәл-ваҡиғаны тәрәнтен һүрәтләү, тамырҙарын асыу, теге йәки был күренештең, ҡылыҡ-тәртиптең төбөнә төшөү, асылын байҡау етмәй күп осраҡта. Был тәңгәлдә семинарҙағы һөйләшеүҙә Ф. Достоевский, А. Чехов, В. Шукшин, Т. Ғиниәтуллин, Р. Солтангәрәев кеүек һүҙ оҫталары тәжрибәһе йыш телгә алынды.

Йәш авторҙарҙың тарихи темаға тотоноуҙары ыңғай күренеш. Был тәңгәлдә Нияз Алсынбаевтың актив ҡына эшләй башлауы хуплауға лайыҡ. Уның Ә.З. Вәлидигә арналған «Сәйер мосафир», «Бөркөтсө» повестары ҡыйыу фараздары, төплө уйланыуҙары менән уҡыусы зиһенен арбай. Әйтергә кәрәк, тарихи фаразлау



*Семинарҙа иҫтәлеккә төшөлгән фото, 2010 йылдың 25 феврале.*

(ғөмүмән, ғилми-тарихи нигеҙле легенда-фараз) Булат Рафиҡовтан һуң бер ни ҡәҙәр етемһерәп тә ҡалғайны. Н. Алсынбаевтың был эстафетаны дауам итеүе һөйөндөрә.

Н. Алсынбаевтың үҙ әҫәрҙәрен урыҫ телендә лә яҙып ҡарауы шулай уҡ ыңғай күренеш. Уның «Тайны бурзянского леса» тигән хикәйәләре шәлкемендә Бөрйән төпкөлөндә ябай халыҡтың һөйләгәндәренә нигеҙләнгән «Ай һылыуы» («Лунная женщина»), «Серле усаҡ» («Таинственный костер»), «Алпамыша», «Үлем ҡапҡалары» («Врата ужаса») тигән легенда-тарихтар бәйән ителә.

Беҙҙең әҙәбиәттә үҙ туған телен яҡшы белгән, бер үк ваҡытта урыҫ телендә лә маһир ижад иткән әҙиптәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ (Ғәзим Шафиҡов, Дим Дәминевтар, үкенескә күрә, арабыҙҙан иртә китеп барҙы).

Семинарҙың уңышы — өмөтлө йәш ҡәләмдәштәребеҙҙең әҙәбиәткә килеүҙәрен билдәләп, уларҙың әҫәрҙәрен уҡыусыларға еткереүҙә эффектлы ярҙам ойоштороуҙа булғандыр. Һигеҙ авторҙың дүртәүһенең ҡульяҙмалары: Рәсүл Сәғитовтың (Өфө ҡалаһы), Гөлдәр Әхмәҙишинаның (Баймаҡ районы), Нияз Алсынбаевтың (Өфө) — айырым китаптарын нәшер итеүгә, ә йәш ҡәләмдәшебеҙ Рәмилә Торомтаеваның тәүге китабын З. Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең «Йәштәр тауышы» серияһында баҫып сығарыуға тәҡдим ителеүе үҙе ҙур уңыш түгелме ни?! Башҡорт әҙәбиәте, ҙур итеп әйткәндә, бер юлы дүрт өмөтлө яҙыусыға байыны ла баһа! Быға ҡыуанырға ғына кәрәк. Һәм хупларға.

Хупларға, тигәндән. Беҙҙә бер бигүк һәйбәт булмаған күренеш йәшәп килә: әҙәбиәткә килеүсе йәштәрҙе олоғаймайынса, ижад кәре ҡайтмайынса Яҙыусылар союзына алмайбыҙ. Ике-өс, хатта дүрт-биш китап сығарған ҡәләмдәштәребеҙ һаман да профессиональ союзға ағза итеп алынмаған килеш йөрөй бирә. Араларында роман яҙғандары, заманында Хәким Ғиләжев фатиха (рекомендация) биргәндәре лә бар.

Ошоно ла күҙ уңында тотоп, был семинарҙа йәш прозаик, ике китап авторы (ололар һәм балалар өсөн) Рәсүл Сәғитов Башҡортостан Яҙыусылар союзына ағзалыҡҡа тәҡдим ителде. Идара эргәһендәге даими Ҡабул итеү комиссияһы проза семинарының был тәҡдименә ҡолаҡ һалыр, тип уйлайбыҙ.

Бүтән йәш прозаиктарҙан Мәҙинә Йәғәфәрованың (Әбйәлил районы) ҡулъяҙмалары Союз янындағы проза секцияһында яңынан ҡарауға тәҡдим ителһә, Гөлнара Мостафинаға (Өфө), Әнисә Янбаеваға (Учалы), Рүзидә Үтәшеваға (Сибай) ҡулъяҙмаларын артабан камиллаштырыу йәһәтенән байтаҡ кәңәштәр әйтелде.

Күренеүенсә, республика семинарында ҡатнашыусы йәш прозаиктарҙың ижады бик төплө, юғары талаптарҙан сығып тикшерелде, һәр береһенә етди иғтибар, лайыҡлы һәм хаҡлы баһа бирелде. Бер кемгә бер ниндәй ҙә ташлама яһалманы, бөтә йәш авторҙарға ла бер иш ҡәтғи талап, ижадтарына бер үк критерийҙарҙан сығып хөкөм йөрөтөлдө. Оло ҡәләмдәштәренең семинар эшендә объективлығын, ихлас күңелдән, йөҙ йыртыуһыҙ, кәйеф ҡырышыуһыҙ алып барылған һөйләшеүҙән бөтәһенең дә ҡәнәғәт булыуын билдәләнеләр йәш прозаиктар. Аҡ юл уларға!

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ,**
шағир, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты,
Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары.

***

Ҡулъяҙмаларҙы анализлауҙа семинар етәксеһе Ҡәҙим Аралбай, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипова, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, ошо уҡ журналдан бүлек мөхәррире, БР Яҙыусылар союзының проза секцияһы рәйесе Сабир Шәрипов, «Китап» нәшриәтенең нәфис әҙәбиәт редакцияһы мөдире Ринат Камалов, БДУ доценты Зәки Әлибаев, Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһы сәркәтибе Хәйҙәр Тапаҡов, БДУ-ның Сибай институтынан филология фәндәре кандидаттары Ғәҙилә Бүләкова менән Әмир Ҡотлоәхмәтов, ҡала әҙәби берекмәләренең әүҙем ағзалары ихлас ҡатнашты.

Артабан уҡыусыларыбыҙ иғтибарына йәш яҙыусыларҙың семинарҙа һүҙ алып барылған бер нисә сәсмә әҫәре тәҡдим итәлә.

Рәмилә ТОРОМТАЕВА

# ДИВАН

ХИКӘЙӘ

– Их, яҙмышым…

Һүҙҙәр бүлмә уртаһындағы ултырғысҡа килбәтһеҙ ҙур кәүҙәһен саҡ һыйҙырған ирҙең күңел төбөнән һығылып сыҡты ла, өйҙәге һиллекте тетрәндереп, ҡаҡ стенаға бәрелде. Шаңдау уның үҙен дә һиҫкәндерҙе, буғай. Башын күтәреп, йән-яғына күҙ һирпте. Өйҙәге ҡайһы бер әйберҙәр шелтәләп ҡараған төҫлө тойолдо уға. Ана, мөйөштә, йорт йыһаздарынан ултырып ҡалған берҙән-бер диван, был хәлгә төшөүенә ғәрләнгәндәй, бер яҡҡа ҡыйшайып, унан-бынан торсайып сығып торған мамыҡтарын ҡайҙа итергә белмәгәндәй, моңһоҙ хужаһына баҡҡан.

«Иҫләйһеңме, Ғәйнислам, әсәйең, бахыр, мине һатып алып ҡайтҡас, һеҙҙе теҙеп ултыртты ла, үҙе ситкәрәк китеп ҡарап торғайны. Шунда ул миңә, яңы диванға, ҡарап һоҡландымы, әллә береһенән-береһе шуҡ балаларына, һеҙгә, ҡарап ҡыуандымы, үҙе генә белә. Урыным түрҙә булғас, өйөгөҙҙә нимә булғанын яҡшыраҡ беләм. Һеҙ бәләкәй саҡта урамдан инмәй уйнай торғайнығыҙ, шуға ла өй эсендәгеһенең күберәген мин күрҙем, мин ишеттем…»

Өй уртаһындағы килбәтһеҙ кәүҙә һағайҙы, йән-яғына ҡаранды. Өйҙә һүҙ һөйләрлек берәү ҙә юҡ. Кем һуң ул саҡта? Ирҙең йөрәгенә шом йүгерҙе. Тын донъяны боҙоп, кемдер һүҙ һөйләй… Ҡолағына ишетелә, тиһә, был тауыш бөтөнләй ят. Үҙенең уйҙары, тиһә, ундайҙы ул ғүмерендә лә уйламаҫ. Тауыш тағы дауам итте: «Бер көндө әсәйең төшкө аш әҙерләй ине. Көндәгесә тилбер генә йөрөгәнендә, ҡапыл нимәлер булды уға, төҫө үҙгәрҙе, сайҡалып китте, мин уның ҡолап барғанын күрҙем. Иҫләмәйем, ул үҙе килдеме, әллә мин үҙем барҙыммы, ни булһа ла, ул ҡаҡ иҙәнгә ҡолап өлгөрмәне, гөрһөлдәп бәрхәт тышлығыма ауҙы. Тын алыуҙарының бөтөнләй рәте юҡ, тәне дер-дер килә. Ныҡ ҡурҡтым, Хоҙай тауыш бирһә, бар көсөмә ҡысҡырыр инем, әммә өнһөҙ генә шаһит булыуҙан башҡаға эшкинмәгәс, ни эшләйһең… Оҙаҡ ятты ул шулай. Әсәйең башын күтәргәндә, ҡотом осто – танауынан борлап ҡан аға ине. Үҙен ҡулға алды әсәйең, иң тәүҙә үҙе йыуынды, шунан мине лә таҙартып ҡуйҙы. Вәт, һеҙ бәләкәй саҡта уҡ ауырый ине ул.

Ә атайың артыҡ ҡаты, өҫтәүенә, ҡыҙыу булды. Һеҙ унан шөрләңкерәй ҙә торғайнығыҙ. Һеҙ генәме ни, мин дә ҡурҡа инем унан. Бер көндө бөтәгеҙҙе лә өйҙән ҡыуып сығарып, ныҡ туҙынды, өйҙә ҡыйратырлыҡ бөтә нәмәне лә ҡыйратты.

*Рәмилә Торомтаева — Сибай ҡалаһында йәшәй һәм Алтын ҡасабаһы мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Өс бала әсәһе, Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһының әүҙем ағзаһы.*

Бер яҡ ҡабырғам шунан бирле юҡ бит. Һуңынан үҙе ҡуйып ҡараны-ҡарауын, килештерә алманы. Өйҙә уның ҡулы менән эшләнгән әйберҙәр күп ине, яртыһын туҙынғанында үҙе ҡырҙы, яртыһын һин һатып эсеп бөттөң…»

Ғәйнислам үҙ асышынан үҙе ҡурҡты. Диван! Диван һөйләй булып сыға түгелме? Кит, булмаç… Ул икеләнде. «Фараздарымды инҡар ит», – тигәндәй, диванға ялбарып ҡараны. Диван көслөрәк тауыш менән дауам итте: «Ниңә аптырайһың әле һин, Ғәйнислам? Бына бөгөн, ни эшләптер, эсем бошоп китте. Ошо өйҙәге һеҙ бәләкәй саҡтағы ҡәҙимге тормошто һағынып, үҙәктәрем өҙөлгәндән генә һүҙ башлап ултырыуым… Беләһеңме, Ғәйнислам, ҡатылығы менән дан алған атайыңдың кире ҡаҡҡыһыҙ талапсанлығынан алып, ғәйрәтле туҙыныуҙарынан һуң Ғәйшәһе алдында ғәйепле йүгергеләүенә тиклем юҡһынам. Әсәйең һымаҡ башҡа кешене белмәйем. Уға иртә таңдан ҡара төнгә тиклем һоҡланып ҡарап ултырырға яраттым. Белмәгәне булмағандыр әсәйеңдең. Иç киткес сабырлығына аптырай торғайным. Ғәлиәсенең ярһыуын да һәр саҡ сабырлығы менән баçты, хәләлен тынысландырырлыҡ һүҙҙәрҙе таба белде. Ҙур мөхәббәт йәшәне бында улар менән бергә. Эйе, эйе, тормош ығы-зығыһына, ваҡлыҡтарына ла ҡарамай, илаһи яҡынлыҡ хисе хакимлыҡ итте был йортта. Тик ни эшләп шундай ата-әсәнән холоҡһоҙ бала тыуа икән?»

Ғәйнислам дивандың ҡайҙа ҡайырыуын аңланы. Атаһы менән әсәһенең «холоҡһоҙ балаһы» ул бит. Һүҙҙәрҙе кире ҡаҡманы ир, әммә күңел төбөн тағы ниҙер әрнеүле һыҙып үтте. Яҙмышының бәхетһеҙлеккә ҡарай боролош алған көнөн тағы йөрәге аша үткәрҙе.

«Мин дә хәтерләйем... – тине диван. – Атайың бер аҙ аптыратты ул көн һеҙҙе лә, мине лә. Таң менән тороп, ҡайҙа барғанын да әйтмәй сығып китте лә, бер аҙ ваҡыттан һуң дөбөр-шатыр ҡайтып та инде. Иң тәүҙә әсәйеңә өндәште:

– Ҡатын, мин малайҙарға күршеләш кенә итеп өй һалам… Тәүҙә Нурисламға, шунан Ғәйнисламға, Динисламға… Бынау буш торған ерҙәр етергә тейеш. Бура бар, һөйләштем. Аҡсаһын да түләнем тиерлек, документтарын да әҙерләйбеҙ, тинеләр. Сынъяһау итеп, бер иш итеп эшләйем. Яҡын йәшәһәләр, бер-берене таяныс та булырҙар, ҡатнашырҙар, килендәр ҙә, Алла бирһә, үҙ-ара татыулыҡта йәшәр. Ейәндәр ҙә эргәлә йүгереп йөрөп үçер. Тик бына Мәстүрәгә генә урын етмәй. Ярай, ҡыҙ – кеше балаһы… – тағы әллә күпме хәбәренән һуң, атайығыҙ, кинәт туҡтап, һеҙгә өндәште: – Малайҙар, бергә йәшәргә теләгегеҙ бармы?

Һеҙ әллә көтөлмәгән һорауға бөтөнләй әҙер түгел инегеҙ, әллә йәнәш йәшәргә берегеҙҙең дә теләге юҡ инеме, өйҙә тынлыҡ урынлашты. Шунан атай кеше бөтәгеҙ өсөн үҙе хәл итте:

— Бергә йәшәрһегеҙ. Мин һеҙҙе ҡалаға ебәреп, ерле бездельник итәсәгем юҡ. Ана, Шәйхислам ағайығыҙ килештерҙе. Нисә йыл йөрөй, кеше булыр булһа, быға тиклем бер йүнен сығарыр ине. Ҡалаға китәм, имеш, уҡыйым, имеш. Берегеҙ бер ҡалаға китәм, тип ауыҙығыҙҙы ла асмайһығыҙ. Армияға барып киләһегеҙ ҙә, өйләнә тораһығыҙ, башҡа сыға тораһығыҙ. Иң һуңынан ошо нигеҙгә Динисламға өй һалып, ғүмер булһа, беҙ ҙә шунда сығырбыҙ. Бынына иçкерҙе…

Шунда өйҙө баштан-аяҡ һөҙөп ҡарағандан һуң һин:

– Миңә ошо иçкеһе лә етә, – тинең. Һүҙҙәреңә тәүҙә берәү ҙә иғтибар итмәгән кеүек булһа ла, атайың ижекләп тигәндәй:

– Ярай, Ғәйнислам, иçкегә риза булғас, яңыһына өмөт итмәçһең! – тип яуап бирҙе.

Атайың әйткән һүҙенән сыҡмаясағын байтаҡ йылдар үткәс кенә аңланың,

әммә өлөштән баш тартҡан һин үҙең инең. Эскегә бирелеүең дә ошонан башланды бит. Туғандарыңдың ялтырап торған донъялары эргәһендә һинеке гел иҫкелеге менән айырылып торҙо…»

… Армиянан ҡайтҡас башланды теге һүҙ өсөн үҙе яуап биреүҙәр.

Ҡайтты. Өйләнде. Башта ата-әсә йортонда килен йомшап йәшәү һәүетемсә генә барҙы. Балалары тыуғас, кәләше: «Әллә башҡа сығабыҙмы, Фәйнислам? Динислам да ир етте. Бына-бына өйләнер. Яңы өйҙә үҙебеҙ теләгәнсә йәшәр инек. Ҡайным менән ҡәйнәмә лә бала тауышынан ял итергә кәрәк…» Зәлифәнең эргәләрендә төҙөлөп ятҡан яңы йортҡа ишара итеүе сәйер түгел, ҡайнағаларының донъя төҙөп башҡа сығарылғанын белгән йәш килендең үҙ өлөшөнә хаҡлы рәүештә өмөт итеүе генә. Әммә ҡатыны бер ҡатлылығы менән йорттоң уларға тәғәйенләнмәгәнен аңламай ине. Фәйнислам тәүҙә өндәшмәй ҡотолдо. Бер аҙ ваҡыт үткәс, был һөйләшеүгә тағы бер ҡат ҡайтырға тура килде. Тик бында улар икәү һөйләшмәне. Ҡайны, ҡәйнә, ул, килен ҡара-ҡаршы ултырып, төп йортта кемдәр торасағын асыҡлағанда, Фәйнислам үҙенең «өлөшһөҙ» ҡалғанлығын аңланы. Яңы йортҡа аталары үҙҙәре күсенеп сыҡты. Башҡа сығып, үҙебеҙсә йәшәрбеҙ, тип йөрөгән киленсәк, быны бик ауыр ҡабул итһә лә, яйлап күнде. Тик Фәйнисламдың күңелендә генә ниндәйҙер сәйер бушлыҡ барлыҡҡа килде. Эшкә киткән, ҡайтҡан һайын аталарына боролоп инергә баҙнат итмәне. Башта бер кем дә быны һиҙмәне. Ләкин тора-бара уның күңел һалҡынлығы туғандарын да өшөтә башланы, шикелле. Тәүҙә Нурислам ағаһы ҡустыһының кәмәһенә ишкәк биреп маташты. Әммә Фәйнислам уларҙы ҡабул итеү түгел, үҙе үк кәмәһенән яҙмыш йылғаһына һикерер сиктә ине.

– Ағай, ҡыҫылма,– Фәйнисламдың был һүҙҙәре Нурислам ағаһына ғына түгел, тотош донъяға тәрән рәнйеү булып йүнәлтелгәйне. Быға тиклем береһе өсөн береһе йәнен бирергә әҙер булған туғандар мөнәсәбәтенә лә нөктәләр ҡуйыла башланы. Ул нөктәләрҙе башлап ҡуйыусы ла Фәйнислам үҙе ине, булһа кәрәк.

Ауыл тормошо ағай-энеһеҙ булмай. Таяныс-терәгең дә шулар бит инде. Нурислам көсләп тағылып йөрөй торғандарҙан булмаһа ла, туғанлыҡ хисе еңепме, тәүҙә ҡустыһына ингеләп йөрөнө. Йә бер сәбәп табылды, йә икенсеһе. Тора-бара сәбәптәр ҙә үҙҙәренән-үҙҙәре бөттө, һөйләшеүҙәре лә «хәлдәр нисек, нимә эшләйһең?» кеүек ғәҙәти һүҙҙәрҙән ары китмәне.

Фәйнислам стаканға самогон ҡойҙо ла тағы диванға текәлде. Иҫкергән икән. Төҫө уңған, урыны-урыны менән эскә батып йәмшәйгән ерҙәре күпте күргән ҡарт кешенең тәрән маңлай һырҙарын хәтерләтһә, ҡаҡашып ҡатҡан тышлығы күптән үҙенә ҡул һелтәгән әрпеш заттарҙы иҫкә төшөрә. Ҡасандыр буялған лак та тояҡтарҙың ул-был ерҙәрендә генә эләгеп тора. Тояҡтар үҙҙәре лә апаруҡ ҡына ҡаҡшаған – береһе һыныр сиккә еткән, ҡалған өсәүһе уны түҙергә өмөтләндергәндәй, ныҡ тора. Хас та ағалы-ҡустылылар кеүек – Фәйнислам үҙе ситкә тартылһа ла, Шәйхислам, Нурислам, Динислам уны ебәрмәй ныҡ тота...

Туғанлыҡ хисе – иң ҡөҙрәтлеһе. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта, тип өлкәндәр белмәй әйтмәй. Фәйнислам яңғыҙ йәшәргә тырышһа ла, күңеле быны менән барыбер килешә алманы. Ҡайһы саҡтарҙа өйөрөнән яҙған яралы бүреләй тойҙо үҙен, көндәлек мәшәҡәттәргә әүрәп, онотолорға тырышһа ла, йәненә ниҙер етмәне. Күккә ҡарап олор сиктәргә еткән ваҡыттары ла аҙ булманы уның. Ни етмәгәнен Фәйнислам, әлбиттә, һәр саҡ белде. Тик мин-минлеге, «Һине өлөшһөҙ ҡалдырҙылар, өлөшһөҙ ҡалдырҙылар» тип, көнө-төнө эстән сүкене, ғәйрәтен ҡайтарҙы.

Ауыл ерендә кешенең башында ни ҙә, күңелендә ни икәне халыҡты артыҡ ҡыҙыҡһындырмай – һәр кемдең үҙ донъяһы, үҙ мәшәҡәте. Фәйнисламдың башта күҙҙәре аҫҡа ҡараны, яйлап башы ла түбән эйелде. Урамдан үткәндә кешеләрҙең

ҡарашы менән осрашмаҫ өсөн шулай итә башлағайны ла, тора-бара бөтөнләй үҙенә йомолдо. Кешеләр тәүҙә уның яуап бирмәүенә иғтибар итмәй сәләмләшеп үтһә, яйлап улар ҙа Ғәйнисламды күрмәмешкә һалыша башланы. Үҙен бер аҙ сәйерерәк тотҡан был йәш кешегә ауылда иң ҡулайлыһы – көтөүсе эше тап килде. Былай ҙа үҙенә бикләнә барған Ғәйнисламға был етә ҡалды. Донъяһы аҙналарға бүленеп, бер аҙна – уйһыҙ-ниһеҙ көтөү артынан эйәреп йөрөүгә, бер аҙна – өйҙә диванда тик ятыуға күсте.

Ә Зәлифәһе түҙҙе – ҡайныларының яңы өйгә күсеп сығыуына ла, Ғәйнисламдың тик ятыуына ла. Ире менән аралары көндән-көн нығыраҡ һыуына барғанын тойһа ла, сат йәбешеп, бар көсөнә йәшәргә, донъя көтөргә тырышты. Бына бөгөн, бөгөн булмаһа, иртәгә мөнәсәбәттәре яҡшырыр, тигән уй күңелендә сибекләнгәндән-сибекләнә барып, бер көн Ғәйнислам тарафынан тамыры-ние менән йолҡоп ырғытылды.

Ғәйнислам иртән иртүк тороп эшкә йыйына ине. Йомошо менән сығып киткән Зәлифәһе ҡобараһы осоп ҡайтып инде. Иренең эргәһенә килде лә, өндәшә алмай оҙаҡ ҡына уның ҡаршыһында торҙо. Зәлифәнең күңелендәгеһе йөҙөнә яҙыла ла ҡуя. Бында ла ҡатынының ҡарашынан уҡ Ғәйнислам ниҙер булғанын асыҡ тойҙо. Ирҙәр сабырлығы тотто уны, «нимә булды?» тип һораманы. Зәлифә өҙөп-өҙөп:

– Шәйхислам ағай ҡайтҡан, – тине.

– Ҡайтһа ни?

– Кәләш алып ҡайтҡан.

– Яҡшы булған.

– Кәләше кем, тип һора, һантый! – Зәлифәнең ыҫылдап әйткәнен оҡшатманы Ғәйнислам, эсендә ут тоҡанды, шунда ла тыштан битарафлыҡ күрһәтте.

– Йә, шунан, кәләше кем?

Ҡатыны, күҙҙәрендә утлы осҡондар уйнатып, Ғәйнисламға сәнсеп ҡараны:

– Сәриә.

Башына аңғармаҫтан тондорҙолармы ни – шаңҡыны ла ҡалды ир. Зәлифәнең артабанғы һүҙҙәрен аңламаны. Күҙ алдына Сәриә килеп баҫты. Ғәйнисламдың йөрәге күпме йылдар ошо исемде ҡабатлай...

...Мәктәп тамамларға ике йыл ҡалғас, Ғәйнислам Сәриәгә үлеп ғашиҡ булды. Ҡыҙ ҙа егеттең хистәрен яуапһыҙ ҡалдырманы. Уларҙың йәшлек дәрте ташып торған йөрәгендә көслө саф мөхәббәт тамырланды.

Мәктәп тамамлауға ике ғашиҡ үҙҙәрен кейәү менән кәләш һымағыраҡ та ҡабул итә башлағайны. Дыуамаллығына барып Ғәйнислам «Армияға тиклем Сәриәне алып китәм»,– тип тә йөрөгәйне, ҡыҙҙың әсәһе риза булманы, «Ҡыҙымды ике йыл булһа ла үҙем менән йәшәтәм»,– тине күҙҙәрен егеттән йәшереп. Ғәйнислам һүҙен һүҙ итеп маташҡанда был яҡтан әсәһе лә тыйҙы:

–Ҡуй, балам, ҡабаланма, армиянан ҡайтҡас та сразу әпирербеҙ бына, тик армиянан ҡайт ҡына, Алла бирһә... – ошо һүҙҙәрҙе әйткән саҡта уларҙың бергә булмаҫын белде микән әсәһе?

Сәриәнең әсәһе Фәғилә килгәйне бер көн, оҙаҡ һөйләштеләр. Ҡатын үҙен борсоулы тотто, әсәйең дә һағайҙы. Шуғамы, сәй ҡуйҙы, тегеһе: «Эсмәйем», – тип баш тартты.

– Ҡуй, тәүгә инеп тораһың, – «Балалар ҙа дуҫлаша»,– тип әйтергә уйлағайны, теле әйләнмәне.

Ваҡ-төйәк тураһында оҙаҡ ҡына гәпләшкәс, Фәғилә һүҙ башланы:

– Сәриәне Ғәйнисламға бирмәйем, Ғәйшә, бирә алмайым.

Ғәйшә өндәшмәне. Тимәк, уның шикләнеүҙәре дөрөҫкә сыға... Шулай ҙа ысынбарлыҡты Фәғиләнең үҙенең ауыҙынан ишеткеһе килде әсәйеңдең.

… Фәғилә ауылда йәшәмәне, тиһәң дә була. Сәриәһен бәләкәй сағында уҡ әсәләренә ҡалдырҙы ла, башы һуҡҡан яҡҡа сыҡты ла китте. Ҡайтһа ҡайтты, ҡайтмаһа, үҙен бик ғәйепле лә тойманы. Сәриә ҡараулы, өҫ-башы таҙа, тамағы туҡ. Шуны асыҡ белгән йәш ҡатын хатта балаһына уны алып бирәм, быны алып бирәм тип тә уйламаны шикелле. Ә Фәғиләнең әсәһе бик тилбер, хәрәкәтсән, юҡты бар итә белгән сос әбей ине. Сәриә тиңдәштәре араһында үҙен кәм тоймаһын өсөн бөтәһен дә эшләне: ейәнсәренең кеймәгән затлы кейеме, татымаған ризығы ҡалмағандыр. Йылдар шулай һиҙҙермәйсә үтте. Сәриә күҙгә күренерлек һылыу ҡыҙға әйләнде. Ауылдың бар егеттәре лә уға ғашиҡ булды. Ә Сәриә бөтәһенең араһынан, Ғәйнислам, һине һайланы.

Һиҙгер ауыл халҡы һағайып ҡалды. Ҡолаҡтан ҡолаҡҡа быш-быш хәбәрҙәр таралды. Ә өс кеше бөтөнләй йоҡонан яҙҙы: атайың, әсәйең һәм Сәриәнең өләсәһе. Ошо өсәү ут йотоп Фәғиләнең ҡайтҡанын көттө. Тик, үс иткәндәй, һеҙ дуҫлашҡан йылдарҙа ул ике йәй рәттән ҡайтманы.

Көҙгә аяҡ баҫа алманы Сәриәнең өләсәһе, һин дә мин йөрөгән әбей ҡапыл гүр эйәһе булды ла ҡуйҙы. Әсәһен ерләргә генә ҡайтты Фәғилә, ҡайтты ла башҡа китмәне. Ҡыҙы эргәһендә ҡалды. «Әсәйемдең нигеҙен ташлай алмайым»,– тип хәбәр һөйләгән булды, әсәһе тере саҡта ҡайтып та күренмәгән сибәр ҡатындың был һүҙен халыҡ оҡшатманы.

Бер көндө Фәғилә ауылдағы бала саҡ әхирәттәрен ҡайғы уртаҡлашырға тип йыйҙы. Шунда уның күҙен астылар: «Сәриәң кем менән йөрөгәнен беләһеңме?» «Ғәйнислам кемдең улы икәнен беләһеңме?» «Әллә беҙ яңылышабыҙмы?..»

Фәғилә телһеҙ ҡалды. Сәриә менән Ғәйнислам ике туған булып сыға бит. Ҡатын баҙап ҡалды. Ни эшләргә, кем менән кәңәшләшергә? Сәриәнең үҙенә әйтһәң, ул әсәһенең тормошонда тағы бер тапҡыр аяҡ салыуын ғәфү итмәйәсәк. Шуға ла әсәйеңә килде:

– Сәриә Таймастың ҡыҙы бит!

– Ҡайнаға үҙе беләме һуң... – тине Ғәйшә, тыныс ҡалырға тырышып.

– Белмәй, – Фәғилә әсәйеңә меҫкен генә ҡараны.

Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлашты.

– Балаларҙы ҡауыштырырға ярамай, Ғәйшә, ярҙам ит.

– Ә һин ни эшләп ике йыл рәттән ҡайтып башыңды ла күрһәтмәнең? Балалар эҫенешеп бөткәс, ултыраһың хәҙер хәбәр һөйләп! Әйтте инде Ғәлиәс, «Таймас ағайымдың ғына ҡаны булмаһа ярар ине» – тип, дөрөҫкә сыҡты бит. Ҡайнаға ла китте лә батты, ҡайтып хәл белеү юҡ, нитеү юҡ. Былтыр ҡәйнәмде ерләнек, шунда ла «ваҡыт юҡ» тигән. Әйтерһең, берәүҙең һыйыры үлгән. Әсәй бит ул… – Шунда әсәйең тағы миңә йөҙ түбән ауҙы, тағы оҙаҡ ятты, тағы танауы борлап ҡананы. Әсәйең хатта Фәғиләгә лә иғтибар итмәне, һәр ваҡыттағыса, башта үҙе йыуынды, шунан мине таҙартты.

– Ҡасандан бирле, былай... – тине Фәғилә, унан ҡасандан ауырыйһың, тип һорамаҡ булғайны, Ғәйшә йәнә ҡыҙҙы ла китте:

– Нисек ҡасандан бирле, ике йыллап йөрөйҙәр, тип торам бит. Балаңдың сабый сағын күрмәнең, йәш сағы ла һине артыҡ борсомай. Кәкүк һымаҡ, бер бөртөк балаңды ла етем үҫтерҙең. Ярай, әсәйең булды, Сәриәң дә бер моңһоҙ булып үҫә ине…– үҙ һүҙҙәренә сәсәй башлағас, әсәйең туҡтарға мәжбүр булды. Ҡулъяулығы менән ауыҙ тирәһен ҡапланы ла Фәғиләгә ишеккә ымланы. «Сығып кит!» тиеүе ине. Фәғилә сыҡҡас та әсәйең үҙ алдына һөйләнеп, оҙаҡ ҡына баш ватты.

– Йә, раббым, ни гонаһтарым булды һинең алда, ни өсөн башҡаларҙың гонаһ шауҡымы тап минең баламда сағылырға тейеш? Ғүмерем буйы береһен ҡыйырһытманым, ауыр һүҙ әйтмәнем. Иң ҡурҡҡаным да шул кеше ҡарғышы ине.

Дөрөҫ йәшәргә тырыштым. Дөрөҫ йәшәнем дә шикелле. Һәр хәлдә, кешенең күҙенә тура ҡарап һөйләшә алам, яҙыҡ эштәрем юҡ…

Эшһеҙ ултырырға яратмаған Ғәйшә, Фәғилә менән сәй эскәнсе, үҙен донъянан күпкә артта ҡалғандай тойҙо. Шул көнгә тәғәйенләнгән барлыҡ эштәренең ҡайһыһына тотонорға белмәй албырғап, ҡапыл тороп баҫты. Ҡырҡа ҡарарға килеп тотонорлоҡ эштәренең береһенә лә ҡулы барманы. Өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа кире ултырҙы.

Атайың эштән ҡайтҡас, гел ҡайнар аш менән ҡаршы алған ҡатынын танымаСы. Киске аш бөтөнләй юҡ ине. Ғәлиәс ингәнде лә аңғарманы Ғәйшә, сәләмләүенә лә, ҡартының еңелсә орошоуына ла яуап бирмәне, таш һын һымаҡ ултыра бирҙе. Башта, ирлегенә барып, атайың «нимә булды?» тип һораманы, тик Ғәйшәһенең тиккә генә улай ҡыланмаҫын аңлап борсола башланы, өҫтәлгә килеп ҡатынының ҡаршыһына ултырҙы ла, мөмкин тиклем тыныс ҡалырға тырышып:

– Йә, һөйлә, ни булды?– тине.

– Фәғилә килде, Сәриә Таймас ҡайнағаның ҡыҙы, тине.

– Тәәәк…– Ғәлиәс бик асыулы саҡта һүҙҙе шулай һуҙа. – Тимәк, ауыл халҡы яңылышмаған. Ҡылды, былай булғас, Таймас ағайым, партийный берәү, репутацияһы берәүҙең тап-таҙа, послужной список берәүҙә… Түлһеҙ бисә алып, йөрөй нәҫелен ситкә сәсеп. Был донъяла ҡыҙы бар икәнен дә белмәй, тыума итеп үҫтергән балаһын. Атаһы була тороп, атайһыҙ үҫһен әле бала, беҙҙең нәҫелдә булмаған хәл! Ярай, Фәғиләһе ҡайтып килгән, нәҫелдең ҡанын ҡуша яҙҙылар, ике мөртәт. Аҙғынлыҡтары үҙ баштарына төшһөн ине лә бит, нәҫелгә төшә… Минең нәҫелемә төшә…

Ғәлиәс ҡыҙыулыҡ менән ишек башынан тәмәкеһен алды ла тышҡа сығып китте. Шул сыҡҡандан эңер төшкәнсе инмәне, әсәйең дә уны ашатырға кәрәклекте онотто.

Кискеһен был һөйләшеүгә тағы ҡайттылар. Ҡыҙыу булһа ла, кәрәкле ваҡытта һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлай белә торғайны атайың, быныһында ла шулай итте.

– Ни, Ғәйшә, иртәгә Ғәйнисламды ҡайнымдарға ебәрәйек, бесән дә эшләшергә кәрәк, унан утын да әҙерләтербеҙ. Ғәйнислам әрһеҙ бит, ҡайным да уның эшләгәнен ярата. Шунда йөрөр ҙә торор. Армияға тиклем хәлде үҙебеҙҙең ҡулда тотһаҡ, ике йылдан күҙ күрер әле.

Бындай пландың барып сығырына икеһе лә ышанманы, әммә ошонан да ҡулай сара таба алмаҫтарын улар аңлайҙар ине.

«Иртәгәһенә, ысынлап та, һине Өфө аръяғындағы ҡартатаң менән өләсәйеңә ебәрҙеләр. Башта бесән тип әүрәттеләр. Унан уларға утын кәрәк булды. Һин ауылға ҡайтҡанда, йәй үтеп, сентябрҙең ике аҙнаһы ла артта ҡалған ине инде». Ғәйнислам, дивандың һүҙҙәрен бүлеп, ҡарһаланып башында ҡайнаған һорауҙарын теҙҙе:

– Тимәк, Сәриә менән беҙ ике туған ғына булып сығабыҙмы? Ни эшләп миңә ваҡытында әйтмәгәндәр һуң? Ни өсөн хәлдең айышын йәшергәндәр? Был серҙең сер булыуы кемгә кәрәк булды? Кем, кем, ә минең дөрөҫлөктө белергә хаҡым булғандыр бит…»

Диван тормоштоң аяуһыҙ ҡануындарын балаһына төшөндөргән әсәләрсә:

«Дыуамаллығыңдан ҡурҡтылар. Белеп ҡалһаң, нәҫелеңдең аҫтын өҫкә килтерә инең. Хәйер, ундай ваҡыттарҙа дөрөҫлөктө белеү генә ҡотҡарыр инеме икән һине? Күңелдә мөхәббәт хисе тамырланған ине бит, ә шул хис йәнәшенә туғанлыҡ хисен дә ултыртып ҡара… Һин ундайҙы күтәрә алмаҫ инең…» – тип фаразларға батырсылыҡ итте».

Ғәйнисламдың аңы килеште диван менән, тик ошоға тиклем «Сәриә» тип һуҡҡан йөрәге генә тиҙ риза булғыһы килмәне. Бөтә булмышы шул Сәриәнән генә торғанда, бөгөн уны алып ташларға ҡушалар. Унда Сәриә лә булмаһа, нимә ҡала уға? Бер нәмә лә ҡалмай! Йөрәге дөрөҫлөк даулағанда, һуңғы хоҡуҡтарына йәбешкән бисаралай: «Сәриә, Сәриә, Сәриә…» тип тулап типте.

Түҙгеһеҙ ҡыҫымға бирешмәҫкә тырышҡан Ғәйнислам, ыңғырашып сайҡалып ултырҙы-ултырҙы ла, үкһеп иларға тотондо. Башына сал төшә башлаған ир үкереп оҙаҡ илағандан һуң да туҡтаманы, еңелсә һулҡылдауға күсте. Уны йәлләп ҡарап ултырған диван, Ғәйнисламдың һыҡтауына иғтибар итмәҫкә тырышып, артабан һөйләне:

«Һин ҡайтышлай уҡ Сәриәләргә һуғылдың, ҡаршы йүгереп сығыр, ҡосағыңа сумыр, тип атлығып килеп ингәндә, һиңә ул түгел, ә Фәғилә ҡаршы сыҡҡайны. Һорауыңа яуабы ҡыҫҡа булды:

– Өйҙә юҡ.

– Нисек өйҙә юҡ! – Һин уны ситкә этеп өйҙәренә үк инеп киттең, тик Сәриә, ысынлап та, һине көтмәй ине. Йәшлек тәжрибәһеҙлегең ҡамасауламаны һиңә, мөхәббәтеңә ҡурҡыныс янауын бөтә булмышың менән тойҙоң.

Уларҙың өйөнән ҡорт саҡҡандай атылып сыҡтың да өйгөҙгә тының ҡыҫылып, сәсәп килеп индең.

– Әсәй, Сәриә ҡайҙа? – Бынығы «һаумыһығыҙ» урынына ине. Әсәйең албырғап ҡалды, бер һүҙ ҙә әйтә алманы. – Сәриә ҡайҙа, тим, ҡайҙа китте?

Уның Себер тарафтарына барып эшкә урынлашыуын белгәс, әҙерәк тынысландың. Кинәт үҙең дә шунда йыйына башланың. Тик атайың тағы күрһәтте ҡатылығын. «Башта армияға бараһың, шунда һин маңҡанан ысын егет эшләп ҡайтарасаҡтар. Ҡайтҡас, мотлаҡ ауылда йәшәйәсәкһең. Ҡала, тип ауыҙыңды ла асма. Бына күрерһегеҙ, Шәйхислам ағайығыҙ ҙа ҡайтып киләсәк, уҡаһы ҡойолоп».

Ғүмереңдең иң оҙон көҙө булды шикелле ул көҙ, ҡышҡа инәрәк һине армияға оҙаттылар. Йәшлегеңдең ике йылы кирза итектәрҙә үтте.

Армиянан ҡайтҡанда, тағы Сәриәләргә һуғылдың, теге саҡтағы кеүек атылып инмәнең, олпат баҫып, бөтәһенә әҙер булып килеп индең уның өйөнә. Соланда ҡаршы сығып килгән йәш ҡыҙҙың Сәриә булырында шигең юҡ ине. Сумкаларыңды ишек төбөнә бырағтырҙың да, бер ынтылғанда ғына ҡосағыңа эләктереп, өйгә керттең уны. Шунда ғына, өйгә ингәс, ҡулыңдағы ҡыҙҙың Сәриә түгел икәнлеген аңғарҙың. Солан ҡараңғы ине шул. Ят ҡыҙҙы иҙәнгә баҫтырҙың да:

– Ғәфү итегеҙ, яңылышҡанмын, – тинең. Ә ҡыҙ шаян булып сыҡты:

– Ни эшләп, мин күтәрерлек түгелме әллә?

– Күтәрерлек тә…– һинең һүҙҙәрең буталды, тиҙерәк сығып китергә ынтылдың. Тик әрһеҙ ҡыҙыҡай алдыңа уҡ сығып баҫты:

– Мин Зәлифә булам, ә һин кем?– тине. Ошонда Ғәйнислам ара-тирә иңрәүле һыҡтауын туҡтатты, күҙ йәштәрен еңе менән килешһеҙ һөрттө лә йөҙөн диванға бороп:

– Эйе, Зәлифә әрһеҙ булып сыҡты, күрҙе лә, оҡшатты ла, үҙенә өйләндереп тә ҡуйҙы, – тине. Был һүҙҙәрҙе ул гел шулай теҙеп әйтә, әйтерһең дә Зәлифәгә өйләнеүендә уның бөтөнләй ҡатнашлығы юҡ.

Армиянан ҡайтҡан көн ул буйҙаҡ тормошо менән хушлашты, тиһәң дә була. Шул көндө апаруҡ ҡына иҫергән Ғәйнислам, ауыл йәштәренән айырылып, тағы Сәриәләргә килде, дөрөҫөрәге, Зәлифәләргә. Ҡыҙ уны көтөп торған, тиерһең, өҫтәлгә әллә нимәләр теҙҙе, шарап та ҡуйҙы. Ғәйнислам башта үҙен ҡулда тоторға тырышты, тик иҫерткес эсемлек барыбер үҙенекен итте. Иҫенә килгәндә, ҡосағында Зәлифә мыш-мыш йоҡлап ята ине. Егет һикереп торҙо. Йәшлеген әҙләп

килгәйне, яҙмышын тапты, һорауҙарына яуап юллағайны, улар тағы ла өҫтәлде. Нисек былай? Ниңә ул? Хәҙер ҡалайтырға?

Бер аҙ тынысланып, бәлки, бер ни ҙә булмаҫ, тип ҡайтып киткән егет алданды. Дүрт айҙан Зәлифә уларҙа килен хоҡуғында йәшәй башланы, эйе-эйе, килен хоҡуғында, ҡатын хоҡуғын бирергә Ғәйнислам ҡырҡа баш тартты.

– Бәлки, дөрөҫ эшләмәгәнмендер? – Һуңғы һүҙҙәрҙе Ғәйнислам ҡысҡырып әйтте.

«Уныһын мин дә белмәйем, кешегә кәңәш биреүе генә еңел, – диван ҡабат телгә килде. – Ә инде Зәлифәнең нисек үкенгәнен мин беләм. Берәү ҙә өйҙә булмағанда йыш илай торғайны ул. Уның күҙ йәштәре миңә аҙ һеңмәне. Төндәр буйы һыҡтап, өйҙә яңғыҙ ҡалғанда көн оҙоно үкереп сыҡҡан мәлдәре лә аҙ булманы. Ул тыштан ғына шулай шаталаҡ, шаян, бер ҡатлы, ә эстән иҫ киткес түҙемле, аҡыллы ҡатын. Улыңа ҡара, Зәлифәң булмаһа, ул бер эшкинмәгән бәндә булыр ине. Ә уны әсәһе кеше итте, уҡытты. Бала сағынан ҡулынан китап төшөртмәне, ниндәй генә әҫәрҙәр уҡыманылар улар бергәләп. Шулар арҡаһында мин күп кенә яҙыусы, шағирҙарҙың ижады менән танышмын да инде.

Һинең яҙмышты шул яҙыусыларҙың береһенә һөйләһәм, береһе бер китап итеп яҙмаҫ ине. Кеше ҡыҙығырлыҡ бер ни ҙә юҡ бит. Үҫтең. Эстең. Кешелегеңде юйҙың. Бына ошо өс һүҙ һинең булмышыңды билдәләй бөгөн. Кеше араһында кеше булып йәшәр өсөн һиндә бөтәһе лә бар ине бит. Аҡыл, көс, ғәйрәт. Тик һин ғүмерең буйына арҡырыны буйға алып һалмаған бер моңһоҙ бәндә булдың».

– Мине өлөшһөҙ ҡалдырҙылар, миңә тигән өй ҡайҙа? Ҡосағыма алырлыҡ үҙем ятҡан һөйөклө кешем ҡайҙа?

«Их, Ғәйнислам, һинең бөтә бәләңә бер сәбәп – үҙеңде өлөшһөҙ тойоуыңда, өлөшөң булмауҙа...» – Диван туғандарса ысынлап тиргәне.

***

Ғәйнислам ултырғыста шешә эргәһендә әллә ҡасандан ятҡан икмәк ҡатыһын ҡәҙерләп кенә һындырҙы ла, мөмкин тиклем әҙерәк бүлеп алырға тырышып, тешһеҙ ауыҙына тыҡты. Ҡапыл сәйнәмәне, ебетеп, икмәк киҫәген ауыҙ эсендә улай-былай әйләндергеләне. Ҡалған киҫәкте һаҡлыҡ менән генә һыңар ҡулының усына йомдо. Самогонға үрелмәне.

Икмәк. Әсәһе нисек кенә итеп бешермәй торғайны, ә Ғәйнислам майҙа ҡыҙҙырылғанын яратты. Май икмәк булһа, уға башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Шуны ташып йөрөп ашаһа, күңеле була. Әсәһе тыйыр, икмәкте йөрөп ашамағыҙ, рәнйер, тиер ине.

Ғөмүмән, атаһы менән әсәһе һәр ризыҡты изге күрҙе. Киске ашҡа ла аталары эштән ҡайтҡас ҡына ултыра торғайнылар. Өҫтәл тирәләй теҙелешәләр ҙә, аталары ҡулынан өлөш һоғоналар. Ғәлиәс «ҡыҙҙың өлөшө алдан» тип, иң тәүҙә Мәстүрәнең ауыҙына берәй йәтешерәк киҫәк тыға, шунан малайҙарҙың асыҡ ауыҙҙарына берәмләп ит киҫәктәренең тосораҡтарын оҙата: «Шәйхислам улыма баштан, Нурислам улыма уртанан, Ғәйнислам улыма ла уртанан, Динислам улыма иң аҙаҡтан». Ошо үҙенә күрә бер тәртип була торғайны…

Ғәйнислам ирендәрен ялап ҡуйҙы, яңы ғына атаһы уға тигән урта өлөштө һоғондорған кеүек булды…

Өлөш. Ғәйнисламға тигән өлөш… Диван дөрөҫ әйтте: яҙмышы уны гел өлөшһөҙ ҡалдыра, тип йәшәне Ғәйнислам – яңы өй уға тәтемәне, етмәһә, яратҡаны менән тормошон бәйләргә ярамаған.

Сәриә Шәйхисламға кейәүгә сыға, тигәнде лә, әлбиттә, Ғәйнислам ауыр кисерҙе… «Миңә тигән башҡаға эләгә»,– был уй мейеһен телеп үткән мәлдә, Зәлифә хәлдәрҙе ҡуйыртыңҡырап ебәрҙе шул…

Диван уның уйҙарын ишеткәндәй, артабан һөйләнде: «Шул хәбәрҙе ишеткән көндө Зәлифәңә беренсе тапҡыр ҡул күтәрҙең, сығырыңдан сығарғайны шул үҙе

лә. Утҡа май һибеп, нисәмә йылдар кәмһетелеп йәшәгәне өсөн үсен дә алмаҡ булғайны, шикелле, тик туҡмаҡ үҙенә төштө.

– Сәриәң ҡайтҡан, ана, бар, йүгер, нисә йылдар көткән кешең ир эйәртеп ҡайтҡан, кемде бит әле, бер туған ағайыңды. Ыстырам. Самый иткән. Һиңә яҡшы булды. Түшәктә ятҡанда, Сәриәңде уйлап, мине интектереүең өсөн Хоҙай апам язаһын бирә, белдеңме! Алйот булғанмын, йәшерәк сағымда уҡ ташлап китер кәрәк ине һине. Бысағыма кәрәк булғанмы, балам атай тип үҫһен, абыш-ҡам булһын, йәнәһе. Айсыуаҡ ниндәй ҡәҙер күрҙе һинән? Шул баланың ни ғә-йебе, бер тапҡыр, исмаһам, һиңә нимә кәрәк, тип һораныңмы, бер уйынсыҡ алып биргәнең булдымы, эшкинмәгән? Үҙеңә йомолоп алаһың да, йөрөйһөң эсемде бошороп…

Уның әйткәндәренең күбеһе хәтеремдә лә юҡ, әммә Зәлифә сарылдап өйгә йүгереп ингәндә, эштең ниндәй боролош алғанын мин шунда уҡ аңлағайным. Зәлифә менән һеҙҙең мөнәсәбәт ҡасан да булһа шартларға тейеш ине бит. Шул мәл ине.

Үлтергәнсе туҡмар инең уны мин булмаһам, икегеҙҙең дә хәле бер ни айы-рырлыҡ булмағас, үҙем яйланым – һинең суҡмарҙай ҡулдарыңдан үҙем ысҡын-дырып алдым Зәлифә киленде».

– Зәлифә киленде, тинеңме? – Ғәйнислам айнығандай булды. – Хәс әсәйем ке-үек итеп әйттең.

«Әйтһәм дә әйтәмдер, өйөгөҙҙә әсәйеңдән кәм йәшәмәнем, шикелле. Ул был өйгә алдараҡ килен булып төшкән, ә мин унан оҙағыраҡ торҙом».

Ғәйнислам өҫтәл артынан торҙо, өйҙө төп яҡҡа һәм ал яҡҡа тигеҙ бүлеп ур-тала ултырған ҙур мейесте ҡулдары менән ипләп кенә һыпырҙы. Иҫ киткес һал-ҡынлыҡтан устары өшөгәндәй булды. Үҙен ғәйепле тойҙо ир. Әсәһе көн дә тул-тырып икмәк бешергән йылы мейес бөгөн ниндәй хәлгә төшкән. Ризыҡтарҙың әле береһен, әле икенсеһен өлгөртөп мәж килгән әсәһе, сәй эскән ваҡыттарында ла мейестән күҙен алмаҫ, ҡарайып киткән, ағартырға кәрәк, тип эсер сәйҙәрен дә эсмәй, эзбизгә тотонор ине. Тәүҙә әсәһе, һуңынан Зәлифә бер ҡарайт-манылар уны, гел ап-аҡ булды ул. Йән өшөткөс һалҡынлыҡ устарынан Ғәйнис-ламдың бөтә тәненә таралды. Тәне өшөмәне, йәне өшөнө. Бер ниндәй ҙә ут йы-лыта алмаҫ…

Ғәйнисламдың яғылған усаҡ ҡаршыһында ултырғыһы килде, йәне йылылыҡ талап итте. Теләге уны тышҡа алып сыҡты, утынлыҡҡа индерҙе. Унда меҫкен ир йораты, нимәгә килгәнен онотҡандай, бер аҙ тапанып торҙо. Бер бөртөк кенә утын булһасы… Утын түгел, хатта тап-маҙар ҙа тапмаҫһың бында, ул бит әллә ҡасан ҡойма таҡталарын яға башлағайны. Ә бөгөн иһә ҡойма таҡталарын ша-ҡарып һындырырға ҡулы күтәрелмәне. Ишек алдында хужаларса үҫкән де-гәнәк-кесерткән араһында күмелеп ҡалған ағас-тапты йыйырға тотондо. Бер ҡосаҡтай ҡыйғыпыр менән генә өйҙө йылытып булмаҫын аңлаһа ла, Ғәйнис-лам ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерҙе.

Ҡалтыранған ҡулдары утты тоҡандырыу менән мейесте тағы тотоп ҡараны, әйтерһең дә, ул шунда уҡ йылынырға тейеш.

«Яйлап, яйлап, балам, – диван тағы телгә килде. – Ғәйнислам аптыраны. Әсә-һенең тауышы ла баһа. Кит, ҡолағына ишетеләләр. Ә йәнһеҙ нәмәнең, дивандың, һөйләшеүе уға тәбиғи тойола, әйтерһең дә шулай тейеш. – Усаҡты терелтеп яҡшы иттең, балам. Өйгә йылылыҡ ҡына бирмәй, йәм дә өҫтәй бит ут… Рәхмәт, тояҡтарым йылынып китте хатта».

Ғәйнислам усаҡ ҡаршыһына сүгәләне. Мейестең ауыҙын япҡыһы килмәне. Ғәжәп бит, донъяла бер нәмә лә яңғыҙ түгел, хатта усаҡты усаҡ иткән дә кәм тигәндә ике утын. Ут мейестә генә түгел, уға ҡаршы ултырған ирҙең йөрәгенә лә

тоҡанды. Әҙәм заты сифатын юғалта башлаған был бахыр кеше күңелендә йәшәү дәрте киренән тоҡанып ике сикәһе ал төҫкә мансылды.

Диван Ғәйнисламдың битендә уйнаған нурҙарҙы мейестәге уттың шәүләһе тип ҡабул итте, шикелле, хәтирәләрен теҙҙе: «Сәриә бер тапҡыр килгәйне бит һеҙгә. Өйләнгәнеңде белгәс, күңеленә урын тапмай өйөгөҙгә килеп ингәйне. Ғәйшә уны түргә үткәрмәне. Бер ғәйепһеҙ ҡыҙ баланың кисерештәрен мин дә күрҙем… Күҙҙәре тулы йәш булһа ла, ғорурлығы тотто уны:

– Ғәйшә апай, Ғәйнисламдың бүләген һеҙгә булһа ла ҡайтарып бирәйем, тигәйнем… – Сәриәнең һүҙҙәре шунда өҙөлдө, бөтә көсө менән үҙен ҡулға алырға тырышып һүҙен дауам итте, – ул, ул… бәхетле булһын, был балдаҡ миңә яҙмаған… – һүҙҙәр тағы өҙөлдө, Сәриә күҙ йәштәрен йотоп, уларҙы ялғап маташты. – Мин ауылға башҡа ҡайтмайым…

Ғәйшәгә был һүҙҙәрҙән һуң еңел дә, ҡыйын да ине… Үҙенең балаһын ҙур бәләнән ҡурсалап ҡалған инә ҡоштай, кәүҙәһе турайып, иңенән бер йөк төшкән кеүек булһа, ошо сит бала алдында үҙен гонаһлы, ныҡ гонаһлы тойҙо. Әллә шул тойғо еңепме, Ғәйшәнең теле:

– Һин Ғәйнислам менән барыбер бәхетле була алмаҫ инең… – тип ысҡындырҙы.

Был һүҙҙәрҙән һуң Сәриә тертләп китте. Ҡолағына ишетелдеме, әсәйең әйттеме, аңламайыраҡ ҡалды. Йәш тулы күҙҙәрен әсәйеңә төбәне лә өнһөҙ генә уларҙың ҡабатланырын көттө. Өндәшергә ҡурҡты, асылған күңелдең кире ябылырынан ҡурҡты… Әсәйең ваҡытында үҙен ҡулға алып өлгөрҙө, уртын тешләне, артығыраҡ ысҡындырғанын һиҙеп, ҡыҙҙан йөҙөн борҙо. Ул кеше хәлен кешегә һөйләмәҫ, бер һүҙле, ғәҙел холоҡло ҡатын булды, бында ла тыйылды. Шул көндө серҙе сер иткән бикле күңел ҡапҡалары асыла яҙған ваҡытта әсәйеңдең, «һин Ғәйнислам менән барыбер бәхетле була алмаҫ инең, тигән һүҙҙәре Сәриәнең күңеленә шик һалды. Һеҙҙең мөнәсәбәттәргә Зәлифә генә түгел, тағы ниндәйҙер башҡа нәмәләрҙең дә ҡаршылығын Сәриә тойомлай ине. Ә инде Ғәйшәнең үҙен ниндәйҙер әйтергә ярамаған яман нәмәне белгән кеүек тотоуы ҡыҙҙың шиктәрен тағы ла көсәйтте. Шулай, Сәриә балдаҡты ҡайтарған көндө өйөгөҙҙән күңеленә шик алып сығып китте.

Шунан һуң ҡапыл юҡҡа сыҡты ауылдың һылыуы. Ҡайҙа икәнлеген әсәһе лә белмәй ине, булһа кәрәк».

Ғәйнислам мейестең ауыҙын япты. Байтаҡ ҡына өнһөҙ ултырҙы, йылылыҡ килгән ерҙән киткеһе килмәнеме, урынынан торманы, шунда ҡалды. Ҡәнәғәтһеҙ ҡарашы өйҙө күҙҙән үткәрҙе. Ҡарашы әүрәрлек бер ни ҙә тапмағас, үҙенең йөҙроҡтарына иғтибар итте. «Йә Хоҙай, Сәриәне иркәләгән ҡулдар, Зәлифәне туҡмаған ҡулдар, һуңғы ваҡытта самогондан башҡаны тотмаған ҡулдар…» Ә ҡулдары иһә, ҡайҙа йәшеренергә белмәгәндәй, уның тубығына аҫылынып ғәйепле ыуаланды. Ҡалтыранған уҫлаптай устарына Ғәйнислам ерәнеп ҡараны.

Ирҙең күңеле тәҡәтһеҙ һыҙланы, выждан ғазабы алҡымынан алды, эскелектән тамам томаланған ирлек намыҫы бар көсөнә Ғәйнисламдың ҡыҙғаныс дәрәжәһен һаҡлап ҡалырға тырышҡандай өҙәләнде. Ошоларҙы күреп ултырған диван уны ҡыҙғаныпмы:

«Бөгөн мин һине танымайым. Иғтибар иттеңме икән, һин бөгөн нисә йылдарҙан һуң ауыҙыңа тамсы ла самогон алманың. Ҡулдарың нисә тапҡыр үрелде, эсмәнең. Тимәк, булдыра алаһың. Эсмәйенсә лә йәшәй алаһың, тим… »,– тип әйтергә баҙнат итте. Ғәйнислам өндәшмәне, дивандың был хәбәренә ҡыуанманы ла, аптыраманы ла, хаяһыҙланып вәғәҙәләр бирергә лә ашыҡманы. Тик дивандан ҡараштарын йәшергән саҡта эскелектән төҫөн юйған ҡыҫыҡ күҙҙәренән генә ниндәйҙер йылы нурҙар һирпелеп ҡалды…

Тимәк, Ғәйнисламға ышаналар, хатта йәнһеҙ диван, һаман уға ышана… Дивандан тыш үҙен аңлай алырлыҡ башҡа нәмәләрҙе эҙләп, өйҙө ҡайтанан байҡаны. Атаһының йортондағы шыҡһыҙлыҡ уның күңел бушлығы менән ауаздаш. Өйҙә күҙгә эленерлек бер нәмә лә ҡалмаған.

Түрҙә, анау мөйөштә, телевизор ултыра торғайны. Ауылда улар иң беренсе алғайны бит. Шулай булмайса, атаһы урмансы, әсәһе уҡытыусы, кемдә аҡса – шуларҙа. Улар ҙа алмаһа, тағы кем алһын телевизор тиклем телевизорҙы. Бөтә ауыл кискә уларға килә торғайны. Кино-маҙар булһынмы, футбол булһынмы, хужаларҙан рөхсәт һорау ҙа юҡ, киләләр ҙә киләләр… Ййлап кешеләр кәмене. Телевизорҙар аҡрынлап һәр өйҙә тиерлек күренә башланы.

Уртала сәскәле балаҫ өҫтөндә ҙур өҫтәл торҙо, түңәрәк өҫтәл. Атаһы үҙ ҡулдары менән эшләгән ине. Ғаиләнең аш өҫтәле лә, күмәкләп дәрес әҙерләү урыны ла була торғайны.

Төпкө яҡтың күрке булған, өсәрҙән ҡатлап ике буйға йәнәш ҡабартып ҡуйылған сигеүле яҫтыҡтар ҙа, ҡаралты-юрғандар урынлашҡан семәрле тимер койка ла юҡҡа сыҡкан. Әсәһе үҙ ҡулдары менән төндәр буйы нағышлағайны яҫтыҡтарҙы.

Ғәйнислам ҡулдарына тағы ла нығыраҡ нәфрәтләнеп ҡараны. Улары, яҡлау эҙләгәндәй, улай-былай әйләнгеләне. Асыулы ҡараштары ҡаршыһындағы тәҙрәләргә төбәлде. Яланғасланып ҡалған тәҙрәләрҙе үрмәкселәр үҙҙәренсә ҡаплап маташҡан тиерһең, уларҙың саңлы ауы быяла аша хатта ҡояш нурҙарын үткәрмәй.

Дивандың уң яғында сүкайып ултырған сәйер бер нәмәгә иғтибар итте Ғәйнислам. Ҡапыл ғына уның нимә икәнен төшөнә алманы. Нимә ул? Әйберҙең гөл икәнен аңлағас, ирҙең иҫе китте. Әсәһенең ҡытай розаһы! Йә Хоҙай, был сәскә лә һулырлыҡ булғас, уның хәле хөрттөр, сөнки, ни тиклем эскән булһа ла, ошо гөлгә һыу ҡоя ине Ғәйнислам. «Мине ташламаған берҙән-бер тере йән»,– тине лә шуға көн дә һыу һипте… Ир өйҙәге шыҡһыҙлыкты һиҫкәндереп ҡысҡырып һорап ҡуйҙы:

– Бөгөн нисәһе ул? – Көтөлмәгән һорауҙан диван да тертләне:

– Ун икенсе июль.

– Нисәнсе йыл, тием? – хужаһының был һорауына яуап биргәндә, дивандың тауышын үҙәктәргә үтерлек һағыш солғаны:

– Ике мең алтынсы йыл.

Ғәйнислам әллә ҡайҙарҙан осоп ҡолап төштөмө ни?! Йә Хоҙай, бер быуат тамамланып, икенсеһе башланған… Ни тиклем ғүмер йәшәлгән, әллә йәшәлмәгәнме?

«Йәшәлгән, Ғәйнислам улым, йәшәлгән. Тик нисек йәшәлгән? – тине диван. – Хоҙай йән биргән булһа, мин ғүмеремдең һәр көнөнөң, һәр сәғәтенең, һәр минутының ҡәҙерен белер инем. Ә һин, тере йән эйәһе, белмәнең, белергә лә тырышманың. «Мин бәхетһеҙ, мин өлөшһөҙ» тинең дә, үҙеңде үҙең йәлләп шул ҡайғыңа баттың. Ә ҡайғыны кесерәйтеп, бәхетте ҙурайтып була, балам. Эйе, һиңә иҫке өй эләкте, ләкин уны һинең көсөң-дәртең яңырта алырлыҡ түгел инеме ни? Ғүмерең етер ине. Эйе, яратмаған ҡатынға өйләндең, уны ла яратырлыҡ ине. Бөгөн сәстәреңде йолҡҡолаһаң да, һин яңғыҙ, йәшәүеңдең мәғәнәһе әллә ҡасан юҡҡа сыкты. Һине был донъяла Ғәйнислам итерлек эргәңдә ҡатының, балаң, туғандарың юҡ. Ни өсөн юҡ, тиһеңме? Сәбәптәр, бәлки, күптер, әммә төп сәбәп һинең үҙеңдә. Үҙең бөтә нәмәнән ваз кистең…»

Ғәйнислам был хаҡ һүҙҙәрҙән ҡасырға уйланымы, тороп ышанысһыҙ ғына аҙымдар менән ишеккә табан ыңғайланы. Унан аша атлай алманы, аяғы тартманы. Ишектең дә бит ишек тиерлеге лә ҡалмаған, әллә нисә тапҡыр

шаҡарып-емерелгәндән һуң бер эләктергесендә генә көскә эләгеп тора. Өңрәйеп ҡалған йоҙаҡ урынынан түбәнерәк урынлашҡан икенсе тотҡаға иғтибар итте Ғәйнислам. Ике тотҡаның шунылына ғына зыян теймәгән, атаһы нисек ҡатып ҡуйһа, шул килеш ҡалған. Ғәйнисламдар әле бәләкәй саҡта, улдарымдың буйы етмәй, тип ошоноһон аҫҡараҡ ҡуйғайны. «Ишекте лә үҙегеҙ асып инмәһәгеҙ, ерле бездельник булырһығыҙ»,– ти торғайны.

Атаһының ҡатылығын бөтә булмышы менән ҡайтанан тойғандай булды Ғәйнислам. Малай саҡтарынан ауыҙ астырып һүҙ әйттермәне, унынса, тик унынса булырға тейеш ине бөтә нәмә. Кемдер нимә менәндер риза булмаһа – шул ризаһыҙлыкты ялҡаулыҡҡа, бешмәгәнлеккә япһарҙы. Балаларының үҙ аллы теләге унын яҡтан һәр саҡ язаға тарттырылды. Ата йылылығы, ата наҙы булмаған был йортта…

«Ә һин Айсыуағыңа ниндәй атай булдың? Ҡатымы, йомшаҡмы? Һин уға битараф инең, ә уныһы ҡатылыҡтан да яманыраҡ» – Дивандың битәрләүе Ғәйнисламды аяуһыҙ сикәләне.

– Яратмаған кешенең балаһын да яратмайым, тип йәшәлгән.

«Ә бала һинеке бит. Әсәһе кем булыуға ла ҡарамай, бала һинеке. Уны күтәрер ваҡыттарында күтәрмәнең, һөйөр саҡтарында һөймәнең… Хәҙер бик күтәргең, һөйгөң киләлер ҙә, һуң шул, һуң… Улың күптән инде малайлыҡтан сыҡты».

Тамсы ла исрафланмаған атайлыҡ хисе Ғәйнисламдың йөрәген ҡуҙғытты. «Был донъяла улым да бар бит әле», тигән уй Ғәйнисламдың эсенә йылы өрҙө. Ир турайып баҫты. Балаһын ҡурсыу, һаҡлау теләге унын ҡараштарына уяулыҡ осҡондарын ҡабыҙҙы. Ул ишек аша атланы. Тышҡа сыҡты. Урамға сығырға батырсылыҡ итмәне, күршеләренең күҙенә күренергә оялды. Нисә йылдарҙан һуң уны намыҫы тотто. Ауыл буйлап эсергә эҙләп йөрөүе уға сирҡаныс тойолдо. Бер аҙ тапанды ла кире өйгә инде.

Иртәгә барыр. Әҙерәк кеше рәтенә керергә кәрәк, был ҡиәфәттә сыҡһа, самогон эҙләп йөрөй, тип уйлаясаҡтар, Айсыуаҡ улына барыуына ышанмаясаҡтар…

Ғәйнислам йыуынғыс эргәһендәге көҙгөгә күҙ һалды, үҙен танымады. Көҙгөнән уға шешенгән, унда-бында ҡутырлы урындары булған, йәмһеҙ һаҡаллы, майланып ҡатҡан сәсле йонсоу бер йөҙ ҡарай ине. «Иртәгә лә иртәрәк булыр әле, берәй аҙна-ун көндән барырмын улыма, Зәлифәмә…» тигән һығымтаға ул үҙе лә ышанманы, ҡараштарын көҙгөнән тиҙерәк ҡасырҙы. Ауыр атлап, башын алға һәлендереп, ярым емерек ике ултырғыстың береһенә киренән барып ултырҙы.

Диван Ғәйнисламдың стаканға тағы үрелеренән ҡурҡтымы, киренән бошонҡолоҡҡа сума башлаған хужаһын аңына килтерергә иттеме, ҡабаланыңҡырап, уға хәлдәрҙе артабан һөйләне.

«Һин Зәлифәне туҡмаған көндө Сәриә ысынлап та ҡайтҡайны. Шәйхисламға кейәүгә сығырға.

Улар бер цехта эшләне. Бер көндө әхирәте: «Сәриә, мин һине бер шәп егет менән таныштырам»,– тип Шәйхислам ағайыңа алып килгәс, Сәриә менән ниҙер булды. Инде онотола башлаған күңел яралары киренән һулҡылдап һыҙлай башланы. Йәнендә рәхәтлек һәм ҡыйынлыҡ тойғолары аңлайышһыҙ бәрелеште. Мөхәббәт таты ҡайтанан тәне буйлап таралды. Ҡыҙҙың һүнгән мөхәббәт ҡуҙҙары киренән терелде, терелде лә унын йөрәген онотола башлаған ғазап уттарына яңынан һалды… Ҡыҙҙың ҡараштары онотолоп Шәйхисламдан һинең һыҙаттарҙы эҙләне. Ә уртаҡ һыҙаттар иҫ китмәле күп булып сыҡты: шул уҡ

һөҙөп ҡараған күҙҙәр, шул уҡ ҡуйы ҡара бөҙрә сәстәр, шул уҡ бүлтеү ирендәр. Ымһындырғыс бүлтеү ирендәр…

Ҡыҙ һиҙҙертмәҫкә тырышты, ни тиһәң дә, араларында, өйләнгән булһаң да, һин тора инең.

Сәриә, эске кисерештәрен бар көсөнә эскә биклән, тыштан көлдө:

– Быларҙың нәҫеле мине бер тапҡыр алдағайны бит әле.

– Нисек? – Шәйхислам ысынлап аптыраны.

– Ғәйнислам ҡустығыҙ аңлатмайса-нитмәйсә Зәлифә һеңлемде алды ла!.. хәҙер белмәмешкә һалышаһығыҙ. – Сәриәнең тауышында үпкә генә түгел, рәнйеү ҙә сағылып ҡалды.

– Тороп тор, һеңлем, хәҙер асыҡлаңҡырап һөйлә әле ағайыңа. – Шәйхислам һеңлеһе өсөн ысынлап борсолған ағайҙарса әйтте был һүҙҙәрен.

Сәриә, асылып китеп, әллә ҡасанғы хәл-ваҡиғаларҙы теҙеп һөйләне лә ташланы.

Шул көндө ағайың һинең күҙҙәреңдәге төпһөҙ һағыштың серен төшөндө. Тимәк, һаман да Сәриәңде онота алмайһың. Тимәк, Зәлифә киленде тамсы ла яратмайһың, ярата алмайһың, тигән һығымта яһаны ул.

Эшкә әүрәп, Сәриәне онотҡан һымаҡ булһа ла, көндән-көн уйҙары ныҡыраҡ тик унын тирәһендә генә өйөрөлдө. Тора-бара һинең Сәриәң ағайыңдың да йөрәген тотош биләп алды. Сабырлыҡтарының сигенә сығып Сәриәнең ишеген ҡағыр мәлдәрҙә, һиңә ҡарата туғанлыҡ хисе уны тотоп килде. Шулай күпме дауам итер ине инде, Таймас апаң[*] килмәһә.

Таймас ул көндө кискәрәк кенә килде Шәйхисламға. Ҡауғараҡ холоҡло был туғанын һирәк күрһә лә, Шәйхисламда уның килеүе ниндәйҙер ғорурлыҡ уятты. Шулай булмай ни, Таймас апағыҙ, күптәр өсөн буй етмәҫлек Таймас Дәминдәрович ине бит. Гел юғары урындарҙа эшләгән туғаның ерҙә һинең барлығыңды иҫләп килһен әле, маһаймаҫтар ҙа маһайыр ундай мәлдәрҙә, бигерәк тә тыуған яҡтарҙан ситтә йөрөгәндә.

Ғәҙәттә бындай осрашыуҙар ныҡ күтәренке кәйефтә, шау-шыулыраҡ була бит ул. Таймас менән Шәйхислам да ах та ух килеп бер-береһенең хәл-әхүәлен һорашҡандан һуң, Таймас:

– Шәйхислам улым, бар әле, берәй ярты алып кил. Осрашыу хөрмәтенә эсмәй булмай, эсмәй булмай… – тине кеҫәһенән аҡсаларын сығарып. – Инәйеңдән гел ысҡынып булмай, ну бөгөн булдырҙыҡ.

– Эй, Таймас апа, кит әле, һиңә генә бер яртым да юҡ, тип уйлайһыңмы, мин бит элекке студент түгел, хәҙер беҙҙә лә араҡы ла ҡунып сыға.

– Күреп торам, күреп торам, араҡы ғына һаман ҡунып сыға икән, ну берәй йәш ҡыҙ ҙа ҡунып сыҡһа, зерә шәп булыр ине бит әй! – Таймастың көслө тауышы бөтә ятаҡты яңғыратты шикелле, ул рәхәтләнеп көлдө. Шунан етәкселәрсә етди төҫ менән: – Ҡасан өйләнәһең, һин, ҡартлас? – тип һораны.

Шәйхислам ағайың был һорауҙан ҡотолоу юлдарының барыһын да белгән, тәжрибәле белгес һымаҡ:

– Бына бер матур ғына килен табып бирһәң, бөгөн үк шуға өйләнәм дә ҡуям, – тине, йәнәһе, эш һиндә генә ҡалды. Таймас Шәйхисламға хәйләкәр ҡараш ташлап:

– Шулаймы? – тине ҡапыл етдиләнеп һәм: – Ни, Шәйхислам улым, фатир мәсьәләһе буйынса килгәйнем. Сиратың еткән. Эшеңдә ҡаршы түгелдәр, унда

---

[*] *Апа – атайыңдың, әсәйеңдең ағаһы, йәки уларҙан оло ир кеше, шул кешегә өндәшеү һүҙе* (диалект).

һине абруйың да күтәрә. Тик бер сетерекле яғы бар был эштең, сират буйынса буйҙаҡтар фатирға дәғүә итә алмай… Шулай, улан, өйләнерҙәй кешең булһа, әллә йәһәтләйекме, тип килеп ултырыуым…

– Таймас апа, улай ҡапыл эшләнә торған эш түгел бит әле…

– Тимәк, күңел иткән кешең бар, әйҙә йәһәтлә.

Шәйхислам икеләнде, улай ҡабаланырға кәрәк булыр тип уйламағайны:

– Бар бер ҡыҙ, тик мин уны алам тип әйтерҙән алда, хатта оҡшатам, тип тә әйткәнем юҡ.

– Ебегән, инде башыңа сал төшә башлаған, был сираттан ятып ҡалһаң, аръяғына бер нәмә лә вәғәҙә итә алмайым, пенсияға сығырға ваҡыт етте.

Шул төндә Сәриә менән Шәйхислам ағайың аңлаштылар. Береһе һөйөү утында ысынлап янып, икенсеһе һүнгән һөйөүенең шәүләһендә булһа ла йылынырға өмөт итеп ҡайтып төшкәйнеләр һин Зәлифәне тыҡмаған көндө».

– Шәйхислам ағайым һоғонған икән, улай булғас, өлөштөң еллеһен…– Ғәйнислам көлөргә итте, килеп сыҡманы. Диван уның был ҡылығын оҡшатманы, уҫалыраҡ юҫыҡта дауам итте:

«Белмәйем, тегендә нисек аңлашҡандарҙыр, тик бында килгәндәрендә ул һөйләшеүгә береһе лә кире ҡайтманы. Ул төндө һине милиция алып китте, Зәлифә килен больницаға эләкте, Айсыуаҡты алып ҡайтып ҡарағайнылар, өйҙә йоҡлайым тип, эңер төшкәс ҡайтып инде улың. Һиҙҙермәһә лә, һеҙҙең Зәлифә менән өйҙә булыуығыҙға өмөт иткәйне бәләкәс. Өмөтө аҡланмағас, уныһынбыныһын оҡшатмай, әсәйеңде ҡаңғыртты. «Әсәйем урынды улайтып һалмай. Әсәйем аяҡтарымды йыуымайынса карауатҡа мендермәй. Әсәйем йоҡлар алдынан миңә әкиәт уҡый…» Өләсәһе ыңғайына торғас, яйлап тынысланғандай булһа ла, оҙаҡ йоҡламаны улың. Әсәйең көрһөнә-көрһөнә Айсыуаҡҡа әллә нисә әкиәт уҡыны. Тегеһе, өләсәһенең уҡығанын килештермәй, ҡабат-ҡабат яңынан башлатты. Дөрөҫ һөйләмәйһең, улай түгел, тип мыжыны.

– Әсәйем үпәс итмәйенсә йоҡламайым, – бәләкәс баланың ғәҙәти талабы. Ейәненең был һүҙҙәренә өләсәй булған кеше аптыраманы:

– Ҡана, үҙем әсәйең өсөн үпәс итәйем, – тине баланың бер яҡ сикәһенә ирендәре менән иркә ҡағылып. – Атайың өсөн был яғыңдан әп итәйем, – тағы ынтылғайны, сабый тыпырсынып ситкә тартылды:

– Атайым мине үпәс итһә, уның йөрәге ирей, тине әсәйем, ә мин беләм, йөрәк ireп аҡһа, ул ҡар һымаҡ бөтә, йөрәге ҡалмаһа, атайым үлә… – Айсыуаҡтың был һүҙҙәре Ғәйшәнең аңын телеп үтте. Дөрөҫ әйтте бала. Ғәйнисламының йөрәге туңып ҡына тора ла баһа, уны иретерлек саралрҙың бөтөнләй булмауы мөмкин түгелдер. Кем генә беләлер инде ул сараны… Ғәйшәнең күҙҙәренән әсе күҙ йәштәре сикәләрен әсеттереп туҡтауһыҙ аҡтылар, үкереп илар ине, янында ейәне ята, алғы яҡта ире менән ҡайнағаһы ултыра, шуға барлыҡ хәсрәт-ғазаптарын күҙ йәштәре менән бергә эсенә йотто. Был тиклем ауыр һағышҡа сабыр йөрәге лә түҙмәне, йә бына-бына күкрәгенән ысҡынып төшөр хәлдә, сығырынан сығып тәҡәтһеҙ типте, йә бөтөнләй тибешен аҡрынайтып туҡтар сиктәргә етте. Әсә йөрәге буштан-бушҡа ҡауғаланмай, Ғәйшә тертләне, бар хафаларын күңеленән ҡыуып сығарырға маташты: «Ғәйнисламым ғына имен булһын, Ғәйнисламым ғына имен булһын…» Шул һүҙҙәрҙе шыбырлағанда ул миңә тағы йөҙтүбән ауҙы. Яҡын күрә инем бит, шуға хәлһеҙләнеп ҡолағанына башта ҡыуандым да шикелле. Уның матур йөҙөнөң миңә ҡағылыуы, рәтһеҙерәк булһа ла, әсе һулыштары миңә танһыҡ ине. Һәр ваҡыттағыса торор, башта үҙе йыуыныр, шунан мине таҙартыр тип көттөм, ә ул ҡабат ҡалҡынманы. Тын алыштары өҙөлдө, хәлһеҙ типкән йөрәккенәһе ҡауғаланып бер ике туланы ла, бөтөнләйгә

туҡтаны. Уны юғалта башлауымды аңлағас, үҙем этеп торғоҙорға тырыштым, сибек кәүҙәһен күтәрә яҙып дер һелкеттем, аңына килтерергә маташтым. Тик әсәйең күҙҙәрен башҡа асманы. Мин бар көсөмә ҡысҡырҙым, атайың менән Таймасты саҡырҙым, улар ишетмәне.

Шулай, балам, әсәйең минең ҡуйынымда үтте. Төн сыҡҡансы уның йәнһеҙ кәүҙәһен ҡәҙерләп, һаҡ ҡына ҡыҫып ҡосаҡлап өнһөҙ генә зар иланым. Ә атайың менән Таймас апаң алғы яҡтағы өҫтәл артына ҡара-ҡаршы ултырып алғандар ҙа, тапланған нәҫелдәренең артабанғы яҙмышын күҙалларға тырышҡандай, бер-береһенә өнһөҙ текәлгәндәр. Һин шул саҡ күрһәң икән... Атайыңдың усал ҡараштары Таймасҡа текләһә, Таймастың дәрәжәлелеге һыпырып алғандай юҡҡа сыҡҡан, күҙҙәре ғәйепле рәүештә аҫҡа төбәлгән. Әйтерһең дә тегеләр бер-береһе менән аралашырға ваҡыт тапмағандары өсөн Ваҡыт алдында яуап тоталар.

Беләһеңме, Ғәйнислам, Хоҙай кешегә ваҡытты буштан-бушҡа ғына бирмәй. Был изге төшөнсә кеше өсөн иң кәрәкле һәм иң ҡәҙерле нәмә булырға тейеш. «Ваҡыт юҡ»,– тип әйткән кеше ныҡ хаталана, ул донъяла йәшәй икән, тимәк, уның үҙенә тәғәйен ваҡыты, мәле бар... Ҡан-ҡәрҙәшлектә, туғанлыҡта аралашырға ваҡыт, форсат табыу икеләтә, өсләтә мөһим. Туғандар мәнфәғәте, улар теләйме, теләмәйме, һәр саҡ уртаҡ ҡала. Шуға ла туғандар мөнәсәбәтендә ваҡыт юҡлығына һылтанғандар ныҡ яңылыша... Туғандарына мәлендә кәрәкле һүҙҙәрҙе әйтмәгән, йәки кәрәкле һүҙҙәрен тыңламаған кешеләрҙе йыш ҡына Ваҡыт яуапҡа тарттыра.

Иртәгәһенә әсәйеңде ерләнеләр.

Атайың уның үлемен бик ауыр кисерҙе. Ғорурлығы етеп ғәзиз кешеһен юғалтыуҙа берәүҙе лә ғәйепләмәне, тик Таймас барыбер килененең үлемен үҙенән күрҙе. Шулай, ҡайнағаһының йәшәү ҡиммәттәренә ҡарашын үҙгәртеп китте мәрхүмә әсәйең.

Ғүмере буйы юғары урындарҙа эшләгән Таймас Дәминдәрович шул көндө бар тормошон күңеле аша үткәрҙе. Тормошоноң мәғәнәһе бөтөнләй булмауына төшөнөп өҙгөләнде.

Балалары булманы уларҙың, ҡатыны түлһеҙ ине. Ул яуаплы вазифа биләй, ҡатыны – фән кешеһе. «Беҙ – хөкүмәт кешеләре»,– тинеләр ҙә баш баҫып көнө-төнө эшләнеләр. Ә ҡуйылған маҡсаттарының осона сығырлыҡ түгел ине, буғай.

Таймас ситкә йөрөмәне, биографияһына һүҙ теймәҫлек булырға тейеш. Хөкүмәт шулай ҡуша, етмәһә, партия ағзаһы ла булғас, ундай-былдай эштең булыуы мөмкин дә түгел.

Фәғилә менән дә бәйләнешен үҙен партияға алған көндө үк өҙҙө. Шунһыҙ ярамай. Фәғиләһе аңланы, башҡа бер ҙә күҙенә салынманы. Таймасты үрләткәндән үрләттеләр. Ғүмер буйына эшендә алмаштырғыһыҙ белгес булды. Үкенерлек йәшәмәгән кеүек ине. Тик ҡайһылай яңылышҡан.

Таймастың йөрәге шул көндәрҙә урынынан ҡупты. Кеше тиклем кешенең яҙмышында үҙенде ғәйепле тойоу еңел тиһеңме? Ә ул нисәмә кешене бәхетһеҙ итте, кемдәрҙе бит әле, үҙенең ҡыҙын, ҡустыһын, ҡустыһының балаларын, киленен, ҡасандыр яратҡан кешеһен...»

– Гонаһ ҡылма, гонаһың нәҫелеңә төшөр, ти торғайны өләсәй мәрхүмә, – тине Ғәйнислам. Ир өндәшмәгәс, диван һүҙен дауам итте:

«Нәҫел төшөнсәһе һеҙҙең тоҡомда юғары тора. Быны раҫлай ҙа алам.

Йәшерәк сағында атайың Таймас ағаһын бер ҡайтҡанында өйөгөҙҙән ҡыуып сығарҙы. Бөтәһенә лә шул нәҫел бәләһе инде. Таймас олатайығыҙҙан ҡалған ошо йортто һатып, аҡсаһын бүлешмәк булып, матур ғына һүҙ башлағайны,

атайың нык туҙынды. «Йә ҡайтып йәшәйһең, йә ҡалдырып китәһең, нәҫел нигеҙенә сит-яттарҙың аяғын да баҫтырасағым юҡ, миндә улдар үҫә, һиндә лә булыр»,– тине. Таймас был фекерҙәрҙең иҫкелегенә баҫым яһап ҡарағайны, атайың оторо ҡыҙҙы: «Атай нигеҙе лә беҙҙе тотмаһа, беҙҙе нимә тотор, нимә берләштерер, әсәй-атайҙың рухын ҡайҙа итмәк булаһың, – тине. – Теге донъяла әсәй менән атайға ни күҙең менән ҡарарһың, оятһыҙ, сығып кит, әҙәм аҡтығы…»

Таймас атайыңда нәҫелем, нигеҙем тигән хистең көслөлөгөн белгәнгә күрә һүҙҙе артыҡ ҡуйыртманы, әйберҙәрен алды ла сыҡты ла китте. Шул китеүҙән ауылға башҡа ҡайтманы. Тыштан үҙенекен һөйләһә лә, эсенән генә ҡустыһы менән килешә ине ул, ни тиһәң дә бер ата-әсә тәрбиәһендә үҫтеләр бит.

Ваҡытында Таймас тормошон тик тигеҙ юлдарҙан ғына алып барырға тырышып, туғандарының, һөйгәненең хис-тойғолары менән иҫәпләшмәне.

Бурыс ҡайтарыу, бөтә нәмә өсөн дә түләү кәрәклеген оноткан дәрәжәле туғаның да шул көндәрҙә үҙ хөкөмөн алды, тик артығыраҡ түләне ул.

Нижневартовскиға ҡайтып барғандарында Таймастың машинаһы ҡаршы килгән КАМаз аҫтына инеп киткән. Таймас апаңды ла, Шәйхислам ағайыңды ла бер көндә, әсәйеңдән ун көн ҡала, ерләнеләр. Был тиклем юғалтыуҙарҙан атайың аҡылдан яҙыр сиккә етеп түшәккә йығылды.

Шул ҡайғыны ла һин тейешенсә күтәрә алманың бит, бөтә ғәйепте Зәлифәлә күрҙең. Унып түҙемлеге сикһеҙ түгел ине, Айсыуаҡты алды ла әсәләренә ҡайтты ла китте…

Шулай итеп, Зәлифә килендең урынына шешә, Айсыуаҡ улыңдың урынына ҡырлы стакан ултырттың».

Ғәйнислам өйҙөң эсендә тегендә-бында аунап ятҡан шешәләргә ытырғанып ҡараны. Стакан тигәненең дә һуңғыһы – яртылаш ярылған, бысрағына ҡаҡашып ҡатыуына ҡарамай, ултырғыста хужаларса урын алған. Әйтерһең дә унан да мөһимерәге был өйҙә юҡ. Ғәйнислам уны тәүҙә ситкә этеп ултыртты, стакан шунда ла маһайыуын ҡуймағас, йән асыуы менән стенаға атып бәрҙе. Селтеррр… Диван өҫтөнә быяла ватыҡтары ҡойолоп төштө. Ғәйнислам үҙе лә һиҫкәнеп китте, ырғып торҙо ла, дивандан ярсыҡтарҙы йыйып алды. Диван «Зыян юҡ, зыян юҡ»,– тигәндәй, Ғәйнисламды тынысландырырға тырышты. Тик Ғәйнислам менән ниҙер булды, кинәт уның йөҙө үҙгәрҙе, хәрәкәттәре киҫкенләште. Быяла ватыҡтарын устарына ҡыҫты. Ҡулдарынан ҡан һаркты.

– Минең йәшәргә хаҡым юҡ, минең был донъяла йәшәргә хаҡым юҡ, мин…

Ғәйнислам үҙ алдына һөйләнеп атылып тышҡа сығып китте. Күп тә үтмәй, бер ҡосаҡ аламаны ҡайҙандыр һөйрәп индереп өйҙөң уртаһына бырағтырҙы. Тағы сыҡты, тағы инеп өйөмгә иҫке-моҫҡо ташланы. Диван ниндәйҙер төҙәтеп булмаҫлыҡ хәл буласағын абайлағандай:

«Ҡуй, балам, кем яңылышмай, тыныслан. Йәшһең бит әле, тормошоңдо яңынан башларға ла һуң түгел», – тине.

Ғәйнислам өйөмдө урап ҡарап сыҡты. Оҡшатманы. Уның иң өҫтөнә ярым емерек ултырғыстарҙы ташланы. Шунда ғына эшенән ҡәнәғәт ҡалды, шикелле, диванға яуап ҡайтарҙы:

– Борсолма, һине тышҡа сығарып ҡалдырам, берәйһе алыр әле, файҙаң тейерлек, әле әллә нисә хужаға изгелегең тейер. Минең һымаҡ йүнһеҙгә ҡарап, йөрәгеңде бөтөрөп ултырғансы…

«Балаҡай, миндә йөрәк юҡ бит, мин йорт йыһазы ғына…»

– Бар, һиндә ниндәйерәк йөрәк бар, һин хатта күҙ алдына килтермәйһең.

Ғәйнислам теге ҡалмаларҙы үртәгәс кенә аңланы диван хәлдәрҙең мөшкөл икәнен, тик телһеҙ шаһит булыуҙан башҡаға эшкинмәгәс, ни эшләһен.

Ут көсәйгән һайын Ғәйнислам да нығыраҡ ҡыҙҙы. Яна башлаған ҡалмаларҙы буш өй буйлап тегеләй-былай һөйрәп ҡуҙғытты, үҙе шашып тантана итте:

– Ян, ян әйҙә миңә тигән өлөш! Мине лә ҡуша яндыр, өлөш һораусы булмаҫ, еңел ҡотолорһоғоҙ... Бөтәгеҙ ҙә ҡотолор. Ғәлиәстең тоҡомон бысратыусы эскесенән ҡотолорһоғоҙ, малды һатып эсеүсе эскесенән ҡотолорһоғоҙ, эшкинмәгән ата ялҡауҙан ҡотолорһоғоҙ...

Ғәйнислам ярһып тағы әллә нәмәләр әйтте. Тик көсәйгәндән-көсәйгән ут уның үҙен дә, һүҙҙәрен дә йота башлағайны.

***

–...Эскесегә буҡ булһынмы, ята, ана. Тотош ауылды үртәп ебәрә яҙҙы. Әйттем инде Ғәлиәскә, йорттарын бик яҡын һалаһың, тиеп, яҡын йәшәйҙәр, ҡатнашалар, имеш. Бер төптән ҡорота яҙҙы беҙҙе бынау алкашы...

Ошо һүҙҙәр Ғәйнисламды ысынбарлыҡҡа алып ҡайтты, айнытты. Ул күҙҙәрен асты. «Йә Хоҙай, теге донъяла ла әрләнер ҙә йөрөр микән ни? Үлгәс, бер ни кәрәкмәҫ, бер кем борсомаҫ»,– тиһә...

Бәй, бында ҡояш та бар икән, ағастар, өйҙәр, кешеләр ҙә шул уҡ... Ғәйнислам ҡалҡынып ултырҙы. Тирә-яғын байҡаны. Улай-былай йүгергеләгән күршекүләнен таныны. Уларҙың ғауғалашҡанына аптыраны.

Әллә ни тиклем халыҡ уларҙың ихатаһында геү килә, кемеһе биҙрә тотҡан, кемеһе көрәк эләктергән. Ғәйнислам да шул яҡҡа ҡараны. Нисәмә йылдар ул йәшәгән өй урынында бүрәнәләре ҡап-ҡара булып көйгән, тәҙрә, ишек урындарынан аҡ төтөн быҫҡыған, ҡыйығы бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан йорт ғәләмәте ултыра. Ирҙең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ғәйнисламды аяҡтары өйө янына уҡ алып барҙы, ҡулдары ҡарайған бүрәнәләрҙе һыйпаны. Ғәфү итеүен һорағандай, ҡараштары аҫтан өҫкә төбәлде. Өй, янып-үртәлһә лә, мөһабәтлеген юғалтмағайны, Ғәйнисламға рәнйеүле ҡараған кеүек тойолдо. Бахыр ир бөтә ғәйептәрен танырға әҙер ине, хаталарын төҙәтергә рөхсәт итһәләр, бөтәһен эшләр хәлгә етте.

«Диван! Диванды ҡотҡарырға кәрәк!..» – Ғәйнислам ишек аша эскә ташланды, кешеләр уны тотоп өлгөрҙө. Ул бар көсөнә уларҙан ысҡынмаҡ булды. Тик көслө ҡулдар уны ебәрмәне, шунда ул:

– Диван, диванды алып сығырға кәрәк, – тине ергә сүгәләп.

– Һуң, үҙең алып сыҡҡанһың бит уны, шунда йоҡлап ята инең дә... – тине Нурислам ағаһы, бая Ғәйнислам ятҡан яҡҡа ымлап. Ихата уртаһында өйгә арты менән торған диванды күргәс, Ғәйнислам икеләнде:

– Мин түгел, ул мине алып сыҡҡандыр, Нурислам ағай.

– Эй, ҡустым, диван ни эшләп һине алып сыҡһын. Атламай заһа?! – Ағаһының һүҙҙәрендә тәрән һағыш сағылды, ысынлап йәлләй ине ул ҡустыһын был мәлдә.

Ғәйнислам башҡа өндәшмәне, уны барыбер аңламаҫтарын төшөндө. Бәлки, ул ысынлап та һаташалыр...

Ул ипләп кенә аяҡтарына тороп баҫты, ҡараштары менән ниҙер эҙләгәндәй, йән-яғына ҡаранды. Башын юғары күтәреп, халыҡ өйөрөн күкрәге менән йырып, атаһынан ҡалған оҫтаханаға ҡарай йүнәлде. Һирәк асылған ишекте ауыр шығырлатып эскә үтте. Әҙгә генә туҡталғандан һуң мөйөштән инде тут баҫҡан балтаны ҡулына алды. Ҡалтыранған ҡулдары менән уның үткерлеген самаланы.

Үҙенә тигән өлөштө үҙе яһап аласаҡ, өр-яңынан, ялтыратып ултыртасаҡ ул өйөн туғандары менән бер рәткә.

**Рәсүл СӘҒИТОВ**

# ҠЫЛЫҠ

ХИКӘЙӘ

Кеше тигәнең, ғәфү итегеҙ, башҡа йән эйәләренән әллә ни ары атламаған инде: бәғзе вәкилдәре бер өйрәнгәнен ҡуймай, шунан һис туймай. Арттырып та ебәрмәй микән әле… Билләһи, аша һуҡтыралыр. Ә бүтәндәрҙең, мәхлүктәрҙең, мейеһе ул хәтлемгә үк эшкинмәй.

Әҙәм балаһы нишләй? Үҙебеҙ шаһит: ярамағанлығын белә-күрә дауам итә! Ҡайһылыр бер дәүләттә, имеш, кеше йөрөргә тейеш урындарҙы һуҡмаҡ башта, төҙөлөш башланғанса, нисек һалынған, шулай һуғалар, ти бит. Шулай дөрөҫтөр ул, тигән уйҙы тормош күренештәре һаман нығыта ла бара. Юғиһә, быйыл ҡыш, ана, ниндәй хәл булды…

…Гараж алып ултыртҡайны. Көҙҙөң, ҡаранан уҙып, аҡҡа әйләнә башлаған сағы. Ер өҫтө, айырыуса иртәләрен, аяҡ кейемдәрен таптыр-топтор атлатырлыҡ туң хәленә еткән мәлдә, саҡ-саҡ урынлаштырып өлгөрҙө. Яҙа-йоҙа эштең ни, билдәле инде, рәте булыңҡыраманы: ике яҡҡа асмалы ҡапҡаһы тәпәшерәк эленде һәм быының оронсоғо тәүге етди ҡарҙан уҡ беленде. Донъя көткәндә кәртәләрҙе гел генә емереп барып та булмай бит, ҡайһы саҡ улар алдында баш эйергә лә мәжбүрһең. Әлеге күренеш – шуға миҫал.

Күнде хужа: ысын нигеҙ ҡороп, бейегәйткәнгә тиклем, тимәк, киләһе миҙгелгәсә, һыҙырылмай ғына асылһындар өсөн, алдары таба төбөләй тап-таҡыр булырға тейеш. Шулай итә лә башланы: көн һайын тигәндәй, кисен эштән ҡайтҡас, ут яҡтыртып ҡуя ла, рәхәтләнеп ҡар көрәй. Ап-аҡ ҡына күбәләктәр шул мәлдә наҙланып төшә торһа, бигерәк хозур: электр нурҙары тапҡырына етһәләр, ҡыуанышып алып китә үҙҙәре: шуғыраҡ холоҡлолары, ана, ыҡшанлап бер була, етдирәк сырайлылары ла яҡтыраҡ урында оҙағыраҡ ҡалырға тырыша. Ләкин тәбиғәт ҡанундарына бөтәһе лә буйһонорға мәжбүр, әлбиттә. Иртәрәкмеһуңыраҡмы, барыбер ергә төшөп яталар. Ғырш… Ғырш… Баҙарҙан киң генә фанера көрәк алып ҡайтҡайны, шуның менән күбәләктәрҙе, әрләмәй генә, хатта һаҡлап ҡыналыр әле, ике яҡҡа матурлап һала.

Бындай ваҡытта ысын мәғәнәһендәге ләззәт кисерә ул! Кисерә, сөнки, беренсенән, эштә ҡатып ҡайтҡан башы ял итә. Икенсенән, файҙалы ғәмәл башҡара: көрәк артынан ана ниндәй тигеҙлек хасиллана. Өсөнсөнән… Ә быныһы инде тыуған ауылына бәйле. Шөғөл бала сағынан хуш уның күңеленә. Бесән эшләүҙе, картуф күмеүҙе, ғәйепкә сығармағыҙ, хуп күрмәй инде, юҡ, күрмәй. Сапты,

*Рәсүл Сәғитов Башҡортостан радиоһында ижтимағи-сәйәси тапшырыуҙар алып бара. Рәсәй һәм Башҡортостан журналистар берлеге ағзаһы, республиканың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге хөкүмәт премияһы лауреаты. Ике проза китабы, радиоспектаклдәр авторы.*

йыйҙы, утаны. Шунһыҙ әмәле лә булмай торғайны. Тик быларҙы ашҡынып камилламаны. Ә бына ҡар көрәүҙе-е… Быны инде ул эш тимәне, тимәй ҙә, әйткәс-әйтәйек: эш түбәнлегенә төшөрмәй. Эйе, эйе. Алдамай, ана тора Ҡояш: был, унынса, айырым, юғары бер ғәмәл. Сит ил кешеләренең «хобби» тигәненә тура килмәй микән әле? Мәҫәлән, шаҡмаҡ уйнаған ише. Ятраҡас, гүзәл итеп, урын-еренә еткереп башҡара ла, ҡар диуарҙар тип-тигеҙ, туп-тура хасиллана!

Яуындан һуң урам буйлап уҙ: кемдең холҡо ниндәйлеген асыҡ күрерһең. Берәү бөтөнләй көрәмәгән, тубыҡ тиңенте көрттө, эре-эре атлап, йырып сыҡҡан да эшкә киткән. Артынан, уның юлынан ғына, ҡатыны, балалары уҙған. Күршеһе көрәгән былай: тиҙ генә ике яҡлап сикәләп сыҡҡан. Сикәләре һөҙәк кенә – көрәк юлдары аңрайып күренеп ята. Ә бына был абзы-ы-й… Быныһы һис йөй ҡалдырмай башҡарып ҡуйған.

Заманында, ҡалаға уҡырға килгәс, ауыл тормошон һағынып бер булды. Утын ярғыһы, ихата таҙартҡыһы, миҙгелдәр алмашынғанын асығыраҡ күргеһе килде. Ятаҡ бүлмәһенең тышында уныҡы ғына булған бер ҡарыш та ер булмауына оҙаҡ өйрәнә алманы. Бүлмәне лә унан башҡа йәнә өс егет биләй. Етмәһә, шул дүрттән бер өлөшө лә – ваҡытлыса биләмә.

Стипендияның бик тиҙ бөтә торған нәмә икәнлеге сентябрь аҙағында уҡ беленде. Әрме хеҙмәтенән ҡайтҡас, ике ай эшләп алғайны, башта шунан ҡалған йыйынтыҡҡа таянды, һуңыраҡ әсәһе һалыштыра башланы, ише-тошо менән тимер юл вокзалына вагон бушатырға ла барып ҡайтҡайнылар. Әммә былар, кем әйтмешләй, ҡыҫҡа мөҙҙәтле саралар ине. Ә оҙайлы арауыҡты күҙҙә тотоу – даими эшкә урынлашыу ул. Ҡайҙа, кем булып? Ундай һорауҙар бирелмәне, сөнки көнүҙәк түгел ине. Урам һепереүсе булып, әлбиттә! Февраль бит тышта, буранлы ай. Ҡышҡы ял тамамланып, уҡый башлау менән, эшкә лә төштө. Урам һепереүсе тиһәк тә, улай уҡ түгел – хөкүмәт биналарының береһе алдын йыйыштыра. Дәртләнеп, ҡәһәтләнеп көрәй! Тик бер яғы эсен бошора: «архитектура»һын үҙе теләгәнсә ҡора алмай. Ул, «архитектура», бында бөтөнләй булырға тейеш түгел: таң һарыһынан барып, ялтыратып ҡуйыуына ғына артынан трактор ҙа дырылдап килеп етә, ышырып алып та китә. Унан ҡалғанын яңынан таҙартырға тура килә. Шундуҡ машинаға тейәп, ҡала ситенә сығаралар. Төнөн генә яуған ынйылай ҡар бөртөктәре, бөтәһе бергә буталып, һорғолт ҡатнашмаға әүерелә. Тәғәйен урындарына барып етеп, ҡырҡ йыйынтыҡ араһына инеп киткәс, нимәгә әйләнгәндәрен күҙ алдына килтереүҙән, көрәүсенең ҡомары айырата кәмей. Йәғни, ул ваҡыттағы көрәү – барыбер аҡса эшләү ысулы ғына булды.

Ә-ә-ә, ауыл тигәндә әйтеп бөтөрмәнек, оятыраҡ булһа ла, шуны ла мәғлүм итеп ҡуяйыҡ инде: каникулғамы, байрамғамы ҡайтыр алдынан, өйҙәгеләргә шылтыратып, ҡаты итеп иҫкәртеп ҡуя торғайны: ҡарға теймәгеҙ! Юғиһә, ҡустыһының да ҡулы бигерәк тик тормай. Бәләкәй саҡта шул арҡала әҙ ыҙғышманылар. Ҡустыһы ла, ул мәктәптән ҡайтҡансы атаһы төнгө өрөндөнә кәметеп ҡуйһа, ныҡ көйә, тине әле бер көн әсәһе телефон аша һөйләшкәндә. Ҡапҡа насар асылһа ни, түҙһендәр, тип илар сиккә етешеп, әрләшә икән кинйәләре. Юғиһә, яҙа-йоҙа, ҡыйыш-мыйыш көрәгеләп, ишек алдының «нигеҙен» боҙоп бөтөрәләр. Артабан һыуыҡта ҡатып, шулай дағыр-доғор китә лә бара ул. Ә баштан уҡ тигеҙ тотолған нәмә менән эш итеүе – үҙе бер кинәнес! Тик бында ла сама белеү фарыз: ҡар ҡатламын гел генә төпкә төшкәнсе ҡырырға ярамай, әҙләп кенә яңыһын өҫтәй барырға кәрәк, сөнки майҙан ныҡ аҫта ҡалыуы мөмкин.

Ләкин был әлеге осраҡҡа, гараж алдына, ҡағылмай. Әйтелеүенсә, уны ул өҫтәл өҫтөләй тигеҙләй – ҡапҡа бер ҡайҙа ла, бәрхәт шаршау осолай ҙа теймәйенсә, һоҡланғыс бер еңеллек менән, ике яҡҡа йомарт асылып китә. Әммә… Әммә

иртән тороуына асылыу ауырлашҡан була. Аңлашыла-а-а: берәү ҡар диуар аша юлбаҫарҙай атлап уҙған. Зыянһыҙ үтеп кенә ҡалһасы: ҡатып өлгөрмәгән ҡарҙы мул ғына шыуҙырып төшөргән. Вәт, мәғлүн, әй! Мәктәпкә барыусы берәй шилма малайҙыр – эҙҙәре бәләкәсерәк. Оҙаҡламай бының бер ҙә бала түгел, ә оп-оло кеше икәнлеге заһир ҡылынды: биш өй аша йәшәгән урамдашыныҡы, баҡтиһәң. «Ниңә һуң, улайһа, бәләкәй?» – тигән һорау тыуһа, үҙен күргәс тә юҡҡа сығыр ине – буйға ла һәләк төпөш, ҡаҡса ғына, хатта ҡуранысТыр ҙа әле. Шуныһы бар: ошо арҡала ғәжәп йәш ҡиәфәтле үҙе.

Гаражды ҡуйырҙан алда халыҡ туҡталышҡа шунан йөрөй ине шул. Йөрөһә ни, хәҙер инде әҙ генә урап та үтергә мөмкин дәһә. Ана ла, арыраҡ, ниндәй гүзәл баҫҡыс эшләп ҡуйҙы, эскалаторы ғына юҡ. Матурлыҡты, ихласлыҡты таныған-дар маҡтап-маҡтап уҙа. Яңы юлға тиҙ өйрәнделәр ҙә. Теге Төпөштән башҡалар.

Көндәр үтә торҙо, ҡарҙар яуҙы, күрәлде, ҡапҡаның асылыуы бер еңеләйҙе, бер ауырайҙы. Өйөнә барып: «Улай итмә!» – тиергә лә уҡталды ла… туҡталды. Ваҡланғыһы килмәне. Сабырлығын усына ҡыҫты. Ҡыш бауыры оҙон, яуа торор, тау бейегәйә барыр, буйы етмәй башлар.

Туҡтаманы. Ныҡышып-ныҡышып үрмәләне. Уйы менән һонолоуы буйын да ҡалҡытты шикелле: текә диуарҙа, ана, аяҡ ҡына түгел, ҡул эҙҙәре лә йәбешеп ҡалған.

Ваҡланмау – ирлек билдәһе, әлбиттә, шулай ҙа иҫкәрткәндә арыу булыр ине ул былай. Былайтып ни, нервы бөтөрөп, күпме йәшәргә мөмкин?! Күргәне лә юҡ, тиһәң дә була инде үҙен. Төпөш эшкә гел таңдан йөрөй. Иртә барғас, алда-раҡ ҡайта ла. Менеп барғанында тотмағас, «һайт!» тип тә булмай. Мин түгел, тип таныуы ла ихтимал бит. Ҡыш көнө ни – һуң яҡтыра. Өҫтәүенә, яңғыҙлыҡ яратыусы әҙәм шикелле ул өндәшмәҫ кеше. Тамағы ебегән сағында ғына быуаһы йырылып китә, тиҙәр. Ә былай – айырымыраҡ инде, айыры-ы-ым… Ҡаршыңа осраһа, күрешмәҫ өсөн, урамдың икенсе яғына сығып, ситкә ҡарап уҙа, тип һөй-ләнеләр. Күҙгә-күҙ ҡарашмауҙың ысулдары бүтәнсә лә күп бит: мәҫәлән, теле-фонда ныҡ кәрәкле номерҙы эҙләгәндәй ҡыланып торорға мөмкин.

Тора-бара «һалҡын һуғыш»ҡа әүерелде был. Өнһөҙ көрәлә, тауышһыҙ емерелә. Хатта ҡыҙыҡ та булып китте. Йәшерен-батырыны юҡ: көрәүсе диуарҙы хә-ҙер инде мөмкин тиклем бейегерәк итергә тырыша – ҡаршы юҫыҡтағы ҡарҙы ла, әйләндереп килтереп, шул тарафҡа быраҡтыра. Быраҡтырмай инде, һелтәй: күбәләктәрҙең ни ғәйебе? Юлбаҫарҙың һаман серәшеүе, ҡыҙыҡ тиһәк тә, йә-ненә теймәй ҡалмай, әлбиттә. Кәбән һалғанда ла шулай әйләндереп ырғыталар бит: һәр күтәрем бесән урынына ғына ятһын тип. Унда ла көсәнеп ташлайҙар. Бесәнсе, ситтән ҡарағанда, һәнәген асыуланып һонғандай, шулай ҙа ғәмәлдә улай түгеллеге билгеле – үҙенең малына әҙерләй бит, һомғол ғына, һылыу ғына булып өйөлһөн, һыу үтмәҫ. Ҡарҙы ла «ыһ!» тип ебәреп бәрә, әммә артынан асыу оҙатмай. Хәйер, бесән эшләү менән сағыштырыу урынһыҙҙыр ҙа әле ул: быны уның әллә ни сәнғәт кимәленә күтәрмәгәненә ишаралағайны инде. Ғәйепләнмә-һен, шулай икән – шулай инде.

Ул ғына ла түгел, ҡара ҡаршы тороусы ике яҡ тарафынан да ныҡ көтөп алынған яуымға әйләнде. Көтәләр, сөнки Емереүсе иҫке ҡатламды, һыуыҡта ҡатҡанға күрә, әллә ни вата алмай. Төҙөүсегә лә ауаҙ көндө көрәк күтәреп йөрөргә сәбәп юҡ. Күңелһеҙ булып китә. Башҡа урамдаштар ҙа бойоғоп ҡала: был икәүҙең өнһөҙ көрәшен нисәмә ай күҙәтәләр бит инде: кем еңер? Өндәш-мәйҙәр үҙҙәре былай. Мут ҡиәфәтле күршеһе генә бер көндө:

– Көндәр аяҙға тарта әле шу-то… – тип төрттөрөп маташа ине, тегеһе аңламағанға һалышты:

– Интернетта ҡарағайным, аномалия тигәндәр, дауам итәсәк әле.

– Аномалия инде, тағы нимә булһын! – Мут төпкәрәк төшөргә теләгәйне лә, Төҙөүсене, кеҫәһендәге телефоны шаулап ебәреп, ҡотҡарҙы.

Оҙаҡламай йәнә циклон килде, «һуғыш» хәрәкәттәре дауам итте. Ҡәлғә бер унның ҡулына күсте, бер дошман иҙелеүендә ҡалды. Хәҙер инде еңеү байрағын кемдең ҡаҙары тураһында ҡәтғи фараздар ҙа ишетелмәй. Мут та ҡыҙырыҡламай. Бәлкем, хәҙер Емереүсе менән этләшәләр, уны һөсләйҙер. Хәйер, һөсләмәйҙер. Унның ҡыҙығы ла, тыңлағыҙ әле, шунда түгеме ни: бөтә урам күҙәтә, фаразлай, кемделер яҡлаша, кемделер яманлай, әммә быны асыҡтан-асыҡ белдермәй. Төп фараз хәҙер шул: яҙ етер, аяҡтар ҡараға баҫыр, низағ үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр. Ниндәй тамаша күҙ алдында әрәм булыр! Дөрөҫөрәге, яңы миҙгелгә хәтлем баҫылып торор, бөтәһе лә туҡталышҡа Емереүсе йөрөгән һуҡмаҡ аша атлар. Йәйен-көҙөн күңелһеҙерәк булып алыр инде. Унның ҡарауы, кешеләр ҡалын көрттәр ятыр миҙгелде көнләп һанар. Ихлас көйәрмәндең хоккей башланғанын түҙемһеҙләнеп көткәнен хәтерләтер был.

...Булманы улай. Мәсьәлә яҙға тиклем үк хәл ителде лә ҡуйҙы. Һәм, аңлашылыуынса, ҡабат мәңге ҡалҡмаҫлыҡ рәүешле. Икенсе бер Емереүсе килеп сыҡмаһа инде...

Былай булды.

Көрәшеүселәрҙең ҡатындары ла бар ул. Донъяуи мәсьәләләрҙә ғәләмәт аҡыллы заттар.

Емереүсегә лә, Төҙөүсегә лә:

– Ҡуй, юҡ менән булма! – тип күп мәртәбә әйттеләр.

Төҙөүсенең ефете бер көн, аҙаҡ асыҡланыуынса, ныҡ урынлы тәҡдимен белдерҙе:

– Әйҙә, Садиҡты ҡунаҡҡа саҡырайыҡ?

– Ә? – Ире компьютерҙа шаҡылдап ултырған еренән ҡапыл айырылып ҡараны. Әллә ысынлап та аңламаны, әллә көтөлмәгән тәҡдимдән шаңҡыны.

– Садиҡты тием, бисәһе менән бергәләп, ашҡа алайыҡ.

– Ҡайһы Садиҡты әйтәһең ул?

– Һуң... күршене... Биш өй ашаһындағы.

Ире һүҙҙең кем тураһында барғанын, ниһайәт, төшөнә башланы шикелле:

– Ә-ә-ә... теге... кемдеме ни?

– Эйе, эйе, шуны, – тип йәһәт кенә аныҡлай һалды ҡатыны.

Шулай тине лә, ҡабаланып, иренә, киреһенсә, унның үҙенә бирергә тейеш һорауҙы сәпәне:

– Ә ниңә?

– Мин дә шулай тием шул: ниңә? – тип күҙлек өҫтөнән күҙҙәрен түңәрәкләндерҙе Төҙөүсе.

Тынлыҡ урынлашты.

Юҡ, ире тағы ла компьютерына ҡапланманы, ҡатыны бәйләменә тотонманы. Береһе был мәлдә ни сәбәптән «дошман»дың ҡунаҡҡа саҡырылыуын төшөнә алмай ине. Сөнки быны шыпа еңелеү тип нарыҡлай. Сәмсел кешегә ни, айырыуса ауыр тойола: йә, шунан, аҡ байраҡ тотоп, ҡаршы барамы инде?

Икенсеһе нишләй? Унныһы ирен нисек итеп ризалатырға белмәй, тағы ла йомшағыраҡ һүҙҙәр эҙләй.

– Ул турала өндәшмәҫбеҙ. Әҙерәк ҡунаҡ булырҙар ҙа ҡайтырҙар. Йырлашып ултырырбыҙ. Былай мыштым ғына булһа ла, әҙерәк төшөрөп алһа, ысҡына, бик моңло йырлай ҙа тиҙәр үҙен, – тип бер килкенән һаҡ ҡына сираттағы аҙымын яһаны ул.

– Тотабыҙ ҙа саҡырабыҙмы?

Әһә! Ире йомшара башланы түгелме һуң, йәмәғәт, ә? Былай булғас булды, ҡалғанын апайығыҙ үҙе елтерәтеп алып китер. Алып та китер, алып барып та еткерер. Ана, һылтау тапты ла инде:

– Миҙалыңды йыуҙырырбыҙ!

Яңынан шаҡылдай башлаған клавиатура йәнә өнһөҙ ҡалды. Төҙөүсенең бармағы, төймәгә етә яҙып, һауала аҫылынған килеш туҡтаған. Хужаһы:

– Уға ней… Күпме ваҡыт үтте бит инде, – тигәндән һуң ғына тоҫҡалған урынына төртөлдө бармаҡ.

Ефете иренең бәләкәс кенә уңыштарын да шулай ололап күрһәтеү яҡлы. Һәм, дөрөҫөн әйтәйек, был унаң ҡулынан ныҡ килә лә.

– Миҙалдар иҫкермәй ул… Иртәгә ял бит. Ризаһыңмы?

– Әллә-ә…

– Әлләләмә. Ихтыярың ғына кәрәк. Ҡалғанын үҙем эшләрмен. Саҡырырмын.

Был ваҡытта хужабикәнең йөҙөнә ныҡлы ҡарар билдәһе сыҡҡайны инде: бөттө, бер кем дә, бер нәмә лә сигендерә алмаясаҡ. Шуны раҫлап, аукционда сүкеш һуҡҡан ише, ҡәтғи белдереп тә ҡуйҙы:

– Килерҙәр ҙә.

Икенсе көн әллә нисегерәк үтте. Шымыраҡ, тиекме икән?.. Икеһен дә бер үк нәмә вайымланы шикелле. Ҡатыны уйлап ҡына ҡалманы, магазинды ла буйланы, күп итеп тәғәм тейәп ҡайтты, гүйә, туй туйланы. Вәғәҙәләүенсә, иренә, бөгөнгө киске мәжлескә бәйле, һис бәлә һалманы. Һалмаһа ла, Төҙөүсенең мейеһен бер уй телгеләне: Емереүсе килерме, юҡмы? Шәмбе бит бөгөн, берәй яры сығып китһәләр? Ауырып ауһалар? Былай ғына баш тартырға ла мөмкиндәр бит әле… Уның да күрәләтә дошман биләмәһенә аяҡ баҫҡыһы килмәйҙер, моғайын… Әллә киләме икән?.. Шулайҙыр әле ул: саҡырмаған бит, саҡырылған. Провокация тип баш тартып ҡуйһа? Уның да намыҫы барҙыр. Тырнай инде күңелен шик, сапсыпмы-сапсый.

Көн кисәүләне. Ете тулып килгәндә өйҙә көсөргәнешлек уғата артты. Ҡыңғырау шылтырармы, телефонмы? Тәүгеһен көтәләр, икенсеһенән ҡурҡалар: бара алмайбыҙ, үҙебеҙгә Себерҙән ҡунаҡтар килеп төштө, тиергә мөмкиндәр бит.

О, ишек ҡыңғырауы зыңғырланы!

– Үҙем, үҙе-е-м, үҙекәйе-ем, – тине лә ҡатыны асырға йүгерҙе. Шул ыңғайы, артҡа боролоп, нәфис бармаҡтары менән үҙенең гүзәл йөҙө алдында түңәрәк яһаны, теҙелеп киткән мәрйен тештәрен күрһәтте. Йылмай инде, һөмһөрөңдө ҡойма, тиеүе. Ана, ишек яғында шатлыҡлы тауышы ишетелә лә инде:

– Әйҙәгеҙ, әйҙә, үтегеҙ. Аяҡ кейемегеҙҙе… юҡ-юҡ-юҡ… бында-бында-бында-бында… эстә сисегеҙ. – Сыпраңлап алып киткәнендә шулай бер һүҙҙе туҡтай алмайынса ҡабатлай ул.

Һәйбәт кенә ултырып алдылар. Йырлауға уҡ барып етмәнеләр былай. Емереүсе һәйбәт һыйҙан ҡыҙара төшөп, телевизорҙан барған башҡортса концертҡа ипләп кенә, мөңгөрләп кенә ҡушыла башлағайны, бисәһе тиҙ һиҙҙе:

– Ярай, хөрмәтле күршеләр, рәхмә-ә-әт, миҙалдың изгелеген күрергә яҙһын, – тип ирен йәһәтләп алып ҡайтып китте.

– М-м? – тип һораулы ҡараш ташланы ҡатыны иренә, өҫтәлде тиҙ генә йыйыштырып, телевизор ҡаршыһына ултырғас.

– М-м! – тип раҫланы ире.

Өнһөҙ башланған, ымһыҙ дауам иткән һуғыш шулай тынһыҙ тамам ҡылынды: табында ул турала ишара ла яһалманы. Ике яҡ та, дөрөҫөн әйткәндә, мәсьәләнең өҫкә ҡалҡыуынан бик хәүефләнеп ултырҙы.

Емереүсенең ҡара бауырлы кеше түгеллеген беләләр ине инде былай. Күнеккәнен ташлай ғына алмай килде. Ә үҙе, һыйҙан ҡайтышлай, гараж яғына ҡараш ташлап: «Ҡамалыштан ҡотҡарып, һәйбәт иттеләр әле был күршеләр», – тип еңел һуланы, тиһәк тә хата әйтмәйбеҙҙер. Хаҡты әйтербеҙ, сөнки ҡар диуарҙарға ла, арыраҡ эшләнгән баҫҡысҡа ла һоҡланып үтә торғайны ул. Аяҡтары ғына өйрәнгәнен ҡуймай ыҙалатты шул.

---

Гөлдәр ӘХМӘҘИШИНА

# ҺАҒЫШ

МОҢҺОУ ХӘТИРӘ

*Күңелемде телгеләмә,*
*Әй, әсе һары һағыш.*
*Тыуған яғым һәр саҡ иҫтә,*
*Айырҙы бары яҙмыш.*

(Йырҙан)

– Сөмбөл, Гөлбикә апайың… китеп барҙы бит беҙҙән. Ҡәйнәңде йыназаға алырға килгәйнем,– тине Хәсән, йәшкәҙәгән күҙҙәрен ҡайҙа йәшерергә белмәй.

Нисек инде Гөлбикә апай… үлгән? Һуң, кисә генә Сөмбөл уның хәлен белгәйне ләһә. Әңгәмәләшеп ултырғанда апаһы уны шелтәләп тә ҡуйғайны.

– Ҡуйсы, Сөмбөл, ташла шул ике-өс телдән бутҡа бешереүеңде. Һөйлә саф башҡортса!

Ә бер аҙҙан, һеңлеһенә ҙур һоро күҙҙәрен төбәп, ҡабат өндәште:

– Туғанҡайым, йырласы «Йәнем-бәғерем» йырын. Тыуған яҡ моңдарын шул тиклем һағындым. Һағыныуым ауырыуымдан да көслөрәк…

– Ҡуй, Гөлбикә апай, йырламайым. Нимә тип байрамһыҙ-ниһеҙ буҙлап ултырайым? Йырлашыр ваҡыттар ҙа булыр!

– Аһ, эс бошҡанда йырлау бер ҙә яҙыҡ булмай ул. Сөмбөлкәйем, һин бында яңыраҡ ҡына килен булып төштөң. Һинән хатта әле лә тыуған яҡтың йылыһы, наҙы бөркөлөп тора. Кил, үҙеңде бер ҡосаҡлайым,– тигәс, Сөмбөл, тыңлаусан бала һымаҡ, уның янына шылып ултырғайны. Апаһы хәлһеҙ ҡулдары менән Сөмбөлдөң берҙән үреп төшөргән оҙон ҡара сәсенән һыйпап, арҡаһынан һөйөп яратты ла, көйһөҙ генә һамаҡланы:

*Тимер сана юлдар яра,*
*Был йөрәгем ник яна шул,*
*Был йөрәгем ни яна?..*
*Был йөрәгем белеп яна, йәнем-бәғерем,*
*Һөйгәнем ятҡа ҡала…*

– Их, ағайыңды әйтәм, яттарға ҡала бит. Шуныһы үкенес,– тип өҫтәне аҙаҡ хәсрәт менән.

---

*Гөлдәр Әхмәҙишина Баймаҡ районының Сосновка башланғыс мәктәбендә уҡыта. «Ағиҙел» журналында тәүләп сығыш яһай.*

– Ҡуйсы, апай. Һинме шулай күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп ултыра торған кеше? Күр ҙә тор: бына оҙаҡламай элеккесә теттерә баҫып тороп китерһең. Миңә мамыҡ йыйырға өйрәтерһең. Һине бит, көнөнә 100 – 120 килограмм мамыҡ йыйып тапшыра торғайны, тип һөйләйҙәр. – Үҙенсә шулай йыуатҡан булды һеңлеһе.

– Был ауырыуҙан терелеп булмаҫын минән дә яҡшыраҡ беләһең. Йәлләмә мине. Бахыр булып үлгем килмәй. Ә мамыҡты… Уны минһеҙ ҙә йыйырҙар. Һине лә өйрәтерҙәр.

Бына шул Гөлбикә апай… Их, шулай булырын белгән булһасы! Янынан китмәй бөтә белгән башҡорт йырҙарын йырлап сығыр ине. Ә ул күпте һораманы бит. Бары бер генә йырҙы. Тауышы матур булмаһа ни? Бөтә кешегә лә йырсы булырға тимәгән. Әйҙә, үкен, Сөмбөл, ғүмереӊ буйы үкен!

Йәтеш кенә кәүҙәле, алсаҡ тәбиғәтле Гөлбикә Сөмбөлгә бик күп тормош серҙәрен систе. Аҡыллы кәңәштәренән һис тә ташламаны. Йәш ҡатынға ғына түгел, бөтә кешегә лә һәр ваҡыт ишеге асыҡ, йөҙө мөләйем, күңеле киң булды. Ә һеңлеһен ныҡ булырға, өй эсендәге сүпте тышҡа сығармаҫҡа, эс серен бөтәһенә лә һөйләп йөрөмәҫкә өйрәтте.

– Сөмбөлкәйем, һин сит ерҙәһең. Абынһаң, күтәрелеп торғоҙорға янында әсәйең юҡ. Ирең дә әле эргәндә түгел – әрмелә. Һәр аҙымыңды уйлап баҫ, һәр һүҙеңде уйлап әйт. Бер ваҡытта ла күҙеңде шәмәртеп ултырма. Үҙең һайлаған яҙмыш. Ҡайҙа килереңде белеп килдең. Бәлки, ерһенерһең. Килен күрергә тип килгәндә лә Сөмбөлдөң ҡәйнәһенә:

– Илдән* ҡайтып алабыҙ киленде, ти инегеҙ. Тәки һүҙегеҙҙе һүҙ иттегеҙ. Башҡортостанда ғына үҫер аҡ ҡайын үзбәк далаларын биҙәрме лә, ят тупраҡта тамыр йәйерме?– тигәйне, кинәйәле генә итеп:

– Үҙеңсе, Гөлбикә.

– Беҙҙең хатаны ҡабатламаһындар, тием, ҡоҙаса… Ана, минең ике баламдың иле бармы ла, теле бармы? Ни ырыуын, ни ата-бабаһын белмәйбеҙ. Ҡайтар һин быларҙы тыуған төйәккә.

– Ҡайталар, ҡайталар. Былай ҙа ҡайталар. Улым ғына хеҙмәтен тултырһын да,– тигәйне Сөмбөлдөң ҡәйнәһе.

…Был яҡтағы ғөрөф-ғәҙәт буйынса мәйетте шул көндө үк ерләнеләр. Гөлбикәнең Ташкенттағы улы менән ҡыҙы ғына ҡайтып өлгөрҙө. Ә илдәге туғандары тик етеһенә генә килеп етә алды. Күңелгә яҡын булһа ла, алыҫ шул Башҡортостан.

Хәсән ағай ҡара янып йөрөһә лә, бер бөртөк йәшен дә күрһәтмәне. Гөлбикә мәрхүмәнең өсөн, етеһен уҡытып, арыуыҡ ваҡыт үткәс, эштән ҡайтып килгән Сөмбөлдө янына саҡыртып алды.

– Балдыҙ, әҙерәк янымда ултырып кит әле,– тип, киң йөҙөм япраҡтары аҫтына аяҡтары тимерҙән, тирә-яғы семәрләп эшләнгән киң һике өҫтөнә менеп ултырҙы ла, йәнәшәнән урын күрһәтте.

– Ҡуйманы бит яман сир, алып китте апайыңды. Кемгә генә күрһәтмәнем, ҡайҙа ғына алып барманым – һуҡыр тинлек тә файҙаһы булманы. Беләһеңме, ҡарындаш, ә шулай ҙа күңелемдә ҙур үкенес тойғоһо тороп ҡалды. Гөлбикә апайың үткән йыл, әйҙә, тыуған яҡтарға ҡайтып киләйек, тип күпме үтенде. Ә мин, ҡарт алаша, ваҡыт юҡлыҡҡа һылтандым. Парник тинем, баҡса тинем, эш

* Үзбәкстанда йәшәгән башҡорттар һүҙе.

тинем. Бер үҙен генә ҡайтарып ебәргем килмәне. Ҡартайһам да, һаман ҡыҙғаныу, көнләшеү тигән нәмәне ташлай алманым бит. Юҡ, юҡ, ҡарындаш, насар уйлай күрмә. Ғүмерем буйына Гөлбикәне тик бер генә кешенән ҡыҙғандым. Ул да булһа… үҙемә һеҙле тейеш кешенең иренән. Ярай, һөйләй башлағас, һөйләйем инде. Исмаһам, күңелем бушҡарып ҡалыр.

Хәсән үрелеп, ҡап-ҡара булып бешкән ике тәлгәш йөҙөм ҡырҡып алды. Һауытҡа һалып, сайып, Сөмбөлдөң алдына ҡуйҙы:

– Аша, яҡшы сорт был. Апайың үҙ ҡулы менән ултыртҡайны.

Ир кешегә күңелендәге иң ҡәҙерле хәтирәләрҙе аҡтарыуы еңел түгел ине. Йәшкелт күҙҙәрен урындыҡҡа йәйелгән күкһел балаҫҡа төбәп, байтаҡ өндәшмәй ултырҙы. Ошо аҙна-ун көн эсендә уның оло кәүҙәһе кесерәйеп ҡалғандай. Сәстәренең көмөштәре лә бермә-бер артҡан. Йыш ҡына көрһөнә. Әле лә ауыр итеп тын алды ла, һүҙен дауам итте:

– Хәҙер генә сәстәре ағарған, тештәре һирәгәйгән, авариянан һуң бото ҡыйшайған бабаймын. Белгең килһә, ҡарындаш, Гөлбикә апайыңды урлап сығып киткән кеше әле мин… Уның менән беҙ күрше генә үҫтек. Ул минән ике йәшкә кесе ине. Кәүҙәгә йәтеш, ҡураныс ҡына булды. Мәктәпкә лә һәр ваҡыт бергә йөрөнөк. Бәләкәй синыфта уҡығанда Гөлбикә өйөнән иртәрәк сыға ла, мине өйҙәренең мөйөшөндә көтә торғайны. Күренһәм, боҫҡан була. Мин дә һыр бирмәйем, күрмәмеш булып үтеп китәм. Гөлбикә минең артымдан эйәрә. Шәп атлаһам, ул дә шәп атлай, йүгерһәм, йүгерә. Аҙаҡтан белеүемсә, алыҫта ғына ятҡан мәктәпкә яңғыҙ йөрөргә ҡурҡҡан икән. Ә инде үҫә төшөп, өлкән синыфтарға еткәс, уны уларҙың өй мөйөшөндә үҙем көтә башланым. Хәбәрҙәрен һөйләй-һөйләй килеп сыға торғайны ҡапҡаларынан. Беҙ бала саҡтан бергә уйнап үҫтек. Күрәһең, шуға ла дуҫлығыбыҙҙы барыһы ла шулай кәрәк һымаҡ ҡабул итте. Гөлбикә апайың нәҙекәй билле, һылыу, сая ҡыҙ булып үҫеп етте. Уға ауылда ғашиҡ булмаған егет ҡалмағандыр. Гөлбикәнең моңло тауышы! Иң туң йөрәкле, вайымһыҙ кешенең дә күңеленә үтеп инерлек итеп йырлай ине ул. Ә дуҫлығыбыҙ яйлап мөхәббәткә әүерелде. Их, ул саҡтар! Һағынып ҡына иҫкә алырға ҡалды инде. Йәмле Һаҡмар буйҙары, аҡ томанға уралған Изгетау. Гөлбикә менән таңға тиклем тыуған яҡтың көмөш ысығын кисеп, етәкләшеп йөрөй торғайнығ. Тик армияға китер алдынан ғына арабыҙҙан ҡара бесәй үтте. Ауылға агроном булып эшкә килгән Шәриф исемле егет, мин шоферҙар курсында булғанда, бер нисә тапҡыр Гөлбикә апайыңды оҙатып ҡуйған. Ҡайтҡас, шул хәбәрҙе ишетеү менән үҙемде ҡайҙа ҡуйырға ла белмәнем. Кәмһендем. Тимәк, Гөлбикәгә уҡыған, белемле кеше кәрәк, мине тиңһенмәй, тип уйланым. Уның янына барыу ғына түгел, күрһәм, боролоп китә башланым. Күрергә теләмәүҙән түгел, ә Гөлбикәнең үҙенең тәү башлап килеүен, ғәйебен таныуын ишеткем килеүҙән ине минең был ҡылығым. Ә ғорур Гөлбикәм үҙе башлап юл ярманы. Алдымда ғәйебе лә булмаған шул. Шәрифте әйтәм, бер яҡҡа ҡайтҡас, оҙатҡандыр инде. Хәҙер генә шулай уйлайым. Ә ул ваҡытта Гөлбикә минең өсөн хыянатсы, алдаҡсы ине. Кеше һүҙе кеше үлтерә, тип дөрөҫ әйтәләр.

Апайың армияға киткәнемдә лә ҡосағыма ташланманы. Мин дә, көт, тимәнем. Уртымды сәйнәй-сәйнәй, ят кешеләр кеүек кенә хушлаштым. Ул да илгәҙәкләнмәне, үҙен һалҡын тотоуы уйҙарымды дөрөҫләгән кеүек ине. Шуға күрә, хушлашҡанда күҙҙәренә күтәрелеп тә ҡараманым. Ҡараһам, барыһын да аңлар, ахмаҡлығым өсөн ғәфү үтенер инем. Синыфташ ҡыҙҙарға, дуҫ егеттәргә хат яҙа торғайным. Ә уға хат та яҙманым. Ошоларҙан сығып, Гөлбикә лә үҙенсә һығымта яһағандыр инде.

Ике йыл ни, үтте лә китте. Ҡайтып төшһәм, күршелә туй бара. Мине лә саҡырҙылар. Индем дә, телһеҙ ҡалдым. Ер һылыуҙары ла шул тиклем матур була икән. Гөлбикә кеүек сибәр кәләште осратҡаным юҡ ине. Һәм башҡа осратманым да. Тупаҫланып бөткән телем хәҙер уның матурлығын тәфсирләй ҙә алмай. Уныһын, ҡарындаш, үҙең дә аңлайһыңдыр. Ә Гөлбикәнең янында ҡупырайып, әллә кем булып әлеге лә баяғы Шәриф ултыра. Йөрәгем өҙөлөп төшкәндәй булды. Их, мин ахмаҡ, үҙ ҡулдарым менән йәнемдәй күргән Гөлбикәмде башҡаға тоттороп ебәрәм бит, асыҡ ауыҙ, тип үҙ-үҙемде әрләйем. Юҡ, ниндәйҙер юлын табырға кәрәк. Йә хәҙер, йә һис бер ҡасан! Һөйгәнемде үҙ туйынан урларға, тигән дыуамал уй килде башыма. Табындың иң түрендә ултырған сибәрҙәрҙән-сибәр Гөлбикәмә ҡараған һайын был уйым көсәйгәндән-көсәйә генә. Күңелемде көнсөллөк ҡорто ла кимерә. Түҙмәнем, дуҫ егеткә уйымды систем. Тегенең күҙҙәре янып китте. Була ул тип, янған йөрәккә тағы ла май өҫтәп ебәрҙе.

Туй ҡыҙа. Йәштәрҙе ҡотлайҙар. Бәхет, татыулыҡ, мөхәббәт теләйҙәр. Миңә лә һүҙ бирҙеләр. Һыр бирмәҫкә тырышып, матур ғына теләктәр теләнем. Ә үҙем Шәрифтең Гөлбикәнең янынан китеүен көтәм. Һөйләшкән буйынса, егеттәр уны саҡырып алды. Мин Гөлбикә янына ашыҡтым. Йәшереп-боҫороп тормай, уйлаған уйымды әйттем. Гөлбикә ҡурҡышынан ағарып китте. «Дыуамал, ҡайҙа инең быға тиклем!» – ти. «Армияла»,– тигән булдым, иҫе китмәгән кеше булып. Ә үҙем эстән ҡурҡам, юҡ, тип әйтеп кенә ҡуймаһын, тип. «Шәриф мине ярата»,– ти апайың. «Ә һин? Һин дә яратаһыңмы?» – тием. Гөлбикә өндәшмәй генә башын аҫҡа эйә. Уның өндәшмәүе күңелемдә өмөт уята. Тимәк, Шәрифте яратмай. Мине ярата, мине. «Гөлбикә, йәнем, тәүәккәлллә! Йә хәҙер, йә бер ҡасан да! Урамда машина көтә»,– тип ашыҡтырам. Гөлбикәмдең дә миңә һөйөүе көслө булғандыр инде. Булмаһа, үҙ туйын ташлап, минең менән баш һуҡҡан яҡҡа сығып китмәҫ ине. Ҡарындаш, һин Гөлбикә апайыңды бер ҡатлы, елбәҙәк булғандыр тип уйлай күрмә. Һәр кем үҙ бәхете өсөн үҙенсә көрәшә. Ҡыҫҡаһы, туйҙағылар итәк-еңдәрен йыйғансы, беҙ Гөлбикә менән «Өфө – Ташкент» поезында елдерә инек инде.

Бына шулай ҡауыштыҡ беҙ Гөлбикә апайың менән. Артыбыҙҙан «тоҙло-бороссло» хаттар күп яуҙы! Атай менән әсәй килеп, бик ныҡ ҡына бешеп тә ҡайтты. Үткән эшкә – салауат. Үҙ балалары бит, ғәфү иттеләр.

Аҙаҡтан ишетеүебеҙсә, Шәриф минең һеңле тейеш ҡыҙға өйләнгән. Кейәүебеҙ булды, рәхмәт төшкөрө. Уның өйләнеүен ишеткәс, Гөлбикә апайың еңел һулап ҡуйғайны. Күрәһең, эстән ғазапланып йөрөгән, бахырҡайым.

Был яҡтарҙа тормош көтөүе, аҡса табыуы еңелерәк ине. Шуға күрә тыуған яҡтарға ҡайтып торманыҡ. Бында төпләндек. Хәҙерге аҡылым шул ваҡытта булһамы, ҡалмаҫ инем. Өлкәнәйгән һайын нығыраҡ һағындыра икән ул тыуған яҡ, – тип тағы ла ауырыраҡ көрһөндө ҡартлас. Ереккәнмендер, тип уйлай торғайным. Юҡ, балдыҙ, сит ерҙәргә ерегеп булмай икән ул.

Хәсән еҙнәһе янынан ауыр уйҙар менән ҡайтып китте Сөмбөл. Күңелендә – әйтеп бөтә алмаҫлыҡ бушлыҡ.

Бер-береһен аңлап, яратып утыҙ йыл бергә йәшәгән Хәсән менән Гөлбикәнең үкенесе, тыуған яҡҡа бөтмәҫ һағышы Сөмбөл күңеленә, хәҙер инде Башҡортостан кешеһенә, моңһоу хәтирә булып уйылды.

**Нияз АЛСЫНБАЕВ**

# ҺАБАҠТАШТАР ҠАБАТТАН ТАНЫША

ЮМОРИСТИК ХИКӘЙӘ

Бер көндө осрашыуға саҡырҙылар. Курсташтар осрашыуына. Шунда әҙәм балаһының ике тиҫтә йыл эсендә нисек үҙгәреүенә хайран ҡалып ҡайттым. Һүҙ тышҡы ҡиәфәт хаҡында ғына түгел, ә эске үҙгәреш, холоҡ-фиғел үҙгәреше хаҡында.

Әйтелгән ваҡытҡа барҙым. Университет ҡапҡаһы янында бер төркөм кеше тегеләй йөрөй, былай йөрөй. Береһе лә таныш түгел. Шул саҡ аҡһай-туҡһай килгән эшләпәле әфәнде күренде. Эшләпә таныш түгел, әммә аҡһауы таныш – Фәриттеке! Шулай итеп, халыҡ барыһына ла күптән таныш курсташҡа ҡарай йүгерҙе. Һөҙөмтәлә теге, үҙе лә һиҙмәҫтән, һабаҡташтарҙы яңынан таныштырыусы, ҡауыштырыусы, туплаусы көскә әүерелде. Был уға оҡшап ҡалды: сатанлай-сатанлай университет тирәһен йөрөп әйләнде лә, йәнә бер көтөү аҙашҡан курсташтарҙы эйәртеп килде. Былай ҙа ҡупырышыраҡ кеше үтә эре ҡыланды: «Мин булмаһам, осраша ла алмаҫ инегеҙ!»

…Егерме йыл эсендә элекке егет-ҡыҙҙар ныҡ үҙгәргәйне: сәстәр һирәгәйгән, тештӗр кәмегән, ҡорһаҡтар күпкән. Студент һаҡалдары ҡырылған, әммә ҡартлыҡ һаҡалына хут бирмәгәндәр әле. Ниһайәт, бер-беребеҙ менән яңынан таныштыҡ, кемдең кем икәнлеген барланыҡ. Күптәр ярайһы уҡ бейек урында ултыра булып сыҡты. Бына, мәҫәлән, Вәғиз курсташыбыҙ. Хәҙер уны Вәғиз Саҙрый улы тип кенә йөрөтәбеҙ. Заманында эскелеге арҡаһында юғары уҡыу йортонан ҡыуыла яҙғайны. Ә хәҙер уны ҙу-ур кеше, оло түрә булараҡ беләбеҙ. Был хаҡта гәзиттән уҡығайным. Башҡалар ҙа гәзит уҡыштыра икән. Табын артында ултырғанда Вәғиз Саҙрыевич янынан һабаҡташтар өҙөлмәне. Күптәр файҙалы бәйләнештәр урынлаштырырға ашыҡты. Бәғзе берәүҙәр элекке курсташының ысынында булмаған, йә була яҙған мәртәбәләрен иҫенә төшөрөп маҡтапмы-маҡтаны, тост артынан тост күтәрҙе. Йөҙө ҡояштай балҡыған Вәғиз-дең баҙары артты, әммә эште үҙе боҙҙо. Бик ныҡышҡас, кемгәлер визиткаһын тотторған. Шул саҡ барыһы ла асыҡланды. Баҡтиһәң, ул хәҙер ҙу-ур начальник түгел, ә бәләкәс кенә бер түрәнең… беренсе ярҙамсыһы икән. Теге йылы урындан күптән ҡыуғандар, имеш. Нимәнелер «ашап» ташлаған. Был хаҡта мәғлүм булғас, кисәге түрәгә ихтирам да, иғтибар ҙа ҡапыл һүрелде. Кемдер шаяртып, әммә һәр кемгә лә ишеттерерлек итеп: «Двоечник!» – тип ысҡындырҙы. Үс алынғас, табын йәнә матур ғына гөрләне. Тиҙҙән иҫергән Вәғиз Саҙрыевич

*Нияз Алсынбаевтың «Серле мосафир» исемле китабын уҡыусылар яратып ҡабул итте. Башҡортостан радиоһының «Юлдаш» мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы етәксеһе, республиканың матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларының атҡаҙанған хеҙмәткәре.*

хәсрәтле тауыш менән моңло йыр һуҙҙы. Һикәлтәле тормош һуҡмаҡтары, ауыр яҙмышлы етәкселәр, мәкерле дуҫтар тураһында ине был йыр. Уның ошо хәтлем аһ-зарҙарын һәм өҙгөләнеүҙәрен ишеткәс, курсташтарҙың күңеле ирене. Эстән барыһы ла уны ғәфү итте, ҡул сапты. Ошонан һуң Вәғиз Саҙрыевич йәнә тулы хоҡуҡлы әҙәмгә әйләнде, йәнә йыр йырлап маташты…

Ҡылый Рауилә көләмәс һөйләргә тотонғайны, йор һүҙҙең мәғәнәһен бер кем дә аңламаны. Әҙәп өсөн генә «һе-һе» тигән булдылар былай. Ҡыҙарынып-бүртенгән Рауилә көләмәсте яңынан һөйләргә тотондо, бына ошо урында көләргә кәрәк, тигәндәй, ишаралар яһаны. Тик көтөлгән һөҙөмтә барыбер юҡ ине. Йәне көйгән Ҡылый янында ултырған бер сынаяҡ сәйҙе түңкәреп ҡуйҙы. Табындағылар «пырх» итеп ҡалды. Сөнки күршеһе сәйгә һиҙҙермәй генә араҡы ҡойғайны. Шуны мәҙәк күрҙеләр.

– Ниһайәт, дошло! – тине көлөүҙе үҙенсә аңлаған Рауилә. – Вәт жирафтар!

Һабаҡташтарҙың ҡайһы берҙәре күп итеп визитка алып килгән булып сыҡты. Был уларҙың институттан һуң өлгәшкән уңыштарының шаһиты, дәрәсәрәге, күрһәткесе ине. Иң шәп визитка Бикйән Ҡамышҡоловтыҡы икән. Ҡатырғаның һул мөйөшөнә трактор тәгәрмәсе, тәгәрмәскә ҡыҫылған бойҙай башағы, бойҙайға муйын һуҙған һыйыр башы төшөрөлгән. Малҡайҙың күҙҙәре шул тиклем моңһоу, күптәр Бикйәндең колхозында фураж бөткәндер, тигән һығымтаға килде. Ике яғы ла ялтырап торған визитканың уртаһында алтын хәрефтәр менән: «Бикйән Ғәлимулла улы Ҡамышҡолов. Атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, фәлән-фәлән премиялар лауреаты. Алдынғы колхоз рәйесе. Уйлап табыусы рационализатор», – тип яҙылғайны. Унан, был ғына аҙ булыр, тигән һымаҡ, өҫтәп ҡуйылған: «Йәш шағир». Визитканың аҫҡы өлөшөндә кеҫә, өй телефондары, факс, электрон адрес күрһәтелгән.

Башҡаларҙыҡы ла уныҡынан артыҡ ҡалышмай, буғай. Мәҫәлән, элекке комсоргтың ус аяһындай ғына ҡатырғаһында «Кәбирә Ҡотлоева. Агент. Инвест Плюс. Кобра ФБР» тип кенә яҙылғайны. Был сәйер яҙыу халыҡты хафаға һалды. Әлеге һүҙҙәрҙең ни аңлатҡаны һис кемгә лә мәғлүм түгел. Кәбирә иһә, уйсан ҡараш менән, тәмәке артынан тәмәке көйрәтеп тик ултырҙы. Бер һорауға ла яуап бирмәне. Утты-һыуҙы үткән ҡарт фронтовиктар бәғзе ваҡыт шулай ләм-мим ҡалыусан. Ара-тирә алтын тештәре араһынан «м-м-дә…», йәки «һ-м-м…» – тигәнерәк ауаздар һығылып сыҡты. Был йәмәғәтселекте тағы ла нығыраҡ шомға һалды. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, курсташтарым Кәбирә мафияға эшкә күскән, тигән фекергә килде. Аҙаҡ белдек: апайыбыҙ махсус службала… кассир икән.

Тиҙҙән «крутой» визитка эйәләре үҙҙәре генә тартырға сығып китте. Визиткаһыҙҙар ҙа ҡоро ҡалманы: кемеһе Англияла уҡыған балалары, кемеһе затлы машинаһы, кемеһе йәш ҡатыны менән маҡтанды. Әлбиттә, туранан-тура түгел, ә ситләтеп, һүҙ ыңғайында ғына. Раузабыҙ ултырҙы-ултырҙы ла, һис берәү-гә лә төбәмәй генә, бәйләнешһеҙ әйтеп ҡуйҙы: «Ә мин өс мәртәбә кейәүгә сыҡтым, и то молчу!» Ошо һүҙҙәрҙе ишеткән Бирсенбикәнең төҫө үҙгәреп китте, табындағыларға арты менән боролоп ултырҙы. Ул һаман да кейәүгә сыҡмағайны.

…Аҙаҡ күмәкләшеп студент йырҙарын йырланыҡ, бейеп алдыҡ, фото ҡараныҡ. Кемеһелер ейәнен өҫтәлгә мендереп шиғыр ятлатты. Бирсенбикә менән Рауза ҡайтанан дуҫлашты, ҡултыҡлашып йөрөнө. Табын таңғы дүрткә тиклем дауам итте.

Яйлап ҡайтыуға ыңғайланыҡ. Үпкәләр онотолдо, байҙар-ярлылар айырмалылығы бөттө, дуҫ һәм туған булып таралыштыҡ. Ун йылдан йәнә осрашыр өсөн.

# ТАЛПЫНДЫ БӨРКӨТ КҮКТӘРГӘ

*(Башҡортостандың тәүге осоусыһы Ғәли Ишмырҙин иҫтәлегенә)*

Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам иткәндә унының исемен телгә алмай ҡалыу – хәҡиҡәткә хыянат итеү булыр ине. Дошман ғәскәрҙәрен тар-мар итеүҙә туранан-тура ҡатнашмаһа ла, унының еңеүгә индергән хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Өфө авиация мәктәбе етәксеһе булараҡ, ул уҡытып сығарған йөҙҙәрсә осоусы дошманды аяуһыҙ туҡманы. Ғәли Ишмырҙин – ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың да остазы. Бынан тыш та, ошо данлыҡлы осоусылар мәктәбендә уҡып сыҡҡан 13 ир-егет Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, майор Ишмырҙиндың исеме оҙаҡ йылдар телгә алынмай килде. Тыуыуына 100 йыл тулыр алдынан ғына гәзиттәрҙең береһендә ҡош телендәй яҙма күҙгә салынып ҡалды. Арҙаҡлы яҡташыбыҙҙың булмышын тәрәнерәк өйрәнеү өсөн, миңә архивтарҙа айҙар буйы соҡсонорға, айырым кешеләр менән һөйләшергә тура килде. Эҙләнеүҙәрем бушҡа китмәне: мәғлүмәт байтаҡ тупланды. Ғәли Ишмырҙин – ысынлап та, милләтебеҙҙең арҙаҡлы улы, башҡорттарҙан беренсе булып самолетҡа ултырған, зәңгәр күктәрҙе айҡаған шәхес. Оҫталарҙан-оҫта осоусы булыуы өҫтөнә, Өфө аэроклубын ойоштороусы, бик күп йәштәргә ҡанат ҡуйған етәксе лә ул. Юҡты бар итеп, самолеттар ҡайтарыуы, уҡыу-методик база булдырыуы, синфи көрәш шарттарында клуб эшмәкәрлеген яйға һалыуы, Башҡортостандың барлыҡ райондарына һауа юлы ярыуы менән Ишмырҙин үҙенә мөһабәт һәйкәл ҡуйҙы. Башҡортостанда ҡанатланған егеттәрҙең Бөйөк Ватан һуғышы күгендә күрһәткән батырлыҡтары илгә яҡшы билдәле.

Бала саҡтан осор ҡоштарға ҡарап хыяллана Ғәли. Баш осонда ҡарлуғастар уҡтай атылып уйнағанда, киң ҡанатлы төйлөгән күк йөҙөндә ҡанат та ҡаҡмай һалмаҡ йөҙгәндә, тәбиғәт тылсымлы көс булып тойола уға. Замана егеттәренән күрмеш, үҙе лә нимәлер эшләп, күккә осороп ҡарай. Ер һөрөп, иген иккән, ер һулышын тойоп көн күргән нәҫелдән Ғәли. Атаһы уны, беренсенән – ер хужаһы, икенсенән, мулла итеү тураһында хыяллана. Әммә ғәзиз улының атлап түгел, ер өҫтөнән осорға тырышыуына ла ҡаршы килмәй. Үҫмер саҡта кем хыялланмаған?

Төштәр күргәндә Ғәли ысынлап та оса, күккә, бейеклектәргә аша. Йүгереп килгәндә аяҡтары ергә тейер-теймәҫ була. Ике ҡулын ҡоштар һымаҡ ҡанат итеп йәйеп йүгереү уға аңлатып бөтмәҫлек ләззәт бирә. Ҡанаттары үҫкәндән-үҫә. Армия сафына алынғас, егет кесе командир дәрәжәһенә ирешә. Башта Борисоглебск ҡалаһында хәрби теоретик, һуңынан Ырымбурҙа осоусылар мәктәбендә төплө белем, күнекмә ала. Һөнәр серҙәре пәрҙәһе киңерәк асылған һайын, зәңгәр офоҡтар ҙа яҡыная һымаҡ тойола.

Хәл иткес һынау көнө етә. Үҙенә күрә сират күпере – дәүләт комиссияһы

күҙәтеүендә осоу техникаһын, һөнәри камиллыҡты, өлгөргәнлекте раҫлау көнө. Имтихан программаһы буйынса осоуға әҙерлекте Ишмырҙин үҙ-үҙенә талапсан һәм һалҡын ҡанлылыҡ хәлендә башланы. Мәктәптең алдынғы уҡыусыларынан бит әле ул!

«Бәлә-ҡазаһыҙ ғына үтһә ине, Хоҙайым, – тип ҡабатланы ул эсенән генә. – Был машина тигәнең иң ышаныслы ҡулдарҙа ла йүгәндән ысҡынғылай. Берүк минең ихтыярҙан сыҡма».

Күккә күтәрелеүе лә, боролмалар яһап осоуы ла – бөтәһе лә өйрәтелгәнсә килеп сыҡты. Ҡулдар шулай ҙа штурвалды уйнатып, ҡанаттарҙы уңға-һулға талпындырып, бер сама «егетлек» күрһәтеп алырға ҡыҙышып ҡуйғайны ла, тиҙ генә кире уйланы: уйындан уймаҡ сығарыуың бик ихтимал.

Ергә ултырыр мәл дә етте. Ишмырҙин аэродромға, маһир белгестәй, еңел ҡайтып етте, һоҡланғыс хәрәкәттәр менән комиссия ағзалары алдына килеп туҡтаны. «Афарин!»– тип һырып алдылар егетте. «Программаны бер минутҡа ла арттырмай үтәнең, матур остоң», – тип маҡтайҙар. Әммә йөрәктәрҙе иретерлек хуплау һүҙҙәрен кемдеңдер: «Ишмурзин, к начальнику школы!» – тигән һөрәне бүлдерҙе.

– Күрҙем, бөтәһен дә ҡарап, йөрәгем менән тойоп торҙом, – тине оло йәштәге осоусы. Һинең өсөн шатмын. Уҡығандағы кеүек имтиханда ла ысын егетлегеңде раҫланың. Афарин! Ҡотлайым, һин мәктәпте беренсе булып тамамлайһың, – тине етәксе. – Илдә осоусылар әҙерләү йылдам төҫ алды. Ҡыҙыл Армия беҙҙән ҡанатлы егеттәр көтә, кадрҙар күп кәрәк. Ҡалаларҙа аэроклубтар ойоштороу кампанияһы йәйелдерелде. Һинең Өфөгә ҡайтыуыңды һорайҙар…

«Өфө аэроклубы» тип аталған ойошма ташландыҡ сиркәүҙә урынлашҡан. Өҫтәл ҡуйырлыҡ бер нисә бүлмәһе бар. Хөкүмәт етәкселәре менән танышыу эшлекле шарттарҙа үтте. Бер нисә самолет ҡайтарылған, парашют вышкаһы тергеҙелгән, осоу-планер станцияһы бар. «Аэродром» тип аталған Ағиҙел арьяғындағы урын – соҡор-саҡыр, ҡыуаҡлыҡ. Бинаһы ла элекке ташландыҡ сиркәү икән. Уҡырға теләүселәр күп тә – кластар юҡ.

*Тарихи белешмә*. 1923 йылда Башҡортостанда һауа флоты, бер йылдан химия оборонаһы һәм химия сәнәғәте дуҫтары ойошмалары, ә 1925 йылда улар нигеҙендә «Башавиахим» барлыҡҡа килә. 1926–1927 йылдарҙа хәрби ғилми ойошма, оборонаға булышлыҡ итеү йәмғиәте, ниһайәт, «Башосоавиахим» ойошторола.

1923 йылда республика халҡы аҡсаһына «Башкирский ультиматум» самолеты төҙөлөп, Ҡыҙыл Армияға тапшырыла. Англия хөкүмәтенең илебеҙгә ҡарата ояты ҙ тыҡшыныуҙарына яуап рәүешендә була ул. «Власть труда» гәзитендә: «Крестьяне! Второй самолет нужно построить для себя. В республике – более двух миллионов сельского населения»,– тигән саҡырыу сыға. Халыҡ «һә!» тигәнсе аҡса йыйып, икенсе самолетҡа ла заказ бирә. Заманаһы ниндәй бит! Йәштәр осоу техникаһын эйәрләү хыялы менән яна. Планеризм, парашюттан һикереү кеүек ҡыйыу шөғөлдәр күптәрҙе үҙенә тарта, бәхетлеләр аэроклубтарға яҙыла…

Эйе, «үҙебеҙҙең» самолет ҡайтыр көн дә яҡынлаша. Глумилино ауылы менән Көнсығыш биҫтә (хәҙерге Зорге урамы – **Ф.В.**) араһындағы урында, самолет ултырыр урын әҙерләү өсөн, 1924 йылдың 15 майында күп халыҡ ҡатнашлығында шәмбе өмәһе уҙа. Түбәнге Новгород ҡалаһында эшләнгән самолет «Фарман-30» тип атала. Николо-Березовка ауылына саҡлы уны пароходта алып киләләр. Унан почта менән – Бөрөгә. Летчиктар Прокофьев һәм Макаров, Өфөгә юл алабыҙ тип күтәрелгәндә, 160 ат көслө «Саймльсон» двигателе көйһөҙләнә башлай. Ул

Өфөгә килеп төшкәндә 1924 йыдың 3 июне лә етә. Оҫҡос «агитсамолет» тип аталып, ҡабырғаһына «Лицом – к деревне. Сельскосоюз» тип яҙылған була. Тәүге көндәрҙә үк 10 осош яһап, самолет халыҡта рух күтәренкелеге уята. «Комсомолец – на самолет!» саҡырыуы Башҡортостанда киң яҡлау таба. «Осоавиахим» советы ҡарары менән 1934 йылдың 5 майында Ғәли Ишмырҙиндың тырышлығы арҡаһында Өфөлә аэроклуб ойошторола.

Анкета тултырғанда, һәр кем тиерлек «ярлы крәҫтиән ғаиләһенән» тип яҙа. Ә Ғәлиҙең атаһы Мөхәмәтйән – муллалар затынан, үҙе лә указлы мулла. Әммә Мөхәмәтйән крәҫтиән эшен дә ташламай, ерен үҙе эшкәртә. Ғөмүмән, абруйлы Мораҙым ауылы халҡы уны ихтирам итә.

Ишмырҙин үҙендә йәштәрҙе өйрәтеү һәм тәрбиәләү өсөн бөтмәҫ көс ташыуын тойомлап һөйөнә. Ләкин уға күберәк ерҙә йөрөргә кәрәк икән. Тәүге төркөм уҡыусылар дәрестәр башланғанды түҙемһеҙлек менән көтөүгә ҡарамаҫтан, кластар юҡ, уҡытыусылар етешмәй. Аэроклуб етәксеһе көн-төн саба, кәрәкле ишектәрҙе ҡыйыу ҡаға, теләгенә ирешмәйсә туҡтамай. Ниһайәт, авиамодель, планер һәм самолет секцияларында уҡыуҙар башланып китә.

Аэроклубҡа етәкселек итеү башта БАССР хөкүмәте рәйесе Зиннәтулла Булашевҡа йөкмәтелеп, ғәмәлдә эштәрҙе «Башосоавиахим» етәксеһе Александр Поляков алып бара. Икеһе лә хәрби тәжрибәле, ләкин авиация буйынса махсус белемдәре юҡ. Ишмырҙинға өмөт бағлай улар: белеме бар, тәжрибә туплаған, ысын командир. Осоу оҫталығына ла ирешкән.

Ҡыҙыл Армия сафына Ғәли 1920 йылда 17 йәше тулыр-тулмаҫтан үҙ теләге менән яҙыла. Айырым Башҡорт уҡсылар бригадаһында хәрби бәрелештәрҙә ҡатнаша, уттар-һыуҙар кисә. Баку, Тифлис ҡалаларында кесе командирлыҡҡа уҡый, курс командиры булараҡ, үҙен яҡшы яҡтан күрһәтә. Мәскәү етәкселәренән тартынып тормайынса, егетебеҙ заманы өсөн алдынғы ПУ-2 самолеттары ҡайтарта. ВКП(б) өлкә комитеты, хөкүмәт ағзалары ла аэроклубҡа ярҙам итеп тора. Ошо нигеҙҙә икенсе уҡыу йылы уңышлы башлана, эштәр күңеллерәк төҫ ала. Парашютсылар төркөмө киңәйтелә, осоуға өйрәнеүселәр төркөмө иһә өс тапҡырға ҙурая. Төп милләт вәкилдәренә ишектәр киңерәк асыла. Тағы яңы самолеттар ҡайта, уҡытыу-күнекмә шарттары шаҡтай яҡшыра. Эшкә С. Е. Колпаков, А. И. Кондров кеүек тәжрибәле белгестәр саҡыртыла.

Бер йылдан авиамоделселәр Ю. Цветухин, Лена һәм Владимир Байковтар, Владимир һәм Сергей Камкиндар, Р. Ғәбиҙуллина, Л. Челнинцев, инструкторҙар А. Деменков, К. Игнатьев ярыштарҙа Бөтә Союз рекорды ҡуя. 16 йәшлек П. Левченконың «Өйрәк» исемле моделе 5300 метр осоп, белгестәрҙе шаҡ ҡатыра. Үҫмер исеменә хатта АҠШ-тан «мистер Левченко» тип мөрәжәғәт иткән хат килә. Авиамодель һыҙымдарын бүләк итеп, килешеү төҙөү тураһында тәҡдим яһала.

Ғәли Ишмырҙин тәртипте ҡаты ҡуя, инструктор һәм уҡытыусыларҙың уҡыусылар менән мөнәсәбәтен устав нигеҙендә ҡороуҙы талап итә. Күнекмәләр ваҡытында насар әҙерлеклеләргә килешеп ҡарау, осоуға етди әҙерлекһеҙ килеүҙәрҙе бөтөрөү сараларын күрә. Ишмырҙин килгәнсе мәктәптә ике авария булһа, уның тәүге йыл эшләүендә берәү ҙә юҡ. Элек даими күренеш һаналған эскелек, үҙ-ара һуғышыу күренештәре бөтөрөлә. Инструкторҙар Бикмөхәмәтов, Соколов, Слобинский, Деменков – иң яҡшылар тип табыла. Уҡыу кластарының йыһазландырылыуы юғары баһалана. Төркөмдәрҙең имтихан һөҙөмтәләре яҡшыра. Мәктәптә 11 осоусы, 12 инструктор, 15 авиатехник әҙерләү уңышлы тамамлана. Өфө аэроклубы автономиялы республикалар клубтары араһында беренсе урынға сыға.

«Яҙ етеп килә, – тип әсенә Ишмырҙин, – ә беҙҙең самолеттар һаман йүнәтелмәгән. Осоусылар төркөмөн дә 300 кешегә еткерергә, дүрт класс асырға кәрәк. Ҡайҙан табырға? Ремонт мастерскойы һаман ҡағыҙҙа ғына…»

1937 йылдың йәйенә сыҡҡанда ашхананы сафҡа индереү өсөн кәрәкле 100 мең һумдың ни бары 7 меңе бар. Ангар төҙөү өсөн дә 40 мең һум табырға кәрәк. Һуҡыр бер тин юҡ. Хеҙмәт хаҡы түләү мөмкинлеге һыуға төшкәндәй юғалды. Ревизия шуны асыҡланы: «Башосоавиахим» етәкселәренең береһе аҡсаның бер өлөшөн үҙләштергән. Быны Ишмырҙинға ҡарата хөсөтлөк тимәй, нисек атайһың? Ләкин ул үҙенекенә ирешә: йәйге күнегеүҙәр ойошҡан рәүештә башлана, штаб яланға күсерелә. Самолеттарҙың көнөнә ни бары 1 сәғәт 13 минут осоуы асыҡлана. Инструкторҙар үҙ-ара талашып, эш ваҡытын бушҡа уҙғара икән. Техниктар самолетты әҙерләүгә илке-һалҡы ҡарай.

Һөйләшеүҙәргә ҡолаҡ һалғас, шул асыҡлана: курсанттар кемдәрҙеңдер донъяуи хәлен тикшереү менән мәшғүл. Имеш, синфи күҙлектән үткәрәләр, фекер туплайҙар. Шул арҡала үҙ-ара талаш башлана, ваҡыт белем алыуға түгел, урынһыҙ иҫәпләшеүгә сарыф ителә. Анализ һөҙөмтәләре бойороҡта сағылыш таба ла бит, тик был юл менән генә психологик хәлде төҙәтеү мөмкинме һуң?

«Дошман эҙләү», «пролетар булмаған элементтарҙы фашлау» шул саҡлы киң тарала, хатта дәүләт әһәмиәтендәге сәйәсәткә әүерелә. «Синфи көрәш» тирмәне ил буйынса хәрәкәткә килтерелә. Ә уны туҡтауһыҙ әйләндереп тороусы көс – үҙәктә. «Правда» гәзитендә был тема буйынса ҙур мәҡәлә баҫыла һәм уны йыйылыштарҙа өйрәнеү, уға ярашлы эш алып барыу дәүләт кимәленә күтәрелә. Өфө аэроклубында, мәҫәлән, 1937 йылдың сентябрендә «Сит ил разведчиктарының шпионлыҡ-диверсия эшсәнлеге һәм уларҙың троцкийсы-бухаринсы эйәрсендәре» тигән доклад тыңлана. Шул мәлдә, «арағыҙҙа шикле бәндәләр юҡмы», тигән кеүегерәк фекер таратылып, «шпион эҙләү» кисектергеһеҙ бурысҡа әүерелә. Кешеләрҙе рентген аша үткәргәндәй тикшерәләр. Конспекттарҙы тәнҡит күҙлегенән ҡарап сыҡҡас, осоу бүлеге етәксеһе Колпаковтың эшендә «хилафлыҡ» табыла. Йәнәһе, ул самолетты ултыртҡанда тәгәрмәсе ергә ҡағылғансы штопорлауҙы талап итә. Колпаковҡа шик төшә. Соҡсоноу курсанттар араһында ла ҡыҙыу төҫ ала. Бер аҙна буйы бара был, ләкин етәкселәр араһында башҡаса ғәйепле кеше таба алмайҙар.

Ишмырҙинға ҡарата ла шик тыуа. Кемдер: «Ул Белорет клубына эшлекһеҙ механик ебәреп, эшкә тотҡарлыҡ яһаны»,– тип әйтеп һалмаһынмы! Йоҡомһорап ултырған зал дәррәү күтәрелә. Ултырғыстар шығырлай, һис көтмәгәндә, ҡиммәтле табышҡа тап булғандай, берәү һөрән һала: «Беҙ бында нисә көн пролетар булмаған элемент эҙләп баш ватабыҙ, ә ул – беҙҙең арала!» Икенсеһе: «Вәкил хаҡ һөйләй, беҙҙә тәртип насар. Кем тәртип боҙа, шуны Ишмырҙин Белоретҡа һөргөнгә ебәрә. Эшме был?» – тип ҡеүәтләй.

Тау башынан этеп ебәрелгән таш емергес көс ала. Ишмырҙинды ла Колпаков кеүек ғәйептәргә маташалар. Аҙаҡ Колпаков партиянан сығарыла, ә Ишмырҙиндың шәхесенә ҡағылышлы ғәйеп табылмағас, уның «эш»ен Үҙәк совет ҡарамағына бирергә булалар. Хистәр ташҡандан-таша. Уҡытыу-өйрәтеү бурысы хәтерҙән сыға. Дошман элементтарын эҙләү – иң мөһиме. Шуны ғына көткәндәй, «Правда» һәм «Известия» гәзиттәрендә Башҡортостанда буржуаз милләтселәр тураһында мәҡәлә сыға. Аэроклубта милли кадрҙар бармы – бар. Әйтәйек, Ғәзиз Назаров – төп башҡорт, Түбәнге Ләмәҙ ауылынан. Бер йылда ПУ-2 бомбардировщигын үҙләштергән, «бик яҡшы» уҡый. Медицина институты талибәһе Фәтиха Ғәлекәеваға «мотоцикл ене» ҡағылған. Бер нисә спорт төрө буйынса рекорд ҡуйған. Осоусы имтиханын да уңышлы тапшырған.

«Минең хәҙер үк осоусы булғым килә!» – тип килә ул аэроклубҡа. Ҡыҙҙы планеризм секцияһына яҙалар. Бер йыллыҡ программаны өс айҙа үтәп, Фәтиха Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары араһынан беренсе булараҡ, «штаттан тыш планерсы-иструктор» исеменә лайыҡ була. Осоусы имтихандарын да ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уңышлы тапшыра. Институт тамамлағанда Ғәлекәева үҙенең өлгөрлөгө, оҫталығы менән күптәрҙе таң ҡалдыра. Гәзиттәрҙә уның тураһында: «Үҙе талибә булыу өҫтөнә осоусы ла, афарин!»– тип яҙып сығалар. Был алдынғы ҡарашлы, һоҡланғыс холоҡло ҡыҙҙың артабанғы яҙмышы нисегерәк булды икән – билдәһеҙ.

Күккә ынтылыусы йәштәр араһында ауылдаштар ҙа бар. Бынсыһы – Ишмырҙиндың тырышлығы. Шулай ҙа башҡорт ҡыҙҙары һәм егеттәре бармаҡ менән генә һанарлыҡ. ВКП(б) өлкә комитеты заданиеһын үтәйҙәр ҙә ул. Ғәлиҙең яҡташтары – Ауырғазы районы йәштәре аэроклубҡа үҙҙәре араһынан иң яҡшыларҙы һайлап ебәрә һәм башҡа район комсомолдарына ошо үрнәккә эйәрергә саҡырып, гәзиттәрҙә сығыш яһай. «Районыбыҙҙан Ишмырҙин һәм Алексеев кеүек батыр егеттәрҙең сығыуы менән ғорурланабыҙ һәм улар ярҙамында осоу техникаһын ҡыйыу үҙләштерәсәкбеҙ», – тип ышаныс белдерә улар.

Стәрлетамаҡ һәм Белорет ҡалаларында аэроклуб эшсәнлегендә лә Ишмырҙин уңыштарға ирешә. Филиал Благовещен ҡалаһында ла асыла. Ошонда уҡыған Г. И. Мушников Бөйөк Ватан һуғышында Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды.

Республика йәштәренең авиацияға әүҙем ынтылышы хөкүмәт тарафынан яҡлау табып, аэроклуб эше ыңғай баһалана. Ләкин үҙәктән төшөрөлгән «дошмандарҙы фашлау» талабы, күкте ҡаплаған ҡара болот һымаҡ, йөрәктәргә шом һала. «Осоавиахим» үҙәк советы пленумындағы, урындағы ойошмаларҙы «дошмандарҙан таҙартырға!» тигән күрһәтмә башлыса етәксе кадрҙарға ҡағылып, уларҙы нигеҙһеҙ эштән бушатыу башлана. Был тулҡын Өфөнө лә ситләтеп үтмәй, йышыраҡ Ишмырҙин телгә алына. Тиҙҙән «Башосоавиахим» үҙәк советы рәйесе Мищенко, Ишмырҙин һәм Колпаковтарҙы ҡулға алалар. «Уның атаһы мулла!» – Мораҙым егетенә тағылған төп ғәйеп ошо.

Донъя киңлеге төрмә камераһы, зәңгәр күк еүеш түбә менән алмашына. Күҙ алдары ҡараңғылана, уй-фекер тарҡала. Ишмырҙинды нимәлә ғәйепләгәндәрен үҙҙәре лә белмәй. Һәр көн, һәр төн һорау алыуҙар. «Фәлән кеше – шпион, диверсант, һин улар менән дуҫ, әшнә, араҡы эскәнһең…» Ишмырҙин ғәйептәрҙе танымай, сөнки яһалма, ялған икәнен белә. Язалау көсәйтелә. Төн йоҡоһонан мәхрүм итеү өсөн төрлө ысулдар ҡулланыла. Тоҙло балыҡ ашатып, һыуҙан мәхрүм итеү, мәҫәлән. Кескәй баланың илаған тауышын ишеттереү һ.б. Был мәсхәрә аҙналар, айҙар дауам итә. Сергей Колпаков – Ғәли Ишмырҙиндың уң ҡулы – карцерҙа йығылып үлә. Ғәли иһә сыҙамлыраҡ булып сыға. Уны, «ғәйебе юҡ» тип, ирекке сығарырға мәжбүр булалар. Партия сафында, вазифаһында тергеҙәләр.

Ә ҡояш күктә һаман алтын нурҙар һибә, донъялар киң, иркен икән. Ҡоштар ҙа күңелле һайрай. Ләкин Ишмырҙин ғына уларҙы күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Уның йәне тәнендә көс-хәлгә эленеп тора, аяғын күтәреп атлар хәле лә юҡ. Дауаханаға инеп ятыр ине, алмайҙар. Ауылға, ата-әсәһе йортона ҡайтып йығыла Ғәли. Ауылдаштары уға ярҙам күрһәтә, теләктәшлек белдерә. Аяҡҡа баҫҡансы шулай айҙар үтеп китә.

Үҙ аҡылы, үҙ көсө менән ойоштороп, һәйбәт кенә эшләп килгән клубы Ғәлигә шатлыҡ бирмәне. Берҙән, кәйефе ҡыуанырлыҡ түгел; икенсенән, элекке

тәртиптең эҙе лә ҡалмаған. Үҙе юҡтың – күҙе юҡтан файҙаланып, яйға һалынған эште тарҡатып бөтөргәндәр. Эште абруйы шикле бәндәләргә тапшырып, ғәҙелһеҙлек алдан йөрөгәндә, тормош ыңғай юлдан ситләшмәй ни эшләһен?

Шулай ҙа халыҡта киләсәккә ышаныс юғалмаған әле. Яңы тормош төҙөйбөҙ, илдең иҡтисадын, оборонаһын нығытабыҙ тип тырышҡандар етерлек. 1938 йылдың 18 августында беренсе тапҡыр «Авиация көнө» билдәләнә. Ишмырҙин тағы ла республика йәштәренә мөрәжәғәт итә: «Йәштәр – самолетҡа! Осорға өйрәнеү өсөн шарттар етерлек. Мин бигерәк тә ауыл йәштәренең был маҡсатҡа ынтылыуҙарын теләйем. Эште мәктәптәрҙә авиамодель түңәрәктәре ойоштороуҙан башлағыҙ! Авиацияның серлелеге алдында туҡтап ҡалмағыҙ. Һеҙҙең көс уға етерлек. Теләк кәрәк».

Беренсе һөнәри байрам халыҡты ылыҡтыра. Осоу оҫталығы күрһәтеү – программаның төп өлөшө. Бигерәк тә Александр Деменковтан мөғжизә көтәләр. Уның булдыҡлылығы бөтәһенең күңеленә хуш килә. Көтмәгәндә егеттең самолеты күккә атыла, текә боролоштары менән шаҡ ҡатыра, таштай түбәнгә ҡолай. Һигеҙле боролмалары һүрәттәгесә теүәл. Юғары пилотаж! Халыҡ геү килә. Йәшәйбеҙ икән….

Көтмәгәндә комиссия ағзаларының йөҙөнән йылмайыу ҡасты: «двигатель һүнде». Һүҙ ауыҙҙан ҡолаҡҡа әйтелһә лә, халыҡ йөрәге һиҙгер бит. Хәл хәүефле буласағы һәр кемдең йөрәге аша үткәндәй булды. Ғәли Ишмырҙиндың ихтыярын шом биләп алды. Кем-кем, ә ул барыһы өсөн дә шәхсән яуаплы. Күптән «дошман» мөһөрө һуғылыу алдында тора. Самолет үҙ күсәрендә бер әйләнде, ике… Ҡолаясағы ҡотолғоһоҙ, тигән фекер тыуа биреп ҡуйҙы. Халыҡ тын да алмай күҙәтә. Самолет тура ергә яҡынлай. Мороно менән килеп ҡаҙала тип торғанда, Деменков уны буйға һалып өлгөрҙө. Бер сама осҡандан һуң, шыма ғына ултыртып та ҡуйҙы…

Егетлек ерҙә ятып ҡалмай. Һәр кем тормошта үҙ һуҡмағын ярған кеүек, ауыл егете Ғәли Ишмырҙин күктә үҙ юлдарын һалып, Деменков кеүек таҫыллы егеттәрҙе үҙ һөнәренә өйрәтте, ҡыйыулыҡҡа, хәүеф алдында юғалып ҡалмаҫҡа өндәне. Уның мәктәбенең үҙенсәлектәре, уҡытыу-күнекмә методикаһы өйрәнелгәне юҡ әле. Техник күҙлектән, бәлки, ул бөгөнгө шарттарҙа әһәмиәтле лә түгелдер, ә бына педагогика, методика күҙлегенән унда күптәр өсөн «оло академия» барҙыр.

Оло байрам да уның һыҙланыуын баҫа алманы. Төрмәнән «под чистую» сығыу менән генә бөтәһе лә үҙ урынына ҡайтмаған әле. Элек пак йөҙгә бысраҡ атҡан әҙәмдәр һаман бирешергә йыйынмай, ошаҡ яҙалар, Ғәлиҙең һәр хәрәкәтенән хилафлыҡ табырға тырышалар. Комиссар булып йөрөгән берәү партия органдарына яҡынлығынан файҙаланып, һаман бысраҡ хаттар яҙып маташа. Ишмырҙин исеменә яҙылған бүләкләү материалдарын тейешле урындарға еткереү урынына, ҡайҙалыр олаҡтырған. Был бәндәнең ошондай әшәкелеге һуғыш башланғансы дауам итеп, шунда ғына яманаты сыҡҡан был комиссар ишаратын төрмәгә ултырталар. Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Эйе, Ишмырҙинда ла ғәйеп бар, осош маршрутын үҙгәртеп, тыуған ауылына ҡайтып килеүе – бер ҡараһаң, тәртип боҙоу түгелме ни?

Шулай ҙа вазифаһын еренә еткереп башҡара ул. Белгестәр туплай, станок паркы булдыра, биналар төҙөй, запас частар, инструменттар ҡайтара, двигателдәрҙе йүнәтеү сифатын яҡшырта. Кадрҙар, уҡыусылар менән эшләүҙе бер

көнгә, бер сәғәткә ҡалдырып тормай. Шул арала ғәйбәтселәр, тәгәрмәскә таяҡ тығыусыларҙың бер нисәһен эштән ҡыуҙыра.

Үҙ иркеңдә, яратҡан хеҙмәтеңдә, үҙең ойошторған киң тармаҡлы аэроклубта эшләп, шәхесеңдең халыҡ, ил, Ватан өсөн кәрәклеген тойоп йәшәү – бәхет түгелме ни? Оло бәхет. Юҡ-юҡ та, Ишмырҙин кабинаға ултыра, «делай как я», тип өйрәтә. Быуаттар, мең йылдар буйына атҡа атланып сапҡан, үҙен осор ҡоштарға тиңләгән толпар образы тыуҙырған башҡорт балаһы. Күккә, болоттарға ынтылышын шуның менән кәүҙәләндергән. Ә ул, Ғәли Ишмырҙин, «тимер ҡош»ҡа атланып оса. Ул ҡошто нисек теләй, шулай ихтыярына буйһондора. Был да бәхет, егетлек бит.

Яһалма ҡаршылыҡтар бихисап булыуға ҡарамаҫтан, Өфө аэроклубы яңынан алға сыға, ил күләмендә танылы. Планеристар ярыштарында ете Бөтә Союз һәм донъя рекордтары ҡуйыла. Осоусылар төркөмөндә уҡып сығыусылар йылдың-йылы хәрби училищеларға юл ала тора. Ниндәй генә аҫыл егеттәр һәм ҡыҙҙарҙы уҡытып-өйрәтеп, бай тормош юлына оҙатманы Ғәли Ишмырҙин! Аэроклубты бөркөт ҡаяһы, ыласындар ояһы, тип атау хаҡлы булыр ине. Осмай түҙә алмаған ата бөркөт ҡорҙо был ояны. Ҡанаттарын киң йәйеп, зәңгәр күккә ынтылырға өйрәтте. Һәр береһенә көслө ҡанат ҡуйҙы.

Бөркөт осмай түҙәме ни?

Ыласын һауала ғына үҙ булмышын раҫлай. Салт аяҙ, ҡояшлы, һандуғаслы, сәскәле 22 июнь иртәһендә аэродромда мөһим ярыштар башланып тора. Күҙәтеүселәр араһында ситтәр күп түгел, шулай ҙа осоу күнекмәләрен яратып ҡараусылар килмәй ҡалмаған. Самолеттарҙың береһе ҡарлуғастай атылһа, икенсеһе төйләгәндәй һалмаҡ. Парашют көмбәҙҙәренең күк йөҙөн биҙәүе – сәскәләрҙе хәтерләтә. Һәр кем нисек тә үҙ һәләтен күрһәтеп ҡалырға ынтыла. Ярыш көнө бит.

Ишмырҙин һуңлабыраҡ килде. Ҡобараһы осҡан, быны бөтәһе лә күрҙе. Шым ғына үҙ урынына үтте. Бер аҙ ҡарап торғандың һуңында көс-хәл менән бер һүҙ әйтә алды:

– Война!

Гитлер Германияһы һуғыш башлағанын шундуҡ аңланылар.

Митинг ҡыҫҡа булды. Һүҙ һуңынан ҡыҙҙы: берәүҙәр дошман һөжүмен хәҙер, бөгөн булмаһа, иртәгә кире ҡағыу тураһында шапырынһа, икенселәр төплө уйларға саҡырҙы. Үҙ теләктәре менән фронтҡа китеүселәр исемлеген төҙөү башланды. Ишмырҙин ҡыҙыу ҡанлыларға ашыҡмаҫҡа кәңәш итте.

– Бөтәгеҙ ҙә урынында ҡала, – тине ул ҡәтғи рәүештә. – Һәр кем үҙ вазифаһын юғары талапсанлыҡ менән үтәргә бурыслы. Кәрәк булғандарҙы үҙ сиратында саҡыртырҙар.

Бер нисә көн эсендә хеҙмәткәрҙәр тулы состав менән фронтҡа китте. Әҙерлекле иптәштәренән ҡалғас, Ишмырҙин үҙен ҡанаты ҡайырылған бөркөттәй хис итте. «Фронт тураһында һүҙең сыҡмаһын, – тинеләр уға. – Аэроклуб эшен фронт мәнфәғәттәренә буйһондор». Осоусылар әҙерләү заданиеһы өс тапҡырға арттырылды. Техник яҡтан иң яҡшы самолеттар һуғышҡа алынды. Эш шарттары саманан тыш ауырлашты. Тик бер яманның бер яҡшыһы була икән: Ишмырҙинды әҙәрлекләү шып туҡтаны. Бөтә бысраҡ ҡағыҙҙар өҫтәлдән һыпырып ташландымы ни?!

Һуғыш – ярыш яланы түгел. Өс көндән Владимир Камкиндың һәләк булыуы тураһында ҡайғылы хәбәр килде. Ул Кузнецов төркөмөнөң һауа һуғышында

«Юнкерс»ты ҡолатыуы тураһында шатлыҡлы хәбәре менән алмашынды. Икенсе көндө лә дошмандың ике самолетын ҡолатҡандар. Кузнецов алышта йәрәхәтләнә, ләкин самолетын үҙ аэродромына еткерә.

Аэроклуб фронттағы хәл менән ҡыҙыҡһынып йәшәй. Мәскәү янындағы һуғышта Өфө осоусыларының батырҙарса һуғышыуы юғары даирәләрҙә ҡыҙыҡһыныу уята. ВЛКСМ үҙәк комитетынан телеграмма килә: «Егеттәрегеҙҙең Ватанға тоғролоғо һәм фронттағы батырлыҡтары һоҡландыра. Улар бөтә ауырлыҡтарҙы еңә барып, һуғышсан бойороҡто теүәл үтәй».

Мәскәүҙе дошмандан ҡурсалағанда Петр Макаренко, Михаил Никонов, Борис Жданов, Петр Грибов, Иван Ясин, Анатолий Маланин, Кәрим Хәбиров, Дмитрий Стародубов, Михаил Ситников, Виктор Дьяконов һәләк булды. Улар ҙа аэроклуб бөркөттәре ине.

Ғәли Ишмырҙин һуғыш осоронда өс аэроклубҡа етәкселек итте. Өйрәнеү осоуҙары менән бергә ашығыс йөк ташыу өсөн дә самолет бирергә тура килә. Яғыулыҡ-майлау материалдары, запас частар етешмәй. Әҙерлекле инструкторҙар ҙа кәрәк. Яңы типтағы самолеттарҙы кемдәр «йүгәнләр?»

Аэроклуб эшмәкәрлеген фронт талаптарына яраҡлаштырып, кадрҙар әҙерләүҙә уңыштарға ирешкән өсөн Ғәли Мөхәмәтйән улы Ишмырҙинға майор дәрәжәһе бирелә. Тормош ни саҡлы һынауҙар, кәртәләр ҡормаһын, Ғәли юлын үҙе яра, илгә, Ватанға хеҙмәт итә. Һис кем белмәгән эште яйға һала.

Уның осоуҙан туҡтағаны юҡ. Ашығыс йөкмө, инструкторҙар вазифаһын үҙ өҫтөнә алыуы – өҫтәмә эш табылып тора. Был көндө ул Стәрлетамаҡ янындағы аэродромдан күтәрелде. Маневрҙың юғары үрнәген күрһәтеп кинәнес алды. Еңел һәм матур осто. Ыласын тиерһең! Ә ергә ултырыу ваҡыты еткәс, самолет хужаһына буйһоноуҙан баш тартты ла ҡуйҙы. Һуңынан идара итеү сымы өҙөлгәне асыҡланды...

Юғары вазифалар ҡул ҡуйған некрологта Ғәли Ишмырҙиндың хеҙмәттәренә лайыҡлы баһа бирелә. Хакимлыҡ итеүсе системаны тулыһынса ҡабул итеп бөтөрмәһә лә, йөкмәтелгән эште еренә еткереп башҡарырға тырышыуы менән ул абруй ҡаҙанды. Өфө аэроклубы күгендә ҡанат йәйгән бөркөттәрҙән 14 осоусы Бөйөк Ватан һуғышы дәүерендә Советтар Союзы Геройы исеме алды. Уларҙы Ғәли Ишмырҙин өйрәтеп сығарҙы.

Мораҙым ауылы халҡы мәшһүр яҡташы Ғәли Ишмырҙинды онотмай. Башҡортостан күгендә беренсе булып самолет уйнатҡаны ла, ергә ултыртып, халыҡты таң ҡалдырғаны ла, ихлас аралашҡаны ла – бөтәһе лә иҫтә. Район һабантуйҙары йыш ҡына уның яҡты иҫтәлегенә бағышлана. Атаһы Мөхәмәтйән ағайҙың колхозда тырышып эшләүен дә хәтерләйҙәр. 2003 йылдың йәйендә, Ғ. Ишмырҙиндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы, Мораҙым ауылы янындағы ҡалҡыулыҡта самолет-һәйкәл ҡуйылды. Башҡортостан РОСТО советы рәйесе генерал Таңғатаров тырышлығы менән Ғ. Ишмырҙиндың яҡты иҫтәлеге ошо рәүешле мәңгеләштерелде. 70 йыл элек ул ойошторған Өфө аэроклубы әле лә эшләй. Сибай, Күмертау, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡалалары филиалдарында үҫмерҙәр зәңгәр күк серҙәрен өйрәнә.

**Фәрит ВАХИТОВ,**
**Республика Хәрби дан музейының ғилми хеҙмәткәре.**



**Мәүлит КӘРИМОВ**

## Ҡыйын икән

*Ҡыйын икән, эштән ҡайтҡан саҡта*
*Өйҙә көткән кешең булмаһа;*
*Ишек асып, алъяпҡысын тағып,*
*Һөйгән йәрең баҫып тормаһа.*

*Йылы аштар көтмәй өҫтәлеңдә,*
*Быуын бөрккән эҫе бәлештәр.*
*Йомшап китеп күңел тулышҡанда,*
*Күҙҙән таммай, кипкән ул йәштәр.*

*Ашыҡмайса ғына ҡайтҡан ерең*
*Өй ҙә түгел әле, ә ятаҡ.*
*Урап-урап үтәм урамдарҙы,*
*Керәһе лә килмәй шул ҡайсаҡ.*

*Әйтер кешем дә юҡ һуңлағанда:*
*«Ҡайҙа булдың шулай оҙаҡлап?»*
*Йүгереп тә генә хәҙер барып,*
*Алыр инем уны ҡосаҡлап.*

*Тик ҡайтамын тағын буш бүлмәмә*
*Шығырым да тулы ятаҡтың.*
*Буш бүлмәмдә, буш күңелемдә лә*
*Һыуыҡ еле уйнай ят яҡтың.*

---

*Мәүлит Кәримов 1962 йылда Белорет районының Үткәл ауылында тыуған. Совет Армияһында хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң, 2007 йылға тиклем, Стәрлетамаҡ ҡалаһының «Сода» акционерҙар йәмғиәтендә токарь була. Әлеге ваҡытта Санкт-Петербург ҡалаһындағы «Турбоатомгаз» заводында эшләп йөрөй.*

*«Ағиҙел»дә тәүләп баҫыла.*

## *Йыйынамын Питерға*

*Мин йыйынам һиңә, ғорур Питер,*
*Ташлап тамыр йәйгән еремде.*
*Оҙаҡҡамы китәм йә аҙғамы? —*
*Бер кем белмәй ошо серемде.*

*Дуҫ-иштәрем ҡала, яҡындарым,*
*Һөйгән кешем ҡала ҡәберҙә.*
*Тик ҡайҙа ла булһа ғәзиз башым,*
*Һеҙ ҡайҙа ла бергә был ерҙә.*

*Ярлыланмаҫ минһеҙ тыуған илем,*
*Мин барыуҙан Питер байыҡмаҫ.*
*Нева йылғаһына һоҡланғанда,*
*Ашҡаҙарым ағыр — һайыҡмаҫ!*

*Әрнеп янған яңғыҙ йөрәгемде*
*Баҫайым тип, әллә китәмме?*
*Миңә яҡын кешеләрҙе әллә*
*Яңғыҙлыҡҡа дусар итәмме?*

*Серҙәремде, ҡайғы-хәсрәтемде*
*Ҡалдырып шул булмай китергә.*
*Хистәремде, хәстәремде алып,*
*Мин йыйынам алыҫ Питерға!*

## *Һағындыра*

*Ғүмеремдең бөгөн шулай*
*Һикәлтәле бер мәле.*
*Ҡара көндәр генә түгел,*
*Аҡ төндәре бар әле.*

*Артҡа әйләнеп ҡарайым:*
*Булған шатлыҡ, ҡайғыһы.*
*Бергә үҫкән дуҫтың хәҙер*
*Исәнләшмәй ҡайһыһы.*

*Аҡ төндәрҙә ҡабат тойҙом*
*Аяҡ баҫҡан еремде.*
*Аҡ төндәрҙә ҡабат таптым*
*Дуҫ, дошман һәм йәремде.*

*Үпкәм дә юҡ үткәнемә,*
*Үткәнһеҙ юҡ киләсәк.*
*Ҡул бирмәгән дуҫымдан да,*
*Көлһә, дошман көләсәк.*

*Тик ҡайсағын аҡ төндәр ҙә*
*Үткәнде сағылдыра,*
*Ҡара булһа ла ул көндәр,*
*Нишләйем — һағындыра.*

## Мөхәббәтһеҙ ғүмер юҡ

Һөйөп һәм һөйөлөп кенә
Булһа ғүмер итеүе,
Һиҙмәй ҡалыр инек шунда
Был ғүмерҙең үтеүен.

Тик кәрәкме тиҙ үтеүе?
Ғүмер былай ҙа ҡыҫҡа.
Ә йөрәккәй, һөйөр өсөн,
Атлығып тибә тышҡа.

Мөхәббәтһеҙ йәшәп ҡара,
Мөхәббәтһеҙ юҡ ғүмер.
Мөхәббәтһеҙ үткән тормош —
Янмай быҫҡыған күмер.

Һөйөгөҙ һәм һөйөлөгөҙ!
Донъя шунан яралған:
Яңғыҙ аҡҡан йылғаны ла
Ҡосағына яр алған.

## Әйтмәй ҡалдым

Ҡырпаҡ ҡарҙар яуып үтте,
Ерҙә йылы яҙ ине.
Ҡараштарың һалҡын бөрктө,
Элек тулы наҙ ине.

Ҡырпаҡ ҡарҙар иремәне,
Көндәр йылы булһа ла.
Ауыр һүҙҙәр әйтмәй ҡалдым,
Күңелдәрем тулһа ла.

Ҡырпаҡ ҡарҙар ергә ятты,
Тик был һыуыҡ ҡыш түгел.
Яҙҙай наҙлы ҡарашыңды
Юҡһынып көтә күңел.

Йылмай, ҡояш! Һип нурыңды,
Ирет яуған ҡарҙарҙы.
Күргем килә күҙҙәреңдә
Наҙлы, аяҙ яҙҙарҙы.



**Земфира АҠБУТИНА**

## *Еләк йыйғанда*

*Эй, еремдең йомарт, ихлас сағы:*
*Мәтрүшкәләр еҫе — һауала!*
*Йүкә сәскә аткан июль айы.*
*Тау түшендә еләк ҡыҙара!*

*Ергә ҡояш ҡыҙыу нурын ҡаҙай,*
*Үлән еҫе тынды иркәләй.*
*Тау түшенә ятып еләк йыям,*
*Ә йәндәрем — иреп китерҙәй...*

*Еркәйемдең йылы тынын тойоп,*
*Еләк йыям. Күңел һағая:*
*Күпме ерҙәштәрем сит ерҙәрҙә*
*Илен һағ(ы)нып бөгөн һарғая.*

*Еләк кенә сағым. Тау түшендә*
*Еләк йыям тыуған илемдә!*
*Сит яктағы ерҙәштәрҙе йәлләп,*
*Бөрсөк йәшем тамды еремә.*

## *Яҙҙауарҙа*

(Зилә, Зәмиә апайымдарға)

*Иҫтәр китеп, ҡаяларға баҡтыҡ,*
*Һемерҙек беҙ йәйҙең һулышын.*
*Яҙҙауарҙа — йән йәннәттә кеүек —*
*Бала саҡҡа ҡайттыҡ ҡыуышып.*

---

*Земфира Аҡбутина (Яубаҫарова) Бөрйән районы Тимер ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Хәҙерге көндә Ейәнсура районы Ибрай ауылында йәшәй, мәктәптә укыта.*

*Үрә баҫҡан шыма ҡаяларҙы*
*Ағиҙелдең суп-суп үбеүе,*
*Мәмерйәгә — Ҡалҡаманға, ана,*
*Туристарҙың менеп китеүе...*

*Ҡарт бабамдар бында яҙлағандар —*
*Бында тарих йөрөй йәнәшә.*
*Риүәйәттән төшкән Түрмән ҡарт та*
*Ана, гүйә, беҙгә өндәшә.*

*Бала саҡтан бында бесән саптыҡ —*
*Яҙҙауарҙа — йәндең рәхәте.*
*Ә йәй еләк-емештәрен һуҙҙы,*
*Тәбиғәт тә йәйҙе йәннәтен.*

*Шулай көндөң үткәнен дә һиҙмәй,*
*Беҙ, өс туған, апай-һеңлебеҙ.*
*Төн йөҙөндә айҙың яҡтыһында*
*Эй йырлашып ҡайтып киләбеҙ...*

*Тамырланды йәндә. Тыуған ергә*
*Һөйөү хисе йәндә тулышты.*
*... Яҙҙауарҙа үткән бөгөнгө көн*
*Иркенәйтте беҙҙең һулышты.*

* * *

*Ерҙән генә өмөт итмәгәнде,*
*Күктән генә төшкән һин икән.*
*Бәхет һуҡмағында йәнең янһа,*
*Тамуҡ ялҡынына тиң микән?!.*

*Күҙең ялҡынынан тәнем янып,*
*Бер сыҡты ла йәнем, бер инде.*
*Семтем генә бәхет татығанға,*
*Тауҙай ғазап йөкмәп, бар инде!..*

## Һөрән

*Бала саҡта булған бер хәл*
*Иҫемә төштө әле.*
*Ҡаршылағы бейек тауға*
*Үрмәләп менгән мәлем.*

*Менеүен беҙ менгәнбеҙ ҙә,*
*Инде төшөргә кәрәк!*
*«Бейектән төшмәйем!»— илап,*
*Еңештем инде һәләк...*

*Хәҙер ғүмерем тауының*
*Башынан ҡарап торам.*
*«Төшкөм килмәй бейек тауҙан»,—*
*Күңелем һөрән һала...*



**Динә НИҒМӘТУЛЛИНА**

## *Был донъялар…*

*Был донъялар мәңге йоҡлай алмай.*
*Уяна! Тейеш уянырға!*
*Һүлпән ҡуҙҙан, өрһәң, ялҡын сыға*
*Һәм керешә дөрләп янырға.*

*Кешеләр ҙә мәңге һуҡыр булмаҫ.*
*Бикле булмаҫ һәр саҡ йөрәктәр.*
*Ғәмһеҙҙәрҙең ғүмере — ерҙән эҙһеҙ,*
*Өнһөҙ үтеп барған өрәктәр.*

*Башҡортҡайым башҡа өрәк булмаҫ!*
*Ғәрлек булмаҫ уны күргәндә.*
*Тыуған тупраҡ ауырһынмай әйтер*
*«Уланым» тип башҡорт үткәндә.*

*Был донъялар мәңге йоҡлай алмай!*
*Килер әле ырыҫ был ергә!*
*Бер уяныр башҡорт! Уянһын ул —*
*Йоҡо быҒауҙарын еңергә!*

---

*Динә Ниғмәтуллина Ишембай районы Эткол ауылында 1988 йылда тыуған. Эткол урта дөйөм белем биреү мәктәбен тамамлағас, Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға инә. Әлеге көндә 5-се курста уҡый. «Ашҡаҙар» әҙәби ижад түңәрәгенә йөрөй.*

## Һуңғы тарпан

*Һуңғы тарпан саба. Быуаттарҙы*
*Тояҡҡайы яра толпарҙың.*
*Тарпан елә... Минутына уҙа*
*Ваҡыт арауығын йылдарҙың.*

*Һуңғы тарпан саба. Быуаттарҙа*
*Ҡолонсағын эҙләй зарығып.*
*Тарпан елә тарих төпкөлөнән*
*Йөҙәр йылдар буйы талсығып.*

*Тарпан елә. Яра тояҡҡайы*
*Үләндәрҙең хәтфә балаҫын.*
*Тарпан саба быуат төпкөлөнән*
*Кемгә илтергә тип мираҫын.*

*Ҡолон тора ни эшләргә белмәй:*
*Ырыуынан ҡалған етемәк.*
*Тамырҙарын кемдәр сапты икән? —*
*Хәтерләтә ҡолон ҡыу-көнгәк.*

*...Малай уйнай. Башҡорт балаһы ул.*
*Тик урыҫса ғына һупалай.*
*Телен белмәй, рухы һынғандарҙан,*
*Көнгәктәрҙән әллә был малай?..*

*Тарпан саба... Әрнеүенән умрып*
*Тешләп йыртҡан аҫҡы иренен.*
*Ә ҡолонсаҡ уйнай һаман ғәмһеҙ,*
*Тоймайынса зарын еренең.*

*Һуңғы тарпан тояҡҡайы менән*
*Ватып йыҡты һуңғы кәртәне.*
*Быуат буйы ташып әрнеп килгән*
*Бушаясаҡ уның елене.*

## МӨХӘББӘТ – УЛ ҮҘЕ ИҪКЕ НӘМӘ…

Өҫтәлемдә бер тамсы һыу кеүек бер-береһенә оҡшаш ике мөхәббәт китабы ята. Беренсеһе башҡорт телендә. Ул Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә донъя күргән Татарстандың халыҡ шағиры, дәүләт эшмәкәре Роберт Миңнуллиндың “Мин яратам һине” тип исемләнгән миниатюр форматтағы китапсығы. Икенсеһе шундай уҡ тышлыҡ һәм эшләнеш менән Татарстан китап нәшриәте табаһынан төшкән. Быныһы – Башҡортостандың халыҡ шағиры, әҙәбиәт белгесе, дәүләт эшмәкәре Рауил Бикбаевтың “Оноторлоҡ булдымы ни?” тигән мөхәббәт шиғырҙары йыйынтығы. Ике олпат әҙип бер-береһенең китаптарын үҙ телдәренә тәржемә иткәндәр һәм бер-береһенә баш һүҙ ҙә яҙғандар. Ике төрлө мөхәббәт донъяһы, кисерештәр даръяһы, йәшәйеште, бәхетте таныу фәлсәфәһе был.

“Мөхәббәт – ул үҙе иҫке нәмә, һәр бер йөрәк уны яңырта”, – тигән татар әҙәбиәте классигы Һаҙи Таҡташ. Эйе, һәр бер ҡәләм эйәһе был хистән үҙенсә ҡеүәт, илһам, йәшәү көсө ала. Һәр кемдең яҙмышы үҙенсә булған кеүек, мөхәббәте лә үҙгәлекле бер моң. Тылсымлы һөйөү донъяһы кемделер ләззәт диңгеҙҙәренә сумдырһа, икенсе берәүҙәрҙе күберәк һағыш утында яндырырға мөмкин.

Ике әҙиптең мөхәббәт китаптарын уҡып сыҡҡас, үҙеңде илаһи һөйөү хисенең ҡапма-ҡаршы ҡитғаһында хис итәһең. Ләкин шуныһы хаҡ: ниндәй генә бәхетле йәки фажиғәле булмаһын, мөхәббәттең асылы бер үк. Бер-береһенән ныҡ ҡына айырылып торған әлеге ике лирика быны шулай икәнлеген тағы ла бер ҡат дәлилләй.

Башҡортостан һәм Татарстан халҡы күңеленә үҙенең тыуған яҡ, әсәй, мөхәббәт тураһындағы моңло йырҙары менән килеп ингән Роберт Миңнуллиндың һөйөү лирикаһында бәхетле миҙгелдәр өҫтөнлөк итә. Ғүмерлек мөхәббәтеңде үҙ ваҡытында осратыу, ул тип ут йотоу, һағышланыу, һағыныу, ихлас аңлашыу һәм ғүмерең буйы ошо изге хискә тоғро ҡалыу – бик һирәктәрҙең генә өлөшөнә төшә торған оло бәхет ул. “Тоғро мөхәббәт ҡиссаһы”,– тип атай уның һөйөү лирикаһын ҡәләмдәше Рауил Бикбаев. “И, бәхетле Бикбай!”– тип һоҡлана, башҡорт дуҫының шиғырҙарын уҡығас, Роберт Миңнуллин. Илаһи мөхәббәт кисерештәрен үҙ йөрәге аша үткәргән әҙәм балаһы бәхетһеҙ була тиме ни? Гәрсә һөйөү көндәлегендә бәхетле миҙгелдәрҙән бигерәк, юғалтыуҙар, юҡһыныуҙар, ғажизланып әҙләнеүҙәр, һағышлы күҙ йәштәре өҫтөнлөк итһә лә. “Юғары әхлаҡлы кеше өсөн мөхәббәт – ул Ер өсөн балҡыған Ҡояштай”, – ти Бальзак. *(Любовь для высоконравственной натуры – то же, что Солнце для Земли.)* Ҡояшта ер янып-көйөп бөтөргә лә, гөл-баҡса булып сәскә атырға ла мөмкин бит. Ләкин ҡояшһыҙ йәшәүҙе лә, бәхетте лә күҙ алдына килтереп булмай ҙаһа!

Тәү уҡылышта бер-береһенә һис тә оҡшамаған Рауил Бикбаев һәм Роберт Миңнуллиндың мөхәббәт шиғырҙары араһына әллә күпме рухи “күперҙәр” һалырға була икән! Беренсе ҡарашҡа күҙгә салынмаған йәнәшәлектәр, уртаҡ образдар мөхәббәттең “иҫке нәмә” икәнлеген йәнә бер ҡат иҫбатлап тора, һәм “Мөхәббәт теорияһы”нда берҙәм асыштарға алып килә.

*Ҡыҙҙар халҡы бигерәк ҡыҙыҡ бит ул.*
*Тоталар ҙа толом ҡырҡалар.*
*Был шыма сәс менән егеттәргә*
*Оҡшамабыҙ тиеп ҡурҡалар*
*(9-сы бит).*

Рауил Бикбаевтың мөхәббәт китабын асып ебәргән ошо юлдарҙан яҡташы Муса Йәлилдең нескә юморы, шаярыулы романтикаһы яңғырап киткәндәй була. Ләкин башҡорт шағиры баштағы шаян фекергә яңыса моң өрөп, уны яңы ыҙандан алып китә, шиғырға ниндәйҙер юғалтыу, үкенес мотивтары килеп керә:

*Шул киҫелгән сәскә күҙҙәреңдән*
*Мин күрмәгән нурҙар түгелде.*
*Таратмасы, зинһар, толомоңдо,*
*Ҡанатмасы минең күңелде.*

**Толом** образы мөхәббәт лирикаһында, бигерәк тә төрки шиғриәттә, ҡатын-ҡыҙҙың матурлығын, тоғролоғон символлаштырыусы образ булараҡ йыш осрай. Роберт Миңнуллиндың да “Һаман иҫемдә” шиғырында былдай юлдар бар:

*Оҙон ҡара толомдарың*
*Эй, ҡара ине.*
*Ә егеттәр һиңә ҡарап*
*Эй, ҡала ине!*

Ғашиҡ булыу, һоҡланыу, хозурланыу тулы былдай шиғырҙарҙа илаһи гармония хакимлыҡ итә. Мөхәббәттең тантанаһы, һөйөүҙә тоғролоҡ ваҡытлыса айырылышыу, һағыныу, һағышланыу, моңайыу мотивтары менән үрелә. Роберт Миңнуллиндың һөйөү шиғырҙары араһында хушлашыу миҙгелдәре, бигерәк тә һөйгәнен поезд менән оҙатыу күренеше, драматик төҫ ала.

*Ауыр һулап ҡуйҙы һинең поезд.*
*Шапылдатып япты ишектәрен.*
*Аҡ перронда ҡалдым мин бер үҙем*
*Һәм “Яратам!” тинем.*
*Ишетмәнең*
*(68-се бит).*

“Бәлки” шиғырындағы кеше күңелен аңлай белмәй торған “мәрхәмәтһеҙ поезд”, һуңғы һөйөүҙе символлаштырған “Һөйөүҙең һуңғы поезы”, “Һуңлау” шиғырындағы “поезынан тороп ҡалған мөхәббәт” образдары – былар барыһы ла шағирҙың мөхәббәт ҡиссаһын динамикалы, драматик һүрәтле итә.

Ҡыҙыҡ. Поезд һүрәте Рауил Бикбаев ижадында ошондай уҡ функцияла осрай. Унда ла поезд – хушлашыу, айырылышыу символы.

*Бөтә йәмде поезд алып ҡасҡан…*
*Ул ҡуҙғалып киткән сағында.*
*Һағыш ҡына бында тороп ҡалған,*
*Һыймағандыр инде вагонға…*
*(11-се бит).*

Ике шағирҙың һөйөү лирикаһындағы ана шундай йәнәшәлектәр образдар уртаҡлығында ғына түгел, ә эстетик идеалды кәүҙәләндереү ысулдарында ла күҙәтелә. “Оялыу – имандың яртыһы”, – тигән хәҡиҡәт йәшәй. Һәр ике шағирҙың да иң изге хистәре ҡыҫаһына ана шул **оялыу** тойғоһо килеп инә. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына хас был күркәм һыҙат һәр ике шағирҙың әҫәрҙәрендә үҙенсәлекле төҫтә сағыла.

Ана *“ҡайын ҡыҙының ҡуйынын асырға”* ниәтләп елдәр сабышып йөрөй, быуа яғында ғашиҡтарға *“өйәңкеләр ҡул болғай”.*

*Әйҙә шунда. Ауыл иҙрәп йоҡлай,*
*Тик яңғыҙ ай күктә әйләнә.*
*Ул да, һинең оялырҙы һиҙеп,*
*Болот менән күҙен бәйләгән*
*(12-се бит).*

Ижадының башланғыс осоронда уҡ тәбиғәт менән “уртаҡ тел табып”, үҙенең ижад почергын, стилен билгеләгән Рауил Бикбаев кеше хистәренә лә тәрән үтеп кереүҙең нәфис юлдарын эҙләп таба.

Ә инде Роберт Миңнуллинда:

*Тәҙрәләр беҙҙән микән*
*Оялалар –*
*Кинәт кенә йә һүнәләр,*
*Йә яналар.*

(“Төнгө урамда”.)

Саф мөхәббәткә хас юғары әҙәп, тыйнаҡлыҡ, наҙ һәм нәфислек тураһында ана шулай ябай ҙа, сәнғәтле лә итеп әйтеп ҡара әле!

Ә хәҙер шағир ижадында үҙәк урындарҙың береһен алып торған ҡайындар стихияһына киләйек.

*Тәҙрә төбөндә ҡайындар,*
*Ҡайындарҙың аҡтары.*
*Ахырыһы, аҡ ҡайындарҙың*
*Ғашиҡ булъан саҡтары.*

*Улар беҙгә ҡарап тора,*
*Күреп тора һәммәһен.*
*Оялам мин ҡайындарҙан,*
*Яп, яп тәҙрә пәрҙәһен.*

(“Оялам мин ҡайындарҙан”. 114-се бит.)

Ғәҙәти һүрәткә йән һәм характер өрөү, уны хәрәкәткә килтереү, тәбиғәткә табыныу, уны илаһилаштырыу менән берҙәй. Аҡлыҡ, сафлыҡ, ихласлыҡ символы булған ҡайын шағир өсөн мөхәббәт кәүҙәләнеше лә. *“Ҡайтайыҡ беҙ мөхәббәтебеҙгә, Һөйөнһөндәр әле ҡайындар”,* – ти ул, фатихаға мохтаж ғашиҡ ҡиәфәтендә. Ә инде киң билдәле “Ҡайындар араһында” йыры үҙгәлекле бер әкиәти романтика менән тулы:

*Һылыу – һының, аҡ – күлдәгең,*
*Һин аҡлыҡҡа күмелдең.*
*Күҙҙәремә һин үҙең дә*
*Ҡайын булып күрендең.*

Роберт Миңнуллинда ҡайын образы сәнғәтсә бейеклек яулаһа, Рауил Бикбаевта лирик геройҙың барлыҡ кисереш-тойғоларына шаһит **Ай** образы ҙур мәғәнә йөкләй.

*Ник килдем тағын был ярға?*
*Яңырҙылар яралар.*
*Арабыҙҙа айҙар ята,*
*Тауҙар ята арала*

*(60-сы бит).*

Ана ошолай итеп ай образы ваҡыт мәғәнәһен дә ала. Ай шағир өсөн рухи ҡотолоу сараһы ла, хыянаттан ҡалҡан да:

*Бәхет тапмай йыһан гиҙгән сағым,*
*Ҡалҡан итеп айҙы ҡапланып…*
*Һине күргәс, тағы ергә төштөм,*
*Һауаларҙа ҡалды ҡалҡаным*

*(36-сы бит).*

Рауил Бикбаев ижадында ана ошондай ҡатлаулы мөнәсәбәттәр, күңел тетрәнеүҙәре, юғалтыу-табыштар хәҡиҡәтте эҙләү һәм табыу юлына алып сыға.

Бәхет тураһындағы фәлсәфә ҡәләм тотҡан һәр шағирҙың ижад ҡиблаһын хасил итә. *“Һинең менән бергә көлгән, көйгән Ерҙең йәшәреүен күреүең”* (103-сө бит) үҙе бәхет түгелме ни? – ти, бәхетте тормош ҡаршылыҡтарында, хистәр өйөрмәһендә танып, Рауил Бикбаев. *“Юғалтыры барҙар ғына Юғалта ала”* (104-се бит) – быныһы лирик геройҙың үҙ-үҙен йыуатыуы ғына түгел, ә инаныуы, йәшәйеш фәлсәфәһенең йөнә бер нәтижәһе.

Мөхәббәт донъяһын ике төҫтә таныған, ике ҡитғала айҡаған ике шағирҙың хәҡиҡәтте таныуы йыш ҡына бер нөктәлә киҫешә.

*Ғазаптар артһа, һөйөүҙең*
*Ҡәҙере лә артасаҡ.*
*Һөйөү – бәхет,*
*Ғазаптарҙы*
*Бәхет тиеп атаһаҡ”,*

– ти Роберт Миңнуллин “Мөхәббәт бәхете” (70-се бит) тигән шиғырында.

*“Һин барҙа тамуҡ та – ожмах, Һинһеҙ ожмах та тамуҡ” (158-се бит)* – ти ҡаршылыҡтар донъяһында мөхәббәтен танып, Рауил Бикбаев.

Ана шулай, мөхәббәт донъяһы ҡанундарын таныған һәр ҡәләм эйәһе үҙ һөҙөмтәһен яһай. Һөйөү ҡәҙере ғазаптарға тура пропорциональ икән бит! “Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙе ғазапланырға мәжбүр итеүсене һаман да ярата алабыҙ икән, беҙҙең мөхәббәтебеҙ көсәйә генә” *(Если мы еще можем любить тех, кто заставил нас страдать, то любовь наша лишь становится сильнее).* Бөйөк рус яҙыусыһы А.С. Пушкиндың был һүҙҙәре быуаттар үткәс тә актуаль яңғырай.

Аҡыл эйәләренең тағы бер ғибрәтле фекеренә туҡталғы килә. Немец фәлсәфәсеһе Фридрих Ницше: “Тормошҡа булған мөхәббәт – ул оҙаҡ йәшәүгә булған мөхәббәттең киреһе тиерлек. Теләһә ниндәй мөхәббәт миҙгел һәм мәңгелек тураһында уйлай, ләкин бер ҡасан да дауамлылыҡ тураһында түгел”. *(Любовь к жизни – это почти противоположность любви к долгожительству. Всякая любовь думает о мгновении и вечности, — но никогда о продолжительности).*

*Йәшендәрҙән балҡып киткән йөҙөң! –*
*Оноторлоҡмо ни ғүмергә?*
*Шуны тик бер күрер өсөн дә бит*
*Зая түгел йәшәү был ерҙә*
*Әй, был ғүмер…*
*Ул бер мәлгә генә*
*Балҡып һүнгән йәшен утылыр*

*(108-се бит).*

Был юлдарҙа Рауил Бикбаев яҙмыш бизмәненең ҡара-ҡаршы яғына мөхәббәт миҙгелен һәм йәшәү мәғәнәһен һала. Ана шундай илаһи миҙгелде кисереү әҙәм балаһына сикһеҙ көс, ауырлыҡтарҙы еңеү, рухи бейеклектәр яулау һәләте лә бирә торғандыр. *“Ҡәҙерҙәрен белһәк, һәр мәл байрам, Алда әле тоташ сәғәт бар”(167-се бит).* Миҙгел мәғәнәһен тойоу, ваҡыт ҡәҙерен баһалау тәрән хистәргә эйә шәхестең рухи ныҡлығын, таяныу нөктәһен билгеләй.

Йыш ҡына шағир ҡаты характерлы максималист булып ҡала. Хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарай. Ләкин бер ҡасан да һыҡтамай, тормоштан йөҙ сөйөрмәй, йәшәү ҡәҙерен ебәрмәй: *“Эҙләнем. Таптым. Юғалттым. Мәңге лә юҡ табаһым…”(57-се бит).* Шулай ҙа шағир йәне һәр ваҡыт ҡабатланмаҫ миҙгелгә һыуһай. Моғайын, уны ошо өмөт ҡанатландыра, илһамландыра, талған күңеленә йәшәү көсө өҫтәйҙер. Һәм ул быға ышана ла: *“Булһын ине тағын тик бер көнөм – Ай күрерлек, ҡояш алырлыҡ” (139-сы бит).* Ғүмерҙең иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле миҙгелдәре нишләптер тиҙ үтә. Ләкин шағир нәҡ бына ошо миҙгелдәрҙең йәшәйеш өсөн иң хәл иткес мәл икәнлеген шиғырҙан-шиғырға иҫбатлап килә.

*Үкенмәйек!*
*Беҙме бәхетһеҙҙәр*
*Биргән икән яҙмыш был көнөн?..*
*Ошо көнһөҙ ғүмер буйыбыҙға*
*Ҡалыр ине ниндәй үкенес*

*(157-се бит).*

Бынһында ла ҡәләм эйәһе миҙгел концепцияһын алға һөрә. Бер көнлөк миҙгел йәшәү мәғәнәһен тәшкил итһен өсөн ни ҡәҙәрле тығыҙлыҡ, көсөргәнешлек менән тулы булырға тейеш ул?! *“Һинең менән иң бәхетһеҙ булған Саҡтарҙы ла мин ҡабатлар инем” (87-се бит).* Миҙгел ҡәҙере һөйөклөң менән ҡауышыу, илаһи ләззәт минуттарын ғына күҙҙә тотмай икән бит. Ваҡыт уҙыу менән, ҡиммәттәргә баһа ла алышына. Шағир күңел ҡатламдарының иң тәрән соңғолдәрен асып, бергәлектең ҡәҙере, бәхетһеҙлекте еңер көс тураһында фәлсәфә ҡора.

*Бәхетлемен тиеп кәпәренмә,*
*Бәхетһеҙмен тиеп ваз кисмә*

*(86-сы бит).*

Күңелендә илаһи хис, яҡтылыҡ йөрөткән шәхес, әлбиттә, яҙмыш һынауҙарында еңеүсе булып ҡала.

Мөхәббәт диңгеҙенең бөтә тәрәнлектәрен гиҙгән, ғәрәсәттәрҙә ҡалып, ҡаяларҙа йәне сәрпәкләнгән лирик герой һөйөү илендә яңы асыштарға юлыға йәки иҫке хәҡиҡәтте яңыса әйтеп биреү ысулын таба. *"Һөйөклөң менән көйөклө көнөң дә татлы"(44-се бит), "Ташҡан бәхеттәрҙең ҡәҙере юҡ, эй ҡәҙерле ҡалған семтеме" (54-се бит).*

Илаһи мөхәббәт миҙгеле хаҡындағы ошондай уҡ концепция Роберт Миңнуллинда ла үҫтерелә. *"Был миҙгел йөҙ йылға бер ҙә Тормайҙыр ҡабатланып"*, – ти ул "Мин яратам әле!" (74-се бит) тигән шиғырында, йөрәге күкрәгенән осоп сығырҙай бәхетле миҙгелен һүрәтләп. "Мөхәббәттә һағыш шатлыҡ менән ярыша", – ти Боронғо Рим яҙыусыһы Публий. *(В любви тоска соперничает с радостью.)* Бәхет миҙгелдәрен ғазаплы уйланыуҙар, юҡһыныу-һағыныуҙар алыштыра.

*Әрнеттең дә нисә ҡабат,*
*Йыуаттың үҙең аҙаҡ.*
*Ғазаптан торған шатлыҡ һин,*
*Шатлыҡтан торған ғазап.*

("Мөхәббәт"*, 18-се бит.)*

Таҡташса үҙгәлекле бер еңеллек, гармония менән яңғырап торған былдай юлдар Роберт Миңнуллиндың яҙыу стилен, фекерләү манераһын тәшкил итә. "Шиғри телдең төҙөк ғадилеге, фекер боролоштарының тапҡырлығы, ритмдарҙың ипле яңғырашы, әҫәрҙәрҙең үҙәгендәге халыҡ ғәме тулайым ижадтың халыҡсанлығын тәшкил итә,"– тип яҙа Роберт Миңнуллин ижады тураһында Фатих Урмансы[1]. Әҙәбиәт ғалимы шағирҙың мөхәббәт лирикаһын да тәфсилле тикшерә һәм унда Сәғит Рәмиевтағы романтик ҡайнарлыҡты, Һаҙи Таҡташтағы һүрәт нәфислеген, Муса Йәлилдәге үҙәк өҙгөс фажиғәлелекте, Хәсән Туфандағы драматизмды, Сибәғәт Хәкимдәге йәшәү тулылығын, Илдар Юзиевтағы психологик романтизмды, Рауил Фәйзуллин һәм Ринат Харистағы ихласлыҡты һәм фәлсәфәүи тәрәнлекте, Рәдиф Ғаташтағы тыйылғыһыҙ ҡайнарлыҡты күрә[2] Роберт Миңнуллиндың бер генә строфа шиғырын уҡыуға уҡ уның ассонанс, аллитерация, антитеза кеүек сараларҙы шулай отошло файҙаланып, шиғырға үҙгәлекле бер **Моң** индереүен күрәһең. Оптимистик рух, эске бер тәрәнлек, һағыныу-һағыш мотивтары менән үрелә. Күрәһең, бәхет вәғәҙә итеп торған яуаплы, тоғро мөхәббәт тә ғазаптарһыҙ, яныу-көйөүҙәрһеҙ генә булмай.

*Мин һиңә күҙ йәше генә,*
*Әрнеү генәлер инде.*
*Нишләйһең, һөйөү-һөйөлөү*
*Әрнеү менән бер инде.*

("Клараға"*, 21-се бит.)*

Кәрәҙҙән һарҡылып торған бал һымаҡ, Роберт Миңнуллиндың мөхәббәт поэзияһынан да саф һөйөүҙе, һағыныу-һағыштарҙы, күҙ йәштәрен үҙенә һеңдергән тәрән Моң һарҡып тора. Шағирҙың моңло күҙ ҡарашын, нәҡ үҙенең ҡабатланмаҫ тауышын ишеттергән былдай юлдар камил ритмдар хасил итеп, уҡыусыны ла ихтыярһыҙҙан үҙ тулҡындарында бәүетә:

*Һеҙҙең яҡта күптән ҡыштыр инде,*
*Йыштыр инде һаман моңайыу.*
*Моңайыуҙар көҙҙә генә түгел,*
*Ҡыштарға ла күсте, буғай, ул.*

("Лирик хат".)

Моң, моңайыу – лирик геройҙы ла, уның һөйгән йәрен дә характерлай

[1] *Урманче Фатих. Роберт Миңнуллин: шигъри осталык серләре. — Казан: Мәгариф. —2005. — 3-сө бит.*
[2] *Шунда ук: 9-сы бит.*

торған төп сифат. *“Йөҙөңдә – һағыш шәүләһе, Күҙҙәреңдә моң ине”* *(35-се бит)*. Һағыш-моң шиғриәтендә ихласлыҡ, сафлыҡ, күңел йомшаҡлығы символы булып торған **Күҙ йәше** детале лә әһәмиәтле урын тота һәм лирик геройҙы, уның эстетик идеалын кәүҙәләндереүҙә мөһим роль уйнай.

*Ниңә инде йәштәреңде*
*Йәшерәһең, йүләрем?*
*Һуң улар  бит йәштәр түгел,*
*Мөхәббәт ынйылары!*

(“Ғүмерлеккә китмәйем бит”.
*47-се бит.)*

“Һине һағынғанда”шиғырында ла:

*Һин дә мине һағынаһың икән –*
*Аҡ инештән йыям йәштәреңде*

*( 58-се бит),–*

тип, лирик герой һөйгәненә булған ышанысын раҫлай. Йыш ҡына автор *“йәп-йәш күҙ йәше”* тигән һүҙ теҙмәһе ҡуллана. Моғайын, ул һөйгәненең йәшлегенә, уның тәүге саф хистәренә ишаралайҙыр.

**Күҙ йәше** детале Рауил Бикбаевтың һөйөү  лирикаһына ла ят түгел:

*Күҙ йәштәрем кинәт быуып алды…*
*Ир һүҙеме шулай тиергә?*

Йәки:

*Күҙ йәштәрем керпегемдә өттө.*
*Өттө.Үтте. Донъям һил инде.*
*Йәшем йыуған күктәремдә ҡалҡҡан*
*Йәйғор аръяғында һин көлдөң*

*(71-се  бит).*

Быныһында инде үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡатлаулыраҡ төҫ ала. Күңел ғәрәсәттәре, юғалтыу, үкенес тойғолары менән тулы рухи халәтен шағир ғәжәйеп көслө образлылыҡ менән һүрәтләй. Дауылы үткән күңел, ташҡын күңелдең көҙгө һыуҙар кеүек тоноуы, киңлекләрҙе тиң итмәгән тымыҡ донъя, күңел бушлығы, ниҙер етмәү, күңел өркөү, аяныс моң, буш офоҡтан иҫкән буш ел, буш болот – бер шиғырҙа шул саҡлы образлылыҡ! Фәҡәт шиғырҙың ахырында ғына ошо һүрәткә асыҡлыҡ кертеүсе **Һин** образы пәйҙә була.

*Күңел ҡото балҡып баҡмаҫ төҫлө,*
*Һығылып илаһам да ултырып.*
*Һин киткәнһең бөтөн йыһанымды*
*Тулмаҫ бушлыҡ менән тултырып*

*(59-сы бит).*

Рауил Бикбаевтың лирик геройы мөхәббәт донъяһының күп һынауҙарын кисерә, ул үҙен әллә ниндәй халәттәрҙә тоя, тапала, иҙелә, алдана, өҙөлә, тағын ялғана, ләкин бер ваҡытта ла нәфрәтләнмәй, йәшәүгә булған мөхәббәтен юймай, ысын һөйөүҙән өмөтөн өҙмәй. *“Донъяла мин бер нәмәнән ҡурҡам: “Мөхәббәтһеҙ!” тигән исемдән”* *(21-се бит)*, – ти ул. Икенсе бер ерҙә: *“Тере көйө йөрәк һаҡау кәкүк, телһеҙ былбыл булып ҡалмаһын”* (33-сө бит), – тип киҫәтә.

Яңыса образлылыҡ – Рауил Бикбаев ижадында иң көслө ҡоралдарҙың береһе. Ул ғәҙәти образдың да яңы мөмкинлектәрен аса, өр-яңы, һис көтөлмәгән образға ла ғәҙәти, тормошсан функция йөкләй ала. Мәҫәлән, һөйгәненең туй көнөндә тупһаға өҙөлөп төшкән, беҙҙәй үксә менән иҙелгән **Йөрәк** образын алайыҡ. Һөйгәне менән ғүмерлеккә айырылыу фажиғәһен автор көсөргәнешле драматик төҫтә һүрәтләй. Гөрләп торған туй ысынбарлығында йөрәк яраланған кейек халәтен ала: *“Канһыраған кейек кеүек, Йөрәгем яраларын ялар аулаҡта”* *(38-се бит)*. Юғиһә, тупһала осло үксә менән тапалған йөрәк – үҙе лә оригиналь образ бит инде. Ә шағир үҙ табышын тағы ла үҫтерә төшә, уға үҙ аллы хәрәкәт итерлек йән өрә.

Туй көнөн һүрәтләгән икенсе бер шиғырында автор үҙен шәм рәүешендә күҙ алдына килтерә: *“Моңһоу бер шәм булып ҡабындым да  Янып бөттөм, һүндем туйыңда”* *(165-се  бит).*

Ҡайһы бер шағирҙар образдар донъяһында оригиналлеккә ынтылып, аяҡтарын реаль ысынбарлыҡтан ысҡындыралар һәм хыялдар илендә йәшәй башлайҙар, йәки образдар артыҡ ҡатмарланып, уҡыусының фекерен сыуалтып бөтөрә. Рауил Бикбаев иһә тормош ысынбарлығынан йыраҡ китмәй һәм лирик геройҙың халәтен һүрәтләгәндә ябай һәм тормошсан образдарҙы эшкә егә. “Айыу” шиғырында һөйгәненең күҙ ҡарашынан һиҫкәнеп киткән лирик геройҙың рухи халәте ҡышҡы күкрәүҙә тертләп уянып, өңөнән сығып ҡаңғырып йөрөгән айыу һүрәтендә бирелә. Ә “Аҙашҡан эт”тә автор хужаһын юғалтҡан эт фажиғәһен һөйләгәндән һуң, бындай нәтижә яһай:

*Аңланың бит һин дә хәлдәремде,*
*Аҙашҡан эт кеүек саъымды.*
*Боҙҙо иретерлек наҙ таптың да*
*Һыҙырып ҡына алдың йәнемде*

*(144-се бит).*

“Һуйыр” шиғырында иһә бындай юлдар һиҫкәндерә:

*Берәү тынъан, боҫҡан,*
*Мылтыҡ төҙәп,*
*Ошо шәүлә йыр-йәнеңде ҡыйыр.*
*Ярһыу һуйыр,*
*Яҙмышыбыҙ уртаҡ!*
*Мине лә бит бер көн көнсөл-мәкер*
*Һөйөүемдән сәсәгәндә һуйыр*

*(171-се бит).*

Лирик герой берсә үҙен **яңғыҙ ҡош** образында таный, берсә **ат** итеп күҙаллай: *“Күҙемдәге йәште йәшерергә башҡынамды ситкә борормон” (178-се бит).*

Күренеүенсә, беҙ ҡараған мөхәббәт шағирҙарының ижадында сәнғәти камиллыҡҡа ирешеү юлдары шаҡтай айырыла. Бер-береһенә оҡшамаған ике яҙмыш, ике мөхәббәт тарихы шулай ҙа уртаҡ нәтижәләргә, дөйөм ҡанундарға килтерә. Француз яҙыусыһы Расин Жандың бындай һүҙҙәре бар:

*Кого хотим любить, тот нам – увы!*
*– не мил;*
*А тот, кого клянем, нам сердце*
*полонил.*

Ә Рауил Бикбаевта был хәҡиҡәт тағы ла яңы яҡтарын аса:

*Бик теләһәң, хатта гүзәлдәрҙе*
*Ҡаратайым, тиһәң,*
*Була ҡаратып.*
*Ҡарамаҫты ҡараттырып була,*
*Яратмаҫты яраттырып була,*
*Яратайым тип булмай яратып*

*(166-сы бит).*

Ошондай уҡ юлдар Роберт Миңнуллинда ла бар. Ләкин башҡа ҡеүәт, үҙгәлекле бер мантиҡ (логика) менән. “Ниңәлер” дүрт юллығында былай ти ул:

*Донъя тулъан ҡыҙҙар менән…*
*Эй, ул матурлыҡтары!*
*Ниңәлер бик һирәк осрай*
*Мин яратырлыҡтары…*

“Ярат ҡына!” тигәнендә “мөхәббәт ҡанунына” йәнә бер статья (мәддә) өҫтәй:

*Яратып булмай: “Яратам!” –*
*Тиеүгә ҡарап ҡына.*
*Миңә: “Яратам!” – тип әйтмә,*
*Һин мине ярат ҡына!*

Мөхәббәт – аңлап бөтөрә алмаҫлыҡ тылсым, ул ғашиҡ йәнде әллә ниндәй рәүештәргә индерә, моңландыра, йырлата, илата. Ана бит, һүҙ ҡуйышҡандай, ике шағирҙың да фекер ебе бер төрлө образ-символда киҫешә.

*Мин һинең ҡулыңда*
*Ҡураймын, ҡумыҙмын,*
*Һорнаймын.*
*Ниндәй көй теләһәң,*
*Шул көйҙө уйнайһың.*
*Башҡалар ҡаъылһа,*
*Мин өнһөҙ, мин моңһоҙ,*
*Әйтерһең, бер туң сым…*

*(175-се бит),*

– ти Рауил Бикбаев, һөйгәненең ҡулдары тылсымына ишаралап.

Шағиранә яңылыҡ тигәндә, ҡәләм эйәһенең нимә әйтеүе түгел, нисек итеп әйтеүе мөһим. Роберт Миңнуллин иһә “Сәйер йөрәк” шиғырында ошо уҡ фекергә башҡа бер юлдан килә.

*Күптәр сиртте йөрәк ҡылын,*
*Көй сығара*
*Алманылар.*
*Аҙаҡ уйнай алмаҫтарын*
*Үҙҙәре үк*
*Аңланылар.*
*Яратам, тиһең.*
*Уны бит*
*Теләһә кем*
*Әйтә ала.*
*Йөрәгемдә бер генә ҡыл –*
*Уйнай алһаң,*
*Уйнап ҡара*

*(16-сы бит).*

Ана шулай, тәү ҡарашҡа төрлө яҙмышка дусар, төрлө темпераментҡа эйә шағирҙарҙың да фекер-кисерештәре осрашып, бер үк хәҡиҡәтте сәнғәт бейеклегенә күтәрә. Роберт Миңнуллин лирикаһы ҙур мөхәббәт диңгеҙенә ҡойоусы йыр тулы, моң тулы яҡты даръяны хәтәрләтһә, Рауил Бикбаевтыҡы иһә берсә тәрәнәйеп, тынып, берсә таштарҙан, ҡаяларҙан һикереп, бормаланып, ҡояш нурында балҡып аға торған тау йылғаһы кеүек. Ана бит ул үҙе лә:

*Йәшәгәндә тәүбә итеп кенә,*
*Тын донъяма нисек һин керҙең?*
*Әйләндем дә сая шарлауыҡҡа*
*Упҡын ҡосағына һикерҙем*

*(99-сы бит), –*

тип яҙа. Лирик геройҙы әленән-әле яңы һынауҙар, хәүефле осоштар, бәхетле ынтылыштар көтә. Хистәр донъяһында киҫәк боролоштар, көтөлмәгәнлек, ғәҙәттән тыш хәлдәр, сараһыҙлыҡ шағирҙан йәнә ҡат-ҡат имтихан ала.

*Һөйөү – һөйөү була тиме,*
*Килһә*
*Белеп кенә мәлен?*
*Мәлһеҙ килгән саҡта*
*Тапһа бәндә*
*Ҡотолор әмәлен*

*(112-се бит).*

Ҡыҙыҡ. Роберт Миңнуллин да “Һине осратмаһам” шиғырында ошо уҡ фекерҙе алға һөрә:

*Мөхәббәт – ул көтмәгәндә килә,*
*Мөхәббәт – ул һәр саҡ осраҡлы,*
*Ярай әле йәшлек һине тапты,*
*Ярай әле һине осратты*

*(194-се бит).*

Ләкин көтмәгәндә килеү менән ваҡытһыҙ килеү бер үк нәмә түгел шул. Һуңғыһы лирик геройҙы тағы ла ҡатлаулы шарттар, ауыр һорауҙар алдына ҡуйырға мөмкин.

*Мин янъынды артыҡ һуңлап һиҙҙем.*
*Бар донъямды инде ут алъас,*
*Емереләһе инде емерелгәс,*
*Буталыры инде буталъас*

*(112-се бит), –*

ти Рауил Бикбаев. Изге мөхәббәт юлынан атлаған һөйөү ҡаһарманы йыш ҡына ете юл сатында – мәңгелек һорау ҡаршыһында ҡала:

*Һөйөүҙәрем һине гонаһ булһа,*
*Ғәҙел хөкөм ҡайҙа бар тағы?*
*Һөйөү ъәйепме ни?*
*Һөйөүҙәрҙең*
*Буламы ни хаъы-нахаъы?*

*(128-се бит).*

Ошо юлдарҙы уҡығанда трубадур шағир Гильем Монтаньяголь һүҙҙәре иҫкә төшә: “Любовь не грех, а добродетель…” Шулай ҙа мөхәббәт – шәхес өсөн һынау, оло һынау, бәхет тә, бәхетһеҙлек тә, ожмах та, тамуҡ та икән. Рауил Бикбаев, гүйә, дүрт юлға лирик геройҙың бөтә яҙмышын һыйҙырған да ҡуйған:

*Башыма һин таж да булдың,*
*Таш та булдың башыма.*
*Аҡылдан яҙҙырҙы яҙың.*
*Яҙманың яҙмышыма*

*(182-се бит).*

Һәм, ғөмүмән, яҙмышты, мөхәббәтте шиғырҙарға, ижадҡа ғына һыйҙырып буламы икән ул? Ижад, бәлки – ул яҙмыш ғәрәсәттәрендә, тетрәнеүҙәрҙә рухты һаҡлап ҡалыу, илаһи бөтөнлөктө юғалтмау, йәшәйештең асылына төшөнөү һәм шуларҙы киләсәк быуындарға еткереүҙер. Ана бит шағир, башынан үткәндәргә ишаралап, нисек әйтә:

*Һөйөү хаҡында мин шиғыр яҙҙым,*
*Ә һөйөүем минән көлдө генә:*
*– Ҡағыҙмы һуң ут-ялҡынға сыҙай,*
*Ҡағыҙға бит төшә мөхәббәттең*
*Көлө генә*

(143-сө бит).

Был юлдар Рауил Бикбаев шиғриәте тураһында ғына түгел, ғөмүмән, шәхес һәм ижад хаҡында уйландыра. Ябай уҡыусы шағир үҙе хаҡында ғына яҙа тип уйларға мөмкин. Ғаләм менән әңгәмә ҡороп, сал быуаттар аша кешелеккә йәшәүҙең, мөхәббәттең асылын асыу вазифаһын йөкләгән шағир шәхесе, ғөмүмән, Кеше тураһында яҙа тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. “Лирик геройҙы реаль автор менән бутарға ярамай, – тип яҙа А.Б. Есин. – Йыш ҡына лирик герой үҙенең шәхси сифаттары, кисерештәр характеры менән авторға бик яҡын була, ләкин улар араһындағы айырма принципиаль.”[3]

*(Недопустимо лирического героя отождествлять с реальным автором. Часто лирический герой бывает весьма близок к автору по складу личности, характеру переживаний, но тем не менее различие между ними является принципиальным.)* Шиғырҙағы кисерештәр бик күптәрҙең рухи халәтенә тура килеп, күңел ҡылдарын сиртә икән, тимәк, шағир бәхетле. Лирик шиғырҙарҙа бындай мөмкинлектәр бик ҙур. Шуға ла уҡыусы мөхәббәт китаптарын әҫәрләнеп уҡый, һөйөү йырҙарын яратып тыңлай. Һөйөүҙең мәңгелеге хаҡына шиғри һәйкәл ҡуйған ҡәләм эйәһенең исеме лә үлемһеҙ.

Рус яҙыусыһы И.С. Тургеневтың бындай һүҙҙәре бар: “Мөхәббәт үлемдән дә һәм үлем ҡурҡыныһынан да көслөрәк. Фәҡәт уның менән, мөхәббәт менән генә тормош алға бара”. *(Любовь сильнее смерти и страха смерти. Только ею, только любовью держится и движется жизнь.)* Сөнки Мөхәббәт – мәңгелек, тигән хәҡиҡәтте һөйөүгә тоғролоҡ концепцияһында иҫбат иткән Роберт Миңнуллин менән һәр кем килешер ине.

*Мөхәббәттән айырылыу*
*Ауырҙыр башта ғына.*
*Был ерҙән китермен, ахыры,*
*Һөйөүҙән башҡа ғына.*

*Һөйөүемдән артыр ерҙә*
*Бер аҙ ғына йылы, нур.*
*Аҙ булһа ла яҡтырыр ер,*
*Аҙ булһа ла йылыныр.*

*Һөйөүһеҙ китеү ауырҙыр.*
*Шулай ҙа, килеш, күңел,*
*Мөхәббәт ҡалырға тейеш,*
*Үлергә тейеш түгел.*

Бөйөк рус яҙыусыһы, публицист Максим Горький: “Мөхәббәт – ул йәшәйһе килеү” *(Любовь — это желание жить)*, – тигән. Берҙән-береңә булған ошо илаһи хис йәшәүгә мәғәнә өрә, ижадҡа, хеҙмәткә ҡанатландыра, бөтә донъяны яратырға мәжбүр итә икән, тимәк, мөхәббәт тураһында әле күп китаптар яҙылыр, һөйөүҙең серле донъяһы күптәрҙе ымһындырыр.

**Ләйсән КӘШФИ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

---

[3] *Есин А.Б. Принципы и приемы анализа литературного произведения. – М.– Наука, 2002. – С.215.*

# *ДӘҮЕР ҺУЛЫШЫН ТОЙОП*

*(Йәштәр прозаһының торошо һәм үҫеш перспективалары)*

Заман әҙәбиәте. Бөгөн ташҡа баҫылған һүҙ сәнғәтенә ихтыяж бармы? Яҙыусы һәм уҡыусы бәйләнештәре нисек? Яҙыусының әйтер һүҙе, художестволы әҫәрендәге фекере уҡыусыларына барып етәме? Ошо юҫыҡтағы һорауҙар мине һәр саҡ борсой. Хәҙер ике тиҫтә йылға яҡын милли әҙәбиәтте күҙәтеп, анализлап барғас, уның үҫеш йүнәлештәрен, заманса һулышын тойоп йәшәргә тырышам. Һуңғы йылдарҙа йәштәр ижадын туплаған йыйынтыҡтарҙан китап кәштәләре һығылып тормай, әҙәбиәткә килеүсе йәштәр ҙә XX быуаттың алтмышынсы йылдарындағы кеүек тулҡын булып килмәй, ә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шулай ҙа зарланыу урынһыҙ. Сөнки һуңғы йылдарҙа ғына йәштәр ижадын туплаған ике тиҫтәнән артыҡ йыйынтыҡ донъя күрҙе. Улар араһынан Р. Уразғоловтың “Бормалы яҙмыштар”, З. Ҡаҙаҡбаеваның “Сиселмәгән сер”, Н. Алсынбаевтың “Эйәрҙә ҡалған егет”, Г. Мостафинаның балалар өсөн “Һағыҙаҡ балы”, З. Бураҡаеваның “Хыялый япраҡ”, А. Арыҫлановаың “Нурлытау”, Ф. Харрасовтың “Төн” китаптарын күрһәтеп була. Шулай уҡ Р. Сәғитовтың балалар өсөн “Дөрөҫ һүҙ”, ололар өсөн “Әҙәм балаһы”, Н. Алсынбаевтың “Серле мосафир” исемле китаптары билдәле. Эйе, һуңғы йылдарҙа республикабыҙ һәр төрлө ыңғай башланғысҡа ҙур иғтибар бирә, шуның бер һөҙөмтәһе булараҡ “Йәштәр тауышы” серияһы барлыҡҡа килде. Был иһә ижад кешеләре өсөн әҙәбиәткә һуҡмаҡ һалырға ҙур этәргес буласаҡ.

## Йәштәр прозаһында жанрҙар төрлөлөгө

Йәштәр ижадын ҡарағанда һәр ваҡыт, әҙәбиәткә ниндәй яңылыҡ алып килер икән, тип өмөтләнәһең. Бөгөнгө прозалағы ҡайһы бер үҙгәрештәрҙе, эҙләнеүҙәрҙе күреп, үҫеш йүнәлештәрен тоҫмаллайһың.

Яңы быуат ынтылыштарын, заман геройын художестволы тулылығында күрһәткән әҫәрҙәргә һыуһаған уҡыусы. Улай ғына ла түгел, яңы дәүергә тәҙрә асҡан, уның ағымын һәм булмышын нәфис әҙәбиәт аша фекерләү киңлегенә күсергән ижад һәм ижадсы кәрәк. Үткәндәрҙе художестволы дөйөмләштереү генә түгел, бөгөнгөгә һәм киләсәккә шул күҙлектән бағып, уҡыусыны, кешелекте, йәмғиәтте ылыҡтырыр көс табыр кәрәк һүҙ сәнғәтендә. Хәҙерге йәштәр прозаһында хикәйә жанры өҫтөнлөк итә. Быуаттан артыҡ традициялары булған жанрҙың бай мөмкинлектәрен йәштәр нисек ҡуллана? Замандашына әйтер фекерен тос, ыҡсым һәм оператив жанр ҡанундарында нисек сағылдыра? Жанрҙың арҡа һөйәген кеше тормошоноң юғары мәле, бер боролошо аша характерҙың үҙенсәлекле бер һыҙатын, ҡылығын

яҡтыртыу билдәләй. Тап ошо герой ҡылығы заман темаһы, дәүер проблемалары призмаһы аша сағыла. Яҙыусы әҙәби фекеренең тәрәнлеген образдары аша сағылдырып, уҡыусыға күпер һала. Һуңғы йылдарҙа донъя күргән айырым китаптары һәм ваҡытлы матбуғатта баҫылған хикәйәләре менән танышҡас, уларҙың жанр аныҡлығы, тормош ваҡиғаларын художестволы яҡтыртыуы, сюжет үҙенсәлектәре, герой характерын асырға төрлө йүнәлештә ынтылыуҙары, идея-тематик киңлеге иғтибарҙы йәлеп итте.

Һүҙ сәнғәтендә яңылыҡ көҫәгәндә күберәк йәштәр ижадын барлайһың. Ошо йәһәттән Нияз Алсынбаевтың “Серле мосафир”, “Бөркөтсө” повестарын тынлыс ҡына уҡып булмай. Тәүҙә үк шуны билдәләргә кәрәк: автор буш яңылыҡ артынан ҡыумай, ә ныҡышмал эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә тыуған уй-ҡараштарын, табыштарын әҙәби әҫәр ҡалыптарына туплай. Бында ла традицион һуҡмаҡты һайламай, ә алынған тематиканы асыусы жанр йүнәлешен, күп төрлө һүрәтләү сараларын да бик оҫта файҙалана.

Әйткәндәй, ике әҫәр ҙә тарихи фаразға ҡарай. Был жанрҙың ҡыҙыҡлы, бай ғына тәүге өлгөләрен башҡорт әҙәбиәтендә Б. Рафиҡов башлап ебәргәйне. Н. Алсынбаевтың “Серле мосафир” повесының композицияһын тартмалы сюжет, йәки көндәлектәр формаһында ҡорған. Көндәлек ябай түгел, ул билдәле шәхес, ғалим, төркиәт белгесе Зәки Вәлидиҙең 1962 йылда Башҡортостанға ҡайтып китеү ихтималлығын бәйән итә. Ҡатмарлы, һәр көнө мажаралар менән тулы сәйәхәт Ҡытай, Ҡаҙағстан илдәре аша үтеп, Башҡортостанға юллана. Дүрт тиҫтә йыл тыуған яғында булмаған кешене нимәләр көтә? Яҙмыш тағы уға ниндәй “бүләктәр” әҙерләгән? Тыуған яғы – изге Мәккәһенә юлланған мосафирҙы был кәртәләр тота аламы? Бихисап һорауҙар... Автор ошо һорауҙарҙың һәр береһенә З. Вәлидиҙең көндәлектәре аша яуап эҙләй, логик үҫеште лә юғалтмай. Геройҙың сәйәхәте бай мәғлүмәттәр менән генә тулы түгел, ә аҙым һайын һағалап торған мажараларҙы ла автор нигеҙле итеп сағылдырған. Сәйәси мөхит, йәмғиәт ҡанундары туранан-тура шәхес образы менән киҫкен бәрелештәрҙә һүрәтләнгән. Динамик хәрәкәттең конфликты ниндәйҙер тышҡы күренеш кенә түгел, ә герой характерының психологик мәлдәрен дә күп төрлө күрһәтергә өлгәшә. Автор өсөн З. Вәлиди көндәлеге ябай яҙмалар түгел, киреһенсә, тормоштоң, шул осорҙоң ҡатмарлы ваҡиғаларын Айсолтан Бөркөтсө, Тажетдин, Ерхан, Серик һәм башҡа персонаждарҙың характер үҙенсәлектәре аша бирелеүендәләр. Шуға ла һәр бер фактҡа, әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларға ижади ҡараш өҫтөнлөк итә. Нияз “Серле мосафир” повесында халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы З. Вәлиди образының яңы һыҙаттарын фаразлай. Әлбиттә, яҙыусы өсөн был еңелдән түгел. Автор көндәлектәрҙе биреп, шулай булыуы ихтимал тигән версияны ҡыҙыҡлы үҫтерә. Уҡыусы һәр ваҡиғаны, “әгәр шулай була ҡалһа” тигән ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итә, уйлана. Фаразда яҙыусы уйҙырмалары ла художестволы юғарылыҡта бирелгән. Бәлки шуғалыр ҙа жанрҙың һайланған йүнәлеше үҙен үҙе аҡлай. Көндәлек менән танышыусы журналист образы ла психологик яҡтан тәрән мәғәнәле, уйланыусы һәм үҙ фекерҙәренә төрлө йүнәлештә дәлилдәр эҙләүе менән ҡыҙыҡлы.

“Бөркөтсө” повесы йыйнаҡ, нигеҙҙә ике сюжет һыҙығы өҫтөнлөк итә. Нияз әҫәрҙә заман проблемаларын үҙәккә алып, герой характерҙарын да ошо юҫыҡта тоҫмаллай. Гөлгөнә һәм Фәрхәттең ауылына бөтөнләй сит яҡтарҙан килеп төшкән Мәҡсүтте сәйерһенеп

ҡаршы алалар. Сәйерлеген кешеләр “араҡы эсмәй, тәмәке тартмай, намаҙ уҡый” кеүек сифаттарынан сығып әйтәләр. Икенсе яңылыҡ – Ҡыуаҡан ауылында плотина төҙөй башлағандар, оҙаҡламай ауыл һыу аҫтында ҡаласаҡ. Тап ошондай бер-береһенә яҡын булмаған ваҡиғаларҙан сюжет ептәре тағатыла башлай ҙа, берсә мажаралы, берсә үҙенсәлекле картиналар менән үрелеп дауам ителә. Повестың төйөнләнеүен дә автор бик оҫта биргән: һыу инергә барған Фәрхәт һәм һеңлеһе Гөлгөнә плотинаны күреп хайран ҡалһа, күп тә үтмәй, шунда ҡыҙҙы йылан саға. Ярҙамға сәйер кеше – Мәҡсүт килә. Артабан был төйөндәр эпик киңлектә лә, ваҡыт арауығы тирәләй ҙә тартыла. Ҡытай, Ҡаҙағстандағы ваҡиғалар ретроспектив планда йәйелдерелеп, географик киңлек барлыҡҡа килә. Был иһә, Мәҡсүт образы эволюцияһы аша милләттәштәребеҙҙең аяныслы яҙмышын күҙалларға ярҙам итә. Мәҡсүт олатаһы Айсолтан һөйләүҙәре буйынса Башҡортостан тәбиғәтен, халҡын бөтөнләй икенсе төрлө күҙ алдына баҫтыра. Сихри ил һәм илаһи халыҡ. Айсолтандан тормошта бик күп нәмәләргә өйрәнеп, уның васыятын үтәп, ҡайта ла инде ата-олатайҙар төбәгенә. Ләкин “сәйер кешене” ҡолас йәйеп ҡаршы алалармы? Яҙыусы ошо юҫыҡта ваҡиғалар үҫешен һүрәтләй. Мәҡсүткә тормоштоң байтаҡ ауырлыҡтарын еңергә олатаһы һөйләгән риүәйәттәр, тарихи ваҡиғалар һәм Айсолтандың ҡаҡшамаҫ рухы ярҙам итә. Төп герой олатаһынан өйрәнгән шөғөл – бөркөт аулап, ауылдаштарына боронғо һунар ысулын күрһәтеп, таң ҡалдыра. Тағы ла плотина төҙөүҙе үҙ өҫтөнә алған, замандың әшәке кешеһе – Мазуровҡа ҡаршы көрәш аса. Булмышы, фиғеле менән ниндәй нәҫелдән икәнлеге ошонда күренә лә инде Мәҡсүттең! Автор көрәште бик ҡырҡыу, үҙ-ара бәйле ваҡиғалар аша һүрәтләгән. Яҙыусы ике дәүер кешеһен Айсолтан – Мәҡсүттең көрәшен йәнәш күрһәтеп, уҡыусыға һығымталар яһарға, уйланырға урын ҡалдырған. Шулай уҡ олатаһының XX быуат башындағы азатлыҡ өсөн көрәштең алғы һыҙығында булып, республика ҡаҙнаһының йәшерелгән серен белеүе лә – повесть геройы Мәҡсүттең эшмәкәрлегенең бер йүнәлешен билдәләй. Ваҡиғалар үҙ-ара тығыҙ бәйле, бер-береһен тулыландырып бара. Автор портрет алымдарын бик йәтеш бирә. Тик Гөлгөнәгә бирелгән портрет характеристикаһы бер нисә тапҡыр ҡабатланып, бәҫен төшөрә. Шулай уҡ автор ике повеста ла еңел алым – хәтирәләрҙе йыш ҡуллана. Лирик сигенеү йәки һөйкәлмә ваҡиға булырҙай алымдар ҙа төп ваҡиғаларҙы, сюжет һыҙыҡтарын күләгәлә ҡалдыра.

Ғөмүмән, Н. Алсынбаевтың ике повесы ла уҡымлы, тематик яңылығы, жанрҙы төрләндерергә ынтылыуы, заман геройы һыҙаттарын яҡшы тойомлауы менән билдәләнә.

М. Ҡунафиндың “Ағиҙел”дә – “Тәңре өрөк ҡапҡанда” һәм “Шоңҡар”ҙа баҫылған “Артта Мәскәү…” хикәйәләре уйландырырлыҡ, классик жанр үрнәктәрен тағы ла киңәйтеп ебәрҙе. “Тәңре өрөк ҡапҡанда” хикәйәһенә академик Ғайса Хөсәйенов “Башҡортостан” гәзитендә ентекле анализ яһағайны. “Артта Мәскәү…” хикәйәһе идея-тематик яҡтан киң даирәне яулап, күберәк ассоциатив кисерештәр аша уҡыусының күңелен биләй. Композицион яҡтан әҫәр бик бай, биш бүлектән һәм һуңғы һүҙҙән торған әҫәрҙә Биҙәүләт ауылының тормошо, йәшәйеше, заман ҡараштары төп герой Дәүләтҡол образы аша һүрәтләнә. Өлкән йәштәге герой характерына эске бөтөнлөк, йыйнаҡлыҡ хас. Автор сюжет ептәрен социаль ҡатламдағы төйөнләнеүҙән башлай ҙа,

артабан яҙғы ташҡын кеүек, барлыҡ ваҡиғалар тормоштоң, йәмғиәттең бар даирәләрен яулап ала, тәрәнлеккә үтеп инә. Хикәйәнең беренсе бүлегендә Дәүләтҡол һәм Фатима ҡарсыҡтың күҙ терәп торған һыйырҙары Суҡҡойроҡ йәй уртаһында юғала. Хужа һыйыр юғалғандың өсөнсө көнөнә тирәяҡ урманды эҙләргә сығып китә. Тап ошонда башлана ла инде сюжет һыҙығының тармаҡланыуы. Баҡтиһәң, тыныс ҡына йәшәгән район төпкөлөндәге ауылдың урмандары, ожмахтай ерҙәре, Татлыкүлдәре күптән килмешәктәр ҡулында икән. Эйе, был күренеш Башҡортостандың һәр төбәгендә ғәҙәти хәлгә әйләнгән. Ләкин яҙыусы был ғәҙәтилектең трагик яҡтарын үҙенсәлекле һәм ҡатмарлы образдар аша асып бирә. Хикәйәлә Биҙәүләт ауылының бер тиҫтер кешеләре “һуҡыр тауыҡ” – Фәтҡулла, турғай – Вәлитдин, Шәрип, иҫәр – Сафуан, һәм“ сильсәүит” – Исмәғил образдары төрлө сюжет һыҙыҡтарын тармаҡландыра. Хикәйәлә ошо кешеләргә бәйле йәмғиәтебеҙҙәге XX быуат ваҡиғалары тасуир ителә. Әҫәрҙең төп проблемаһы – ер. Тап ошо ер мәсьәләһе һәр бер образдың күңел донъяһы, тормошҡа ҡарашы, йәшәү принциптары аша сағылыш таба. Һыйыр эҙләгәндә мәскәүлеләр уратып алған Татлыкүл тирәһен күреп, Дәүләтҡол хайран ҡала. Был – ваҡиғаларҙың башы ғына. Ә һыйырының башын уларҙың территорияһында табып алғас, хужаның күңел донъяһы пыранзаран килә. Ҡасандыр Бөйөк Ватан һуғышында ла рухы һынмаған, күңеле ҡатмаған ир-уҙаманды үҙ ерендә бөтөнләй “ҡол” хәлендә ҡалдырҙылар түгелме? Шуға ла Дәүләтҡолдоң һуғыш осорҙарын иҫләүе ябай ретроспектива түгел, ә беҙгә ваҡиғаларҙы йәнәш ҡуйып, герой характерының психологик портретын сағыштырыуға бик ҡулай. Һуғышта дошман билдәле – фашист. Ә әлеге заманда кем һуң дошман? Яу яланын бергә үткән Шәриптең улы Исмәғилме, әллә ҡалын кеҫәле “Мәскәү байҙарымы”? Тап ошондай һорауға яуапты Мөнир төрлө тарафтарҙан эҙләй, әҫәр геройҙарын динамик хәрәкәттә төрлө юҫыкта аса бара. Иҫәр Сафуан образы ла һәр бер ваҡиғаның үҙенсәлекле асҡысы. Миңә ҡалһа, шәп художестволы деталь. Шулай уҡ ретроспектив сюжет һыҙығы булып торған Фәсәхәт өләсәйҙең тарихы ла дөйөм сюжетҡа ярайһы уҡ яңы һулыш өрә, быуындар бәйләнешен яңы яҫылыҡта асып бирә. Әйткәндәй, Мөнир һыйыр эҙләүсе геройын артабан тыуған ере, ауылы өсөн көрәшсе генә итеп түгел, ә намыҫ, выждан кеүек әхлаҡи нормаларҙың да тап унда булыуы хикәйәнең психологик моментын тағы ла тәрәнәйтә. Дәүләтҡол үҙ кимәлендә дошманды таба, һәм үҙенсә язаға ла торттыра. Ул да булһа – Исмәғил. Ләкин район үҙәгенә барғас, Дәүләтҡолдоң яҙмышы ла ҡырҡа икенсе төрлө хәл ителә. Әле генә үҙ ҡылыҡтарына яуап бирергә әҙер ҡарт яуаплылыҡтан ҡотолдорола. Был иһә Дәүләтҡол тарафынан йәмғиәттәге иң әшәке күренештәрҙең береһе булараҡ баһалана. Шуға ла автор хикәйәһен “Һуңғы һүҙ” тигән өлөш менән тамамлай. Композицион был алым ярайһы уҡ уйланылған, әҫәрҙең аҙағы бер-нисә вариантта бирелә. Ни өсөн? Автор тап ошо алым аша һуңғы нөктә ҡуймаған. Шуға ла заман ҡаршылыҡтары уҡыусы зиһенен һағалап торғандай, автор беҙгә уйланырға урын ҡалдыра. М. Ҡунафиндың хикәйәһендә ваҡиғалар хәрәкәте ҡыҙыҡһындырмай, ә характерҙың үҙгәреше ваҡиғаларға, тормошҡа, йәмғиәткә йоғонто яһаған кеүек. Миңә ҡалһа, яҙыусының үҙенсәлекле был йүнәлеше – прозалағы уңышы.

Йәш прозаиктар семинарына Гөлдәр Әхмәҙишина ике повесть һәм бер нисә хикәйәһен тәҡдим иткәйне.

“Илаһи моң” повесының исемендә үк поэтик символ бар. Автор ошо алымды художестволы деталь кимәленә күтәрә һәм уның эволюцияһын ентекле күрһәтә. Тап ошо аҫҡыс повестың герой характерҙарын асыуға ла булышлыҡ итә. “Илаһи моң”да ваҡиғалар ғәҙәти, ауыл еренә хас ғаиләлә моронлай. Автор Фәрхәт һәм Зөләйха ғаиләһенең ҡотһоҙ һәм бәрәкәтһеҙ донъяһының сәбәбен дә аныҡ ҡына күрһәтә. Ул – эскелек. Был проблема тирәләй ике быуын кешеләренең яҙмыштарын сюжет һыҙыҡтары итеп үрә. Тәүгеһендә Фәрхәт менән Зөләйханың үҙ-ара ҡатмарлы, тәрән психологизм менән һүрәтләнгән тормошо булһа, икенсе сюжет һыҙығында Фәрхәттең ҡыҙы Айгөл һәм тиҫтерҙәренең яҙмышы бәйән ителә. Г. Әхмәҙишина был ике сюжет һыҙығының киҫешеү нөктәләрен дә уйлап тапҡан, уларҙы уйната йәки конфликтты киҫкенләштереп, уҡыусыны уйландыра. Әҫәрҙә Фәрхәт, игеҙәк балалары Айгөл һәм Айбулат менән һөйөклө ҡатыны Айһылыу үлгәс, тол ҡала.Ҡайырылған ҡанаттарына, уңалмаҫ яраларына ике бәләкәсе дауа, ләкин донъя түңәрәк түгел. Күршеләге йәш ҡыҙ Зөләйха Фәрхәтте күптән оҡшатып йөрөй, күңелен яулар өсөн барыһын да эшләй. Фәрхәт Зөләйхаға өйләнһә лә, күңеленә тыныслыҡ тапмай, шуға ла башын эскегә һала. Улай ғына түгел, был һаҙлыҡҡа йәш Зөләйханы ла һөйрәй. Эскелек арҡаһында балаларҙың күргән михнәттәре бизмәндәргә генә һалып үлсәрлек түгел. Хатта оҙаҡ көттөрөп, донъяға ауырыу ғына тыуған Ләйсән дә Зөләйханы ҡотҡара алмай. Сабый һәләк була. Был упҡындан барлыҡ ғаиләне бары тик күңел түрендә һаҡланған моң ғына ҡотҡара. Автор тап ошо ысулды бик ҡулай тип тапҡан, шуға ла әҫәрҙең поэтик яңғырашы ла ваҡиғаларға үрелеп бара. “Шул саҡ уның ҡолағына ҡайҙандыр таныш көй салынды. Кем уйнай баянда был тиклем дә йөрәккә яҡын көйҙө? Ниңә был моң күңеленең аҫтын өҫкә әйләндерә? Фәрхәт, тәҙрә аша ынтылып, өй эсенә ҡараны. Айгөл! Әсәһенең баянын шифоньер башынан төшөрөп алған да Айгөлө уйнай. Фәрхәт атылып тигәндәй өйгә инде. Баянда көйҙөң аҙағын сығарырға тырышҡан ҡыҙына стенаға һөйәнгән килеш бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Юҡ, ҡыҙы көйҙөң аҙағын дөрөҫ сығара алмай. Фәрхәттең йөрәгенә яҡын көйҙөң аҙағы улай бөтмәй…” Тап ошо моң, эйе, эйе илаһи моң барлыҡ фажиғәләрҙән арындырыр көскә эйә. Әҫәрҙең аҙағында ла Фәрхәт менән Зөләйха ла, башҡа персонаждар ҙа дөрөҫ юл табып, донъя гармонияһына сумалар. Г. Әхмәҙишина әҫәрендә ошо моңдоң сихри көсөнә дан йырлай.

Гөлдәрҙең икенсе повесы “Уралиә” тип атала. Әҫәр ғәҙәти генә ҡатын Миләүшәнең юғары уҡыу йорто дипломын алып, ҡайтырға сыҡҡан ваҡиғаларҙан башлана. Поезда күптәнге танышы Барно тигән үзбәк ҡатынын осрата.

Тап ошо осрашыу хәтер сылбырҙарын тағатып ебәрә лә. Ретроспектив алым аша беҙ Миләүшәнең 15–20 йыл элекке тормошона экскурсия яһайбыҙ. Ауылда өләсәһендә генә тәрбиәләнгән ҡыҙҙың тәүге мөхәббәте, өйләнешеүҙәре, күп тә тормай ире Даяндың армияға китеүе, бер нисә айҙан иренең хаттары туҡтағас, ул хеҙмәт иткән Үзбәкстанға юлланыуы – фотохроника рәүешендә күҙ алдынан үтә. Оҙон сәфәрендә башлана ла инде Миләүшәнең михнәттәре – һәр яуызлыҡ, этлек үтә лә бер ҡатлы ауыл балаһын һағалап ҡына тора. Ошо эпизодтар әле бер, әле икенсе йүнәлештәге сюжет ептәрен тармаҡландыра. Даянды күрәм дә әйләнеп ҡайтам, тигән Миләүшәнең сәфәре айға түгел, йылдарға һуҙыла. Улы Азат Үзбәкстанда тыуа. Ят тарафтарҙа үҙ туғанылай һыйындырған

Барно ғаиләһе. Ләкин героиняны аҡ ҡаластар көтөп тормай, аҙым һайын яҙмыш үҙ һынауҙарын әҙерләгән. Миләүшәнең сабырлығын, ҡатҡылығын, ихтыяр көсөн Урал тауы менән сағыштырып, “Уралиә” тип нарыҡлайҙар. Күпме генә интекһә лә, бәхет бөтөнләй ситләшмәгән икән. Даян Афғанда әсирҙә булып, һауығып ҡайтҡас, барыбер эҙләп таба. Миләүшә – Уралиәнең бәхет ҡапҡалары асыла.

Ә йылдар үткәс, Барно менән Уралиәнең осрашыуында нимә күрә автор? Әлбиттә, был сюжет һыҙығы бөтөнләй икенсе юҫыҡта, ҡасандыр Миләүшәне һағалаған тәҡдир Барноны ла урап үтмәгән. Ихлас күңелле героиня изгелеккә унлата арттырып түләүсе зат, бурыс йөкмәп ҡалмай. Барноларҙың юлында Хызыр Ильяс һымаҡ пәйҙә булып, оло бәләнән ҡотҡара.

Гөлдәр Әхмәҙишинаның ике повесы ла хәтерләүгә ҡоролған. Әҙәбиәттә ретроспектив алым йыш ҡулланыла, шуға ла эпик фекерләүҙең динамикаһын күҙаллаусы мөмкинлек юҡҡа сыға. Ә бит заман проблемаларын фронталь сюжет һыҙыҡтарында башҡа төрлө байыраҡ композицион саралар аша сағылдырырға була. Шуға ла автор ошо хаҡта уйланһын ине. Тағы ла герой образына күберәк сентименталь һыҙаттар хас, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының саялығы күләгәлә ҡалған.

Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның “Асылмаған серҙәр” китабына ете хикәйә индерелгән. Тематик яҡтан барлыҡ әҫәрҙәре лә социаль конфликтҡа нигеҙләнеп үҫеп сыға. Автор үҙ героиняларын ғәҙәти тормоштан бер башҡа юғарыраҡ тотоп, килеп сыҡҡан киҫкен драматик ситуацияларҙа ла юғалып ҡалмай, үҙенсә хәл итергә етешкән шәхестәр итеп һүрәтләй. З. Ҡаҙаҡбаеваның хикәйәләре үҙенең халыҡсан теле, сюжет ҡороу маһирлығы менән айырылып тора. Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның “Беҙ ҡауыша алмаҫ ара юҡ” хикәйәһе уҡытыусы менән уҡыусы араһындағы ваҡиғаларға ҡоролған. Тик бында бәхетһеҙ мөхәббәттең сәбәптәре бөтөнләй икенсе яҫылыҡта ята. Йәш уҡытыусы Таңһылыу Таһировна менән сығарылыш синыфы уҡыусыһы Саръян араһындағы саф тойғолар, йәмғиәт ҡанундарына һыйып бөтмәй, селпәрәмә ватыла. Ҡаршылыҡтың башында директор үҙе тора. Мәсьәләне педсоветта тикшергәндән һуң, «Саръян Буранбаевты мәктәптән ҡыуырға» тигән ҡарар сығаралар. Ләкин Таңһылыу үҙе китергә мәжбүр була. Хикәйәлә сюжет ептәре тағы ла ҡатмарлашып, характер бәрелештәрен киҫкенләштерә автор. Был ваҡиғаларға байтаҡ йылдар үткәс, геология-минерология буйынса фән докторы, профессор, ике бала әсәһе, бәхетле хужабикә Таңһылыуҙы ҡасандыр ул эшләп киткән мәктәптең алтын юбилейына саҡыралар. Алыҫ Себерҙән тыуған яҡтарына ҡайтып төшә ул. Мәктәп Рәсәй Геройы Саръян Буранбаев исемен йөрөтә икән. Таңһылыуҙың күңел донъяһы аҫты-өҫкә килә. Сөнки Саръян Чечен ерендә үлеп ҡалған. Ул ғына ла түгел, ҡарт директор: «Сер булмаһа, әйтегеҙ әле, һаман да иҫләйһегеҙме Саръян Буранбаевты? Ысынлап та оҡшай инеме ул һеҙгә?» — тип яраһына тоҙ һала. Автор героиняһының психологияһын бик оҫта һүрәтләй.

З. Ҡаҙаҡбаеваның “Күбәләк” хикәйәһендә Зариф менән Нәфисәнең мөнәсәбәттәрендә ғаилә хәлдәре генә түгел, ә ҡатмарлы тормош, яҙмыш осраҡтары ла сағылыш тапҡан. Автор героиняһының көслө һыҙаттарын тәбиғәттәге тәбиғилектән, бигерәк тә күбәләк образына бәйләп бик оҫта хәл иткән. Характерҙың эске динамикаһы көслө, хәтер ағымына ҡоролған. З. Ҡаҙаҡбаеваның героинялары күпселек осраҡта бер төрлө ҡараш, бер

йүнәлештәге уйҙар булыуы менән айырыла. Авторға артабан характер хикәйәләре хаҡында уйланырға кәрәк.

Рәлис Ураҙғоловтың ваҡытлы матбуғатта донъя күргән әҫәрҙәрен уҡып барам. Йәш прозаиктың һутлы теле, донъяны үҙенсә генә күрә белеүе һәм үткер социаль проблемаларҙы һүрәтләүе ылыҡтыра. Авторҙың «Бормалы яҙмыштар» тигән тәүге китабына биш хикәйәһе ингән. Өлгөр, тырыш журналист 2008 йылда уҡыусыларын “Аслыҡ” исемле романы менән һөйөндөргәйне. Рәлистең күпселек хикәйәләренең конфликт төйөнө социаль ерлектә башлана. Автор ғәҙәти ваҡиғаларҙы үҙенсәлекле ракурстарға ҡуйып һүрәтләй. Миҫал өсөн китапҡа ингән иң ҡыҙыҡлы «Рәнйеш» хикәйәһендә лә автор герой характерының үҙенсәлекле яҡтарын тос фекер, тығыҙ композицион алымдар аша бирә. Әҫәрҙе яҙыусы әҙәбиәттә традицияға әйләнгән төш алымы менән башлап ебәрә. Тик төш ябай ғына түгел, ә гел генә ҡабатлана ла, Әһли һаташып уяна. Төшөндә быҙау йонсота. Сюжет eптәрен дә ошо ваҡиға аша төйнәп, артабан персонаждар хәрәкәтен тәьмин итә. Әһлиҙен ҡатыны Гүзәл «Мал күреү – байлыҡҡа!» тиһә, үҙе быға тиклем булып үткән бик үк күңелле булмаған ваҡиға менән бәйләй. Ауыл быҙауҙары ужым баҫыуына төшөп йонсотҡас, Әһли үҙенең уйҙарын колхоз рәйесе Насрый Ғәлләмовичҡа еткерә. Быҙауҙарҙың арҡаһын ярып, тоҙ һибеп ебәрергә уйлайҙар. Рәйес риза була. Күмәк быҙауҙар араһынан Шәрәфтекен һайлап, эксперимент үткәрәләр. Әһли үҙенең төш боларыуын ошоға бәйләй, сөнки күрәҙәсе әбей ҙә «Мал рәнйеше. Тәүбәгә килмәһәң, унығы ебәрмәүе мөмкин» тип, хужаларына әжерен бирергә өндәй. Ошо юҫыҡта барған ваҡиғаларҙың аҙағын автор бөтөнләй икенсе яҡҡа бора. Район үҙәгенә юлланған Әһли, Исмәғил ауылын үткәс, бәләкәс кенә мышы балаһына осрай. Яңы ғына тыуған быҙауҙы машинаһының артҡы яғына һалып, борола башлай. Ләкин ата менән инә мышы машинаны ике яҡтан ҡамап, емерергә тотона. Әһли тәүбәгә килә, ишекте саҡ-саҡ аса. Бына ҡайҙа малдың рәнйеше килеп төшә уға!

Автор геройының психологияһын төрлө штрихтар менән бирә. Ҡатыны Гүзәлгә, башҡа ҡатындарға мөнәсәбәте лә әленән-әле сағылып ҡала. Р. Ураҙғолов кеше характерының иң нескә, иң ҡатмарлы яғы – нәфсе аша герой образын аса. Яҙыусы фекере хикәйәләге ваҡиғалар тығыҙлығында ла, хәрәкәттәр динамикаһында ла ярылып ята. Кешенең кеше булып ҡалыуы йыш ҡына беҙҙең менән йәнәш йәшәгән хайуандар, йәнлектәр аша танала. Тик, үкенескә ҡаршы, бик һуңлап ҡына шул. Р. Ураҙғоловтың хикәйәләрендә жанрҙың ретроспектив алымдары йыш ҡулланыла. Был, бер яҡтан, яҙыусының үтә бер төрлө хикәйәләү юлына төшөргәләй. Шулай уҡ авторҙың хикәйәләрендә тематик даирәнең киңәйеүен дә теләргә ҡала.

Әҙәбиәт өлкәһендә күптән үҙ тауышын белдергән журналист Р. Сәғитовтың хикәйәләре әленән-әле ваҡытлы матбуғатта донъя күреп тора. Шулай уҡ яҙыусы уймаҡ хикәйәләр жанрында ла байтаҡ ҡына әҫәрҙәр баҫтырҙы. Прозаиктың “Сират” хикәйәһе – авторҙың табышы. Р. Сәғитов йәмғиәттәге социаль, ижтимағи, сәйәси проблемаларҙы бер яҫылыҡтан икенсеһенә күсереп, ҡыҙыҡлы образдар аша сиcергә ынтыла. Хикәйәлә айырым герой образы юҡ, ләкин дауаханала сиратта тороусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре хикәйәнең композицияһын тәшкил итә. Әҫәрҙә шәхси ҡараштар, йәмғиәт күренештәре менән ҡушылып, шәхес һәм йәмғиәт проблемаһын төрлө яҡлап яҡтырта. Яҙыусы психологик алымды ла йыш ҡуллана,

сюжет ептәрен бер-береһенә бәйләүсе алым итеп тә ала.

Журналист Гөлнара Мостафинаның ижади багажы тулы ғына күренә. Уның балалар өсөн яҙылған хикәйәләре ваҡытлы матбуғатта әленән-әле донъя күрһә лә, ололар өсөн тәүге әҫәре “Бармаҡ буйы бер балыҡ” ҡыҙыҡлы ғына ваҡиғаға нигеҙләнгән. Хикәйәлә тыуған ер һәм кеше шәхесенең үҙенсәлекле эволюцияһы төп урынды биләй. Әҫәр геройы Заһир кесе саҡтан уҡ “тыңҡыш” ҡушаматы алып, бала саҡтағы күңелһеҙ ваҡиғаларҙы күңелендә йөрөтә. Уның төп сәбәбе – Рәсихтә. Автор ошо ике персонажды йылдар үткәс осраштырып, бер-береһенең донъяға булған ҡараштарын, психологик портретын оҫта ғына лирик сигенеүҙәр аша бирә алған.

Гөлнараның “Кая” исемле повесы ла тетрәндергес яҙмыштарҙы һәм ваҡиғаларҙы бәйән итә. Яҙыусының тәүге повесы булһа ла, жанрҙың мөмкинселектәрен ярайһы уҡ яҡшы тойомлай, шуға ла әҫәрҙә идея-эстетик буяуҙар тормоштоң үҙе кеүек үк күп төрлө. Яҙыусы повеста Резеда исемле героиняһының ҡатмарлы һәм фажиғәле яҙмышына үтә итәғәтле генә бағып, сюжеттың артабанғы ептәрен ике йәнәш – үткәне һәм бөгөнгөһө тирәләй ойоштора. Резеда кейәүгә сыҡҡандан алып Илһамы менән иң бәхетле ҡатын-ҡыҙ булараҡ күҙ алдына баҫа, һәм ошо бәхетте берүк сайпылтмайым тип, сәсе менән иҙән һепергергә лә әҙер. Ләкин героиняның үткәндәге булмышы йәнәшәлә генә һәм ул уны “бәхетһеҙлек һаҙлығына” этәрә. Ә күперҙәр бармы һуң был һаҙлыҡтарҙан ҡотолорға? Автор яуапты повестың геройҙары, улар араһындағы мөнәсәбәттәр аша эҙләй. Әҫәр бик еңел уҡыла. Геройҙың ижтимағи эшмәкәрлеге уның эске донъяһы менән диалектик берлектә бирелә. Гөлнара сюжетты мажаралы, мауыҡтырғыс элементтар аша байыта. Повесҡа исем биргән пейзаж образы әҫәрҙең художестволы деталь кимәленә күтәрелә. Шуға ла ҡаялай ғорур башҡорт ҡыҙы Резеда тормоштоң иң бысраҡ, әшәке яҡтарын еңеп, бәхет балҡыған яҡҡа сыға. Ундағы көс, психологик кисерештәр уҡыусыны һәр ваҡыт ниндәйҙер бер һағышлы ритмда тота. Йәш прозаиктың характерҙың үҙенсәләкле һыҙаттарын ваҡиғалар аша аса белеүе бик яҡшы.

Хикәйәт – башҡорт әҙәбиәте өсөн ят күренеш булмаһа ла, һирәк күҙгә салынған жанр. Әллә яҙыусылар иғтибар бирмәй, әллә уның ҡалыптарын өнәп бөтмәйҙәр. Әммә С. Агиш, Ә. Вахитов, Ф. Иҫәнғолов ижадында бынамын тигән өлгөләр бар. Шуға ла был жанрҙы йәш яҙыусы З. Бураҡаева ижадында күреү – традиция дауам итә, бәйләнештәр өҙөлмәй, тигән фекерҙе дәлилләй.

З. Бураҡаеваның “Хыялый япраҡ” исемле тәүге хикәйәләр йыйынтығы 2005 йылда донъя күрҙе. Ш. Бабич премияһы лауреаты Зөһрәнең ижад стиле башҡаларҙан бөтөнләй айырылып тора. Яҙыусы эҙләнеүсән, үҙ-үҙенә талапсан. Шуға ла уның ижади йөҙөн билдәләүсе бер генә әҫәренә туҡталып китәйек. «Йылан» – Зөһрәнең «Ағиҙел»дә баҫылған тәүге әҫәре. Хикәйәттә социаль-мәҙәни һәм фәлсәфәүи проблемалар күтәрелә. Автор традицион композициянан тайпыла, ваҡиғалар хәҙерге заманда бара, ә уның нигеҙҙәре – башҡорттарҙың боронғо ырымдары. Әммә улар икеһе ике поляр яҫылыҡта ятмай, ә байтаҡ ептәр менән бәйле. Шуға ла сюжет ептәре ваҡыт арауығы, киңлек буйынса ла ярайһы уҡ йәйелдерелгән. Тик былар образдар тарҡаулығын барлыҡҡа килтермәй, ә уларҙы бер епкә бәйләүсе ҡаршылыҡ ебе, конфликт үҙәге бик уйланылған, һәр яҡлап ваҡиғаларҙы ҡоршап тора. Тәүге ваҡиғалар –

Сәлихйән олатай йортонда, икенсеһе – ҡалала, килендәре Лилиә ғаиләһендә, өсөнсөһө – ырымдарҙа, дүртенсеһе тегә донъяла хәрәкәт итә. Тығыҙ, бик тығыҙ һәм етеҙ хәрәкәткә ҡоролған хикәйәт сюжеты. Изгелек һәм яуызлыҡ көрәше бер нәҫел йәки Сәлихйән олатай ғаиләһе аша һүрәтләнә. Олатайҙың ҡатыны Илһөйәр үлем түшәгендә, ә кесе улы Илһам аҫылынып үлгән. Уларҙың өсөнсө балалары Илһам да, ағалары кеүек, еңел үлем юлын һайлаған. Таһирҙың «...Үҙемдән бeләм – был ҡара көс иң тәүҙә күңел күҙен кимерә. Тәбиғәттең матурлығы һәм илаһилығын тойған күңел күҙен... Мине ниҙер эстән кимерә – түҙгеһеҙ... Ысын моң айышын белгән заттарҙы бөтөрөү – аждаһаның төп маҡсаты... Ни ҡылырға?..» тигән яҙмалары был үлемдәрҙең сәбәбен аңларға асҡыс кеүек тә. Лилиә менән Таһирҙың улдары Йәмил һуңғы көндәрҙә яман төш күреп, һаташып сыға. Яңғыҙ ҡатын Йәмилде ауылға ебәреп, бер аҙ тынысланырға уйлай. Ә был үлем Сәлихйәндең ейәнен дә һағалап ҡына тора икән. Йыландан ҡотолоу, бына-бына өҙөлөргә генә торған нәҫел ебен һаҡлап ҡалыу өләсәһе Илһөйәр йәненә төшә. Күк күгәрсен ҡиәфәтендә бер нисә тапҡыр үҙ йортона ла килә, Сәлихйәндең иркәләп икмәк менән һыйлағанынан кинәнес таба. Ә йылан Йәмилде сағам ғына тигәндә, яуызды алҡымынан алып, ейәнен ҡотҡара күгәрсен, йәғни өләсәһенең йәне.

Хикәйәттә һүрәтләнгән эпизодтарҙа шәхес, социаль һәм фәлсәфәүи проблематика персонаждарҙың характерҙары аша сағылыш таба. Әммә кеше тормошондағы ҡара төҫтәргә мансылған үлемдең әҫәрҙә күп ҡулланылыуы һағайтып та ҡуя. Ваҡиғалар артынан ҡыуыу түгелме? Хикәйәттең исеменә сығарылған йылан образы бик йәтеш эшләнгән, әҫәр фекерен асыусы шәп художестволы деталь. Йәш әҙибәнең фекерләү даирәһе, стиль үҙенсәлеге айырылып тора. Жанр мөмкинлектәрен дә заман проблемаһы менән оҫта бәйләй алған. Тәүге әҫәр өсөн ярайһы ғына уңыш.

Шулай итеп, бөгөнгө прозалағы йәштәр тауышы әҙәбиәттең йүнәлешен төҫмөрләргә ярҙам итә. Әлбиттә, араларында бик тырыш, эҙләнеүсән, ижади ҡараштары менән айырылып торғандары ла, йәки бер-ике әҫәр баҫтырып тынысланғандары ла, йә булмаһа ижади үрҙәргә үҙ һуҡмаҡтарын бик яйлап эҙләгәндәре лә бар. Шуға күрә уларҙың ижади башланғыстарын бер генә төрлө баһалау мөмкин түгел. Һәр нәмәгә ваҡыт үҙ тамғаларын ҡуя. Ҡараштары киләсәккә төбәлгән бер төркөм йәштәр ижадына байҡау яһап, уларҙың яҙмаларында жанрҙар төрлөлөгө, тематик байлыҡ, ҡыйыулыҡ һәм оҫталыҡ кеүек мәсьәләләр ҙә урын алыуына күңел шатлана. Ғөмүмән, әҫәрҙәрендәге проблемалылыҡ, сюжеттың ҡырҡыулығы заман ағышы, дәүер һулышынан айырылғыһыҙ. Был иһә – бик мөһим.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# ФӘНГӘ АРНАЛА ҒҮМЕР

*(Морат Рәхимколовка 85 йәш)*

Күренекле ғалим, тәжрибәле уҡытыусы-остаз, үткер ҡәләмле әҙәбиәтсе һәм оҫта публицист. Башҡаларға, иң тәү сиратта үҙенә ҡарата талапсан, киң эрудициялы, юғары мәҙәниәтле был шәхестең уҡыусыһы булыу, әлбиттә, минең өсөн ҙур бәхет һәм мәртәбә булһа, икенсе яҡтан, ҙур яуаплылыҡ та өҫтәй. Алдына ҡуйған маҡсатына барған юлда осраған ҡаршылыҡтарға бирешмәй, изге моратына ирешкән, бейек ғилем үрҙәрен яулаған Морат Ғәлим улы Рәхимҡоловтың эшмәкәрлеге әҙәби контакттар, айырыуса Башҡортостандың рус әҙәбиәтендә сағылышын, фольклор менән әҙәбиәт араһындағы бәйләнештәрҙе тикшергән мөһим һәм хәҙерге көндә бигерәк тә актуаль булған фәнни йүнәлешкә бәйләнгән. Киләсәк быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләүҙә, һис шикһеҙ, тыуған яғыбыҙҙы данлап яҙған рус әҙиптәренең әҫәрҙәренең әһәмиәте ҙур. Морат Ғәлим улының тилбер ҡәләме ҡеҙрәте менән был мәсьәләне яҡтыртҡан биш йөҙҙән ашыу мәҡәлә, ун китап, утыҙҙан артыҡ йыйынтыҡ донъя күрә. «Башҡортостан – мөхәббәтем минең», «Дуҫлыҡ биттәре. Рус-башҡорт әҙәбиәт һәм фольклор бәйләнештәре», «Халыҡ аҡылының сығанағы. Рус әҙәбиәтендә башҡорт фольклоры», «Салауатты данлаусылар» һәм башҡа китаптарының исемдәрендә үк яҙыусының тыуған төйәгенә һәм халҡына һөйөүе ярылып ята. Шулар араһында иң тосо һәм уҡыусылар араһында киң танылыу тапҡан, әҙәбиәт ғилемендә юғары баһа алған «Башҡортостан рус әҙәбиәтендә» антологияһы. Был йыйынтыҡтың биш томдан торған беренсе баҫмаһы 1961–1968 йылдарҙа нәшер ителһә, 1989–2004 йылдарҙа яңынан эшкәртелгән, алты томғаса тулыландырылған баҫмаһы донъя күрә.

“Яҙмышым минең – Башҡортостан” автобиографик хәтирәләрендә Морат Ғәлим улы былай тип яҙа: “Яҙмыш минең тормошомдо ике тигеҙ булмаған өлөшкә бүлде. Тәүгеһен бер нисә юлға һыйҙырып була: балалыҡ осоро, үҫмер саҡ йылдары, һуғыш, завод, атайҙы ҡулға алыу, урта мәктәпте һәм пединститутты тамамлау, ауыл мәктәбендә уҡытыу. Икенсе өлөшө күпкә байыраҡ: 1957–1968 йылдар – Рәсәй фәндәр академияһының Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләү, филология фәненең мөһим йүнәлештәренең береһе – әҙәбиәттә тыуған республикабыҙҙың сағылышын өйрәнеү мәсьәләләрен тикшереү. Һөҙөмтәһе – биш томдан торған “Башҡортостан рус әҙәбиәтендә” антологияһын нәшер итеү. 1968

йылда Башҡорт дәүләт университетына эшкә күсеү...”[1] Оҙаҡ йылдар ғалим был юғары уҡыу йортонда филология факультетының рус әҙәбиәте кафедраһында доцент булып эшләй, ваҡыт тығыҙлығына ҡарамай, ижтимағи эштәр ҙә башҡара. Егерме йылдан артыҡ ул етәкләгән «Тропинка» әҙәби берекмәһендә байтаҡ буласаҡ шағирҙар, журналистар, атҡаҙанған мөхәррирҙәр, әҙәби тәнҡитселәр илһам ҡанаттарын нығыта. Өлгөлө педагог, рус телендә яҙыусы Башҡортостан әҙәбиәт ғилеме белгестәренән беренсе булып СССР Яҙыусылар союзына алына. Ул – В.П.Бирюков исемендәге Урал һәм С.П.Злобин исемендәге әҙәби премиялар лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре һәм почетлы краеведы, СССР Юғары мәктәбе отличнигы...

БДУ-ның 100 йыллығына һәм Морат Рәхимҡоловтың ғилми-әҙәби эшмәкәрлегенә 50 йыл тулыуға арнап сығарылған “Тыуған яҡҡа һөйөү менән” тигән йыйынтыҡҡа яҙыусының остаздары, коллегалары һәм уҡыусыларының иҫтәлектәре, ғилми мәҡәләләре тупланған. Авторҙар араһында – Өфө, Стәрлетамаҡ, Воронеж, Силәбе ғалимдары, яҙыусылары һәм журналистары. Мәҡәләләрҙең исемендә үк Морат Ғәлим улын ҡылыҡһырлаған һүҙҙәр: “Тәү башлап асыусы” (Б. Әхмәтшин), “Башҡортостандың крайҙы өйрәнеү ғилеме патриархы” (М. Хәйруллина), “Икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрҙе иңләүсе” (Т. Ахунйәнов), “Бәхетле кеше” (С. Халфин), “Булмышы – кешеләргә изгелек эшләү” (Л. Колоколова), “Изгелек” (Д. Ямалетдинов), “Ҡыҙыҡһыныусан әҙәбиәт белгесе” (С. Сафуанов) һ.б. бар. Ысынлап та, фән юлында үҙ һуҡмағын тапҡан, ошо йүнәлештән ситкә тайпылмай ярты быуат хеҙмәт иткән М.Ғ. Рәхимҡолов үҙен бәхетле кеше тип иҫәпләргә тулыһынса хаҡлы. Ул ижад иткән һәм туплаған китаптар һәм йыйынтыҡтар мәғариф һәм фән өлкәһендә эшләүселәр өсөн бик кәрәкле ҡулланма. Ғалим ҡатнашлығында нәшер ителгән “Беҙҙең Салауат” (1973, 1982), «Үткәндәр һуҡмағы буйлап» (1980), «Тере хәтер» (1997) йыйынтыҡтарына, «Алтын шишмәләр» серияһында донъя күргән рус яҙыусыларының Башҡортостан тураһындағы әҫәрҙәренә бөгөнгө көндә лә ихтыяж ҙур.

2009 йылда “Китап” нәшриәтендә ғалимдың ике китаптан торған очерктар йыйынтығының “Пушкиндан алып Толстойғаса. XIX быуат” тип аталған тәүге өлөшө донъя күрҙе. 22 очерктан торған китаптың тәүге бүлеге “Классиктар” тип атала һәм унда А.С. Пушкин, М.Ю. Лермонтов, А.П. Чехов, Л.Н. Толстой кеүек күренекле яҙыусыларҙың Башҡортостан менән биографик һәм ижади бәйләнештәре ҡарала. “Онотолған исемдәр” тигән бүлек Т.С. Беляев, П.М. Кудряшев, А.Г. Туркин, А.М. Федоров кеүек яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен тикшереүгә арналған. Китаптағы материал хронологик тәртиптә урынлаштырылған, һәр очерк фәнни аңлатмалар һәм иҫкәрмәләр менән тулыландырылған. Был китап киң ҡатлам уҡыусыларына, айырыуса юғары һәм урта уҡыу йорттары студенттары һәм уҡытыусыларына тәғәйәнләнә. Тәүге өлөшөндә автор тарафынан тыуған яҡҡа арналған әҙәбиәтте өйрәнеү

---

[1]*Рахимкулов М.Г. Судьба моя – Башкортостан// В сб.: С любовью к родному краю. Уфа, 2009. С.197-198.*

буйынса фәнни-методик кәңәштәр бирелеүе осраҡлы түгел. М.Ғ. Рәхимҡолов был йүнәлештә бер нисә эш төрөн билдәләй: әҙәбиәт дәресендә крайҙы өйрәнеү элементтарын ҡулланыу, тыуған яҡ темаһына арналған иншалар яҙыу, крайҙы өйрәнеү буйынса әҙәби түңәрәктәр һәм факультативтар ойоштороу.[2]

Икенсе бүлектә иһә XX быуат рус яҙыусыларының Башҡортостанға арналған әҫәрҙәре бар. Улар араһында М. Горький, К. Федин, С. Есенин, С. Злобин кеүек күренекле әҙиптәр менән бер рәттән, заманында яҙмаларын матбуғатта баҫтырыу тыйылған Саша Черный, С. Минцлов, М. Осоргин кеүек ижадсыларҙың да әҫәрҙәре ҡарала. М.Ғ. Рәхимҡолов республикабыҙҙың рус телендә ижад итеүсе яҙыусыларҙың ижадына ла ҙур иғтибар бүлә. Очерктар йыйынтығы Т. Ғиниәтуллин, Й. Мостафин, И. Сотников, Р. Паль, А. Филиппов һ.б. ижадын барлау менән тамамлана.

М.Ғ.Рәхимҡолов етәкселегендә аспирантура үтеү, уның менән аралашыу шөғөлөн уҡытыусылыҡ һәм фән менән бәйләгән һәм бәйләргә йыйынған кеше өсөн кәрәкле булған бер нисә сифатты асырға ярҙам итте. Беренсенән, ниндәй генә эшкә тотонһаң да, уны күңел һалып һәм яратып башҡарырға кәрәк. Фәнни тикшеренеүҙәрҙең нигеҙен фактик материалдарҙың тәшкил итеүе мәжбүри. Ысынлап та, Морат Ғәлим улының ниндәй генә хеҙмәтен алып ҡарама, ул яҙыусы ижадын шул осор әҙәбиәте менән бәйләп, архивтарҙа һаҡланған материалдарға нигеҙләнеп өйрәнә. Икенсенән, башҡаларҙың, айырыуса үҙеңдең уҡыусыларыңдың уңыштарына ихлас шатлана белеү. Ҡасандыр уның етәкселегендә курс йәки диплом эшен башҡарған, уның лекцияларын тыңлаған студенттарының бөгөнгө көндә яулаған үрҙәре һәм ҡаҙаныштары өсөн уҡытыусымдың ҡыуаныуын күреү үҙе бер кинәнес. Иҫ киткес хәтере менән дә һоҡландыра ул. Ҡайһы китаптың нисәнсе битендә ниндәй мәҡәлә баҫылыуын, яҙыусы ижадына ҡағылышлы факттарҙы ул яңылышмай теүәл әйтеп бирә. Дуҫтарының һәм коллегаларының уны тере энциклопедия тип йөрөтөүе осраҡлы түгел.

Уның менән һәр осрашыу һәм әңгәмәләшеү күңелгә илһам өҫтәй. Тормош ваҡлыҡтарына артыҡ зарланырға яратмаған уҡытыусымдың әйткән һүҙҙәре, биргән кәңәштәре тос һәм фәһемле. Шаяртыу ҡатыш һөйләгән һүҙҙәрен дә кинәйәләп кенә ниндәйҙер мөһим ваҡиғаға бәйләп ҡуя ул.

Морат Ғәлим улы Рәхимҡолов алдына ҡуйған маҡсаттарын бар күңелен һалып тормошҡа ашыра, эшләгән эшенең ыңғай һөҙөмтәһен күреүҙән кинәнес алып йәшәй.

**Ирена ҠОЛҺАРИНА,**
**филология фәндәре кандидаты, БДУ доценты.**

[2]*Рахимкулов М.Г. От Пушкина до Толстого. XIX век. Ч.1. Художественно-краеведческие очерки о Башкирии. Уфа, 2009. С.9.*

## ТАРИХСЫ ЛА, ӘҘӘБИӘТСЕ ЛӘ

*(Әбүбәкер Усмановтың тыуыуына 100 йыл)*



Исаак Ньютондың (1643–1727) шундай фекере бик фәһемле: “Беҙ гиганттарҙың яурынындағы кәрләләр кеүек, шуға ла уларҙан күберәк һәм алыҫыраҡ күрәбеҙ”. Фән өлкәһенә был туранан-тура ҡағыла. Башҡортостан тарихын өйрәнеү проблемаларын юллаһаҡ, был мәсьәләнең ҡатлаулы ла, ҡатмарлы ла, сеймәлсек тә булыуы асыҡланыр ине. Шул сеймәлсекте сисә алмағанға, ҡырҡып ялғанған төйөрөм-төйөрөм төйөндәрҙе лә күпләп табырға мөмкин. Тап ана шул, нисек булғанын теүәл асыҡлап, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилләп, күрһәтә алыуҙа өлкән быуын тарихсыларының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Әбүбәкер Усманов (1910 –1982) шундай арҙаҡлы уҙамандарҙың береһе ине. Уның эшмәкәрлеге шуның менән дә иғтибарға лайыҡ: тарихты ул әҙәбиәт менән (1948 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы) ярайһы уңышлы ғына бәйләй алды.

Әбүбәкер Нуриян улы Усманов 1910 йылдың 24 апрелендә Балтас районының Имән ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Интернат-мәктәпте тамамлағандан һуң Бөрө педагогия техникумында уҡый. Артабан Бөрө ҡала пионерҙары ойошмаһын етәкләй. 1930–1933 йылдарҙа Өфө педагогия институтында белем алғас, шунда уҡ уҡытыусы итеп эшкә ҡалдырыла. Бер йылдан Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссариатына инспектор итеп күсерелә. 1935–1937 йылдарҙа Мәскәүҙә тарих буйынса аспирантура үтә. 1937 йылдың көҙөнән Мәжит Ғафури исемендәге Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты директоры. 1940 йылда Башҡортостан Совнаркомы эргәһендәге Сәнғәт эштәре буйынса идара етәксеһе. 1941–1943 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация буйынса секретары. 1943–1950 йылдарҙа ҡайтанан Тел һәм әҙәбиәт институтында директор. Башҡортостанда СССР Фәндәр академияһы филиалы асылғас, шул уҡ институтта өлкән ғилми хеҙмәткәр (1971 йылға тиклем) булып эшләй.

Ә. Усмановтың публицистик мәҡәләләре 1932 йылдан күренә башлай. Ғалим даими рәүештә башҡорт халыҡ ижадын йыйыу, өйрәнеү менән шөғөлләнә, “Башҡорт халыҡ әкиәттәре” (1939) йыйынтығын баҫтырып сығара. “1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлылары” (1944), “Салауат батыр” (1945), “Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы” (1949, 1960, 1982), “1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы” (1964) китаптарын нәшер итә.

Башҡортостан хаҡында яҙған рус яҙыусылары һәм тикшеренеүселәре тураһында ваҡытлы матбуғат биттәрендә мәҡәләләр серияһы баҫтыра. Уның яҙмалары коллектив йыйынтыҡтарҙа, энциклопедияларҙа, журналдарҙа һәм гәзиттәрҙә баҫылған.

Әбүбәкер Усмановтың ғилми эшмәкәрлеге тәү сиратта "Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы" (1982), "1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы" (1964) тигән хеҙмәттәре менән әһәмиәтле.

Монографик пландағы был китаптар авторҙың төпсөрлө ғалим, һығылмалы тел байлығына эйә филолог булыуын раҫлай. Ул үҙенә тиклем эшләгән тарихсыларҙың хеҙмәттәрен тәнҡит күҙлегенән ғәҙел баһалай, тәү сығанаҡтарға ныҡ иғтибарлы, архив документтарына мөмкин тиклем тулыраҡ нигеҙләнергә ынтылған. Фольклор әҫәрҙәренә мөрәжәғәт иткәндә, уларҙың тарихи сығанаҡ булараҡ үҙенсәлектәрен иҫәпкә алған. Мәҫәлән, башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуына бәйле тикшеренеүҙә был төбәктән бишәр йөҙ һыбайлынан торған 30-ҙан ашыу атлы полк ойошторолоуын ныҡлы дәлилләй. Документтар Өфө, Ырымбур, Мәскәү архивтарынан алынған, шул осор ваҡытлы баҫма материалдары ла килтерелгән, башҡа тарихсыларҙың китаптарына һылтанмалар яһалған, шәжәрәләргә, йыр-легендаларға мөрәжәғәт ителгән. Хәҙер киң билдәле башҡорт яугирҙары һүрәттәренең (А.О.Орловский "Башҡорт һуғышта", "Башҡорт һыбайлылары походта", "Башҡорт хәрби етәксеһе походта", "Башҡорт һыбайлылары ҡурай тыңлай"; Шадов "Башҡорт яугиры" – бер үк исемдә ике һүрәт һ.б.) репродукциялары, беренселәрҙән булып Ә.Усманов китабында бирелеүен дә һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышындағы яугирлығы осраҡлы булмауы, уларҙың быға тиклем дә, Рәсәйҙе үҙ ватаны итеп күргәнгә, илбаҫарҙарға ҡаршы йән аямай алышыуы ышандырырлыҡ итеп асылған.

Ә.Усмановтың тарихсы булараҡ булдыҡлылығы Рәсәйгә ҡушылыу ваҡиғаларын тарихи дөрөҫлөгөндә аса алыуында ла яҡшы күренә. Был темаға арналған тәүге хеҙмәттәренә бәйле әйтелгән кәңәш, тәнҡит һүҙҙәрен ул, иғтибарлы ҡабул итеп, етешһеҙлектәр өҫтөндә ныҡышмалы эшләгән. Һөҙөмтәлә монографияһы бөгөн дә был йүнәлештәге етди хеҙмәттәр рәтендә торорлоҡ. Башҡорттарҙың Рус дәүләте эсенә инеү процесы ябай ғына бармауы – шул осорҙо, Рәсәй солғанышын тулайым күҙаллау, уға тиклемге ваҡиғалар логикаһын асыҡлау, артабанғы үҫеш–үҙгәреш тенденцияларын барлау аша күрһәтелә. Автор ҡапма-ҡаршылыҡлы факттарҙы, ваҡиғаларҙы урап үтмәгән, уларға ғәҙел баһа бирергә ынтылған. Мәҫәлән, көнбайыш башҡорттары, улар артынса Дим бассейнындағылар үҙ яҙмыштарын урыҫтар менән бәйләгән бер мәлдә, Урал аръяғындағыларҙың, Себер ханлығына буйһонғанлыҡтан, әле был мәсьәләне хәл итә алмауҙары нигеҙле күрһәтелә.

Ғөмүмән, Әбүбәкер Усмановтың халҡыбыҙ тарихын асыҡлауҙағы тикшеренеүҙәре ваҡыт һынауын ярайһы уңышлы үтеүе менән юғары баһаланырға хаҡлы.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**

## «БЕРЛЕКТӘ ГЕНӘ ТЕРЕЛЕК БАР»

*(Абдулҡадир Инандың тыуыуына 120 йыл)*



Күптән түгел республика йәмәғәтселеге егермense быуат башында Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусы шәхестәрҙең береһе, донъя күләмендә танылған төркиәтсе-ғалим Абдулҡадир Инандың (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) тыуыуына 120 йыл тулыуын билдәләне.

Фәтхелҡадир Мостафа улы Сөләймәнов 1889 йылдың 29 ноябрендә Өфө губернаһы Верхнеуральск өйәҙе (хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы) Шығай (икенсе исеме Һары Күлмәк) ауылында тыуған. Сығышы менән ул Оло Ҡатай ырыуы башҡорттарының Ҡаҙбүре аймағынан.

Буласаҡ ғалим башта атаһының мәҙрәсәһендә, һуңыраҡ күрше ауылдағы рус-башҡорт мәктәбендә һабаҡ ала. 1914 йылда “Рәсүлиә” мәҙрәсәһен тамамлай, башҡорт һәм ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. Халҡыбыҙҙың яҙмышы хәл ителгән мәлдәрҙә Фәтхелҡадир Сөләймәнов башҡорт милли хәрәкәтенең алғы сафында була, милли матбуғатыбыҙҙы булдырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Йәш Башҡортостан йөмһүриәтенең мәғариф системаһын ойошторoccусыларҙың да береһе ул була.

1920 йылда большевиктарҙың Башҡорт хөкүмәте менән төҙөгән килешеүҙе боҙоуҙары сәбәпле, Ф. Сөләймәнов Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә, Башҡортостанды ташлап, Урта Азияға китергә мәжбүр була. 1923 йылдың февралендә улар Иран, Афғанстан тарафтарына сығып китә. 1924 йылда Һиндостанға, унан һуң Франция һәм Германия илдәренә барып юлығалар. 1925 йылдың урталарында ике ҡорҙаш һәм көрәштәш дуҫтар Төркиәгә килеп, Истамбул ҡалаһында төпләнә.

1933 йылға тиклем ғалим Истамбулда урынлашҡан Төркиәт ғилми-тикшеренеү институтында эшләй, экспедициялар менән Төркиәнең төрлө төбәктәренә сыға. 1933 йылда Төрөк телен өйрәнеү йәмғиәтенең саҡырыуы буйынса Ф. Сөләймәнов Анкараға күсеп килә. Баш ҡалала уны президент Мостафа Кемаль Ататөрк ҡабул итә һәм фәнни эшмәкәрлегенә юғары баһа бирә. Ф. Сөләймәнов президент ҡарамағында эшләгән төрөк теле буйынса ғилми комиссия ағзаһы ла була. 1934 йылда Төркиәлә ҡабул ителгән “Фамилиялар тураһында”ғы законға ярашлы, Ф. Сөләймәнов, исем һәм фамилияһын үҙгәртеп, Абдулҡадир Инан булып китә.

А. Инан 1935—1955 йылдарҙа Анкара университетының Тел һәм тарих-география факультетында уҡыта. 1936 йылда уға профессор дәрәжәһе бирелә. 1944 йылда фашист Германияһының еңеләсәген аңлаған Төркиәнең бәғзе етәксе даирәләре сәйәси ҡараштарын ҡырҡа үҙгәртеп, милли хәрәкәт



*1964 йылда төшөлгән фото. Ултыралар: һулдан өсөнсө Абдулҡадир Инан. Төрки мәҙәниәте институтының ғилми советы ултырышы ваҡытында.*

лидерҙарын һәм идеологтарын турансылыҡта ғәйепләп хөкөм иттерә. Әхмәтзәки Вәлиди ҡулға алынып, 10 йылға нахаҡҡа хөкөмителһә, Абдулҡадир Инан профессорлыҡ дәрәжәһенән мәхрүм ителә. Уның университетта уҡытыуы ла тыйыла. Ләкин ул ғилми тикшеренеүҙәрен дауам итә, матбуғатта мәҡәләләре даими баҫылып тора. Ә. Вәлиди Туған бер йылдан һуң төрмәнән сығарыла. Абдулҡадир Инан иһә, профессор дәрәжәһенең кире алыныуы, биләгән вазифаһы бөтөрөлөүенә ҡарамаҫтан, тәржемәсе һәм ябай уҡытыусы сифатында 1955 йылға хәтле Анкара университетында төрки телдәрҙе уҡытыуын дауам итә. 1955 йылда яңынан Төрөк телен өйрәнеү йәмғиәтендә эшләй башлай, ә 1961 йылда Төркиә хөкүмәте эргәһендәге Дин эштәре буйынса идаралыҡҡа кәңәшселәр ҡорона эшкә саҡырыла. 1964 йылдан алып ҡартлыҡ буйынса ялға сыҡҡанға, йәғни 1971 йылға тиклем Төрк мәҙәниәте институтында эшләй.

Әҙип һәм ғалим А. Инандың ғүмере 1976 йылдың 1 октябрендә өҙөлөп ҡала. Ғаиләһе әлеге көндә лә Анкарала йәшәй. Улы Мостафа Йәшәр Инан урмансы-инженер булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан. Үҙенең балалары менән бергә бер нисә тапҡыр Башҡортостанға килеп ҡайтырға насип була.

А. Инан төркиҙәрҙең тарихы, әҙәбиәте, фольклоры, этнографияһы, лингвистика һәм археологияһы буйынса 350-нән ашыу мәҡәлә авторы. Был хеҙмәттәрен туплаған "Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр" исемле ике томлығы өс тапҡыр (1968, 1987 һәм 1998 йылдарҙа) нәшер ителә. Ә төрки халыҡтарындағы шаманизм күренештәре өлкәһендәге эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһе булған "Тарихта һәм бөгөн шаманизм" тигән китабы биш тапҡыр (1954, 1972, 1986, 1995, 2000) донъя күрә.

Бөгөнгө көндә А. Инандың мираҫы тулыһынса өйрәнелмәгән әле. Уның әҙәби мираҫы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының бүлек мөдире М.Х. Нәҙерғолов тарафынан текстологик эштәр башҡарылып, entekle баш һүҙ

менән 1996 йылда “Башҡорт йәйләүендә” исеме аҫтында нәшер ителгәйне. “Тарихта һәм бөгөн шаманизм” китабы 1998 йылда башҡортсаға тәржемә ителеп баҫылды, ҡайһы бер айырым ғилми мәҡәләләре һәм иҫтәлектәренән өҙөктәр тәржемә ителде.

1996 йылда Абдулҡадир Инандың китап коллекцияһы улы Йәшәр Инан тарафынан Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһына һибә ителде. Эмиграцияға тиклем тыуған илендә баҫтырылған әҫәрҙәре лә әлеге көндә республикабыҙҙың баш китапханаһында һаҡлана.

Совет осоронда шәхесе кеүек А. Инандың мираҫы ла “тыйылған әҙәбиәт” исемлегендә ине. 1990 йылда хаҡһыҙ онотолған исеме халҡыбыҙға кире ҡайтарылды, ләкин эмиграцияға тиклем донъя күргән ҡайһы бер әҫәрҙәре, ғәрәп графикаһында булыу сәбәпле, уҡыусыларға һәм уның ижадын өйрәнеүселәргә билдәһеҙ ҡалды. Шундайҙарҙың эсендә “Ваҡыт” (1910) һәм “Башҡорт” (1918) гәзиттәрендә донъя күргән “Берлектә генә терелек бар”, “Ғәҡс әлхәрәкәт ҡурҡынысы”, “Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ далаһынан” исемле публицистика үрнәктәре лә бар.

А. Инандың түбәндәге мәҡәләләре БР-ның Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапханаһының ҡулъяҙмалар һәм һирәк китаптар бүлеге ғилми хеҙмәткәрҙәре И.С. Кирәев һәм И.С. Иғҙәүләтов тарафынан хәҙерге башҡортсаға ауҙарылды. Авторҙың тел һәм стиль үҙенсәлектәре мөмкин тиклем һаҡланып, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителә.

**Илдар КИРӘЕВ,**
**Илшат ИҒҘӘҮЛӘТОВ.**

## Берлектә генә терелек бар

Ирекле Башҡортостан хөкүмәте муваҡат[1] Сибирия хөкүмәте берлән аңлашҡан һуңында башҡорт илен айырым идара итергә кереште. Тимәк, Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан иғлан ителеп, оло ҡоролтай тарафынан тәсдиҡ[2] ителгән ерле мөхтәриәт был көндәрҙә билфиғил[3] ғәмәлгә ҡуйыла башланы. Был көндәр башҡорт иле тарихында иң шатлыҡлы аҡ үә бәхетле көндәрҙер. Ләкин беҙ аңларға тейешбеҙ, ки был көндәр шатлыҡлы булыуы берлән бәрабәр һәр башҡорт гражданы өсөн ауыр үә ҙур мәсьүлиәтле[4] көндәрҙер.

Мөхтәриәт (автономия) алыу юлында күрһәткән ғәйрәте, ижтиһады[5] өҫтөнә башҡорт иле уны һаҡлау, нығытыу юлында тағы әллә нисә мәртәбә артыҡ ғәйрәт үә һиммәт[6] күрһәтергә бурыслылыр.

Ҡаҙаҡ төркләрендә бер мәҡәл бар: “Уғыл тапмаҫ ҡатын булмаҫ — тороуына ҡара, мал тапмаҫ егет булмаҫ — егеүенә ҡара”, — тиләр.

Был мәҡәлдең мәғәнәһе шул: мөхтәриәт алдым тип ауыҙ асып, бот күтәреп ятырға ярамай. Аның нығыуына тырышырға кәрәк.

Алған мөхтәриәтебеҙҙе һаҡлау, үҙ илебеҙгә үҙебеҙ баш булып йәшәү өсөн беренсе сара — көслө башҡорт ғәскәрҙәре төҙөү булһа, икенсеһе — бөтөн башҡорт халҡының бер һүҙҙән, бер табандан тороуҙыр. Берлектә генә терелек бар!

Мына ошо хәҡиҡәтте аңлау илен һөйгән, ғаиләһенең үә үҙенең баш тынıслығын теләгән һәр бер башҡорт өсөн ҙур бурыстыр.

Мәркәз шураға алынған хәбәрләргә ҡарағанда, тәәссөфкә[7] ҡаршы, күп

урындарҙа халҡыбыҙ ошо мәсьүлиәтле заманда ике фирҡә булып, береһе өҫтөнән береһе донос үә прошениялар бирешеп, береһе береһен хибес иттерәләр[8], баш-баштаҡлыҡ (самосуд) эшләйҙәр икән.

Бөтөн ил бәхете өсөн бер йән, бер тән булып ойошорға, өй араһындағы ваҡ-төйәк үпкә-сапҡаны онотторға тейеш булған был имтихан көндәрендә бер-берең өҫтөнән ошаҡлашып, партияға бүленеп, шәхси хисаплар өсөн үс алышырға йөрөүләр һис ғәфү ителмәҫлек ҙур гонаһ үә милли енәйәттер.

Ил булғас, андай-былдай үпкәләшеүҙәр, ыҙғышыуҙар булырға мөмкин. Боронғо бабайларыбыҙ: "Өй булғас, ҡашыҡ-аяҡ шалтырамай тормай" тигәнләр.

Ләкин илгә ҙур, тарихи ваҡиғалар килгән, ил бәхете өсөн йөрәкләре янған башҡорт ҡаһарманлары бер ҡашыҡ ҡанын аямай ҙур көрәш майҙанына атылған көндә, башҡорт иле йыһаным шикелле рәхимһеҙ ике көс араһында ҡыҫылып ҡалған сағында, "өй эсендәге ҡашыҡ-аяҡ" шалтырауы өсөн үпкәләшеп, ил ситенә сығып ошаҡлашып йөрөүләр, бер-берәңде арестовать иттереп "байрам" яһап һикеренеүҙәр шикелле бысраҡ эш булмаҫҡа тейеш.

Андай эшләр берлән сыуалып йөрөүселәргә беҙ ҡаты нәфрәтебеҙе иғлан итеп, сыҡ беҙҙең арабыҙҙан, тип әйтергә тейешбеҙ.

"Айырылғанды айыу ашар — бүленгәнде бүре ашар", "Аға-энеле һуғышыр, атҡа менһә, ярашыр" тигән боронғо бабаларыбыҙҙың нәсихәтләрен тотоп, бер табандан, бер һүҙҙән тора торған заман килде.

*Ят ярлыҡамаҫ — үҙеңдеке ҡарғамаҫ.*
*Берлектә генә терелек бар!*
*Иҫебеҙҙә тоторға кәрәк.*

**«Оло ҡатай балаһы»**
(«Башҡорт», 1918, № 23).

## Ғәкс әл-хәрәкәт[9] ҡурҡынысы

Хөрриәтпәрүәр газеталар ғәкс әл-хәрәкәт ҡурҡынысы ҙурлығын үә аңа ҡаршы бөтөн хөрриәтсе демократияның берләшеүе тейешлеген яҙа торалар.

Ваҡиға — Русияның хәҙерге әхүәл сәйәсиәсенең сыуалсыҡлығына, халҡының наҙан үә ҡаралығына диҡҡәт[10] берлән ҡаралғанда, ғәкс әл-хәрәкәт ҡурҡынысы, ҙур булмаһа ла, барҙыр.

Русияның 17 айлыҡ инҡилап тарихы асыҡ күрһәтте, ки ҡара халыҡ һәр төрлө кешеләр, фирҡәләр артынан китергә мөстәғитдер.[11]

25 февралдә ғибәдәтханаларға барып батшаның һаулығы өсөн доға ҡылған ҡара халыҡ иртәһе көн хөрриәтсе демократияға үә эшсе халыҡҡа эйәреп, "фирғәүенләр"ҙе ҡоралһыҙландырып, Николайҙың тәхетен емереп ташланы. Октябрь инҡилабында большевиктар демагогияһына бирелеп, һигеҙ ай буйы ҡул өҫтөндә күтәреп алҡышлап йөрөткән Керенский хөкүмәтен емереп, үҙе һайлаған "Учредительный собрание"ны һепертке менән ҡыуған да шул ине.

Һигеҙ айлыҡ асы тәжрибәләр берлән большевикларҙың идараһы ни баһаға төшкәнен аңлағас, хөрриәтсе демократияға ҡушылып, "совет"ларҙы ҡыуа, комиссарларын һауиә[12] соҡорона ебәрә башланы.

Мына шул халыҡты тағы бер төрлө гөруһ[13], бөгөнгө әхүәл сәйәсиә үә иҡтисадиәбеҙҙең сыуалсыҡ үә буталсыҡлығынан файҙаланып, үҙ теләгенә ҡорал яһамаҫ тип әмин[14] булыу мөмкин түгел.

Русияла инде һулдан инҡилап, һулға хәрәкәт булырға мөмкин түгел. Сөнки Русиә обывателе "социальный революция"ның ни икәнен аңланылар. Ҙур завод үә фабрикаларҙан башлап крәҫтиәндең ҡапсыҡтағы аҡтыҡ ярты бот онона ҡәҙәр социализация яһалып, эшсе үә крәҫтиән халҡы, ауыҙына бармағын тешләп, ас үә яланғас ҡалды...

Бәс, хәҙерге хөрриәтпәрүәрләр хөкүмәте шул һәр кем артынан бара торған халыҡты ҡәнәғәтләндерә алмаһа, "сәйәси бәхет" һынап ҡарау нәүбәте сиркәү ҡартларына, ҡара гөруһ руханиларға, Пуришкевич, Марков, Шульгинларға етәләр.

Беҙҙең мосолмандар араһында беренсе июнь инҡилабын бөтөнләй иҫке идараға ҡайтыу тип шатланған, күҙгә күренгән зыялыларҙы бөтөрөргә кәрәк тип сапҡан Пуришкевичлар аҙ булманы.

Ошо хәлләрҙе диҡҡәт берлән хисапҡа алып, хөрриәтсе мосолман демократияһы берлә шөп[15] ғәкс әл-хәрәкәт ҡурҡынысына ҡаршы етди тәдбирләр[16] күрергә тейештер.

Бөтә хөриәтсе демократия берләшә алмаһа, ижади (созидательный) хеҙмәт күрһәтә алмай фәлсәфә һатып, бер-берһен тик тәнҡит итеп кенә көн уҙҙырһалар, "социальный революция" нан яңғыҙ буш ҡапсыҡ тотоп ҡалған крәҫтиән шикелле, хөрриәттән дә һыҙғырып ауыҙға бармаҡ тешләп ҡалырға туғры килер.

Ғәкс әл-хәрәкәт ҡурҡынысы бар. Ғафил[17] торорға ярамай!..

**«Оло ҡатай балаһы»**
(«Башҡорт», 1918, № 28).

## Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ далаһынан

Мынан илле-алтмыш йылдар борон, бөтөн Русия мосолмандары эсендә, иң бай үә иркен йәшәгән халыҡ ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ ҡарындашларымыҙ ине. Ул заманларҙа ҡаҙаҡлар ҡашында ер берлә һауа икеһе бер дәрәжәлә булып, ерҙең "хаят[18] терәге" икәнлегенә кескенә лә бер әһәмиәт бирелмәй ине. Сикһеҙ үә осһоҙ киң далала йәшәгән ҡаҙаҡлар эсендә, ғөмүми бәлә үә ҡазалар булмай торғанда, фәҡирлек берлә йүтәгән кеше һис табылмай тип әйтерлек ине. Суварлилар ҙа[19] арҡаһы киң, дастарханы[20] мул ағалар ҡашында тамаҡ аҫрайлар ине. Ер, һыу үә донъяла йәшәү ҡайғыһы кеүек нимәләр донъяла булырға мөмкин икән тип ҡаҙағымдың уйына килмәй ине.

Һуңғы ярты ғасырҙа ҡаҙаҡлар ҡулында "әрәм булып ятҡан ерләргә" эске Русиянан хохолдар күсерелә башланы. Фәҡәт, был яңы күршеләрҙең бер ваҡыт күбәйәсәкләрене, ҡаҙаҡларға ҡуныш тараясағыны, шул ваҡытта уҡ ҡала һала башлау тейеш булғаныны, ҡаҙаҡ ағалар аңламанылар йәхүд[21] аңларға тырышманылар. Һирәк кенә булһа ла "Ата ҡунысы мул саҡта ҡала һалыу, йә булмаһа ҡаҙаҡ исеменә ер билгеләү өсөн ҡамданыу[22] кәрәк. Ер тарайыр. Быҙау бағарға урын булмаҫ. Байҡайтун ана-мынаны ҡайғыратун заман булды"[23] тип ғаҡыл биреүселәр, киләсәк көнләрҙе, анда ҡаҙаҡларҙың күрәсәкләрен бик оҫта тасуир итеүсе шағирҙар осрайлар ине. Фәҡәт быларҙың телене алыусы юҡ ине.

Әҙәмсүп йөрөгән бейләр, һаҡалына тәғзимне[24] һөйгән аҡһаҡаллар ҙа, ҡыш булһа, майлы жая[25] берлә умыртҡа, яҙ булһа, ҡымыҙ берлә туҡтынан[26] башҡа бер нимә уйламанылар, ил файҙаһына ҡайғырманылар, белмәнеләр.

Заманлар үтте. Елләрнең иҫеүе алышынды. Киң сәхрәлә һимеҙ итләр, ҡара

сабадағы[27] һары ҡымыҙлар берлә генә кәйефләнеп, Крыловтың энәғарағы (стрекозаһы) кеүек бейеп йөрөгән ҡаҙаҡ халҡына шул рәхәт, ғәфләтләрҙең[28] күңелһеҙ көҙө, әсе ҡышы килде. Ҡаҙаҡ еренә рус мужигы тулды. Ата ҡунышы тарайҙы. Киң далаға йәйелеп өйрәнгән ҡаҙаҡ малы мужик тарафынан тотолдо, атылды... Мужиктың өс тәнкәлек мәстәге[29] (кляча) урланһа ла, һаҙға батып үлеп ҡалһа ла, ғәйеп ҡаҙаҡларға күтәрелде. Ҡаҙаҡ ауыллары баҫылды. Маллары таланды, үҙләре үлтерелеп, ҡонһоҙ китте... Был ҡып-ҡыҙыл бәлә йылдан-йыл артты, бөтөн Ҡаҙағстанды ҡапланы. Мал аҫрауға, күсеп ҡуныуға имкан[30] ҡалманы. Иҫке мәғишәтнең (чаруа)[31] ҡоймалары төптән һелкенә башланы. Мал аҫрау ҡаҙаҡларҙы аслыҡтан һаҡлай алмай башланы. Хохол күсереү сәйәсәтенең ҡаҙаҡлар өсөн әсе емешләре беште. Ҡаҙағымдың таңдайына тейҙе (нужа күрһәтте). Ҡала һалыу тейеш, донъяла тороу, йәшәү, башҡаларҙан кәмселек күрмәү өсөн үҙең тырышыу кәрәк икәнене ҡаҙаҡлар ҙа аңлаған шикелле булдылар. Фәҡәт бик әсе тәжрибәләр берлә лә, бик һуң, аңлаған шикелле генә булдылар. Ысынлап аңлап етә алманылар.


باشقرد

БАШКУРД Орган Башкирского областного совета.

ياشاسون خلق بيليگى نيگزينه قورولغان قوشما جمهوريت !
ياشاسون — چيكلنگان ييرلى — حر باشقرد ايلى !

باشقرد گەزيتەسى اوزينك همه اوقوچيلارن، ايركلى باشقردستان خلقن وبارچه مسلمان قردەشلەرن اورازا بەيرەمى بلەن تبريك ايته. قوتلى بولسن بەيرەملەرگز ! كيلەچەك بەيرەملەرمزنى طنچ وشادلق ايله بەيرەم ايتەرگە جناب خدا نصيب ايتسن !

«Башҡорт» гәзите.

1909 йылдан башлап ҡаҙаҡ эсендә "Ҡала һалыу кәрәк!" тауыштары сыға башланы. Был йыл ҡаҙаҡлар ҡала һалыуға ҡәтғи ҡарар биргән кеүек хәрәкәтләнәләр.

Ҡустанай өйәҙе, Миңдеғара волосы ҡаҙаҡлары һәммәһе ҡала һалыуға ысынлап йөҙ ҡуйҙылар. Бер нисә ауыл ҡаҙаҡлары ҡыш эсендә үк тейешле урынға ғариза биргәнләр ине. Хәҙер ҡала һаласаҡ урынларын билгеләнеләр. Ҡалғанлары ла бик ихлас берлә ҡала һалыу артынан йөрөйләр. Аҡһаҡалдар ысынлап кеше хисабын йыялар. Ни ҡәҙәр ер тейәсәген самалайҙар. Ғариза әҙерләйләр. Был — бер Миңдеғарала ғына түгел: һәр яҡтан килгән хәбәрҙәр — һәр ерҙә ҡала һалыу артынан йөрөүселәр ысынлап эшкә керешкәнлекләрен белдерәләр. Ҡаҙаҡларҙа ҡала һалыу ҡәтғиләште. Тимәк, боронғо мәғишәт (чаруа) ысынлап уҡ төбө-тамырынан емерелеп, ҡаҙаҡлар өсөн бик ят булған яңы дәүер үә хаят башлана. Аяныс, ки ҡаҙаҡларҙа яңы хаятҡа һис әҙерлек юҡ. Ҡаҙаҡ ағалар үҙләре лә "биш-алты

йылда ҡаҙаҡ хәйерсе булып бөтмәһә ярар ине. 15 дисәтинә ер менән тамаҡ бик ҡыйын булыр" тейешәләр. Ваҡиған[32], ғилем, һөнәр үә ижтиһадҡа терәлгән мәҙәни мәғишәт үә хаятта эшләргә, көрәшергә өйрәнмәгән, ғилем үә һөнәргә ысын күңелдән йәбешмәгән кешеләр ҡаҙаҡ ҡына түгел кем булһа ла хәйерсе булып, һуңра бөтөнләй ер йөҙөнән юғаласаҡтыр. Милләтне айырып бөтөүҙән, динде юғалтыуҙан һаҡлау, кеше шикелле донъяла тороу, йәшәү өсөн яңы хаяттың нигеҙен яҡшылап ҡорорға, арымай-талмай тырышыу тейеш булған бер саҡта ҡаҙаҡ ағалар ғәфләт итеп шул боронғо ер дауларын[33], штат (һайлау) партияларын, әллә кемдең еренә талашып түбәләшеүҙәрен ҡуймаһалар, ҡаҙаҡлар өсөн был яңы мәғишәт ҡәбергә беренсе ныҡ аҙым буласаҡтыр. Ҡаҙаҡ ағаларға ундай вәхшәтне[34] ҡуйырға "бер ауыҙҙан һүҙ сығарып, бер еңдән ҡул сығарырға" әллә ҡасандан ваҡыт еткәнлеген аңларға кәрәк ине.

**АҢЛАТМАЛАР:**

*[1]Ваҡытлы.*
*[2]Дөрөҫләп тамға ҡуйыу, раҫлау.*
*[3]Ысынлап, ысынлыҡта.*
*[4]Яуаплылыҡ (кәрәктергән).*
*[5]Тырышлыҡ.*
*[6]Көслө ынтылыш, тырышлыҡ.*
*[7]Үкенес, ҡыҙғаныс.*
*[8]Кешене һаҡ аҫтына алыу, төрмәгә ултыртыу.*
*[9]Кире, ҡаршы яҡ.*
*[10]Уй, иғтибар.*
*[11]Әҙер булып тороусы.*
*[12]Упкын, тамуҡ.*
*[13]Төркөм.*
*[14]Ышаныслы, шөбһәләнмәгән.*
*[15]Бутаусы, буталсыҡ (ғәрәпсәләге шевб һүҙенән килә).*
*[16]Тейешле сара.*
*[17]Һиҙмәй, белмәй ҡалыусы.*
*[18]Тормош.*
*[19]Атлылар, атлы ғәскәр.*
*[20]Аш-һыуға бай (өҫтәле мул) йорт.*
*[21]Йәки.*
*[22]Әҙерлек сараһын күреү, хәстәрләү.*
*[23]Байҡап, уны-быны ҡайғыртырға ваҡыт булды.*
*[24]Ололаныу.*
*[25]Йылҡы ите.*
*[26]Йәше алты айҙан үткән һарыҡ бәрәсе.*
*[27]Турһыҡ.*
*[28]Иғтибарһыҙлыҡ, вайымһыҙлыҡ, ғәҙелһеҙлек.*
*[29]Арыҡ ат.*
*[30]Мөмкинлек.*
*[31]Хайуан, тереклек, мал.*
*[32]Ысындан да, дөрөҫтән дә.*
*[33]Ыҙғыш.*
*[34]Ҡырағайлыҡ.*

**Фәтхелҡадир СӨЛӘЙМӘНОВ.**
(«Ваҡыт», 1910, № 647).

*Бөйөк Еңеүгә — 65 йыл*

# ЕҢЕҮ КӨНӨН ҠАЙҘА, НИСЕК ҠАРШЫЛАНЫҒЫҘ?

**Азат МАҒАЗОВ,**
*яҙыусы, отставкалағы авиация полковнигы*

— Бөйөк Ватан һуғышында мин, өлкән сержант Мағазов Азат Шәйехйән улы, хәрби радиомеханик вазифаһында ҡатнаштым.

Беҙҙең 947-се штурм авиация полкы 1943 йыл уртаһында фронт аэродромына осоп «ҡуна» һәм ике кабиналы ИЛ-2 самолеттарында 17 июлдә беренсе тапҡыр боевой бурыс үтәй. Дәһшәтле штурмовиктар Көньяҡ, һуңынан Дүртенсе Украина фронттары составында Донбассты, Украинаны дошмандан азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡырым ярымутрауы өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа, бигерәк тә легендар Севастополь күгендә, летчиктар, һауа стрелоктары айырыуса батырлыҡ күрһәтә. Верховный Башкомандующий приказы менән 947-се авиация полкына «Севастопольский» исеме бирелә (полкыбыҙҙың һуғышсан юлы «Тәүбә» исемле романымда ярайһы сағылдырыла).

1944 йылдың икенсе яртыһында Прибалтика республикаларын азат итеүсе совет ғәскәрҙәренә ҡушылдыҡ та Прибалтика һәм Ленинград фронты составтарында яуаплы бурыстар башҡарҙыҡ. (Был турала «Һауаларҙа йондоҙ» исемле повесым донъя күрҙе.)

Архивта һаҡланған хәрби мәғлүмәттәр буйынса, беҙҙең полк 1943 йылдың июленән һуғыш аҙағына тиклем 2822 осош яһап, дошмандың 301 танкыһын, 1835 автомашинаһын, 292 төрлө типтағы батареяһын, 157 орудиеһын, 38 самолетын, 27 тимер юл эшелонын, 49 тимер юл объектын, 16 переправаһын, 22 дзотын, 8200 офицерын һәм һалдатын юҡ итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең юғалтыуҙар ҙа аҙ түгел. Полкыбыҙ 80 самолетын, туҡһан туғыҙ офицерын һәм сержантын (44 летчигын, 52 һауа стрелогын) юғалтты.

Һуғыш ҡорбандары алдында баштарыбыҙҙы эйәбеҙ һәм уйға ҡалабыҙ. Уйланабыҙ һәм һыҙланабыҙ. Фашистар итеге аҫтынан ҡотҡарылған элекке дүрт союздаш республиканың дүртеһе лә хәҙер Ватаныбыҙ составында түгел. Бындай хәл — унда йәшәгән халыҡтар эше, хәйерле юл, тиер инек, әгәр ҙә Украина, Латвия, Литва, Эстония дәүләтебеҙгә, тимәк, һуғыш ҡорбандарының ғаиләләренә, нәҫел-ырыуына әхлаҡи зыян итеү юлына баҫмаһалар! Шулай, фашистар яуызлығынан һаҡлап алып ҡалған Ватаныбыҙ ҙа юҡ хәҙер, үҙгәртелгәнерәк исеме бар һымаҡ, ә есеме — бөтөнләй икенсе.

Кешелеккә глобаль ҡурҡыныстар янағанда тарҡалыу сигенә еткән халыҡтарҙы уртаҡ мәнфәғәт — бәхетле йәшәү маҡсаты берләштерәсәк. Тимәк, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына туғарылырға ярамай, сөнки ил именлеге, халыҡтарҙың киләсәге өсөн яуаплы иң юғары власть менән бер ниәттәбеҙ. Кешеләрсә йәшәп ҡарайһы ине!

...Еңеү көнөн ҡаршы алыу һис тә оноторлоҡ түгел.

Беҙ көн һайын — аэродромда. Осоуҙар дауам итә. Информбюро хәбәрҙәрен түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ. Дүртенсе йыл барған ҡан ҡойғос һуғыш тамам алйытҡан. Иҫән-һау ҡалһаҡ, ҡайҙарҙа булырбыҙ икән, тип юрайбыҙ.

1945 йылдың май айында Еңеү көнөн, бер төркөм полкташтар һәм... еҙнәм менән бергә ҡаршыланыҡ. Һуғыш барғанда башҡорт еҙнәм менән осрашыуыбыҙ былай килеп сыҡты. Бер туған Рауза апайымдан Ғабдулла еҙнәйҙең икенсе тапҡыр яраланыуы, Шауляй тигән ҡалала (Литва) госпиталдә ятыуы хаҡында хат килде. Ул госпиталдең ҡайһы тирәлә икәнлеген белешкән арала Булатов Ғабдулла еҙнәйҙән дә хат алдым. Татар телендә сыға торған фронт гәзитендә минең исем, фамилияны күргән дә апайым адресымды белгән. Әле булһа хәтеремдә: полевая почта, 15558. Апайымдан яуап килгәнсе еҙнәм яраланып өлгөргән, миңә госпиталдән хат яҙған, хәл белергә килеүемде үтенгән. Ул көндәрҙә полкыбыҙҙың Еңеү парадында ҡатнашыры хәл ителгәйне, хатта ҡайҙалыр күсенергә әҙерлек башланды. Бер төркөм иптәштәрем унлап иҫке самолетты Шауляй аэродромына ҡыуырға (күсерергә) тейеш икән. Самолеттарҙы парадҡа әҙерләйһе урынға үҙемде Шауляй аэродромына оса торған составҡа индереүҙәрен һораным.

Шулай итеп, апрель урталарында Шауляй ситендә йәйелеп урынлашҡан база аэродромында инем инде. Урынлашҡан көндө үк төркөм етәксеһенән рөхсәт алып, госпиталде эҙләп киттем. Старшина Булатов Ғабдулла палатаһында юҡ ине, борсолоуымды күргән медсестра кем икәнемде белеште лә, тынысландырырға ашыҡты: «Уға йөрөргә рөхсәт бирелде, прогулкаға сыҡҡандыр»,— тине.

Тәүҙә ул мине күреп ҡалды, мин дә уны таныным, еҙнәмдең төҫ-ҡиәфәте үҙгәрмәгән тиерлек, гимнастеркаһын ялтыр таралғылы киң ҡайыш менән быуған, аяғында — иркен ботинка, бинтҡа ураған ҡулын муйынына аҫып ҡуйған. Ҡосаҡлаштыҡ. Әллә нисек күңел йомшарып китте, быға тиклем ҡосаҡлашып күрешкән юҡ ине. Фронт зонаһында яҡташым менән осрашам бит, етмәһә, еҙнәм менән! Ике сәғәткә яҡын ваҡыт бик тиҙ үтеп киткән, еҙнәйҙе ужинға саҡырҙылар, миңә лә хушлашырға кәрәк — аэродромға өс саҡрым самаһы атлайһы бар.

Иртәгәһенә йәнә осраштыҡ, шунан тағы... Икенсе аҙнала Ғабдулла еҙнәйгә күберәк йөрөргә рөхсәт бирҙеләр, мин уны аэродром тормошо менән таныштырҙым, икәүләп Башҡортостанға — Елдәр урта мәктәбендә балалар уҡытҡан Рауза апайыма хат яҙҙыҡ.

Беренсе май байрамы эш менән мауығып үтеп китте, шунан һуң да осрашырға мөмкинселек тыумай торҙо. Ә һигеҙенсе майҙан туғыҙынсы майға ҡаршы йоҡламаным тиерлек. Йәнәшәләге күн заводындағы тамашанан ҡайтыуыбыҙ булды, «Конец войне! Победа!» тигән оран аяҡҡа баҫтырҙы, атышҡан тауыштар йышая барып, байрам салютына әүерелде. Ә ҡояш сыҡҡанда ҡыуаныс уртаҡлашырға Ғабдулла килеп етте: кемдер мотоциклында килтереп киткән. Еҙнәм әлеге осраҡҡа хәрби формаһын кейеп алғайны. Ул мине Еңеү тантанаһы уңайы менән ойоштороласаҡ табынға саҡырҙы.

Байрам өҫтәлен ике ғаилә әҙерләгәйне. Береһенең — атайҙары, икенсеһенең улы Совет Армияһында икән, түр башында беренсе донъя һуғышы ветераны ултыра ине. Шул мәжлестә литва халҡының беҙгә мөнәсәбәте туғандарса,

дуҫтарса икәнен аңланым. Тостар әйтелде, литовец, татар, башҡорт йырҙары яңғыраны. Мин еҙнәм менән таң атҡанда хушлаштым, уға иртән үҙ часынан ылаусы килергә тейеш ине.

Ғабдулла Булатов һуғыштан һуң Миәкә районында Елдәр почта бүлегендә мөдир вазифаһын башҡарҙы. Рауза апайым менән бер ул, өс ҡыҙ үҫтерҙеләр, дүртеһе лә үҙ бәхетен тапты. Ҡыуаныс үә йыуаныс эҙләп, һағынғанда ҡунаҡҡа бара торған еҙнәм һәм апайым ҡорған ғаилә йылыһынан балаларына мул өлөш сыҡҡан, иншалла.

Бөйөк Еңеү көнөнөң 65 йыллыҡ юбилейында ветерандарҙы иҫкә аласаҡ ғаиләләрҙә именлек, татыулыҡ, яҡты өмөттәр, изге теләктәр тантана итһен, тим.

**СӘҒИТОВА Йәмилә Вәли ҡыҙы,**
*86 йәшлек Герой-әсә, тыл ветераны*

—Ул ваҡыттарҙы инде Хоҙай күрһәтмәһен. Ирем Мөҙәрис менән ярты йыл да йәшәмәнек, һуғыш башланды. Фронтҡа китерҙән алда ул ауылдарҙа ирҙәрҙе мылтыҡтан атырға өйрәтеп йөрөнө: 1937— 1939 йылдарҙа хәрби хеҙмәттә йөрөп ҡайтҡайны, шуғалыр инде һуғыш башланғас та уға бронь биреп, ошо эште йөкмәттеләр. Ләкин ул, беҙҙең ауылдан киткән 64 ир-егет араһынан, үҙ теләге менән яуға ашҡынды. Биш тапҡыр яраланды. Хоҙай ғүмер биргәс ни — әйләнеп ҡайтты. Шунан Әлшәйҙә тракторислыҡҡа уҡып, тракторист булып эшләне, сиҙәм күтәргән йылдарҙа Чапаев колхозында трактор бригадаһы бригадиры, артабан ауылыбыҙҙа тимерсе вазифаһын башҡарҙы, эш өсөн үлеп торҙо. Кешегә ихтирамлы, һәйбәт ҡурайсы ине. Йәшерәк саҡта концерттарҙа ҡатнаша инек. Үкенескә ҡаршы, оҙаҡ йәшәй алманы, 62 йәше тулыр-тулмаҫ, ауырыуҙан вафат булды. Ә фронтҡа киткәндәрҙең яртыһы һуғыш яландарында ятып ҡалды. Ирҙәр киткәс бөтә донъя ауырлыҡтары ҡатын-ҡыҙ иңенә төштө. Үгеҙ егеп, үгеҙ етмәгәндә ҡатын-ҡыҙ илай-илай үҙҙәренең һауын һыйырҙарын егеп ер һөрҙөк. Ураҡ менән иген урып, көлтә бәйләп, уны ҡул менән һуғып, бойҙайҙы тоҡтарға тултырып — келәткә, шунан үҙебеҙҙең Аҡназар ауылынан 60 саҡрым ерҙәге Сара станцияһындағы элеваторға үгеҙ һөйрәгән арбаларҙа оҙата инек.

Һуғыш йылдарында әсәйем Ғәлиулла ҡустымды, Мәйрүнә һеңлемде, аслыҡтан үлмәһендәр тип, ҡарауға миңә ҡалдырып, урыҫ араһына тамаҡ туйҙырырлыҡ кәсеп эҙләп, Байым ауылына сығып китте. Ул осорҙа мин Аҡназар ауылында ферма мөдире булып эшләнем. Күршем Сәлихәнең Яйыҡбаев Шәрифуллаға тормошҡа сығып, ауылға килен булып төшкән сағы. Икебеҙ ҙә йәш инек. Шуға микән, аслыҡҡа ла, ауырлыҡҡа ла бирешмәнек. Төрлө үлән, көпшә, һарына, ҡыр емеш-еләктәре менән туҡланырға тура килде. Ашты алабута ҡушып бешерә инек. Башаҡ бешкән мәлдә, иген ура башлағас, аслыҡтан үлмәҫ өсөн услап ҡына иген алып ҡайта инек. Эләкһәң — бөттөң! Уполномоченныйҙар ҡатын-ҡыҙ тип ҡарап торманы, шунда уҡ эләктереп тә ала торғайны. Шуға күрә төндәрен үҙебеҙҙең колхоз ерҙәрендә түгел, ә йышыраҡ Сөрөк ауылының (Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы, беҙҙән 6 саҡрым ) ерҙәренән башаҡ һуғып, яулыҡҡа төрөп ҡайтҡыланыҡ.

Бер тапҡыр шулай Аҡназар станы янында иген урҙыҡ та, эштән һуң бер аҙ иген һуҡмаҡ булғайныҡ , әллә ҡайҙан уполномоченный килеп сыҡты ла беҙгә: «Ниңә рөхсәтһеҙ иген һуғаһығыҙ?» — тип екерҙе.

Ә мин ҡурҡышымдан ни әйтергә белмәй : «Пропуск, пропуск», — тип

тәтелдәгән булдым, дер ҡалтырап! Теге кеше, ярай әле, әллә ни яуыз булманы. Күрәһең, беҙҙең хәлде аңлағандыр. Көлә биреп: «Ярай инде, пропускығыҙ булғас, башҡа урлашмағыҙ», — тип ебәрҙе. Бына шулай... Аслыҡтан шешенеп бөткәндәр ҙә, хатта үлгәндәр ҙә булғыланы. Йәй көнө аслыҡҡа бирешә һалманыҡ, ә бына ҡыш, яҙға табан бигерәк тә ныҡ ауырлыҡтар кисерҙек.

...1943 йылда яҙғы ташҡын алдынан, кәрзин бәйләргә тип, тал әҙләп шәреле боҙ өҫтөнән китеп барһам... ат үләкһәһе ята. Күп уйлап тороу юҡ, шуны балта менән сапҡыланым да алып ҡайттым. Башҡа кешеләр ҙә белеп ҡалып, шулай уҡ тунаҡлап, ташынылар. Хоҙайҙың рәхмәте — берәүебеҙ ҙә ауырыманыҡ. Кис ултырып һалдаттарға ойоҡ, бейәләй бәйләп оҙата инек. Иген һуҡҡан осорҙа кемдәрҙең бәләкәй балаларын өйҙә ҡалдырырға мөмкинселектәре юҡ, улар балаларын яулыҡҡа йә иһә шәлгә төрөп, үҙҙәре менән бергә яланға алып бара ине. Йәй көнө кем ураҡ, кем салғы менән колхоз өсөн бесән әҙерләнек. Үҙ малыңа ла әҙерләп өлгөртөргә кәрәк бит әле! Ҡыш көндәре барса ҡатын-ҡыҙ фермаға мал ҡарарға йөрөй. Сана һөйрәп тауға, билдән көрт кисеп, утынға сығабыҙ. Шуны ышылдай-ышылдай һөйрәп алып ҡайтабыҙ.

Бесәнде бер ваҡытта ла еткелекле әҙерләп булманы. Шуға күрә яҙға табан йыл һайын, мал астан үлмәһен өсөн, тубыктан шәре кисеп, ҡарама ҡайырыһын әҙерләй инек. Бер йылы хатта өй баштарына ҡыйыҡ итеп ябылған һаламдарҙы алып ашаттыҡ...

Һуғыш йылдарындағы михнәттәрем, эйе, бер минеке генә түгел. Был яҙмыш — тылдағыларҙың уртаҡ яҙмышы ине. Шуға күрә Еңеүҙең 65 йыллығын һөйөнөп ҡаршылайым, бөтәгеҙгә лә оҙайлы ғүмер, һаулыҡ, аҡ бәхеттәр теләйем. Амин.

**Рәшит ЗӘЙНЕТДИНОВ,**
*Башҡортостандың халыҡ рәссамы,*
*Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты*

—Һуғыш башланыу хәбәре лә, атайымдың фронтҡа китеү мәле лә иҫтә ҡалмаған — бәләкәй булғанмын. Әсмә апайымдың һөйләүе буйынса, йәй көндәре беҙ, балалар, йоҡлап йөрөгән лапаҫ башына менеп уны ла, мине лә һөйөп-яратып төшкән атайым фронтҡа киткән иртәлә. Минһеҙ нисек кенә йәшәрһегеҙ икән, бигерәк бәләкәйһегеҙ шул, тигән көрһөнөп. Уныһын теүәл ишеттем, ти апайым. Сөнки ана шул ятҡан мәлендә уянған икән, ә мин, унан дүрт йәшкә бәләкәй малай (апайыма ете йәш) — юҡ. Шуға күрәләр ҙә инде, бала сағымда һуғыш минең өсөн тормошобоҙҙоң ҡәҙимге, тәбиғи өлөшө булып ҡабул ителә ине. Һуғыш бөттө, тигән хәбәр миңә нисектер сәйер, аңлашылмаған яңылыҡ булды. Һуғыш бөткәс нисек йәшәрбеҙ, һуғышһыҙ ҙа донъя буламы ни, тип уйлай торғайным — ул шул тиклем ҡанға һеңгән, ул бөтһә, тормош та бөтөр һымаҡ.

Беҙҙең Яңы Ҡауарҙы ауылы (Ғафури районы) — яңы ауыл. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында Мәндем, Еҙем йылғалары аша ятҡан Оло Ҡауарҙы ауылының бер төркөм актив, егәрле йәштәре яңы ауыл һалабыҙ, яңы колхоз төҙөйбөҙ тип, айырылып сыҡҡан. Һуғыш башланыу менән улар һуғышҡа киткән, уларҙың йәш ҡатындары үҙ һыйырҙары менән һабан һөрөп, ер тырматып иген үҫтергән, бесән сапҡан, бала ҡараған. Үҫә килә шуны ла белдем: ҡыҫынҡы йәшәнек, шулай ҙа беҙҙең бәләкәй генә ауылда октябрь, май байрамдарында оло ҡаҙанда бутҡа бешереп барыбыҙҙы ла ашатыу ғәҙәте бар ине.

Ә бына 1945 йыдың 9 май көнөн яҡшы хәтерләйем — үҫкәйнем инде. Колхоз кәнсәләренең һалам башлы ҡыйыҕына ҡыҙыл флаг мендереп элеп ҡуйҙылар. Ауыл халҡын йыйып кемдер, колхоз председателелер инде, Гитлерға ҡаршы иҫ киткес ауыр һуғыштың Совет Армияһының еңеүе менән тамамланыуы хаҡында доклад һөйләне. Сығышының һуңында ул, бөгөн өйөгөҙҙә байрам итегеҙ, тип тә өҫтәне. Оло ҡаҙанда бутҡа бешереү ул көн, ниңәлер, булманы.

Кәнсәләр алдынан халыҡ моңһоу таралышты. Күрәһең, күптәрҙең аталары, ағалары һәләк булған һәм һуғыш бөтһә лә уларҙың әйләнеп ҡайтмауын белеүҙәре ҡыуанырға мөмкинлек бирмәгәндер. Минең атайым да, Зәйнетдинов Сәйфетдин Мөхәтдин улы, 36 йәшендә Көнсығыш Пруссия ерендә башын һалды. Немецты ныҡлап ҡыуабыҙ, Берлинға етеп барабыҙ, Еңеүгә күп ҡалманы, тигән һуңғы хаты 1945 йылдың апрелендә килгәйне.

Ә мин һаман лапаҫ башында, йоҡома хужа була алмай, уянмай ҡалғаныма үкенеп йәшәйем. Атайымдың йөҙөн күреп, ҡосаҡ йылыһын тойоп йәшәр инем, исмаһам...

**Марсель ҒАФҮРОВ,**
*Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре,*
*С. Злобин һәм Б. Рафиҡов исемендәге әҙәби премиялар лауреаты*

—Һаҡландыҡтағы иҫке фотоларҙы барлап ултырғанда, атайымдың 1942 йылдың көҙөндә миңә ебәргән өсмөйөшлө хаты килеп сыҡты. Мин хәҙер үҙем ул ваҡыттағы атай йәшенән ике тапҡырға өлкәнерәкмен. Ә шулай ҙа йөрәгем ошо утлы хатты — һалдат сәләмен алған туғыҙ йәшлек малайҙыҡы кеүек тулап китте. Атайҙы һағыныу хисе күңелемдә һаман баҫылмай. Мин иҫәр, ул ваҡытта атайға фронтҡа яҙғанда, әсәйҙең тиф менән ауырып китеүен, башын таптаҡыр итеп ҡырып, дауаханаға һалыуҙарын хәбәр иткәйнем. Борсолған атайым яуабында, әгәр бер-бер хәл булып ҡуйһа, ярҙам һорар өсөн туғандарҙың адрестарын да сыймаҡлап ебәргәйне. Атайыбыҙ Калинин фронтында хәбәрһеҙ юғалды, йылдар үткәс, ҡустым Мадриль менән уның ҡәберен дә эҙләп таба алманыҡ.

Һуғыш ваҡытында беҙ Ауырғазы районының Талбазы ауылында йәшәнек. Һуғыш тигән нәмә беҙҙән алыҫта ине, әммә уның һулышы тәрән тылда ла аҙым һайын тойолдо. Атайым фронтҡа киткәнсе уҡытҡан район-ара колхоз мәктәбендә 2-се балалар йорто асылды. Талбазыла унан алда ла етемдәр өсөн балалар йорто эшләй ине. Хәҙер фронт тирәһенән йыйып килтерелгән балалар өсөн икенсеһе лә кәрәк булды. Хәлһеҙ, сирле, бетләп бөткән улар. Шул йорт асылғас, әсәйем унда кастелянша булып эшләне, кейем-һалым һәм урынер йыуыу менән шөғөлләнде. Шунда тиф йоҡторҙо ла инде. Бәхеткә ҡаршы, ул иҫән ҡалды.

Һуғыш беҙҙең өйгә эвакуацияланған кешеләр рәүешендә лә килеп керҙе. Ике бүлмәгә алты кешене индерҙеләр. Ленинград блокадаһынан сығарылған әсәле-ҡыҙлы Рудневтарҙы хәтерләйем. Воронеждан Оля бар ине. Одессанан фельдшер әбейҙең исемен онотҡанмын. Уның йылы кейеме юҡ ине, үҙенә ябай марля менән тышланған мамыҡ бишмәт тегеп алды. Тағы исеме онотолған бер ханым үҙен партизандарҙың нисек итеп фронт һыҙығы аша Белоруссиянан сығарыуҙары хаҡында һөйләй торғайны. Бер тапҡыр күлдәген йыуыр өсөн сисенгәндә, мин уның ҡулдары яурынына тиклем яра эҙҙәре менән ҡапланғанын күреп өлгөрҙөм...

Балалар йортондағы тиҫтерҙәрем менән дуҫ булдыҡ. Фашист самолеттары улар тейәлеп килгән поездарҙы бомбаға тотоуы, әсәләрен юғалтыуҙары тураһында һөйләүҙәрен ҡурҡыу ҡатыш әрнеү менән тыңлай торғайным. Балаларға хас булмаған нәфрәт тойғоһо бәләкәс йөрәкте лә өтә ине. “Фашист” һүҙе иң насар һүҙ ине беҙҙең өсөн. Һуғыштан һуңғы тормош тураһында хыялландыҡ, Гитлер өсөн төрлө язалар уйлап сығарҙыҡ, ләкин иң үҙенсәлекле язалау ысулы ла беҙҙең ҡондо ҡайтарырлыҡ түгел ине.

44-се йылда булһа кәрәк, Талбазыла немец әсирҙәрен ҡайҙалыр алып китеп барған йөк машиналары туҡтаны. Халыҡ йыйылып китте. Дошмандарҙың ғәҙәти кеше ҡиәфәтендә булыуы бигерәк тә сәйер ине. Ныҡлы һаҡ булмаһа, халыҡ уларға ташланыр ҙа өҙгөләп ташлар һымаҡ тойолдо миңә.

Ниһайәт, оҙаҡ көтөлгән, миллион йәндәр менән түләнгән Еңеү көнө килде. 9 май иртәһендә, радионан был хаҡта ишеткәс, йоҡомдан һикереп торҙом да, ҡыҙыл мендәр тышын таяҡҡа бәйләп, өй ҡыйығына үрмәләнем һәм:

— Беҙ еңдек! Еңдек! — тип һөрәнләй башланым. — Победа -а!

Тап шул саҡта баш осонда һабантурғай һайрап ебәрҙе. Инде тыныс күк йөҙөндә күҙгә күренмәгән көмөш шөңгөрҙәр сыңлай ине. Ауыл халҡы урамға ағылды. Таныш булмаған кешеләр ҙә ҡосаҡлаша, үбешә, шатлыҡтан илай һәм көлә. Шундай уҡ тантананы беҙ, моғайын, Юрий Гагарин йыһанға осҡанынан һуң кисергәнбеҙҙер.

45-се йылдың тағы ла бер көнө хәтеремә уйылған. Һуғыштан беренсе һалдаттар әйләнеп ҡайтҡан көн... Улар йөк машинаһы кузовынан туғандары ҡосағына туп-тура һикереп төштө. Гимнастеркаларында орден-миҙалдар балҡый. Кешеләр тағы ла иланы ла көлдөләр.

...Тик тереләр араһында беҙҙең атай юҡ ине.

**Хәбир ДАУЫТОВ,**
*яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған сауҙа хеҙмәткәре*

— Атайымды армияға 1941 йылдың мартында уҡ алғайнылар. Һуғышҡа ингәнсе беҙ унан йыш хат алып торҙоҡ. Һуңғы хатында Эстониянан: «Ил сиген нығытабыҙ»,— тип яҙғайны. Һуғыш башланып, ай ҙа үтмәне, «Хәбәрһеҙ юғалды» тигән ҡара ҡағыҙ, ауылда иң беренсе булып, беҙҙең өй ишеген ҡаҡты. Әсәйем менән өләсәйем, ҡулды өткән, йөрәкте тетрәткән ҡағыҙҙы ҡулдарына алып уҡығас, йөрәкһенеп китмәнеләр, күҙҙәренән йәш тә урғылып сыҡманы. Киреһенсә: «Үлгән тимәгәндәр бит, терелер, иҫән булһа, хаты ла килер, фашистарҙы дөмөктөргәс, үҙе лә ҡайтып төшөр. Хоҙайым, иҫән генә йөрөһөн»,— тип бер-береһен йыуаттылар. Беҙгә һиҙҙермәҫкә теләнеләр.

Бала саҡтан уҡ шуҡ ҡына булһам да, алты йәшлек малай, быларҙы бик үк төшөнөп бөтмәнем. Әсәйемдәрҙән төпсөнөп ҡарайым, аныҡ ҡына, минең күңелде тынысландырырлыҡ яуап әйтмәйҙәр. Берсә: «Партизан булып киткән. Уларға хат яҙырға ҡушмайҙар», икенсегә һораһаң: «Заводҡа танкылар алырға, командировкаға, ебәргәндәр. Бәлки, юл ыңғайында инеп тә сығыр әле...»,— тип, нисек тә минең өмөтөмдө өҙөргә теләмәйҙәр. Почтальон урамдан үткән һайын: «Бөгөн дә хат юҡмы ни?»— тип артынан йүгерәм.

Атайым армияға киткәндә тыуып ҡалған, ярты йәшлек Хәлит ҡустым ғына бер ни аңламай, бер нәмәгә лә бошонмай, сәңгелдәгендә ята бирә. Көйһөҙләнә башлаһа, өләсәйем, арыш икмәген сәйнәп, сепрәккә төрә лә ауыҙына ҡаптыра һала. Әсәйем көнө-төнө колхоз эшендә.

Өмөттәр, һағыштар менән тулы ауыр, оҙон көндәр ыңғырашып үтеп торҙо. Көн дә почтальон өс мөйөшлө хаттар ташый. Уның беҙҙе урап үтеүе минең өсөн сәйер һәм төрлө уйҙарға һала ине. Почтальон үткәс, балалар урамға сығып, аталары, ағалары нисек фашистар менән һуғышҡандары тураһында һөйләй. Шунан китә көрәш: береһе — беҙҙең һалдат, икенселәре — немецтар. Ауыл урамы һуғыш яланына әйләнә! Тәүҙәрәк мин дә улар менән уйнаным. Әммә, минең өсөн немецтарҙы туҡмаған уйын оҙаҡҡа һуҙылманы. Малайҙар минән атайым тураһында һораша башланылар. Шунда береһе, Сабир булды шикелле: «Уның атаһы немецтарға плин эләккән»,— тип ысҡындырҙы. Йүгереп ҡайтып өләсәйемдән, кисен әсәйемдән «плен нимә тигән һүҙ?»— тип маҙаларына тейгәс, әсәйем: «Ундай һүҙҙе беҙ ҙә белмәйбеҙ»,— тип кенә ҡуйҙы. Башҡа аптыратмаһын был, типтер инде, күҙемә ҡарап торҙо ла, алдына ултыртып үҙемде һыҡып-һыҡып ҡосаҡланы. Әсәйемдең дә, өләсәйемдең дә күҙҙәренә, ирекһеҙҙән, тамсылар эркелде.

Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Ауылға үлем хәбәрҙәре лә килә. Яралылар ҡайта башланы. Балаларҙың, әсәләрҙең түбәләре күккә күтәрелде. Ҡайтҡандар хөрмәтенә байрам ойошторолдо, ҡунаҡлашыу башланды. Ауыл өҫтөндә ҡояш та, ай ҙа икенсерәк, яҡтыраҡ нур һибә ине. Гөрләп, шаулап баҫыуҙарҙа эш ҡайнаны, тормош йәмләнде. Тик ҡайһы берәүҙәр генә ҡара яулыҡта, ҡара күлдәктә йөрөнө. Ә беҙ өмөттә йәшәйбеҙ. Һуғыш бөткәс, пленда ғылар бөгөнмө, иртәгәме, барыбер ҡайтырҙар. Беҙҙең өйҙә лә байрам булыр әле!

1944 йылдың яҙында өсөнсө синыфты тамамлағас, уҡытыусыбыҙ Мәрйәм Шагарованың үҙен Йомағужа районы Аптраҡ ауылы ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға ебәрҙеләр. Ул ошо районды ң Теләүембәт ауылы ҡыҙы, 5-се синыфты тамамлағас, өс йыл беҙҙе, Аралбай ауылы балаларын уҡытты. Көҙөн, райондан икенсе уҡытыусы килмәгәс, мәктәбебеҙҙе ябып ҡуйҙылар. Беҙ, балалар, йылды бушҡа үткәрмәйек тип, күрше Аралбай хуторы мәктәбенә русса III, II, йә булмаһа I класҡа уҡырға алыуҙарын һорап килдек.

Һуңынан нишләп килгәнемә үкенеп бөтә алманым. Кемдәрҙең аталары һуғыштан ҡайтҡан, кемдәрҙең кемелер ферма мөдире, бухгалтер, һатыусы, медсестра икән — балаларын алдылар, ә дүрт баланы бороп ҡайтарҙылар, йәнәһе, урын юҡ. Урынһыҙҙар араһында мин дә бар инем. Был ғәҙелһеҙлекте мин бик ауыр кисерҙем. Шуғалыр ҙа йәштән үк минең күңелемдә, йөрәгемдә ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы нәфрәт шеше үҫеп сыҡты.

9 май көндө минең кеүек малайҙарҙы ауыл Советына саҡырып алдылар ҙа, «тиҙ генә халыҡты радио янына саҡырығыҙ», тигән йомош ҡуштылар. «Нишләп?» — тип һорамаһыҡ, сөнки күбебеҙ был көндө, «бөгөнмө-иртәгәме» бөтә донъяға хәбәр итәрҙәр тип көтә инек. Ике ауыл араһындағы бер бағана башына эленгән «һөйләүсе» тәрилкә: «СССР һалдаттары немец илбаҫарҙарын Эльба йылғаһына уҡ еткереп дөмөктөргәндәр, әле Берлин урамдарында ҡаты алыштар бара»,— тип белешмәләр еткереп тора. Халыҡ тәрилкәле бағананы уратып алғанса, трактор менән һөйрәтеп «Сталинец-3» комбайнын да килтереп ултырттылар.

Бер нисә минут эсендә ике ауыл халҡы был изге урынға йыйылды. Тәүләп бала-сағалар килһә, оло йәштәгеләр, һуғыштан ҡайтҡан аҡһаҡ-сулаҡ һалдаттар ҡатындары менән, яҡшыраҡ кейемдәрен кейеп, орден-миҙалдарын тағып йыйылды. Малдарын фермаға бикләп, көтөүселәр ҙә килгәйне.

Ниһайәт, бағана башындағы радио-тәрилкә телгә килде: «Внимание, внимание, внимание!» Йыйылған халыҡ шунда төбәлде. Тирәк баштарында ултырған ҡарғалар, уның тауышына һиҫкәнеп, ҡаңғылдашып һауаға күтәрелделәр ҙә яңынан килеп ултырҙылар. Туғайҙа һандуғастар ҙа тынып ҡалды. Хатта ауылдағы бөтә һайыҫҡандар ҙа ошо тирәләгә өй, һарай баштарында урын алды. Левитан: «Кисә немец командованиеһы капутилировать итте һәм Европа илдәре халҡы немец фашистарынан азат ителде»,— тип үҙенә генә хас яңғырау тауыш менән бөтә донъяға иғлан итте.

Аралбай ауылы һәм Аралбай утары араһына «һөйләүсе тәрилкә» элгән бағана янында Еңеү көнө хөрмәтенә митинг башланды. Комбайн торбаһы аша «салют»тар ишараланды. Һуғыштан ҡайтҡан һалдаттар Еңеү нисек яуланыуын, ауылдағылар көнө-төнө ял белмәй эшләүҙәре хаҡында һөйләне. Балаға сыр-сыу килеп уйнаны, аталары алдында иркәләнде. Мин улар менән бер аҙ уйнаным да, ҡайтып киттем. Ниндәйҙер һүҙ ишетеүҙән түгел, ә күңел төшмәй ине.

...Бөгөн дә мин бер ҡасан да һуғыш булмаһын, балалар ҡайғы-хәсрәт күрмәй, шатлыҡ менән йәшәһен, тип теләйем.

Атайыбыҙ, әсирлек «гонаһтарынан таҙарынып», 1948 йылда ғына ҡайтты. Беҙ алты малай, бер ҡыҙ үҫтек.

**Ғәбит САДИҠОВ**,
*Яҙыусы-сәсән, СССР-ҙың атҡаҙанған уйлап табыусыһы, отставкалағы майор*

— 1942 йылдың башында Өфөлә ойошторолған 214-се уҡсы дивизияһы сафында Венгрияны азат итеүҙә ҡатнашҡандан һуң, 1944 йылдың декабрь айында бер төркөм йәш һалдаттарҙы штабҡа саҡырҙылар. Улар араһында минең фамилиям да бар ине. Хәрби училищеға ебәрергә булғандар икән. Мишкольц ҡалаһында урынлашҡан сборный пунктында туплап, вагоныбыҙҙы пассажир поезына тағып, Кировоград (Украина) ҡалаһына оҙаттылар. Унда күптән түгел Төркмәнстандан күсерелгән Полтава танк-техник училищеһы урынлашҡайны. Имтихандарҙы уңышлы үткәндәр, шул иҫәптән мин дә, уҡый башланыҡ. Программа бер йылға иҫәпләнгән. Еңеү көнөн училищела ҡаршыланыҡ (училищеның ун йыллыҡ юбилейына тура килде). Шунан алда ғына училище начальнигы Советтар Союзы Геройы генерал-майор Теляков приказы менән мине училищеның йәйелдерелгән байрағы алдына баҫтырып төшөрөлгән фотоһүрәтем менән бүләкләнеләр, унда «Лучшему отличнику боевой и политической подготовки «Ст. сержанту Садыкову. В день 10-летия училища» тип яҙылған, мисәт баҫылған, генералдың ҡултамғаһы ҡуйылған. Был иң ҙур бүләкте алты йөҙҙән артыҡ курсант араһынан бер үҙемә биреп, училищеның Дан бүлмәһе түренә элделәр. Шул уҡ приказдың икенсе пунктына ярашлы, старшина званиеһы алдым.

Тиҙҙән училищебыҙ өс йыллыҡ программаға күсте. Йомшағыраҡ уҡыған курсанттарҙы, кесе лейтенант званиеһы биреп, хәрби хеҙмәттән бушаттылар. 1945 йылдың аҙаҡтарында танкистар — буласаҡ офицерҙар кадровый хеҙмәттә ҡалдырылды.

1945 йылдың аҙағында беҙҙең рота Көнбайыш Украинаға училище өсөн утын әҙерләргә барҙы. Роталар график буйынса сиратлап ебәрелә ине. Львов

өлкәһе Долина ҡасабаһында училищеның утын әҙерләү базаһы бар ине. Беҙҙең сиратыбыҙ СССР Верховный Советына һайлауҙар кампанияһына тура килде. Кандидаттар тураһында яҙылған агитплакаттар унда-бында көн дә элenә. Ә төндә береһе лә ҡалмай. Йә бысратып, йә йыртып ташлайҙар. Һайлау көнөндә Бандера бандиттары һайлау участкаларына һөжүм итергә йыйыныуҙары тураһында хәбәр таралды ҡалала. Беҙҙең рота һәр төндә һайлау участкаларын, урындағы хакимиәт биналарын һаҡларға мәжбүр булды. Урындағы хәрби гарнизон менән берлектә рота тулыһынса боевой әҙерлеккә килтерелде, оборона ойошторҙоҡ. Автоматтар менән ҡоралланған һыбайлы банда һөжүм итеп ҡараны. Ике йәрәхәтләнгән кешеһен ташлап, тегеләр урманға сигенде. Һайлауҙар ауырлыҡ менән булһа ла үткәрелде. Күп һайлаусылар, бандиттарҙан ҡурҡып, гражданлыҡ хоҡуғы менән файҙалана алманы. Беҙҙең курсанттар өсөн был алыш ҙур һабаҡ булды. Бөйөк Еңеүҙе лә ҡурсаларға кәрәк ине шул!

...Башҡортостан етәкселегенә, Өфө мэрияһына рәхмәт. Фатирымды киңәйтеп, бик һөйөндөрҙөләр.

## ҺЫНАМЫШТАР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР

*(Ғәбит Садиҡовтың «Гәүһәр тиҫбе» тигән китабынан)*

*Алман (немец) алманлығы өсөн түгел, аламалығы өсөн туҡмалды.*
*Баҫалҡы баҫҡынсы булмай.*
*Борон-борондан илебеҙгә ҡул һуҙыусылар аяҡтарын һуҙған.*
*Бөйөк Ватан һуғышында йыр ҙа һуғышты: мәҫәлән, «Катюша»...*
*Бөтә генералдар ҙа гениаль түгел.*
*Бәғзе яугир һуғышта күрһәткән батырлыҡтары тураһында һөйләгәндә... әкиәт тоноҡлана.*
*Дошмандың милләте юҡ.*
*Дошман менән дуҫлашыу — дуҫтарың менән хушлашыу.*
*Еңелеүҙән ҡурҡҡан еңә алмаҫ.*
*Еңеү көнөн ҡурҡаҡтар ныҡыраҡ көттө.*
*Ҡылыс ҡайрау — тел сарлауҙың дауамы.*
*Тыныс ярыш — ҡанлы алышҡа кәртә.*
*Тыныслыҡтың нигеҙе — тынғыһыҙлыҡ.*
*Урынһыҙ «Ура» ҡысҡырғанда аҡыл сигенә.*
*Һол (һәләт) барҙа ҡол булмабыҙ!*
*Һуғыш арифметикаһы: еңеүҙе еңеүгә ҡушырға, батырлыҡты батырлыҡҡа ҡабатларға, дошмандың йәнен алырға, еңеү данын ғәҙел бүлергә.*
*Һуғыш ваҡытында тыл ҡомаҡтары һимерә.*
*Һуғышта еңеүҙән һуғышты еңеү мең артыҡ.*
*Һуғыш яугиры һуғышты һағынмай.*
*Һыйышып йәшәү һуйышып йәшәүҙән ҡотҡара.*

**Әңгәмәләрҙе С. ШӘРИПОВ ойошторҙо.**



**Марат**
**ӘМИНЕВ**

## *Кәңәшмә*

Район гәзите мөхәррире Солтан Ханович редакция коллективын иртүк кәңәшмәгә йыйҙы.

– Ил башлығы коррупцияға ҡаршы аяуһыҙ көрәш асты, беҙ ҙә бынан ситтә ҡала алмайбыҙ, намыҫыбыҙ ҡушмай,– тип Солтан Ханович арыҫлан менән алышҡа сыҡҡан баһадир ҡарашы менән бүлмәләгеләрҙе айҡап сыҡты. – Етәр беҙгә урам һепереүсе менән иҙән йыуыусыны ғына тәнҡитләү. Ҡыйыуыраҡ булайыҡ. Тәк, тәҡдимдәр көтәм.

Редакцияла өс ай ғына эшләүсе Сәлим һикереп торҙо:

– Хакимиәт башлығын ҡыҙған табаға баҫ-баҫтырырға кәрәк, – тине ул тулҡынланыуынан тотлоғоп. – Район иҫәбенә өс ҡатлы йорт һалып, уны мәғариф идаралығына һатҡан. Ә идаралыҡ иң лайыҡлы уҡытыусыға һанап, ул кәтижде хакимиәт башлығының ҡатынына бушлай биргән. Ней, хәҙер икенсегә Өфө эшҡыуарына һатҡандар. Йәнә...

– Тороп тор, ҡустым, – Солтан Ханович өҙлөкһөҙ безелдәгән себендә ҡыуғандай ҡулын һелтәне. – Районыбыҙ өсөн, ошонда йәшәгән халыҡ өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай булып йөрөгән хөрмәтле кешегә яла яғырға не позволим. Гәзитте уҡымайһың, райондағы һоҡланғыс ҡаҙаныштарҙы күрмәйһең икән. Ә бит улар – башлыҡтың хеҙмәте.

Бүлмәлә тынлыҡ. Барыһы ла ҡараштары менән алдарындағы өҫтәлгә ҡаҙалған. Биттәре алһыуланып киткән мөхәррир ауыр һулай-һулай, ҡулъяулығын алып маңлайын һөрттө:

– Сәлим ҡусты, үҙең өй һалырға ер участкаһы кәрәк, хакимиәт башлығына ғариза яҙҙым тиһең, үҙең дошман һүҙен һөйләп ултыраһың! – Кәңәшмә тынысыраҡ юҫыҡта дауам итте. – Гәзитебеҙ – хакимиәт органы, уның сәйәсәтен үткәрергә бурыслыбыҙ. Етди тәҡдимдәр көтәм, йә, активыраҡ булайыҡ, йәмәғәт.

---

*Марат Әминев (1967) Ғафури районы Һабай ауылында тыуып үҫкән. Уҡыусыға «Йәштәр тауышы» серияһында нәшер ителгән «Хикмәтле төш» китабы, республика матбуғатында баҫылып сыҡҡан юмористик хикәйәләре аша таныш. «Һәнәк» журналының яуаплы сәркәтибе булып эшләй.*

Сәнәғәт бүлеге мөдире, журналистика ветераны, бүлмә яңғыратып тамаҡ ҡырҙы. Аҡыллы фекер әйтер алдынан гел шулай итә ул.

– Бынау Геворкян тамам шашты бит: сереп байыны, больницаның ҡыйығын ремонтлайым, тип бюджеттан өс йыл рәттән егермешәр миллион һум аҡса ҡайырып ала, үҙенең эшләгән эше, тфү, ташҡа үлсәйем. Бер йылға ла түҙмәгәс, ниндәй ҡыйыҡтыр ул! Күпме йәш ҡыҙҙы юлдан яҙҙырҙы үҙе...

– Тороп тор, Йәнғәле ағай, – мөхәррир яй ғына урынынан ҡалҡынды. – Сәлим, ярай, йәш кеше, уны-быны төшөнмәй, ә һин бит тәжрибәле журналист, аңларға тейешһең: ремонтҡа бүленгән һәр тин башта үҙебеҙҙең хакимиәттә, унан баш ҡалала раҫлана. Бөтә урында ла аҡылһыҙҙар ултырамы, һинеңсә? Редакцияға компьютер бүләк иткән, мебель вәғәҙәләгән Геворкяндың шәхси тормошона ҡағылмайыҡ, йәштәр үҙҙәре белә. Мин һине аңламайым, Йәнғәле ағай, райондағы бөтә ҙур төҙөлөштәрҙе алып барыусы хөрмәтле кешене, туғандаш әрмән милләте вәкилен, гәзиткә хурлап яҙып, халыҡтар дуҫлығын ҡаҡшатырға самалайһыңмы? Юҡ, барып сыҡмаҫ, быға юл ҡуймаясаҡбыҙ! Тағы ниндәй тәҡдимдәр бар?

Бүлмәгә һыймай йөрөгән мөхәрриргә яуап ҡайтарыусы табылмай торҙо. Оҙайлы тынлыҡты ауыл хужалығы мөдире боҙҙо:

– “Алға” колхозында Даниянан алтын хаҡына алынған һыйырҙар беҙҙекеләрҙән дә кәмерәк һөт бирә, йүнләп ҡарамайҙар, күрәләтә һәләк итәләр. Шуларҙы әләктерһәк инде?

– Бармай, – тәҙрәнән тышҡа ҡарап торған мөхәррир йәнә ҡулын һелтәне. – Ниндәй генә сара үткәрһәк тә, итте “Алға”нан алабыҙ, баш ҡаланан, тегенән-бынан килгән ҡунаҡтарҙы һыйланырға шунда алып барабыҙ. Коррупцияға ҡаршы көрәш булмай был, аш менән атҡанға – таш менән атыу була. Артабан уйлайбыҙ, иптәштәр, артабан. Йәнғәле ағай, ашығаһыңмы ни, бер туҡтауһыҙ сәғәтеңә ҡарайһың?

– Өйгә сантехник килергә тейеш ине лә, – Йәнғәле ағай мөхәррирҙең йөҙө йәмерәйгәнен күреп, аҡланырға ашыҡты. – Ванналағы кран боҙолоп, өйҙө һыу баҫа яҙҙы бит. Сантехник килгәйне, миндә һәйбәте юҡ, тип, кран эсендәге бер әтнәкәһен һатып алырға ҡушты.

– Күпмегә алдың инде?

– 39 һум 50 тингә.

Быны ишетеү менән мөхәррирҙең ҡараңғы йөҙө яҡтырып китте:

– Ишеттегеҙме, кранды бушҡа алыштырырға тейешле сантехник уны һатып алдырта, ә булғанын үҙ кеҫәһендә ҡалдыра. Әҙер коррупционер бит был. Бындай әҙәм аҡтыҡтарының ҡара эштәренә ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә кәрәк. Йәнғәле ағай, киләһе һанға ошо хаҡта һинән – ҙур мәҡәлә. Кәңәшмә тамам, йәмәғәт.

Бүлмәләге халыҡ еңел һулап урынынан ҡуҙғалды. Төшкө аш ваҡыты етеп килә ине.

## *Журналист аҙнаһы*

**Дүшәмбе.** Был көндө мөхәрриребеҙ һәр ваҡыт оперативка үткәрә. Бөгөн уның кәйефе шәп. Кәйефе шәп булғас, беребеҙҙе лә әрләмәне. Шуға күрә эшләге лә килмәй тора. Төшкә тиклем Хәйернас ағайҙың хатын ғына ҡарап бирҙем. Гәзиттә сыҡҡас, мәҡәләһен танымай ҙа торор инде, үҙенең һөйләме түгел, һүҙе лә ҡалманы бит, фамилия менән исеменән башҡа. Хәйернас ағай былай нисауа яҙа ул. Мәгәр яҙмаһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине.

**Шишәмбе.** Беренсе бит “яна”, материал юҡ. “Ильич васыяттары” йәмғиәте рәйесенә шылтыраттым. Бик ҡыҫҡа, әммә йөкмәткеле интервью бирҙе. Хәлдәр һәйбәт, уборка бара, тип кенә әйтте. Шуны ике бит итеп яҙҙым. Былай ярайһы

ғына килеп сыҡты шикелле. Яҙғанды уҡып сыҡҡас, шундай шәп йәмғиәтте үҙемдең барып күрге килеп китте.

**Шаршамбы.** Районды иң ҙур ауылына командировкаға китеп барабыҙ. Машинабыҙ шәп. Әлбиттә, егерме йыл элек ишшеү ҙә шәберәк булған, тиҙәр. Ҡыш өшөп-туңып, йәй саңға батып йөрөү генә оҡшап етмәй. Ишектәре лә һәләк ҡыҙыҡ: берәүһен япһаң, икәүһе асыла, өсөнсө ишек бөтөнләй ябылмай, уныһы бау менән бәйләп ҡуйылған.

Төшкә барып етһәк тә, байтаҡ материал алып ҡайттыҡ. Күҙ төбәп барған фермер ғына оҡшаманы. Сәй генә эсеп сығам да, хужалыкты вис күрһәтәм, көтөп тороғоҙ, тип өйөнә керҙе лә юғалды. Аптырағас, ашханаһына барып, фермер үҙе ҡушты тип, ашап сыҡтыҡ.

**Кесе йома.** Бөгөн, ваҡыт табып, шәхси эштәр менән шөғөлләнергә булдым. Мөхәрриргә, торлаҡ төҙәлешө буйынса мәҡәлә яҙам, тинем дә район хакимиәтендә төҙөлөш өсөн ссуда бүлеүгә яуаплы етәксегә керҙем. Ҡыуанып сыҡтым, булыр, тине бит. Һәйбәт кеше ул, инде 38-се тапҡыр, булыр, тип әйтте, бер ҙә булмай, тимәй.

Был көндө эштән бик һуң ҡайтырға тура килде, сөнки киске автобус менән ауылдан килгән бажаны ҡаршы алырға кәрәк ине. Киске сәғәт етеләрҙә мөхәррир кереп, минең һаман да эштә ултырғанды күреп, бик ҡәнәғәт сығып китте. Уңдым был егеттән, эшкә өйрәнде, тип уйлағаны йөҙөнә сыҡҡан. Минең дә кәйеф күтәрелде. Айлыҡ премия сәпәй, былай булғас.

**Йома.** Аҙна үтте лә китте. Эш күңелгә яткас, коллектив бер ғаиләләй татыу булғас, ваҡыт үткәне һиҙелмәй ҙә икән.

## *Синыфташтар*

– Фатирың ошо буламы ни, синыфташ, да-а, хан һарайы түгел шул, хан һарайы түгел, – Рәсим ишектән кергәс тә Шәүкәткә йәлләп ҡарап ҡуйҙы ла түшәмгә ымланы. – Ниңә тауыҡ кетәгендәй тәпәш итәләрҙер, ынтылһаң, ҡулды тейгеҙеп була.

– Ике метр ярым инде, стандарт, – тип ҡаршы төштө Шәүкәт әрһеҙ ҡунағына асыуы килеп. – Хәҙер бөтәһенең дә түшәме шул бейеклектә.

– Бөтә йорттар ҙа былай тәпәш түгел, ана, министрлыкта эшләгән өс туған ағай элитный йортта тора, уның түшәме күк көмбәҙеләй бейек, фатиры әллә 200 квадрат метр инде, урап сыҡҡыныҙ. Һинең өс бүлмәле фатирың уның бер бүлмәһе һымаҡ. Да-а, ремонт яһарға ла ҡулың теймәй икән, аҡса етмәйҙер?

Шәүкәт ғәрлегәнән бер һүҙ ҙә әйтә алмай торҙо. Һай эттәгенәһе, тереләй һуйҙы, йә инде, ун йыл күрешмәгәйнеләр, әллә ҡайҙан килеп тапты был Рәсим, йәнә егерме йыл күрмәһә лә түҙер ине әле. Ишектә күренгәс тә, берәй ярты ултыртырға кәрәк, тип уйлай тағы, был тупһыҙға һаҫыҡ самогон да йәл.

– Ремонтты яңы бөтөрөп торабыҙ, – тип аҡлана башланы Шәүкәт. – Обойҙарҙы, ишектәрҙе алыштырҙыҡ, мебелде яңырттыҡ, иҙәнгә линолеум йәйҙек.

– Бара инде, бара, – тип тынысландырҙы Рәсим синыфташын, уның йөрәген тотҡолауын шәйләп. – Фатирың тарыраҡ та, былай ярарлыҡ инде, кем әйтмешләй, теште ҡыҫһаң, түҙәрлек. Ә машинаң ниндәй? “Тойота”-фәләндә елдерәһеңдер инде?

– “Жигули”, – тип мығырҙаны Шәүкәт ҡыҙарынып.

– Ә эш урының ҡайҙа, һаман институтта уҡытҡан булаһыңмы? Беҙҙән бер класҡа түбән уҡыған Хәлимде быltыр уҡ профессор иткәндәр икән. Мәктәптә маңҡаһы ағып йөрөй торғайны.

– Яңыраҡ фән кандидаты булдым, – тип бышылданы Шәүкәт. Ғүмеренең заяға үтеүенә… тамағына төйөр килеп тығылды.

– Ә ял итергә ҡайҙа йөрөйһөң? – юҡ-бар һорауҙары менән язалауын дауам

итте Рәсим. – Халыҡ Турция менән Египеттан ялҡып, Ҡытай яғына оса бит хәҙер.

– Отпускыла ҡәйнәмдең алты сутый баҡсаһында ҡаҙынабыҙ, – тине Шәүкәт үкһеп ебәреүҙән көскә тыйылып. Тынысланыр өсөн уға ике төймә валидол йоторға тура килде. Байтаҡ ултырғас ҡына уға һөйләшеү һәләте кире ҡайтты:

– Ҡарәле, Рәсим, үҙең ни хәлдә һуң? Эшең, ғаиләң хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәнең бит әле.

– Нәмәһен һөйләйһең уның, – Рәсим ҡул ғына һелтәне. –Ҡатын менән айырылыштыҡ, кризис тип эштән ҡыҫҡарттылар, ҡайһы саҡта икмәк алырлыҡ та аҡса булмай. Инде ятаҡтан да ҡыуһалар, нисек йәшәргә, ҡайҙа барып йығылырға?

Быларҙы ишеткәс, ағарынған, бер туҡтауһыҙ йөрәк тирәһен ыуғылаған Шәүкәттең битенә алһыулыҡ йүгерҙе, турһайған ирендәре яҙылып, йырылған ауыҙы тора-бара ҡолағына етте.

Ул йәһәт кенә һыуытҡыстан ҡәҙерле ҡунаҡ көтөп байтаҡтан бирле моңайып ултырған затлы коньякты сығарып өҫтәлгә шапылдатып ҡуйҙы ла Рәсимде ҡосаҡлап алды. Унан да ҡәҙерлерәк ҡунаҡтың булыуы мөмкин түгел. Синыфташ бит ул!

## *Ғәләү*

– Ҡустым, баҙарҙан бер тоҡ һуған алғайным, шуны машинаң менән өйгә алып барып ҡуйайыҡ әле! – Эш бүлмәһенә атылып килеп ингән Ғәләү, саҡ тын алып, йомошон әйтә. «Түрәбеҙ ҡушҡан ашығыс эш менән булашам, ул көтөп ултыра, унан һуң банк яғына барып, кредитты түләргә кәрәк, бөгөн һуңғы көн, ә аҡса юҡ, берәйһенән үтескә һорап табырға кәрәк әле», – мине шулайтып яуаплар, тип көтәһегеҙме? Мин дә тап шулай тип әйтергә ауыҙымды асам. Тик ирендәрем бөтөнләй икенсе һүҙҙәрҙе әйтә:

– Киттек!

Мине «ҡурҡаҡ» йәки «мәмәй» тип ғәйепләргә ашыҡмағыҙ. Һеҙ бит Ғәләүҙе белмәйһегеҙ. Торғаны – һағыҙаҡ таһа ул. Кисә, иртән эштә егеттәр менән күмәкләп тәмәке көйрәтәбеҙ. Һүҙ – сәйәсәт хаҡында. Берәүҙәр – АҠШ-ты яманлай, Ҡытайҙы маҡтай, икенселәре – киреһенсә. Шул саҡта Ғәләү килеп сыға ла хәбәр һала:

– Минең бажа сүтәки хайуан икән!

Төштән һуң тәмәке көйрәткәндә бөтәбеҙ бер булып йүнле уйын күрһәтмәгән Рәсәй футболсыларын тиргәйбеҙ. Бығаса өндәшмәй торған Ғәләү һүҙгә нимә тип ҡушыла, тиһегеҙме?

– Бажаны әйтәм, сволочь булып сыҡты!

Бер кемгә лә сер түгел: бынан теүәл өс йыл элек бажаһы Ғәләүҙең ярылып барған башын төҙәтергә аҡсаһын йәлләгән. Бажаһының хатаһы уның мәңгелек темаһына әүерелде хәҙер.

Кемдер был хаҡта былай тип шаярҡайны:

*– Мин һөйләйем ҡытай менән японды,*
*Һин һөйләйһең төҙәлмәгән башыңды.*

Ғәләүҙе ултыртып, машина менән баҙар яғына елдергәндә шуларҙы уйлап киләм. Йомошон тыңламай ҡара, бажаһын онотоп, ғүмер буйы мейе серетәсәк бит ул.

Баҙарға барҙыҡ, һуғанын тейәнек. Инде өйҙәренә етеп тә барабыҙ. Анау юл сатын ғына үтһәк… Тә-әк, һул яҡтан килгән машиналарҙы үткәрҙек, трамвай ҙа ухылдап уҙып китте. Хәҙер беҙҙең сират. Ғәләүем ҡапыл еңдән тарта:

– Слушай, минең бажа әҙәм аҡтығы булып сыҡты бит әй!

Күҙ ҡырыйы менән уға ҡарап ҡына өлгөрәм – шул мәл уң яҡтан трамвай килеп сыҡты ла, машинаны әйләндергәнсе бәреп туҡтаны. Эх, иғтибарһыҙлыҡ,

бер трамвайҙы үткәргәс, ҡаршыға килгәнен ҡарарға кәрәк тә бит. Аңра! Хәҙер трамвайҙы үткәрмәгән өсөн штраф бәрәсәктәр, ГИБДД хеҙмәткәрҙәре менән аңлашыр өсөн аҡсаһы ла кәрәк. Машинаны ремонтлау өсөн автосервиста күпме һығасаҡтарын уйлауы ла ҡурҡыныс, «һөжүм» двигатель тапҡырына тура килде бит. Ярай әле, Ғәләү артҡа ултырҙы, алға ултырһа, берәй ерен имгәтеп ҡуйыр ине, Алла һаҡлаһын.

– Һуғанды алып барып еткереп булмаҫмы икән? – Һеңгәҙәп ултырған ерҙән Ғәләүҙең тауышын саҡ ишетеп ҡалам. Бына ул бармағы менән тышҡа күрһәтеп ҡапыл ҡысҡырып ебәрә:

– Әрәм булды һуған, сәсрәне.

Ул күрһәткән яҡҡа ҡарайым. Бер нисә һуған асфальтҡа тәгәрәп төшкән. Күҙҙәремдән йәштәр атылып сыҡты. Ғәләүҙең һуғаны күҙгә керә башланы, ахыры.

## *Боҙоҡ донъя*

Совет заманында уҡ алған телевизорыбыҙ ватылды. Утыҙ йылға ла түҙмәне, беҙҙең илдә сыҡҡан әйберҙең йүне юҡ, тип дөрөҫ әйтәләр, буғай. Телевизорһыҙ бигерәк ҡыйын икән. Айырыуса БШТ каналын һағынам, тормоштоң ғәжәйеп тиҙлектә яҡшыра барыуын хәҙер күреп булмай. Көн дә берәй мәктәп йә күпер асылыуын да, һоҡланғыс етәкселәр арҡаһында иҫ киткес шәп йәшәүемде лә күрмәйем шул. Элек көнө буйы шаулаған телевизор тынып ҡалғас, кешегә бирәсәк бурыстың күплеге, эш таба алмай аптырап йөрөү, һаман кеше тупһаһын тапауым иҫкә төшә башланы. Эйе, мейе күҙәнәктәре эшләп китте лә ул, тик мине ҡайғы баҫты.

Телевизор эшләгәндә нисек шәп ине бит! Диванға һуйлайып ятаһың да ләззәтләнеп “ Йыр булһын бүләгем...” тапшырыуын ҡарайһың. Ҡайһы берәүҙәр зарланған була, йәнәһе, ҡотлауҙары оҙағыраҡҡа һуҙыла, тиҙәр. Бер ҙә килешмәйем. Иҫәпләгәнем бар: бер ҡотлауҙы егерме минуттан артығыраҡҡа һуҙмайҙар. Унан килеп, оҡшамаһа – тыңлама, беҙҙә бит демократия. Мин үҙем ике йыр араһында бер аҙ серем итәм, йә улым менән бер-ике партия шахмат уйнап өлгөрәм. Ҡотлау һүҙҙәрен тулыһынса тыңлаған саҡтарым да бар. Туғандары йә дуҫтары ҡотлаған юбилярҙың бөтә биографияһын, башҡарған эштәрен, алдағы пландарын белеп бөтәһең – тот та китап яҙ, мәғлүмәт етерлек.

…Бер мәл мин дә һеңлекәште телевизорҙан тыуған көнө менән ҡотланым әле. Дәрт иткән кешегә уның бер ҡыйынлығы ла юҡ икән. Ике төн, ике көн вагон бушатып йыйған аҡсаны алып барып түләнем дә эш тә бөттө. Матур итеп ҡотланылар, йыр ҙа тапшырҙылар. Телевидение хеҙмәткәрҙәре әҙ-мәҙ хата ебәрҙе, әлбиттә. Нишләптер Гөлкәй һеңлекәштең исемен Бибиғәйшә тинеләр, 35 йәш урынына… 65 йәш тулыуы менән ҡотлап ҡуйҙылар. Йырҙы ла дөрөҫ һайламағандар. Ул былайыраҡ яңғыраны:

*– Көн дә һырҙарың күбәйә*
*Ҡартаяһың, әйкәйем.*
*Ҡыҙ саъыңда матур инең,*
*Эх, минең әбейкәйем…*

Йырҙың йыртығы юҡ, тиһәләр ҙә, һеңлекәш бик ныҡ үпкәләне, тыуған көн табынына йыйылған халыҡ та оҡшатманы. Шул ҡотлау арҡаһында ҡупҡан дауыл әле саҡ баҫылып килә.

Эйе, телевизорһыҙ донъя төҫһөҙләнеп ҡалды, тиҙ арала йүнәттерергә кәрәк. Юҡһа, тормошта гармония боҙолған кеүек. Аңламаҫһың, әллә телевизор донъяны боҙоп күрһәтә, әллә боҙоҡ телевизор донъя йәмен ебәрә.

## *Шәжәрә*

Ауылда шәжәрә байрамы бара. Сәхнәнән моңло йыр ишетелә. Алыҫ араларҙы яҡын итеп ҡайтып төшкән ауылдаштар бер-береһе менән ҡосаҡлашып күрешә, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Ана, класташым Рәмилдең Санкт-Петербургта йәшәүсе ағаһы Тәлғәт ҡулдарын һелтәй-һелтәй нимәлер һөйләй. Ярты һүҙе русса, яртыһы татарса. Ҡатыны Ҡазан яғынан булып сыҡты. Ә ҡыҙҙары Оля – университет студенты. Ул, әлбиттә, русса ғына һөйләшә. Уны етәкләп алған сөмҡара егеттең телен аңламаным. Баҡһаң, Италиянан икән. Оля менән бергә уҡыйҙар, былтыр уҡ өйләнешкәндәр. Джузеппе исемле малайҙары ла бар. Уныһы коляскала мышнап йоҡлап ята. Туғандар барыһы ла бергә Рәмилдең ҙур тырышлыҡ менән төҙөгән нәҫел шәжәрәһе алдында баҫып тора.

Тарих менән бәләкәйҙән ҡыҙыҡһынған Рәмил ете быуын ата-бабаларының исем-шәрифтәрен, тыуған йылдарын тәфсирләп яҙған. Исемдәрҙән йылдар һулышы бөркөлгәндәй. Хоҙайбирҙе, Мөхәммәтғәлеләрҙән таралған нәҫелде – Кәшфулла, Килмөхәмәттәр дауам итә; уларҙан һуң – Вил, Ким, Революль, әлбиттә, социализм осоронда тыуғандар. Йәшерәк быуын вәкилдәре – Эдуард, Роберт, Эдик исемдәрен йөрөтә. Нәҫелдә иң кескәйе – Джузеппе.

Йылдар үткәс, был малай итальяндарҙың милли батыры Джузеппе Гарибальдиҙың аҙашы булыуына ғорурланырмы? Ә бына Тәлғәт кеүек олатайҙар үтә күбәйеп китһә, киләсәктә шәжәрә байрамдары ниндәй телдә, ниндәй илдә үткәрелер икән?

## *Уфтанма*

Автобуста киләбеҙ. Халыҡ күп. Ҡыҙмаса булып алған ағай кешенең ҡайҙа, кемгә ҡунаҡҡа барғанын ғына түгел, тулы биографияһын, армиялағы батырлыҡтарын, эшләгән ерендә коллективтың уны нисек хөрмәт итеүен белеп бөттөк. Һүҙ запасы бөтөп киттеме, булмаған тауышы менән йыр һуҙып маташты был.

– Арыу йырлайыммы? – тип һорай бит әле үҙе.

– Шәп ебәрәһең!

– Ну, тауыш та һуң үҙеңдә!

Шаяртыпмы, әллә мыҫҡыл итепме хуплаусылар табылғас, телдәр абзыйыбыҙ тағы ла көсәнеберәк геүләтә башланы. Тауышы йәш әтәстең тәү тапҡыр ситән башына менеп ҡысҡырыуын да, берсә хатта быҙау мөңрәүен дә хәтерләтеп ҡуя.

*Яҙ килә лә китә,*
*Ғүмер шулай үтә.*
*Уфтанма, уфтанма, уфтанма...*

Ҡарасы, моңло йырҙы ла шул тиклем йәмһеҙ, ялҡытҡыс итеп йырлап була икән!

– Кобзондан арыуыраҡ ебәрә был!

– Илата инде хәҙер!

Юрамал осондороуҙы, мыҫҡыл итеп маҡтауҙарын аңлау хәлендә түгел ине моңсол әҙәм. Көйөн дә, һүҙҙәрен дә боҙа-бутай, йырлай-олой бирҙе. Инде “концерт”ты туҡтатыуҙы талап иткән күршеһенә екереп кенә ҡуйҙы.

Шулай, артыҡ маҡтау менән бәғзе берәүҙәрҙе осондороп ебәрәбеҙ. Ә ундай әҙәм түрә-ҡара булып китһә, кеше яҙмыштары менән уйнай башлай.

***

Төрки мәҙәниәтен һәм сәнғәтен берлектә үҫтереү буйынса халыҡ-ара ойошма (ТӨРКСОЙ) 2010 йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итте. Был ҡарар күренекле тюрколог, йәмәғәт эшмәкәре Ә. Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы ҡабул ителде. Ошоға ярашлы, халыҡ-ара ойошма ағзалары – Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Үзбәкстан һәм Төркиә илдәрендә Ә. Вәлидиҙең мираҫын өйрәнеүгә арналған ғилми-ғәмәли конференциялар уҙғарыу күҙаллана. Төркиәнең баш ҡалаһы Истамбулда Әхмәтзәки Вәлидигә бюст ҡуйҙырыу, урамдарҙың береһенә ғалим исемен биреү планлаштырыла. 2010 йылдың майында Истамбулда Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте көндәре үткәреләсәк. Әйткәндәй, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында драматург Нәжиб Асанбаевтың «Аҡтамыр», «Тарих яҙыр инем ташына», «Исемкәйең ҡайтты, Вәлиди» драматик трилогияһы һәм Әхмәтзәки Вәлидиҙең «Хәтирәләр»е нигеҙендә режиссер Айрат Абушахманов сәхнәләштергән «Әхмәтзәки Вәлиди Туған» спектакле лә Төркиәлә уйналасаҡ. ТӨРКСОЙ тарафынан 2010 йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итеү сиктәрендә Башҡортостанда ла байтаҡ саралар бойомға ашырыласаҡ.

***

Күп томлы «История башкирского народа» китабының I томы сығыу айҡанлы Өфөнөң Конгресс-холында презентация үтте. Сарала БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И. Илешев, БР Фәндәр академияһының вице-президенты Ә. Ғүмәров, баҫманың мөхәррирҙәре, республиканың күренекле йәмәғәт һәм фән эшмәкәрҙәре ҡатнашты.

– Академик баҫмала күп быуатлыҡ тарихыбыҙ яңы теоретик-методологик юҫыҡта яҡтыртыла, – тип белдерҙе күп томлыҡтың етәксеһе һәм баш мөхәррире – БДУ-ның тарих факультеты деканы Марат Ҡолшәрипов.

Тәүге том Мәскәүҙең «Наука» нәшриәтендә 10 мең данала баҫылған. Унда археология, антропология, этнография, тарих, телде өйрәнеү өлкәләрендәге яңы асыштар файҙаланылған.

***

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, Ш. Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты Тәнзилә Дәүләтбирҙина, сатирик Марсель Сәлимов, шағирҙар Гөлнур Яҡупова, Зөһрә Ҡотлогилдина, Әхмәҙин Әфтәх, Лилиә Ҡәйепова , Фәрҙәнә Ғөбәйҙуллина Күмертау ҡалаһында булып ҡайтты. Улар ике төркөмгә бүленеп, ике көн эсендә унлаған башҡорт һәм рус мәктәбендә, лицей һәм гимназияларҙа, педагогия колледжында сығыш яһаны.

Ҡала мәҙәниәт һарайында шиғриәт һәм йыр кисәһе уҙғарылды. Төбәк яҙыусылар ойошмаһы «Ижад һуҡмағында» тип аталған сараны Өфөнән килгән яҙыусылар ҡатнашлығында үткәреүгә махсус әҙерләнгәйне.

Күмертауҙа йәшәүсе төрлө һөнәр эйәләренең ижад емеше булып тиҫтәләгән йыйынтыҡ донъя күргән. Ә исемдәре күптән таныш Закир Аҡбәров һәм ҡала Яҙыусылар ойошмаһы рәйесе Кинйәғәли Абдуллиндың яңы китаптарының исем туйы үткәрелде.

***

Күгәрсен районы Туйымбәт ауылында Күмертау «Акрополь» төҙөлөш фирмаһы етәксеһе, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты

Хәйҙәр Ғайсинға, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт дәүләт университетының журналистика кафедраһы мөдире Тимерғәле Килмөхәмәтовҡа, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы ректоры, педагогия фәндәре докторы, профессор Хәмит Баймырҙинға Зәйнәб Биишева исемендәге район премияһы бирелде. Муниципаль район хакимиәте башлығы Фәрит Мусин лауреаттарға миҙал һәм махсус танытма тапшырҙы. Сарала БР-ҙың Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай секретариаты етәксеһе Венер Аҙнағолов, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре комитеты рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Ҡәҙим Аралбаев, Ирек Кинйәбулатов һәм башҡалар сығыш яһаны.

Тантанала шулай уҡ Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Оло Эйек ҡыҙы» исемле фотоальбомдың презентацияһы үтте. Нәшриәт директоры Зөфәр Тимербулатов күркәм баҫманы ауыл музейына бүләк итте.

***

Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте «Башҡорт китабы йорто»нда «Автографтар көнө» уҙғарҙы. Китап һөйөүселәр менән осрашыуға Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Ҡәҙим Аралбай, Әхмәт Сөләймәнов, Ирек Кинйәбулатов, шағирә Тамара Ғәниева, драматург Сәрүәр Сурина саҡырылғайны.

«Китап» нәшриәтенең баш мөхәррире Зөлфиә Ҡарабаева осрашыуҙы асып, артабан ай һайын ошондай кисәләр буласағын белдерҙе һәм яңы ғына китаптары сыҡҡан авторҙарҙы ҡотланы.

***

Ҡырмыҫҡалы районы халҡы яҡташ яҙыусылары менән осрашыуҙарҙы һәр саҡ көтөп ала. Бишауыл-Уңғар урта мәктәбенә лә шундай көтөп алынған әҙәби осрашыуға С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов, төрлө йылдарҙа ошо мәктәпте тамамлаусылар – БДУ профессоры, яҙыусы Тимерғәле Килмөхәмәтов, БДУ доценты Фәнзил Санъяров, яҙыусы Рәшит Низамов саҡырылғайны.

Данлы мәктәп киләһе йылда үҙенең асылыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләргә йыйына. Ҡунаҡтар юбилей сараларын ойоштороуҙа яҡындан ҡатнашасағын белдерҙе.

***

Яҙыусы һәм журналист, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты Фәрзәнә Аҡбулатованың 50 йәшенә арналған кисәләр Хәйбулла районының Татыр Үҙәк, Аҡъяр ауылдарында, Бүребай эшселәр ҡасабаһында уҙғарылды. Әҙибәне күркәм юбилейы менән мәктәп коллективтары, туғандары, ғөмүмән, яҡташтары ихлас ҡотланы. Әҙәби осрашыуҙарҙа БР Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, «Йәшлек» гәзитенең бүлек мөдире шағир Мөнир Ҡунафин ҡатнашты.

***

Мостай Кәрим исемендәге республика Милли йәштәр театрында VI «Йәштәр тауышы» әҙәби фестивале уҙҙы. Ойоштороусылары – БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ, «Китап» нәшриәте, БР-ҙың Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, БР-ҙың Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы. Йәш ижадсылар – Фәнил Бүләков, Урания Вахитова, Венер Исхаҡов, Фәйез Харрасов, Индира Муллаянова, Айгөл Ишемғужина, Кристина Андриянова, Александр Двинских, Аида Хәйретдинованы нәшриәт директоры Зөфәр Тимербулатов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев тәбрикләне. Әҙәби байрам сағыу концерт номерҙары менән биҙәлде.